# Ағиҙел

**Өфө,**
**май**
**2011**

**5(1057)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 04.05. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 270 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0080.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (5,1057)**

# БЫЛ ҺАНДА:

*Башҡортостан яҙыусыларының XV съезы материалдары*

**Рауил Бикбаев.** Яңы заман һәм яңы әҙәбиәт. ....................................6
**Хәсән Назар.** Рух илсеһеме шағирҙар? ...........................................21
**Сабир Шәрипов.** Бары ла, юғы ла – үҙебеҙҙеке... ..........................27
**Наил Ғәйетбай.** Пьесалар бар, тик көртәләр ҙә байтаҡ. .................31
**Факиһа Туғыҙбаева.** "Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән..." ...............35
**Айҙар Хөсәйенов.** Алға барабыҙ, камиллашабыҙ. ...........................41
**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Ғилем үә тәнҡит нисбәте. .......................44
**Владимир Денисов.** Ваҡыт баһа бирер. ...........................................49
**Рәшит Сабит.** Иғтибар үҙәгендә – йәштәр. .....................................50

ШИҒРИӘТ

**Мәхмүт Һибәт.** Ғаләм түңәрәге. П о э м а . .......................................52
**Лариса Абдуллина.** Зыяратта. Ш и ғ ы р ҙ а р . ................................60
**Салауат Рәхмәтулла.** "Эҙләп тапҡан алтын – ҡыйбат түгел..."
Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................................................65

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Мөкәрәмә Садиҡова.** Һағыш сәскәһе. Х ә т и р ә - у й л а н ы у . ......71
**Ишғәли Нурғәлиев.** Ҡарабаш турғай. Я ҙ м ы ш н а м ә . *Дауамы.* ..80

ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Гөлфирә Гәрәева.** Хәҙерге башҡорт прозаһында жанр,
форма һәм стиль эҙләнеүҙәре. .......................................................115

*9 май – Бөйөк Еңеү көнө*

**Ишмөхәмәт Шарапов.** "Ейәндәрем уҡыр..." ................................130
**Рафаэль Дәүләтшин.** Һуғыш осоронда Башҡортостан
ауыл хужалығы. ..................................................................................135
**Тайфа Зиннурова.** Тыныс булһын донъялар. ...............................141
**Гөлсирә Шафиҡова.** Бер ҡабым ғына... .......................................143

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Зәки Әлибаев.** Урау-урау юлдарҙан. .............................................148

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Рауил Ниғмәтуллин.** Булһын өсөн Башҡортостан!
Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................................................154

РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Розалия Солтангәрәева.** Мөнәжәттәр – көйлө иман һүҙе. ...........158

СӘНҒӘТ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Зәйтүнә .....................................................168
**Таңһылыу Ғәйнуллина.** Халыҡ артисы – юғары исем. ................175

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Камил Фазлый.** Наркобарон. Ю м о р е с к а . ...............................178

"АҒИҘЕЛ"ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*Материалы XV съезда писателей Башкортостана*

**Р. Бикбаев.** Новое время и новая литература.
**Хасан Назар.** Послы духовности.
**С. Шарипов.** И хорошее, и плохое…
**Наиль Гаитбай.** Думы о драматургии.
**Ф. Тугузбаева.** С любовью к детям.
**А. Хусаинов.** Работа идет, и это радует…
**М. Надергулов.** Соразмерность литературоведения и литературной критики.
**Владимир Денисов.** Время расценит.
**Рашит Сабит.** В центре внимания – молодежь.

ПОЭЗИЯ

**Махмут Хибат.** *Поэма*. **Л. Абдуллина, Салават Рахматулла.** *Стихи*.

ПРОЗА

**М. Садыкова.** Цветок ностальгии. *Воспоминание-раздумье.*
**И. Нургалиев.** Воробушка моя. *Повесть. Продолжение.*

ЛИТЕРАТУРОВЕДЕНИЕ

**Г. Гареева.** Поиски жанра, формы и стиля в современной башкирской прозе.

*9 мая – День Победы*

**И. Шарапов.** «Внуки прочтут когда-нибудь».
**Р. Давлетшин.** Сельское хозяйство Башкортостана в годы войны.
**Т. Зиннурова.** Пусть в стране будет спокойно!
**Г. Шафикова.** Кусок хлеба.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**З. Алибаев.** С дальней-дальней дороги.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Р. Нигматуллин**. *Стихи.*

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Р. Султангареева.** Мунаджаты – мелодичное слово нравственности.

ИСКУССТВО

**Ф. Акбулатова.** Зайтуна.
**Т. Гайнуллина.** Народная артистка – высокое звание.

САТИРА И ЮМОР

**Камиль Фазлый.** Наркобарон. *Юмореска.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# Башҡортостан яҙыусыларының XV съезы көндәлеге

14-15 апрелдә Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай йортонда Башҡортостан яҙыусыларының XV съезы үтте. Раил Бикбаев идараның ике съезд араһындағы эшмәкәрлегенә отчет яһаны.

Йыйында республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, БР Премьер-министры урынбаҫары З. Й. Рәхмәтуллина ҡатнашты. Президентыбыҙ сығыш яһаны, уның ҡулынан Талха Ғиниәтуллин Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы танытмаһын, Рәшит Низамов, Раил Шаммас, Флүр Ғәлимов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина төрлө дәрәжәләге наградалар алды.

Ике съезд араһында әҙәбиәтебеҙ оло юғалтыуҙар ҙа кисерҙе: Мөслим Әбсәләмов, Юрий Андрианов, Әхнәф Байрамов, Роберт Байымов, Салауат Ғәлин, Әмир Гәрәев, Буранбай Исҡужин, Мөнир Ишбулатов, Рәшит Назаров, Зәйни Рафиҡов, Рәйес Түләков, Зиннур Ураҡсин, Ғәзим Шафиҡов, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Ғилман Ишкинин, Инсур Йәһүҙин кеүек күренекле әҙиптәребеҙ менән хушлаштыҡ. Сарала ҡатнашыусылар уларҙы бер минутҡа тын ҡалып иҫкә алды.

Съезд делегаттарын Рәсәй Яҙыусылар союзы рәйесенең беренсе урынбаҫары Геннадий Иванов, БР элемтә һәм массовый коммуникациялар министры Борис Мелкоедов, мәҙәниәт министры урынбаҫары Камила Дәүләтова, мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин, Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Илгиз Солтанморатов тәбрикләне.

Артабан жанрҙар буйынса секциялар етәкселәре Х. Назар (шиғриәт), С. Шәрипов (проза), В. Денисов (рус телендә яҙыусылар берләшмәһе), Р. Сабит (татар телендә яҙыусылар берләшмәһе), Н. Ғәйетбай (драматургия), Ф. Туғыҙбаева (балалар әҙәбиәте), М. Нәҙерголов (әҙәби тәнҡит), А. Хөсәйенов (әҙәби тәржемә) ҡушма докладтар менән сығыш яһаны. Фекер алышыуҙа халыҡ яҙыусылары Ғ. Хөсәйенов менән Н. Асанбаев, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте директоры З. Тимербулатов, прозаик Й. Мостафин (Мәскәү), шағирә Г. Юнысова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Ә. Әминев, «Бельские просторы» журналының баш мөхәррире Ю. Горюхин, шағир һәм прозаик М. Ямалетдин, публицист, әҙәбиәт белгесе Р. Хажиев, шағирә, журналист Л. Абдуллина, «Ағиҙел» журналының бүлек мөхәррире Ф. Күзбәков һ.б. ҡатнашты.

Иртәгәһенә секцияларҙың яңы бюролары һайланды. Артабан Милли әҙәбиәт музейының генераль директоры Р. Исмәгилев, шағир Н. Грахов, педагог-ғалим Р. Аҙнағолов, Сибай яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе Х. Тапаҡов һөйләне.

Съезда БР Премьер-министры урынбаҫары З. Й. Рәхмәтуллина йөкмәткеле телмәр тотто.

Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе вазифаһына Азамат Юлдашбаев, яңы составта идара һайланды. Ижади секцияларҙа ла үҙгәрештәр бар. Мәҫәлән, рус телендә яҙыусылар берләшмәһенә Ю. Горюхин, шиғриәт секцияһына Т. Юлдашева, татар телендә яҙыусылар берләшмәһенә М. Нәзиров, сатира һәм юморға М. Сәлимов, тәнҡитселәр эшенә З. Әлибаев етәкселек итәсәк.

**Раuил**
**БИКБАЕВ,**
**Башҡортостан Яҙыусылар**
**союзы идараһы рәйесе**

# Яңы заман һәм яңы әҙәбиәт

Ололарҙың йыш ҡына ҡабатланған ошо һүҙҙәре хәтеремә уйылып ҡалған. Киске сәғәттәрҙә улар: "Аллаға шөкөр, был көн дә иҫән-һау үтте, иртәгәһе көнөбөҙҙө лә имен-аман күрергә насип булһын!" – тигән теләк әйтеп, биттәрен һыпырып, тынып ҡуя торғайнылар.

Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы иң ҙур йыйынын – XV съезыбыҙҙы ҡаршылағанда: "Аллаға шөкөр, әҙәбиәтебеҙҙең тағы ла биш йылы илһамлы ижади эштәр, ҡыуаныслы уңыштар менән именлектә, татыулыҡта, берҙәмлектә үтте. Алдағы йылдарыбыҙ ҙа ошолай бәрәкәтле булһын, туған телебеҙгә йәм өҫтәп, уҡыусыларыбыҙға яңынан-яңы әҫәрҙәр бүләк итергә яҙһын!" – тигән ихлас теләктәр әйтке килә.

Ошо биш йыл эсендә һәр беребеҙҙең ижади эҙләнеүҙәренән һәм үҙенсә асыш-табыштарынан әҙәбиәтебеҙҙең уңыштары тупланды, айырым-айырым борсолоуҙарыбыҙ, юғалтыуҙарыбыҙ уртаҡ хәстәребеҙгә һәм хафа-бошоноуҙарыбыҙға әйләнде.

Һуңғы биш йылда күпме ҡәләмдәштәребеҙ арабыҙҙан китте.

Элекке дәүерҙәге һымаҡ, хәҙерге заманда ла әҙиптәребеҙ ил тормошонан, халыҡ яҙмышынан айырылғыһыҙ берҙәмлектә йәшәне һәм ижад итте. Ә был биш йыллыҡ тарихи ваҡиғаларға бай булды. Уларҙың барыһы хаҡында ла бәйнә-бәйнә һөйләргә форсат юҡ, икәүһе хаҡында ентекләберәк әйтеп үтәйек.

Башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләү ошо ваҡиғаларҙың иң күренеклеләренән. Аҡыллы килешеү нигеҙендә эшләнгән был тарихи аҙымдың әһәмиәте йылдар үткән һайын тулыраҡ асыҡлана бара. Нәҡ ошо үҙгәрештәрҙән башлап Рус дәүләте Урал аръяғына үтеп инә, Евразия дәүләтенә әйләнә. Башҡорттарҙың да ижтимағи бәйләнештәре үҫә, ватан төшөнсәһе күпкә киңәйә, уға яңы йөкмәтке, яңы яуаплылыҡ өҫтәлә.

450 йыллыҡ юбилейға әҙерлек барғанда уҙғандарҙың әлегә тиклем өйрәнелеп етмәгән ҡатламдары тулыраҡ асыҡланды, халыҡтың тарихи хәтере яңырҙы. Байрамды Рәсәй Федерацияһы күләмендә үткәреү республикабыҙҙың донъя алдындағы абруйын тағы ла ныҡыраҡ күтәрҙе.

2007 йылдың йәйендә, Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы көндәре программаһына ярашлы, Рәсәй Яҙыусылар союзы секретариаты ултырышында хәҙерге

башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш мәсьәләләре буйынса фекер алышыу уҙғарылды. Ошондай уҡ осрашыу Мәскәүҙә 1997 йылда булғайны. Шул секретариаттағы һымаҡ, был юлы ла беҙҙең докладтар тыңланды, күренекле рус әҙиптәре сығыш яһаны, Башҡортостандан барған егермеләп ҡәләмдәшебеҙ ҡатнашты. Шиғриәт кисәһе үткәрҙек, яҡташтар менән осраштыҡ. Үҙәк матбуғатта башҡорт әҙәбиәте тураһында мәҡәләләр баҫылды.

Икенсе ваҡиға – Башҡортостан Яҙыусылар союзының ойошторолоуына 75 йыл тулыуҙы билдәләү 2009 йылдың көҙөндә үтте. Беҙҙең ижади ойошма СССР Яҙыусылар союзы менән бер ваҡытта – 1934 йылда төҙөлгән. 70 йыллыкты Рәсәйҙә һәм элекке СССР күләмендә иң беренсе булып билдәләгәйнек. Был юлы ла беҙ беренсе булып сыҡтыҡ. Беренселек өсөн ярышыу тураһында һүҙ бармай, әлбиттә. Әммә бер үк ваҡытта ойошҡан тиҫтәләрсә Яҙыусылар союздары араһында беҙ был тарихи ваҡиғаны уҙғарыуҙы иң тәүгенән булып башлап ебәргәнбеҙ икән, был беҙҙең ижади коллективтың көсөн һәм мөмкинлектәрен, бигерәк тә республика етәкселегенең беҙгә ҡарата даими хәстәрлеген тағы ла нығыраҡ раҫланы. Дөрөҫөн әйткәндә, был тантаналар бик һирәк республикаларҙа ғына үтте.

75 йыллыҡ байрамыбыҙҙа беҙ ҡунаҡтарыбыҙҙы хөкүмәт ярҙамында тотошлай ремонтланған, бөтә йыһаздары ла яңыртылған Яҙыусылар йортонда ҡаршы алдыҡ. Ҡунаҡтар төрлө тарафтарҙан: Мәскәүҙән, Татарстандан, Дағстандан, Сыуашстандан, Мари-Элдан, Ырымбурҙан, Силәбенән килгәйне. Рәсәй Яҙыусылар союзы секретариатының күсмә ултырышында хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең милләт-ара ижади бәйләнештәре, тәржемә эштәренең торошо хаҡында һөйләштек. Юғары уҡыу йорттарында төрлө милләт әҙиптәре менән осрашыуҙар, Конгресс-холда тантаналы юбилей кисәһе үтте.

Был юбилейҙың иҫтәлеге булып тағы ла бер бик үҙенсәлекле ҡомартҡы тарихҡа инәсәк. Беҙ был ваҡиға айҡанлы “Ил яҙмышы – заман һулышы”– “Судьба земли – дыхание времени” тигән бай йөкмәткеле тикшеренеү әҙерләп, был хеҙмәтте ҡалын китап итеп сығарҙыҡ. Унда Башҡортостан Яҙыусылар союзының 75 йыллыҡ үҫеш юлы бик күп документтар, сығыштар, докладтар, шиғырҙар, фотолар, хроника һ.б. материалдар буйынса төрлө яҡлап кәүҙәләнде.

75 йыллыҡ айҡанлы уҙғарылған сараларға Мостай Кәримдең 90 йыллығына арналған театраль фестиваль, Опера һәм балет театрында кисә, Өфөлә шағир исемен йөрөткән гимназияла, юғары уҡыу йорттарында, тыуған ауылы Кләштәге осрашыуҙар бик матур үрелеп китте, былай ҙа һоҡланып йөрөгән ҡунаҡтарыбыҙҙы тамам хайран итте.

Әҙиптәребеҙ юбилейҙарын яңы китаптарын ҡулға алып, буклеттар сығарып, Өфөлә һәм тыуған яҡтарында кисәләргә йыйылып билдәләү традициялары ике съезд араһында ла һәйбәт барҙы. Бигерәк тә Рәшит Ниғмәтиҙең, Баязит Бикбайҙың, Зәйнәб Биишеваның, Ҡадир Даяндың, Хәниф Кәримдең, Сәләх Кулибайҙың, Иван Сотниковтың 100 йыллыҡтарын үткәреү күп иҫтәлектәрҙе яңынан уятты. Хәҙерге йәштәргә был шағирҙар, әҙиптәр әҫәрҙәре һәм замандаштарының иҫтәлектәре буйынса ғына таныш. Ә бына беҙҙең быуынға уларҙың күбеһе менән байтаҡ йылдар аралашып йәшәргә, хәстәрлекле кәңәштәрен тыңларға насип итте. Беҙ әҙәбиәткә килгән осорҙа берәй башҡорт әҙибенең 100 йыллығын билдәләүҙә ҡатнашыу түгел, ул хаҡта ишеткән дә юҡ ине. Уларҙы халыҡ-ара кимәлдәге ваҡиға итеп үткәреү Мәжит Ғафуриҙың 100 йыллығынан башланды. Ә хәҙер килеп әҙәбиәт донъяһында үҙҙәре менән бергә янған-көйгән, бергә

шатланған остаздарыбыҙҙың бер быуатлыҡ тантаналарына йыйылабыҙ. Бына шул саҡтарҙа ғүмерҙең нисек елеп үтеп барғанын айырыуса ныҡ тояһың.

Яҙыусыларҙың иҫтәлектәрен мәңгеләштереүгә беҙҙә һәр саҡ даими иғтибар бирелә. Аҡмулланың тыуған ерендә һәм уның исемен йөрөткән уҡыу йортонда күпме һәйбәт эштәр эшләнә. Шул йорт алдындағы майҙанда шағирҙың һәйкәл булып терелеүе – үҙе ниндәй ваҡиға!

Мәжит Ғафуриҙың 125 йыллығы алдынан уның Өфөләге һәм Еҙем-Ҡарандағы йорт-музейҙарына капиталь ремонт үткәрелде, яңы китаптары, бик матур альбом сыҡты.

Республикалағы күпме уҡыу йорттары, урамдар, театр, китапхана һуңғы йылдарҙа беҙҙең яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, драматургтарҙың исемдәре менән аталды. Улар исемендәге премиялар булдырылды, ижадтары буйынса конкурстар, фестивалдәр бара.

Берҙән-бер китап нәшриәтебеҙгә Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исеме ҡушылған икән, әҙәбиәтебеҙгә күрһәтелгән был оло хөрмәт ғорурлығыбыҙҙы үҫтереп кенә ҡалмай, яуаплылыҡты ла арттыра.

Республиканың райондарында һәм ҡалаларында, шулай уҡ Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ араһында башҡорт әҙәбиәте көндәре үткәреү, уҡыусылар менән төрлө осрашыуҙар, Яҙыусылар йортондағы әҙәби кесаҙналар, ижади секцияларҙа ҡулъяҙмалар тикшереү, Стәрлетамаҡтағы, Сибайҙағы, Яңауылдағы, Учалылағы региональ, Күмертауҙағы муниципаль ойошмаларҙағы әүҙем эштәр, Туҡай, Бабич, Аксаков көндәре, Бәләбәйҙәге “Илһам шишмәләре” исемле фестивалдәр һ.б. күп төрлө саралар тураһында беҙҙең был съезға әҙерләп сығарылған йыйынтыҡтан тулыраҡ мәғлүмәт алырға мөмкин. Шулай ҙа икәүһе хаҡында айырым әйтке килә.

2009 йылда Учалыла йәш шағирҙар ижадына арналған күсмә семинар үтте. 2010 йылда Сибайҙағы күсмә ултырышта йәш прозаиктарҙың әҫәрҙәре хаҡында талапсан, профессиональ һөйләшеү барҙы.

Ижади быуындар араһындағы күсәгилешлек, киләсәкте билдәләрлек һәләтле йәштәрҙең килеүе – һәр әҙәбиәт бына ошондай бәйләнештә генә йәшәй ала. Йәш көстәребеҙ, алмаш таянысыбыҙ ҡайҙа? Был һорауға ҡәнәғәтләнерлек яуап таба алмау һуңғы осорҙа айырыуса нык борсой башлағайны. Учалылағы һәм Сибайҙағы фекер алышыуҙар өмөт-ышаныстарыбыҙҙы нығытты: әҙәбиәтебеҙгә һәләтле йәштәр килә,яңы көстәр туплана.

Башҡортостан Республикаһында әҙәбиәт өс телдә ижад ителә, китаптар башҡортса, русса, татарса баҫыла, 6 телдә матбуғат сыға, 14 милләт теле уҡытыла. Милләт-ара бәйләнештәр, дуҫлыҡ һәм татыулыҡ – беҙҙең борондан килгән йәшәү нигеҙебеҙ.

Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа, ҡыуаныслы хәлдәр менән бергә, борсоулы күренештәр ҙә артты. Туған телдәргә иғтибар хәҙер элекке менән сағыштырғанда ҙураҡ, ләкин шул уҡ ваҡытта ассимиляция көсәйгәндән-көсәйә бара.

Рус булмаған авторҙарҙың русса яҙыуы элек тә бар ине, әммә өс-дүрт исемдән артмай торғайны: Рәмил Хәкимов, Ғәзим Шафиҡов, Руслан Мәксүтов һ.б. Һуңғы йылдарҙа иһә Башҡортостанда ла, башҡа республикаларҙа ла бындай авторҙар бик күбәйҙе һәм арткандан-арта. Байтаҡтары милли ерлектә яҙырға тырыша, ә күптәре өсөн был мәсьәлә бөтөнләй юҡ һымаҡ.

Рус телендә яҙыусы рус булмаған авторҙар тыуҙырған был үҙенсәлекле күренеш әлегә өйрәнелмәгән, һәм мин хәҙерге ғалимдарҙың иғтибарын традицион

матбуғатта ла, интернетта ла ҙур урын алған ошо ижади эҙләнеүҙәргә йүнәлтергә теләр инем. Был ағымда күбек тә күп, бер көнлөк яҙмалар ҙа йыш күренә, ләкин тәрәндәнерәк байҡаһаң, киләсәк үҫештең сифаттарын да асыҡларға мөмкин. Бының өсөн махсус тикшеренеүҙәр үткәрергә кәрәк.

Бер генә әҙәбиәт тә үҙенең милли сиктәренә генә бикләнеп йәшәмәгән һәм улай йәшәү мөмкин дә түгел. Совет дәүләте емерелеү менән милли әҙәбиәттәр араһындағы бәйләнештәр бөтөнләй тиерлек өҙөлдө, тигән һүҙҙәр хаҡ, әлбиттә. Ләкин мин былдай раҫлауҙы бер һүҙһеҙ генә ҡабул итә алмайым.

Совет дәүерендәгесә республикаларҙа әҙәбиәт һәм сәнғәт көндәрен алмашлап үткәреүҙәр, шул арҡала тәржемә антологиялар сығарыуҙар һағынып һөйләргә генә ҡалды. Киләсәк быуын был хаҡта йүнләп белмәйәсәк. Әммә беҙҙә бәйләнештәрҙең бөтөнләй өҙөлөп ҡалғаны юҡ. Яҙыусыларыбыҙ Төркиәләге ижади осрашыуҙарҙа йыш ҡатнаша, башҡа сит илдәргә лә, мәҫәлән, Францияға, Германияға сәйәхәт ҡылдылар. Ҡаҙағстанда, Үзбәкстанда, Ҡырғыҙстанда, Татарстанда, Яҡутстанда, Дағстанда, Ҡабарҙы-Балҡарияла уҙғарылған оло-оло йыйындарҙа, Рәсәй Яҙыусылары съезында, төрлө өлкәләрҙә уҙғарылып торған Рәсәй әҙәбиәттәре көндәрендә сығыш яһанылар. Йәштәребеҙ Башҡортостандан ситтәге сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

2010 йылдың сентябрь аҙаҡтарында бер көндә Башҡортостандың Илеш, унан Татарстандың Аҡтаныш районларында үҙенсәлекле әҙәби кисәләр гөрләп үтте, уларҙа егермеләп башҡорт һәм татар шағирҙары, яҙыусылары халыҡ менән осрашты. Был тантаналар бик һәйбәт башланып, уңышлы дауам иткән традицияларға – алмаш китаптар баҫтырылыуға ун биш йыл тулыуға арналды. Ошо ваҡыт эсендә Өфөлә утыҙ татар әҙибе һәм шағирының китабы башҡортса, Ҡазанда утыҙ башҡорт яҙыусыһы, шағирының китабы татарса сыҡҡан.

Ут күршеләр булып йәшәһәк тә, бер-беребеҙҙе белеп еткермәйбеҙ, белмәгәс, тейешенсә аңлап та булмай. Шул арҡала урынһыҙ бәхәстәр ҙә ҡуба. Китаптарыбыҙҙы күберәк уҡыған һайын уртаҡ уйҙарыбыҙ, һүҙҙәребеҙ ҙә ныҕыраҡ берегер.

Әҙәби бәйләнештәрҙе тәржемәһеҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Атаҡлы рус тәржемә мәктәбендә көстәр хәҙер бик самалы, булғандары ла Рәсәйҙәге милли авторҙарға ҡарата битараф тиерлек. Сөнки Мәскәү матбуғатында баҫылыу, үҙәк нәшриәттәрҙә китап сығарыу мөмкинлектәре бик ныҡ сикләнгән. Милли республикаларҙағы яҙыусыларҙың китаптары руссаға тәржемә ителеп, Мәскәү нәшриәттәрендә хәҙер башҡа һыйҙырмаҫлыҡ тираждарҙа – йөҙәр мең, хатта миллион данала донъя күргәне ҡабатланыры бик шикле, ул, уникаль күренеш булып, тарихта ғына тороп ҡаласаҡ.

Үҙәк журналдарҙың элек тыйылып килгән әҫәрҙәрҙе баҫыу юлы менән һикһәненсе йылдар аҙағында миллион тираждарға еткән саҡтары төш һымаҡ ҡына үтеп китте, һәм ул баҫмалар туҡһанынсы йылдарҙа бик ауыр хәлдә ҡалды. Ҡайһы бер ҡалын журналдар сығыуҙан туҡтаны.

Ошондай ҡытлыҡ кисергәндә Башҡортостанда дәүләт хәстәрлеге менән туҡһанынсы йылдар аҙағында “Бельские просторы” журналының ойошторолоуы беҙҙә тәржемә эштәрен үҫтереүгә яңы майҙан, яңы мөмкинлектәр асты.

Ләкин ошо мөмкинлектәрҙе файҙаланып, тәржемә эшен алға ебәреү йылдан-йыл ҡатмарлаша. Сөнки электән эшләп килгән һәләтле һәм тәжрибәле тәржемәселәр олоғайҙы, байтаҡтары арабыҙҙан китте. Алмашҡа килеүсе йәштәр аҙ. Был тармаҡты йәнләндереп ебәреү өсөн төрлө саралар күрелә. Мәҫәлән,

“Бельские просторы” журналы үткәргән бер шиғырҙы тәржемә итеү конкурсы яңы көстәрҙе йәлеп итте. Ләкин хәлдәр барыбер борсоулы.

Тәржемәселәрҙең етмәүен беҙ бигерәк тә ике ҙур йыйынтыҡ – русса шиғри антологиялар төҙөгәндә айырыуса нык тойҙоҡ. Элекке шағирҙарҙың байтағының тәржемәләре аҙмы-күпме бар, Салауаттарҙан, Аҡмуллаларҙан, Бабичтарҙан алып Рәми Ғариповтар быуынына тиклем шулай. Ә унан һуңғыларҙың, бигерәк тә йәшерәктәрҙең, русса тәржемәләре бик аҙ, күптәренеке бөтөнләй юҡ. Шундай ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, Өфөлә “Антология поэзии Башкортостана”, Мәскәүҙә “Из века в век. Башкирская поэзия” тигән фундаменталь шиғри антологиялар донъя күрҙе. Башҡорт әҙәбиәтендә әлегә бындай күләмле һәм тулы йөкмәткеле баҫмаларҙың рус телендә сыҡҡаны юҡ ине.

Яңы заман, яңы Башҡортостан һәм яңы дәүер әҙәбиәте – былар араһындағы бәйләнеш ни дәрәжәлә ысынбарлыҡҡа тура килә? Бөтә донъяның ихтирамын яулаған, күптәрҙең асыуын ҡабартҡан СССР-ҙың үҙенсә хоҡуҡи вариҫына әйләнгән Рәсәйҙәге ҡыйралыштар һәм яңырыуҙарҙың, халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорт милләтенең яҙмышындағы тарихи үҙгәрештәрҙең ҡатмарлы үҙәгенә, фәлсәфәүи асылына үтеп инә алдымы, бөгөнгөнөң йөҙөн киләсәк өсөн образлы һынландырып ҡалдымы хәҙерге әҙәбиәт?

Заман үҙе ғәйәт ҡатмарлы, әҙәбиәт алдындағы бурыстар һәм һорауҙар, уларға дөрөҫ яуап эҙләүҙәре һәм табыуҙары тағы ла ҡатмарлыраҡ.

Шуға иғтибар биреп еткермәйбеҙ: беҙ бит инде нисәмә йылдар башҡа илдә, башҡа Ватанда йәшәйбеҙ. Исемдәр, әлбиттә, шул уҡ: Рәсәй, Башҡортостан… Ләкин уларҙың асылы, унда йәшәүселәрҙең ҡараштары, ҡылыҡтары күп йәһәттән башҡаса.

Уҙған быуаттың туҡһанынсы йылынан алып яңы быуаттың ун йыллығында Башҡортостан дәүләтселеге тарихи үҫеш юлы үтте, ҙур хоҡуҡтар яуланы. Был егерме йыллыҡ тарихҡа хаҡлы рәүештә республикабыҙҙың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов дәүере булып инәсәк. Был осорҙоң байтаҡ һыҙаттарын киләсәк кешеһе беҙҙең әҫәрҙәребеҙҙә лә табасаҡ. Яңырыу процесында байтаҡ әҙиптәребеҙ юл ярыусыларҙан булды, иң яуаплы мәлдәрҙә ҡатмарлы мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл итеүҙә йыш ҡына яҙыусы һүҙенә, әҙип, шағир кәңәшенә ҡолаҡ һалдылар.

Башҡортостан Республикаһы тормошонда яңы ҡараштар тыуа, яңы бурыстар, яңыса йәшәү һәм эшләү ритмдары билдәләнә, үҫеш юлы яңыса дауам итә. Президент Рөстәм Зәки улы Хәмитов күп кенә мәсьәләләрҙе тулыраҡ асыҡланы, заманса фекерләү, үҫеш йүнәлештәрен төплө нигеҙләү, бигерәк тә туған телебеҙгә, тәбиғәтебеҙгә, тарихи ҡомартҡыларыбыҙға, рухи үҫешебеҙгә тағы ла һаҡсылыраҡ булыу талаптарын үҙәккә ҡуйҙы. Был үҙгәрештәр яҙыусы һүҙенә, әҙәби фекерләүгә лә йоғонтоһоҙ ҡалмаясаҡ.

***

Башҡортостан яҙыусыларының XIV һәм XV съездары араһындағы, йәғни һуңғы биш йылдағы әҙәбиәт тураһындағы һүҙемде мин ошо осорҙа ижад ителгән, гәзит-журналдарҙа баҫылған, китап булып сыҡҡан әҫәрҙәрҙе ҡыҫҡаса байҡау менән дауам итергә теләр инем. Әлбиттә, был арала донъя күргән проза, шиғриәт, драматургия әҫәрҙәре, публицистик һәм ғилми хеҙмәттәр, әҙәбиәттең төрлө тармаҡтары тураһында ентекле һүҙ жанрҙар һәм рус, татар яҙыусылары секциялары буйынса махсус докладтарҙа әйтелер. Әле мин ҡайһы бер үҙәк ваҡиғаларға, бөтә ижад донъябыҙ өсөн уртаҡ мәсьәләләргә туҡталмаҡсымын.

Иң элек төп әҙәби журналыбыҙ “Ағиҙел” биттәренә иғтибар итәйек. Биш йылда бында ундан артыҡ роман, ике тиҫтәгә яҡын повесть, байтаҡ хикәйәләр донъя күргән. Поэмаларҙың һаны унға тулыр-тулмаҫ. Журналда ара-тирә драма әҫәрҙәре лә сығып тора. Шиғырҙарға ҙур урын бирелә.

“Ватандаш” журналында лә әҙәби әҫәрҙәр йыш баҫыла. Быны күпһенеп тәнҡитләүселәр ҙә булды. “Бельские просторы” журналының тиражы күтәрелмәй, әммә уның авторҙары арта бара.

Яңы әҫәрҙәрен уҡыусыларға еткерер өсөн Башҡортостан яҙыусыларының мөмкинлектәре башҡа байтаҡ республикаларҙағы әҙиптәрҙе көнләштерерлек дәрәжәлә ҙур.

Былай тип ышаныслы раҫлауым һис кенә лә арттырыу түгел. “Шоңҡар”, “Толпар”, “Һәнәк”, “Башҡортостан ҡыҙы”, “Аманат”, “Аҡбуҙат” журналдары, “Башҡортостан”, “Ҡыҙыл таң”, “Киске Өфө”, “Йәншишмә”, бигерәк тә “Истоки” гәзиттәре – быларҙың һәр береһендә әҙәби әҫәрҙәр даими күренә һәм уҡыусылар тарафынан яратып уҡыла. Матур-матур миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Әйтәйек, “Башҡортостан” гәзитенең дүртенсе битендә авторҙың рәсеме менән шиғри шәлкемдәр йыш сыға. Ғөмүмән, был баҫмала халҡыбыҙҙың рухи тормошондағы мөһим мәсьәләләр тураһында бай йөкмәткеле сығыштар һәйбәт традицияға әйләнде. “Тарих яҙыр инем ташына” тигән рубрикалағы мәҡәләләр аҙаҡ айырым китап итеп тупланды. Бындай һәйбәт традицияларҙы һаҡларға һәм үҫтерергә кәрәк.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, республика баҫмалары араһында әҙәбиәткә бөтөнләй тиерлек битарафтары ла юҡ түгел. Мәҫәлән, ”Республика Башкортостан”, “Вечерняя Уфа”, “Молодежная газета” нәҡ бына шундайҙарҙан. “Толпар” журналы ла башҡорт әҙәбиәтенә ҙурыраҡ урын бирә алыр ине.

Әлбиттә, яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, ғөмүмән, барса әҙәбиәтселәрҙең уҡыусылар менән бәйләнешендәге иң ҙур һәм иң ҡыуанyслы ваҡиға – яңы китабыңды ҡулға алыу. Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте йыл һайын байтаҡ яҙыусыларыбыҙға ошо ижади бәхетте кисереү мөмкинлеге тыуҙыра.

Әле беҙ һүҙ алып барған осорҙа “Китап” нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан китаптар һаны ошолай: 2006 йылда – 98, 2007 йылда – 112, 2008 йылда – 126, 2009 йылда – 113. 2010 йылда илдәге һәм донъялағы көсөргәнешлек шарттарында китаптар һаны кәмене. 1911 йылда яҡшы яҡҡа үҙгәреш көтөлә.

Йыйып әйткәндә, биш йылда биш йөҙләп китап сыҡҡан. Был бит – тотош китапхана! Ике һанға иғтибар итегеҙ: беҙҙең Башҡортостан Яҙыусылар союзында 230-лап ағза, биш йылда – биш йөҙләп яңы китап. Башҡортостан дәүләт нәшриәтенән тыш, Мәскәүҙә, Татарстанда, шулай уҡ төрлө үҙнәшерҙәрҙә баҫылған кәмендә тағы ла йөҙләп китап барҙыр. Ошо арала сыҡҡан китаптар һанын яҙыусылар һанына ябай ғына бүлеп сығыуы мөмкин түгел. Ләкин барыһын бергә йыйып ҡараһаң, әҙәби мөхиттә тыуған яңы материалды күләм яғынан аҙ тип булмай.

Китап сығарып булмай, әҫәремде журналдарҙа баҫмайҙар, тип зарланыуҙар авторҙар араһында йыш ишетелә. Ләкин яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен уҡыусыларға еткереү өсөн бөгөнгөсә киң мөмкинлектәрҙең һуңғы егерме йылдағы үҙгәрештәргә тиклем беҙҙә бер ҡасан да булғаны юҡ. Республикабыҙ етәкселегә хәстәрлеге менән дәүләт китап нәшриәте һаҡланып ҡалды, төрлө телдәрҙә яңы гәзит-журналдар барлыҡҡа килде. Быларҙы тағы ла иҫкә төшөрөүем – булғандың ҡәҙерен беләйек, тигән теләктән.

Туҡтауһыҙ мыжығандарҙан һорағаным бар: әҙәбиәтебеҙҙә ваҡиға тыуҙырырҙай, сағыу күренеш булырҙай берәй әҫәрҙең әле һаман баҫылмай ятҡанын әйтә алаһығыҙмы? Бер генә исемде лә атай алғандары юҡ! Һорауымды бөгөн тағы ла ҡабатлаһам, шул уҡ хәл буласаҡ.

Ғәйнан Хәйриҙең “Боролош”, Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ”, Жәлил Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар” романдары, Рәми Ғариповтың “Табыныу” поэмаһы ижад ителгәс тә нисәмә йылдарҙан һуң күпме михнәттәр аша ғына уҡыусыларға барып етте. Динис Исламовтың “Йомарт ер”е байтаҡ ҡаршылыҡтар үтеп көн күрҙе. Зәйнәб Биишеваның “Кәмһетелгәндәр” романы алдында ла матбуғат ҡапҡалары ҡапыл ғына асылып китмәне бит. Йыһат Солтановтың ижади эҙләнеүҙәренең яҙмышы шулай уҡ еңелдән булманы.

Улайға китһә, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы матбуғатҡа бәхәсһеҙ генә үттеме ни? Ә һуң 1910 йылда Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған мәшһүр “Урал батыр” ярты быуаттан ашыу баҫыла алмайса баҫтырылып ятты бит. Әммә аҫыл таштарҙың ҡиммәте барыбер юғалмай. “Ҡулъяҙмалар янмай” тигән һүҙҙәрҙең хаҡлығы күп осраҡтарҙа раҫлана.

Хәҙер беҙҙең әҙәби мөхиттә былдай хәлдәр юҡ тиһәң дә була. Быныһы ҡыуандыра. Әммә шуныһы ла һағайта: ҡайһы бер романдар яҙылып бөтмәҫтән үк журналда баҫыла башлай, ҡалған өлөштәрен автор ашыҡ-бошоҡ әҙерләп бирә. Быldай эш рәүешендә камиллыҡ, сифат талаптарына яуап бирерлек әҫәрҙең тыуыуы бик икеле.

Күреүебеҙсә, һуңғы биш йылда ижади эҙләнеүҙәребеҙҙең күҙгә күренерлек һөҙөмтәләре бар. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары Нәжиб Асанбаев, Ғайса Хөсәйенов, Марат Кәримов, Ноғман Мусин, Александр Филиппов, Тимер Йосоповтың һайланма әҫәрҙәренең томдары менән бергә китап кәштәләрендә һәләтле яңы көстәрҙең “Йәштәр тауышы” серияһында сыҡҡан йоҡа, әммә күбеһе тос йөкмәткеле йыйынтыҡтары лайыҡлы урын алды. Яугир әҙиптәребеҙ Талха Ғиниәтуллин, Суфиян Поварисов, Азат Мағазов, Ғәбит Садиҡов, Таһир Таһировтың йәштәрҙе көнләштерерлек ырамлы ижад итеүҙәре һуңғы биш йылда ла һүрелмәне. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы алдынан уларҙың ҡалын-ҡалын китаптары баҫылып сыҡты.

Прозаик ике-өс йылда бер уңышлы китап туплай ала, повесть йәки роман яҙа ала икән, был емешле хеҙмәт тигән һүҙ. Әгәр ошо ритмда ижад итә алһа, илле йәшенә ул әллә күпме хикәйәләр, повестар йәки кәмендә өс-дүрт романдың авторы булыр ине. Беҙҙә иһә ярты быуатлыҡ ғүмерен бер-ике китап менән дә ҡаршылай алмағандар, Яҙыусылар союзына алынмағандар ҙа аҙ түгел.

Ижад эшендә илһам ни тиклем генә мөһим булмаһын, әҙәбиәт быға тотонған һәр кемдән егәрле, даими эшләүҙе талап итә. Ҡәләмгә урыҡ-һурыҡ тотоноп, етди уңыштарға ирешеп булмаясаҡ.

Беҙҙә бик ырамлы эшләгән әҙиптәр бар. 2010 йылда Салауат Юлаев премияһына лайыҡ булған Ринат Камал ике съезд араһында өс роман яҙҙы, уларҙың һаны туғыҙға еткән.

Һан һәм күләм буйынса һуңғы биш йылда һөҙөмтәләр ярайһы уҡ тос, әммә әҙәби үҫеште иң элек сифат тамғаһы, ижади оҫталыҡ билдәләй. Һандар ҙа бик мөһим, ләкин ижадта һандың сифатҡа әйләнеүе тағы ла мөһимерәк. Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа китап сығарыу менән бергә уны таратыу мөмкинлектәре тарайғандан-тарая барғанда, ташҡа баҫылған һүҙҙе яңы информация технологиялары ҡыҫырыҡлағанда нәшриәттең, матбуғаттың элеккесә һәйбәт темпта эшләүе –

ғәйәт яуаплы бурыс. Киләсәктә, моғайын, интернет аша донъя менән бәйләнештә йәшәүсе башҡорттар артыр, башҡорт уҡыусыһы үҙенең туған телендә электрон матбуғатты ла күберәк уҡый алыр. Ләкин бөгөнгө көндә борон-борондан йортобоҙға нур таратҡан китап, инде бер быуатҡа яҡын тарихы, бай тәжрибәһе булған милли матбуғатыбыҙ элеккесә, форматын һаҡлаған көйөнсә, әҙәбиәтебеҙҙең төп таянысы булып ҡала. Киләсәктә лә шулай булып ҡаласаҡ.

Ә һуң ниндәй критерийҙар менән билдәләргә әҙәби әҫәрҙең сифатын? Был сифатты һүҙгә талапсанлыҡ, камиллыҡҡа ирешеү, көслө характерҙар, сағыу образдар тыуҙырыу һәм, әлбиттә, һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙың тормошсанлығы, фекер тәрәнлеге, күтәрелгән темаларҙың халыҡ яҙмышы өсөн актуаллеге барлыҡҡа килтерә. Ошоларға бәйле, ваҡыт ағышының кеше яҙмышына йоғонтоһо, яҙыусының шул ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙең асылына үтеп инеү һәләте тураһында тағы ла нығыраҡ уйландыра.

Заман һәм әҙәбиәт – ошо һүҙҙәр нисек кенә пафослы күренмәһен, был мәсьәлә бер ваҡытта ла көн үҙәгенән төшмәйәсәк. Яҙыусы, драматург – замандың йылъяҙмасыһы. Шағир ҙа шулай, әммә ул күберәк мәңгелек төшөнсәләр менән эш итә, мөхәббәт һәм нәфрәт, тоғролоҡ һәм хыянат, ҡаһарманлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ, донъя йәме һәм йәшәү ғәме хаҡында фәлсәфәүи уйҙарға бирелә. Әлбиттә, шиғриәттә лә актуаллек мөһим. Ер, тел, ил яҙмышын ҡурсалау, милләттең берҙәмлегенә, шәхестең уяулығына саҡырып саң ҡағыуҙар хәҙерге дәүерҙә шиғырҙарҙа һәм поэмаларҙа гражданлыҡ яуаплылығын, сәйәси яңғырашты нығ көсәйтте.

Ләкин прозала һәм драматургияла эштәр башҡасараҡ. Бөгөнгө тормоштағы мөһим үҙгәрештәр тураһында был жанрҙарҙа көнкүреш деталдәре, кеше психологияһындағы һынылыштар, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге бығаса булмаған үҙенсәлекле сифаттар, яңы тенденциялар аша һөйләргә кәрәк.

Шағир тормошто зирәк, ҡайһы саҡта интуитив тоя. Яҙыусы һәм драматург иһә осҡор күҙле, сос ҡолаҡлы булырға, анализларға, башҡалар күрмәгәнде күрергә тейеш. Шағир күңеле, зиһене менән эмоциональ һиҙгәнде прозаик үткер ҡарашы менән ҡапшай, рациональ аҡылы менән байҡай һәм баһалай.

Ниндәйҙер программаларҙың үтәлешен, айырым кешеләрҙең йәки ойошманың эшмәкәрлеген баһалағанда улар “реаль ваҡыт режимында бара” тип нарыҡлау һуңғы йылдарҙа йыш ҡабатлана. Минеңсә, “реаль ваҡыт режимында” тигән һүҙҙәрҙе әҙәби күренештәрҙе баһалағанда ла бик урынлы ҡулланырға мөмкин.

Ошондай үлсәм менән үлсәй башлаһаң, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә һүрәтләнгән байтаҡ хәл-ваҡиғалар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, реаль ваҡыт режимына тап килмәй.

Халҡыбыҙҙың ауылдағы һәм ҡалалағы тормошонда элекке йәшәү уклады емерелде, кешеләрҙең психологияһы нығ үҙгәрҙе. Хеҙмәт коллективтарындағы берҙәмлек рухын ололарға һағынып һөйләргә генә ҡалды. Яңы быуын иһә был хаҡта бөтөнләй тиерлек белмәй. Хәҙер һәр кем үҙ көнөн үҙе күрергә мәжбүр. Әгәр үҙе тырышмаһа, кешегә ярҙам итеүселәр һирәк. Берҙәмлек рухы, әлбиттә, бик һәйбәт булды, әммә коллективҡа тағылып һөйрәлеүсе ялҡауҙар ҙа аҙ түгел ине бит. Бөгөн иһә булдыҡлылар, инициативалылар заманы. Шул уҡ ваҡытта алдау, талау юлы менән булһа ла эшләмәйенсә нисек тә байырға тырышыу бик күп йәштәрҙең төп маҡсатына әйләнде. Хеҙмәт менән нимәнелер бар итеүгә ҡарағанда башҡалар эшләгәнде үҙләштерергә хәйлә ҡороусы йылғырҙар күберәк. Русса әйткәндә, потребителей гораздо больше, чем созидателей.

Бына ошондай ҡаршылыҡлы хәлдәр хаҡында уйланаһы урынға, күпселек яҙыусыларыбыҙ иҫкесә фекерләү ҡалыптарынан әле һаман ҡотола алмай, элекке төшөнсәләр, элекке мөнәсәбәттәр донъяһында йәшәй.

Былдай сикләнгәнлек башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәренә генә түгел, Рәсәйҙәге барлыҡ әҙәби мөхиткә хас. Мәскәүҙә һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа бысраҡ ташҡын булып ағылған гламур китаптарҙың художество ҡиммәте, уларҙа ҡатмарлы заман сағылышы, Рәсәйҙең хәҙерге күп йәһәттән фажиғәле яҙмышы асыҡ ҡараш, тормошсан йөкмәтке тураһында һүҙ алып барырлыҡ түгел. Ижад ғазаптары кисермәйенсә штамп менән әҙерләнгән, ҙур тираждар менән баҫылған былдай ҡорама яҙмалар бер тапҡыр ҡулланыла торған шприцҡа оҡшаш: күптәрен бер уҡып сыҡҡас ырғытып китәләр. Ләкин был сағыштырыуға бик мөһим асыҡлыҡ индерергә кәрәк. Былдай бульвар әҙәбиәте хастаханаларҙа ауырыуҙарға еңеллек килтерер өсөн ҡулланыла торған энәләргә түгел, наркомандар үҙҙәренә ҡаҙай торған бысраҡ шприцтарға оҡшаш. Глянц тыштары ялтыраған, эстәре ҡалтыраған әхлаҡһыҙ, хаяһыҙ китаптар күпме ватандаштарыбыҙҙың рухын яман наркотиктарҙан да ныығыраҡ ағыулай.

Шөкөр итәйек, беҙҙең яҙыусыларыбыҙ былдай китаптар яҙмай. Ләкин тормошто тик ҡара төҫтәргә буяп күрһәтеүҙәр беҙҙә лә бар. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе уҡыһаң, хәҙерге башҡорт ауылы бары тик эскеселәр һәм алдаҡсылар донъяһы булып күҙ алдына килә. Ысынбарлыҡта былдай бәләләр ҙә етерлек, ул хаҡта яҙыусы үҙ һүҙен әйтергә тейеш. Ләкин яҡшылыҡ эшләргә тырышып йөрөгән яңы көстәрҙе лә күрә белергә кәрәк. Быйың өсөн төплө уйланыуҙар, оҫҡор күҙәтеүҙәр, заманса белем һәм фекер талап ителә.

Беҙҙең күпселегебеҙ – егерменсе быуат балалары. Шул заманда тәрбиәләнгәнбеҙ, шул йылдарҙағы тормоштоң бик күп яҡшы сифаттарын, ғүмерҙә баһаһы төшмәй торған рухи байлыҡтарын күңелебеҙгә туплағанбыҙ. Улар һәр саҡ ышаныслы таяныстарыбыҙ буласаҡ. Ләкин донъя туҡтауһыҙ үҙгәрә, яңы тенденцияларҙы яҙыусылар йыш ҡына башҡаларға ҡарағанда алданыраҡ күрә, әҫәрҙәрендә күрһәтә.

Яңы мең йыллыҡтың икенсе тиҫтәһен башлап ебәрһәк тә, бәғзе яҙыусыларыбыҙ һаман да егерменсе быуаттан сыға алмай, шул саҡтағы стереотиптар солғанышында йәшәй. Бөгөнгө байтаҡ уҡыусыларыбыҙ үҙҙәренең белем кимәле, интеллектуаль үҫеше буйынса былдай әҙиптәрҙән күпкә юғарыраҡ. Уларҙың зауыҡтары, ҡараштары башҡаса.

Яңы быуын кешеләре араһында артыҡ прагматик фекерләүсе, тик үҙ мәнфәғәтен генә уйлап йәшәүселәр ҙә аҙ түгел. Эрудицияһы менән маһайһа ла, үҙ фекере булмаған, башҡаларҙы ҡабатлауҙан уҙмағандар ҙа бар. Уларҙың сикләнгән рухи ихтыяждарына көйләнергә саҡырмайым. Донъяға ҡараштары киң, эстетик зауыҡтары нескә, белемдәре төплө, уҡымышлы уҡыусыларыбыҙҙың артыуы тураһында уйланам. Башҡаларҙы өйрәтергә тырышып ҡына йәшәмәйек, үҙебеҙ ҙә башҡаларҙан өйрәнәйек.

Уҡымышлы уҡыусы – ниндәй ҡыуаныслы күренеш! Уларҙың артыуы шатландырып ҡына ҡалмай, ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Ошондай яуаплылыҡты тойоп, быға тиклем аҡтарылмаған тормош материалдарында, әлегә бер кемдең дә ҡәләме теймәгән өр-яңы ситуацияларҙа кеше яҙмыштарын аса алған әҫәрҙәр генә әҙәбиәтебеҙҙең уңышына, уҡыусыларҙың иҫендә ҡалырлыҡ ваҡиғаға әйләнә.

Әмир Әминевтың “Бер кәмәлә” повесы ике съезд араһындағы шундай ваҡиғаларҙан һаналырға хаҡлы. Хәҙерге заман кешеләренең үҙ-ара үҙенсәлекле, йыш ҡына сәйер мөнәсәбәттәрен әҙип мауыҡтырғыс сюжет, тапҡыр деталдәр, иҫтә ҡалырлыҡ характерҙар аша асҡан. Әмир Әминев хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә бая әйтелгән “реаль ваҡыт режимында” ижад итеүсе яҙыусыларҙан. Барлай башлаһаң, улар артыҡ күп түгел. Әйтәйек, Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғайсарованың прозаһы, Мөнир Ҡунафиндың, Азамат Юлдашбаевтың хикәйәләре бөгөнгө кеше психологияһындағы үҙгәрештәрҙе нескә тойоуҙары, образлы фекерләүҙәрендә оригиналь табыштары, һүҙҙе ҡәҙерләү, шуның нәтижәһе булараҡ композицион йыйнаҡлыҡтары менән иғтибарҙы тарта. Флүр Ғәлимовтың “Яңы башҡорт” романы уҡыусыларҙы башҡорт әҙәбиәтендә әлегә тиклем бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән сфераға – эшҡыуарҙар мөхитенә алып инде.

Ҡайһы бер милләттәрҙең төп шөғөлө, йәшәйешенең мөһим сығанағы булған сауҙа эшенә башҡорт борон да бик тотоноп бармаған, күптәребеҙ ул һөнәргә әле лә әллә ни атлығып тормай. Шулай ҙа халыҡ алыш-биреш итмәйенсә йәшәмәгән, унһыҙ көн күреүе мөмкин дә түгел. Хәҙер иһә эшҡыуарлыҡ, сауҙа, кәсеп итеү, ниндәйҙер тармаҡта үҙ юлыңды табыу, егерме беренсе быуаттағы көнкүрештең зарури талабы булып, замандаштар алдына килеп баҫты. Күптәр ошо юлды һайланы. Башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары араһынан да уңышҡа ирешкәндәр бар. Хәҙер ҙур булмаған ауылда ла бер-ике кеше кибет тота. Әлбиттә, ҙур бизнес алдында улар үтә лә бәләкәй, ләкин тормоштоң тотҡаһы булырҙай уңған фермерҙарҙың, булдыҡлы, инициативалы эшҡыуарҙарҙың, ниһайәт, беҙҙең халыҡта ла арта барыуы мөһим. Юғиһә был сферала башҡортостанлыларҙың үҙҙәренә ҡарағанда ситтән килгәндәр күберәк хакимлыҡ итә. Республикалағы эшҡыуарҙар араһында башҡорттарҙың һаны биш процентҡа ла тулмай икән, бындай аҙ һанлы көс менән яңы иҡтисади шарттарҙа милләттең ышаныслы үҫешенә ирешеүе ауыр мәсьәлә булып алға баҫа.

Башҡортостан Республикаһының яңы хоҡуҡтарға, яңы иҡтисади һәм рухи юғарылыҡтарға ирешеү юлы бынан егерме йыл элек бөйөк ил тарҡалған, партия юҡҡа сыҡҡан, ҡараҡтар приватизацияһы, дәүләт байлығын урлау-талауҙар ҡоторған бик ҡатмарлы шарттарҙа башланды. Әммә ауыл хужалығы элеккесә эшләй ине, нисәмә быуын совет кешеләренең хеҙмәте тыуҙырған материаль ресурстар күп ине. Халыҡ бөгөнгө һымаҡ байҙарға һәм ярлыларға донъяла күрелмәгән дәрәжәлә бүленмәгәйне, потребитель психологияһы йәштәрҙе ул тиклем боҙмағайны, башҡа илдәр өсөн үрнәк булған мәғариф системаһы, абруйлы, ҡеүәтле ҡоралды көстәр һ.б. тарҡатылмағайны.

Хәҙер ил яңыса йәшәү юлдарын эҙләй, тормоштоң барлыҡ тармаҡтарын модернизациялау ихтыяжы үҙәккә ҡуйыла. Быны уңышлы башҡарыу, алдынғы илдәргә тиңләшеү өсөн бөтә көстәрҙе тупларға, туҡтауһыҙ сеймал һатып көн күреүҙән баш менән, аҡыл менән эшләп йәшәүгә күсергә кәрәк. Модернизация революциянан ҡатмарлыраҡ. Революция бер нисә көндә эшләнә, модернизация – оҙайлы процесс.

Йәмғиәттә ошондай ғәйәт көсөргәнешле эҙләнеүҙәр барғанда ваҡиғаларҙың асылын аңлауы, шуларҙы әҫәрҙәрҙә күрһәтеүе тағы ла ныҡыраҡ ауырлаша. Ләкин зирәк таланттар донъялар ныҡ буталған саҡтарҙа ла үҙәк тенденцияларҙы күрә һәм шуларҙы кеше яҙмыштарында сағылдыра алған. Әҙәбиәт тарихында

быға миҫалдар күп. Хәҙерге Рәсәйҙә капитализмды реставрациялауға ынтылыштар көсәйгәндә йыш ҡына рус драматургы Островскийҙың маһирлығы хаҡында уйландыра. XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәй империяһында, бигерәк тә уның көслө сәнәғәтле үҙәктәрендә капитализм ныҡ үҫеш алған осорҙоң ҡаршылыҡтарын бөйөк драматург, һис бер сәйәсәткә бирелмәйенсә, кеше кисерештәре, тормошсан күренештәр аша тәбиғи ҙә, фажиғәле лә итеп күрһәтә алған.

Тағы ла тарихты иҫкә төшөрәйек. Әле һүҙ барған XIX быуат аҙаҡтарында илдә капитализмдың йыртҡыслығы айырыуса шашҡанда башҡорт ерҙәрен талаусылар оятһыҙлыҡтың сиген белмәй. Алдынғы рус интеллигенцияһы был яман эштәргә ҡаршы киҫкен протест белдерә. Нәҡ ошо ваҡытта тыуған ерҙе талауҙарҙан, төрлө йәберҙәрҙән ыҙа сиккән олатайҙарыбыҙҙың ниндәй ҡыйынлыҡтарҙа йәшәүен күреп, яҙыусы һәм публицист Глеб Успенский 1889 йылдың йәйендә Ырымбурҙан Өфөгә сәйәхәт иткәндә йөрәге һыҙланып, таланғандарҙы ҡыҙғанып: “Харап булыр был башҡорт, харап булыр!” – тигән үҙәк өҙгөс һүҙҙәрҙе әйтә.

Капитализм беҙҙең халҡыбыҙ өсөн бөтөнләй күрмәгән нәмә түгел. Ана бит, XIX быуат аҙағында – XX быуат башында башҡорт йәмғиәтенә ул ниндәй аяуһыҙ мөнәсәбәттәре менән килеп ингән.

Гуманист Успенскийҙың хафаланып әйткән һүҙҙәре, бәхеткә күрә, тормошҡа ашманы. Күпме талау-йәберләүҙән һуң да башҡорт халҡы үҙенең йәшәү дәртен юғалтманы, бөтә көсөн йыйып, көрәш юлына баҫты һәм 1917 йылда империялағы халыҡтар араһынан беренсе булып үҙенең дәүләтселеген – Башҡортостан Республикаһын булдырҙы.

Шуға күрә бөгөнгө һынауҙар алдында ҡаушап ҡалмайыҡ. Тарих һабаҡтарын онотмайыҡ. Хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлайыҡ. Оло маҡсаттарға ынтылыусыларға яҙыусы һүҙе ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек өҫтәһен ине. Бының өсөн әҫәрҙәребеҙҙә күберәк бөгөнгө тормошто алға илтергә тип яңы юлдар эҙләүсе шәхестәрҙең көслө характерҙарын асайыҡ, йәш быуынды яңы замандың шундай фиҙакәр кешеләре үрнәгендә тәрбиәләйек.

Ауылдарҙы буш өйҙәр, балаларһыҙ мәктәптәр, йәштәрһеҙ клубтар, уҡыусыһыҙ китаптар, тамашасыһыҙ театрҙар… Былар барыһы ла – реаль ваҡыт режимындағы күренештәр. Шуларҙың икенсе төрлө сағылышы: дауаханаһыҙ ауырыуҙар, дарыуһыҙ сырхауҙар, игенсеһеҙ сүпкә күмелгән, ағас баҫҡан баҫыуҙар, урланған урмандар, кәртәләнгән күлдәр… Былары ла – замандың йәмһеҙ тамғалары. Әҙәбиәт ошолар хаҡында үҙенең борсоулы һүҙен әйтергә ынтыла.

Ләкин ошо күңелһеҙ ваҡиғалар уртаһында яңы көстәр туплана, халыҡ араһынан булдыҡлы шәхестәр күтәрелә, күптәр донъя көтөү дәрте менән йәшәй. Уларға көнләшеп ҡараусылар, үҙҙәренең ҡулынан килмәгәс, нисек тә зыян ҡылырға маташыусы яуыздар ҙа бар. Ошондай ҡаршылыҡтарҙы еңеп, алға юл ярырға тырышыусыларға әҙәбиәт ныҡыраҡ иғтибар итергә тейеш.

Барыһын да буталсыҡ заманға япһарып, яуаплылыҡтан ситләшергә, ил, халыҡ алдындағы бурыстарыбыҙ хаҡында аҙ ғына ваҡытҡа ла онотorға хаҡыбыҙ юҡ. Эйе, донъя болғауыр, уны аңлауы, ваҡиғаларҙың ниндәй йүнәлештә үҫәсәген йәки үҫергә тейешлеген билдәләүе лә, әҫәрҙәрҙә һүрәтләүе лә ҡыйын. Ләкин бөгөнгөнән дә дәһшәтлерәк бәрелештәр булған бит. Тарихты тағы ла иҫкә төшөрәйек. Мәҫәлән, XX быуатта Граждандар һуғышында бер туғандарҙың ҡан дошманға әйләнеп,бер-береһенә ҡаршы ҡорал күтәреүе, егерменсе йылдар аҙағында

– утыҙынсы йылдарҙа крәҫтиән хужалыҡтарының туҙҙырылыуы, мәсеттәрҙең, сиркәүҙәрҙең емерелеүе, боронғо китаптарҙың тыйылыуы, яндырылыуы, “кулак синыфы, халыҡ дошмандары” тигән нахаҡ ғәйептәр тағып, илдең аҫыл кешеләрен юҡ итеү – быларҙы бөгөнгө хәлдәр менән сағыштырырлыҡмы ни?

Ошондай ҡыйралыштар илде дер һелкеткәндә лә тормош дауам иткән, халыҡ халыҡ булып, милләт милләт булып ҡалған. Башҡорт әҙәбиәте яңы эстетик тәжрибә туплаған, яңы жанрҙар тыуған. Ләкин ваҡиғаларҙы бары синфи күҙлектән баһалау ижади мөмкинлектәрҙе ныҡ сикләгән. Артыҡ сәйәсиләштереү әҫәрҙәрҙең художество кимәлен төшөргән. Уҙғандағы үрнәктәрҙе, ғибрәт хәлдәрҙе йышыраҡ иҫкә төшөрөү хәҙерге эҙләнеүҙәр өсөн дә бик кәрәк.

Михаил Шолоховтың донъяға танылған, аҙаҡ фильм булып дан ҡаҙанған бер хикәйәһенең исеме – “Кеше яҙмышы”. Әҙәбиәттең төп маҡсатын нәҡ ошо һүҙҙәр менән билдәләргә мөмкин. Әҫәрҙә ниндәй генә осор һәм ерлек тураһында һүҙ барһа ла, әҙип тә, шағир ҙа, драматург та халыҡ тормошо, кеше яҙмышы тураһында фекер йөрөтә. Сағыштырып ҡараһаң, башҡорт телендә яҙмыш һәм яҙыусы һүҙҙәре бер тамырҙан бит. Ил һәм кеше яҙмышын яҙыусылар – вазифабыҙ бына ни тиклем яуаплы!

2009 йылда “Ағиҙел” журналының ике һанында Ишғәли Нурғәлиевтең “Ҡарабаш турғай” тигән әҫәре баҫылды. Тәүге һүҙҙәрҙе уҡыу менән күптәрҙең хәтеренә, бәлки, Мостай Кәримдең “Һоро турғай” шиғырындағы ҡыш яфаһын кешеләр менән бергә күтәргән, яҙ килеү менән ҡанатланып йырлап ебәргән ҡошсоҡ хәтеренә килгәндер.

*Иҫерҙе лә йырлап ебәрҙе был,*
*Осоп ҡунъас тәҙрә ҡырына.*
*Эй йырлай ҙа! Ләкин бисараның*
*Ҡолаҡ һалыусы юҡ йырына.*
*Ә бер аҙҙан йылы елдәр иҫте,*
*Яландарҙы ҡарҙан ҡотҡарып.*
*…Әҙер яҙға килгән сыйырсыҡты,*
*Кәпәс сөйөп, шул саҡ ҡотланыҡ.*

Беҙҙең әҙәбиәт донъяһында быға тиклем ишетелмәгән өр-яңы исем. Тасуирланған тормош материалы, күҙәтеү-уйланыуҙар ҙа бик ҡыҙыҡлы. Әҙәбиәткә төрлөсә киләләр. Төҫһөҙ бер нисә яҙмаһын ҡулына тотоп, йылдар буйы ижад тирәһендә уралғандар, әммә ысын асыштарға ирешә алмағандар ҙа бар. Ә бына Ишғәли Нурғәлиев матбуғатта тәүге күренеүе менән үк үҙен бик күҙәтеүсән, ғәжәп хәтерле һәм иң мөһиме – кеше психологияһын тәрәндән аңлаған, өлгөргән әҙип итеп танытты. Әҫәр тиҙ арала уҡыусыларҙың ихтирамын яулап өлгөрҙө. Әммә был осрашыу-танышыуҙың автор өлкәнәйгәс кенә килеп сығыуы үкенеслерәк.

“Ҡарабаш турғай”ҙың жанрын Ишғәли Нурғәлиев “Повесть - яҙмышнамә” тип ҡуйған. Барлыҡ әҙәбиәт – яҙмышнамә ул. Уҡыусыны әҫәрҙәге кеше яҙмыштары тетрәндерергә тейеш. Уҙған тарихтар тураһында һүҙ барамы йәки бөгөнгө ваҡиғалар бәйән ителәме – нисек яҙыу, ниндәй образдар менән танышып, фәһем алыу һәм эстетик кинәнес кисереү мөһим.

Уҡыусыларға аяуһыҙ тормош хәҡиҡәтен, фәһемле кеше яҙмыштарын еткереү – ниндәй генә дәүерҙәрҙе байҡаһа ла, яҙыусы нәҡ ошо сифаттары менән генә уңыштарға ирешә ала.

Ике съезд араһында тарихи проза әле тарихсылар үҙҙәренең төплө һүҙен әйтмәгән боронғо дәүерҙәргә үтеп инде. Ләкин бында ла билдәле тарихи документтарҙа теркәлгән фактарҙы ваҡиғалар аша иллюстрациялап ҡына боронғо халыҡ психологияһын, кеше яҙмыштарын асыу мөмкин түгел.

Совет осоронда тарихтағы күп кенә ваҡиғаларҙы йәки шәхестәрҙе әҫәрҙәрҙә күрһәтеү тыйылғайны. Хәҙер юлдар асылды, әммә тарихты тарайтыуҙың яңы ысулдары барлыҡҡа килде. 1917 йылдан һуңғы ваҡиғаларҙы тотошлайы менән ҡараға буяу, йәғни тарихи ҡаҙаныштарҙы күрәләтә инҡар итеү йәки батша дәүерендә яманаты сыҡҡан шәхестәрҙе изгеләштереү – хәҡиҡәтте боҙоу ул. Тарихта урын тар түгел, тарих үҙе тыуҙырғандарға унда урын етерлек. Беҙҙең әҙәбиәттә бындай бер яҡлы ҡараштағы әҫәрҙәр яҙылмай – шуныһы ҡыуаныслы.

Һуғыштан һуңғы ҡырҡынсы йылдар аҙағында – илленсе йылдар башында тормошто һылап-һыйпап күрһәткән әҫәрҙәрҙе тәнҡитләүсе “конфликтһыҙлыҡ теорияһы” тыуғайны. Бындай хәлдәр тарихта ғына тороп ҡалмаған. Әҙәбиәттә һәм сәнғәттә әле лә әллә күпме. Мексика сериалдарына эйәреп әллә күпме сиған йәки яңы рустар хаҡындағы сериалдар үрсей. Улар яһалма матурлыҡтары менән айҙар буйына Рәсәй халҡының аңын томалай. Ошондай тәтәй ситуациялар беҙҙең сәхнә әҫәрҙәрендә лә етерлек.

Тормош юғары тиҙлектәр һәм ашҡыныулы ритмдар, йыш ҡына аритмия рәүешендә барғанда ла, художестволы ижад барыбер гармониянан ситләшергә тейеш түгел. Ләкин әҫәрҙәрҙәге элекке талғынлыҡты, йәйелеп китеп, яйлап тасуирлауҙарҙы бөгөнгө уҡыусы бик үк ҡабул итмәй. Трилогияларҙың, эпопеяларҙың да, һис шикһеҙ, йәшәргә хоҡуғы бар. Шулай ҙа хәҙерге әҙәбиәткә ҡыҫҡалыҡ, йыйнаҡлыҡ ныҡ ғына хас. Мостай Кәримдең билдәле повесы “Оҙоноҙаҡ баласаҡ” тип исемләнһә лә, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына бүлектәрҙә күпме кеше яҙмыштары тетрәндерә. Әҙәбиәт нәҡ бына ошо йүнәлештә үҫә. Юҡҡамы ни хәҙерге пьесаларҙың күләме 25–30 биттән дә артмай. Элекке әҫәрҙәрҙәге ваҡиғалар сәхнәлә өсәр-дүртәр сәғәт барһа, бөгөнгө драматургтар быға ике сәғәттә ирешергә тырыша.

Ләкин динамикаға ынтылыуҙың артыҡ ҡабаланыуға килтереү ҡурҡынысы ла бар. Ашыҡ-бошоҡ яҙыу ижад ҡанундарына һыймай. Егерме беренсе быуат әҙәбиәттәрендә тел ярлыланғандан-ярлылана, көндәлек матбуғат стиле, шуның лексикаһы кимәленә төшөп бара. Телде самалы ғына белеүҙе “көнкүреш кимәлендә” – “на бытовом уровне” тиҙәр. Ләкин кешеләр көнкүрештә ғәжәп тапҡыр телдә аралаша бит. Тел оҫталары һағындыра. Шакир Янбаевтың бик ыҡсым хикәйәләренең һәр береһе тел байлығы менән һоҡландыра торғайны бит. Ундай аҫыл үрнәктәрҙе бөгөн табып ҡара!

Рус әҙәбиәтендә лә хәлдәр бик шәптән түгел. Бульвар әҙәбиәтенең тел-стилдә ҡайғыһы юҡ. Бөйөк рус телен бөтөнләй кәрәкмәгән күпме сит һүҙҙәр сүпләй.

Әҙиптең тел байлығы һүҙҙәрҙең күплеге менән билдәләнмәй. Әҙәби оҫталыҡ – һәр һүҙҙең үҙ урынында булыуы. Мәҫәлән, Мостай Кәримдең йәки Рәшит Солтангәрәевтың, Рәми Ғариповтың йәки Рәшит Назаровтың лексикалары үтә бай тип әйтмәҫ инем. Әммә уларҙың әҫәрҙәрендә артыҡ һүҙ юҡ, тик тейешлеһе әйтелгән. Бөйөк “Урал батыр”ҙы ижад иткән телен халҡыбыҙ хәтере меңәр йылдар буйына һаҡлаған. Был хазинаны ҡәҙерләгән, байытҡан.

Башҡорт халҡының тарихи хәтере – бик үҙенсәлекле күренеш. Уның боронғо тамырҙар менән бәйләнеше әле лә өҙөлмәгән. Шумерҙарҙың бынан бишәр мең йылдар элек тыуған “Гилгәмеш” эпосы балсыҡ таҡталарҙағы яҙыуҙарҙа ғына

һаҡланып ҡалған. Ә бына шул дәүерҙә, ғалимдар раҫлауынса, хатта унан да алдараҡ барлыҡҡа килгән “Урал батыр” егерменсе быуат баштарына тиклем телдә тере көйө һаҡланған. Бөгөн уҡыусы балалар араһында ошо ҡомартҡыны башҡарыу оҫталығы буйынса бәйгеләр уҙғарыла.

1812 йылғы Ватан һуғышы йәки егерменсе быуат башындағы Рус-япон һуғышы шаңдауҙары халыҡтарҙың хәтеренән күптән юйылған, тарих китаптарында ғына ҡалған. Ә башҡорт хәтерендә ул ваҡиғалар әле лә “Любезники-любизар”, “Порт-Артур” тигән йырҙар булып йырланып йәшәй.

Әйтегеҙ әле, тағы ла ҡайһы халыҡ Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡтар күрһәткән генералы хаҡында йыр сығарып, уны бөгөн дә йырлап йөрөй? Шайморатов генерал йыр булып әле лә халҡының күңелендә йәшәй. Бына шулай хикмәтле инде ул башҡорт хәтере. Һүҙебеҙ менән моңобоҙ, әҙәбиәтебеҙ менән сәнғәтебеҙгә киләсәктә лә илһам бирерлек көс тупланған ул хәтерҙә.

Башҡорт моңоноң донъя классик музыкаһындағы иң юғары үрнәктәргә ҡушылып тәбиғи яңғырарлыҡ яңы һәләттәре асыла. 2010 йылдың 11 ғинуарында атаҡлы Ла Скала сәхнәһендә бөгөнгө көндә иң көслө опера йырсыһы һаналған Илдар Абдразаҡов үҙенең концертында Чайковскийҙың, Рахманиновтың, Листың һәм Равелдең романстарын, сонеттарын барлыҡ тамашасыларҙы әсир итеп башҡарғандан һуң, ҡапыл ошо театрҙа Роберт Юлдашевтың ҡурай моңо яңғырай, уға ҡушылып Илдар “Азамат”ты йырлағас, зал алҡыштарға күмелә. Талантарыбыҙ өсөн ғорурланырлыҡ та, башҡа ижадсыларҙы көнләштерерлек тә, үрнәк булырлыҡ та ваҡиға.

Башҡорт әҙәбиәте, башҡорт китабы ла ҡурайыбыҙ моңо һымаҡ яңы киңлектәргә сыҡһын, яңы бейеклектәр яулаһын ине.

“Һеҙ донъя гражданымы?” тигән һорауға Илдар Абдразаҡов: “Мин донъя буйлап йырлаусы россиянмын”,– тип яуап биргән. Кешелек менән ошондай мөнәсәбәттә ижад итер өсөн талант ҡына түгел, ҙур хеҙмәт һәм яуаплылыҡ кәрәк.

Халҡыбыҙҙың хаҡлы ғорурланырлыҡ рухи мираҫы, киләсәккә еткерер һүҙе, моңо бар. Әҙиптәребеҙ ошо байлыҡты һаҡлау һәм үҫтереү хәстәрлеге менән ижад итә. Ләкин үҙебеҙгә үҙебеҙ артыҡ һоҡланмайыҡ, барлыҡ булмышыбыҙҙы изгеләштермәйек. Һөйөклө Ватанына ҡарап, Лермонтовҡа ошондай һүҙҙәр әйтеүе еңел булған тиһегеҙме ни?

*Прощай, немытая Россия,*
*Страна господ, страна рабов.*
*И вы, мундиры голубые,*
*И ты, покорный им народ.*

Ижад юлын “Йәш сағым, алтын сағым, ялҡын сағым булһын фиҙа халҡым алдында минең биргән таҙа антым өсөн” тип башлаған Шәйехзада “Башҡортостан тере ҡала тиһәң, бер йәнемә миллион үлем бир!” тигән ярһыуҙар менән ут эсенә ингән һәм фажиғәле һәләк булған. Ләкин Бабич халҡын ни тиклем генә яратһа ла, уны бер ваҡытта ла идеаллаштырмаған. Бөйөклөгөн данлаған, кәмселектәрен фашлаған. Уның “Хәлебеҙҙән бер күренеш” тигән кескәй генә шиғырына иғтибар итегеҙ:

*Ҡыҙҙар – иркә,*
*Ирҙәр – күркә,*
*Ҡатындар – ҡурсаҡ!*
*Аңҡый шәхсиәт,*
*Ялтырай тәрилкә,*

*Матбуғат – уйынсыҡ!*
*Күҙҙәр – йыландай,*
*Телдәр йыумалай,*
*Малайҙар үрмәләй,*
*Танауҙар – Һималай!*

Ун юлда ни тиклем әсе сатира! Шуныһы бигерәк тә ғәжәп: был һүҙҙәрҙе шағир бер быуатҡа яҡын элек, 1916 йылда, әйткән, ә һәр һүҙе бөгөнгө тормошҡа ни тиклем тап килеп тора.

Милләтеңдә ҡәҙерләү өсөн уның яман яҡтарын ҡәһәрләй ҙә белергә кәрәк. Былай тип әйтеүҙең хәҙерге шарттарҙағы әҙәбиәтебеҙгә туранан-тура мөнәсәбәте бар. Сауаптар ҙа, гонаһтар ҙа бер үк яҙмыш бизмәнендә үлсәнә. Халҡыбыҙҙы артҡа һөйрәүсе бәләләргә ҡарата нәфрәт тыуҙырайыҡ, әммә яңы әҫәрҙәр ижад иткәндә ватандаштарыбыҙҙың рухын ныҒытырҙай һүҙҙәр таба алһаҡ, башҡаларҙы ла үҙе менән алға әйҙәрҙәй образдар тыуҙырһаҡ ине. Был бурыстарҙы тик үҙебеҙҙең тынғыһыҙ хеҙмәтебеҙ, ижадҡа тоғролоғобоҙ менән генә үтәрлек. Шәхси яуаплылыҡ һәр эштә лә мөһим, ләкин ижадта бынан башҡа бөтөнләй мөмкин түгел. Ижадта башҡаларҙы ярҙамға саҡырып булмай, барыһы ла тик үҙеңдән тора.

Йылдан-йыл шуға нығыраҡ инанам: милләт аҙ һанлыраҡ булған һайын, ундағы һәр шәхестең яуаплылығы тағы ла нығыраҡ арта. Башҡа халыҡтарҙа меңәр, унар меңәр кеше эшләгән эште беҙҙә йөҙәр, ҡайһы саҡта хатта унар кешегә башҡарып сығырға кәрәк була. Әҙәби хеҙмәткә тотонғандарҙың яҙмышы айырыуса ауыр. Е. Евтушенконың “Поэт в России больше, чем поэт” тигән һүҙҙәре йыш ҡабатлана. Бөйөк рус халҡының шағирҙары шулай икән, аҙыраҡ һанлы милләттәрҙә шағир һәм әҙип вазифаһы тағы ла яуаплыраҡ. Яҙыусылыҡ эше менән генә шөғөлләнеп йәшәгәндәр, тулы мәғәнәһендә профессиональ булғандар башҡорт әҙәбиәте тарихында бөтөнләй юҡ тиерлек. Ғөмүмән, башҡорт халҡында борон-борондан шағирлыҡ менән бергә яугирлыҡ, сәсәндең йәмәғәт эшмәкәрлеге тәбиғи һаналған. Һуңғы йөҙ йыллыҡта әҙиптәр барыһы ла йә редакцияла, йә мәктәптә, йә башҡа тармаҡтарҙа эшләгән, әле лә эшләйбеҙ, киләсәк быуындар ҙа эшләйәсәктәр. Шунһыҙ беҙгә йәшәүе мөмкин түгел. Беҙҙең әҫәрҙәр ялһыҙ ял ваҡыттарында, йоҡоһоҙ төндәрҙә ижад ителә. Өҫтәүенә күпме ижтимағи сараларҙа, осрашыуҙарҙа, төрлө фекер алышыуҙарҙа ҡатнашып өлгөрөргә кәрәк. Ошондай тынғыһыҙ шарттарҙа, эш араһында яҙылһа ла, бөтә әҫәрҙәргә лә профессиональ талаптар иң юғары кимәлдә тиң ҡуйыла. Шуға ла мин бик көсөргәнешле ритмда ижад итеүсе ҡәләмдәштәремдең ҡаһарман әҙәби хеҙмәтенә һәр саҡ ҙур ихтирам менән ҡарайым.

“Ер шары сатнаһа, ул сатнау шағир йөрәге аша үтә” тигән Генрих Гейне. Нисәмә йылдарға һуҙылған тетрәнеүҙәрҙә бөйөк Рәсәй сатнаны, халыҡ икегә ярылды. Ниндәй һынауҙарҙы берҙәм булып үткән ватандаштарыбыҙ ике төрлө социаль хәлдәге үтә ярлы һәм үтә бай ҡапма-ҡаршы кисәккә бүленде.

Шағир йөрәге бөгөн нимә эшләргә тейеш?

Әҙип бөгөн нимә эшләргә тейеш?

Бөйөк әҙәбиәттәрҙә хәлдәр башҡасараҡтыр. Ләкин башҡорт әҙәбиәте, Рәсәйҙәге башҡа милли әҙәбиәттәр ҡапма-ҡаршы төркөмдәргә бүленә алмай. Беҙ былай ҙа бик аҙбыҙ. Беҙҙең мөҡәддәс маҡсатыбыҙ тарҡатыу түгел, берләштереү, туплау, яҡшылыҡҡа, ғәҙеллеккә, хәләл хеҙмәткә ынтылыусы көстәрҙе йыйыу. Быға тиклем ошо рухта ижад итергә тырыштыҡ. Бынан һуң да һайлаған юлыбыҙға, ынтылған маҡсатыбыҙға тоғро ҡалырбыҙ.

**Хәсән**
**НАЗАР,**
**шиғриәт секцияһы рәйесе**

# Рух илсеһеме шағирҙар?

*Булыр илдең балалары*
*Бер-беренә батыр тир.*
*Бөлөр илдең балалары*
*Бер-беренә бахыр тир.*

Ҡәҙерле ҡәләмдәштәр! Мин һеҙгә еткерер һүҙемде халыҡ аҡылындағы тап ошо принциптан сығып әҙерләнем: булыр илдең балалары бер-беренә батыр тир. Рух һүнмәһә, ил йәшәр. Рухлы халыҡ – ырыҫлы халыҡ. Шулай тип әйтәбеҙ ҙә, яҙабыҙ ҙа. Беҙҙе кеше итеп, милләт итеп шул көс тота. Рух асылын билдәләгән юғары аңыбыҙ, зауығыбыҙ, моңобоҙ, телмәребеҙ булмаһа, беҙ, билдәле инде, тоҡомдо үрсетеп, мас булып ятыр януарҙарҙан әллә ни айырылмаҫ инек. Хәйер, хәҙерге баҙар шарттарындағы алыпһатарлыҡ, прагматизм, нәфсе ҡотҡоһо, матди байлыҡтарға табыныуҙар ҡайһы бер әһелдәрҙе януарҙарҙан әллә ни айырмай ҙа башланы, буғай. Ә сафсата уларҙа! Битлектәре лә етерлек. Ошо ғибрәттән беҙҙе йөрәк һәм аҡыл көсө аралай. Тап шул көс йәшәтә лә, йәшнәтә лә башҡорт әҙәбиәтен. Ижади донъябыҙ, мөхитебеҙ шулай ҡоролған: беҙ – халыҡҡа хеҙмәттә, хеҙмәт эсендә йөҙмәктә. Тинтерәтмәй хәҙер ҡыҫымдар, тик мулыраҡ булһын әҙәбиәткә лә дәүләт ҡаҙнаһынан сығымдар.

Ижади донъябыҙ сәләмәтлектә, беҙ һәр ваҡыт, шөкөр, яңы үрҙәр яулар һәләтлектә. Дөрөҫ, шағирҙар, мәҫәлән, пәйғәмбәрлеккә яҡын булһалар ҙа, улар ҙа әүлиә түгел. Әҙәмгә хас ҙурлыҡтар ҙа, йомшаҡ яҡтар ҙа барҙыр. Улар тәбиғәт менән бер бөтөн һымаҡ: йәйҙә – ямғыр, ҡышын – ҡарҙыр. Төрлөһө барҙыр, әлбиттә, йөктө төпкә егелеп тартыусыларҙың да, мисәүҙә генә юртыусыларҙың да булыуы тәбиғи. Данға иҫе китмәүселәр ҙә, сәпәкәй көҫәүселәр ҙә осрай. Ләкин шуныһы мөһим: бөтөнөбөҙ бергә-бергә йәшәп ятабыҙ беҙ.

Шуныһы әһәмиәтле: һәр ваҡытта ла беҙҙең өсөн төп критерий – талант кимәле, әҙәбиәт хаҡындағы хәстәр, бер-беренә матур мөнәсәбәт, рухи юғарылыҡ.

Сәләмәт рух – илаһилыҡ, бөйөклөк ул. Ошо көс тарихи һәм милли хәтерҙе һаҡлай, хаҡлыҡты, матурлыҡты яҡлай, бер маҡсатҡа туплай. Бигерәк тә азатлыҡ рухы, рух азатлығы ҡиммәт һәм ҡәҙерле. Бына шуларҙың барыһына хеҙмәт итә рухи байлыҡтарҙың иң мәртәбәлеләренән береһе булған шиғриәт. “Рухым күтәрелде минең дә, эйәрләнем мин дә атымды”, – тип шиғри һүҙе менән Салауат батыр изге яуға әйҙәгән. “Шиғырың менән рухландырып, һалдың беҙҙе аҡ юлға”, – тигән юлдар бар Шәйехзада Бабичта. Был мөҡәддәс юлды, был бурысты, был маҡсатты нисек дауам итә бөгөнгө шағирҙар, ысын-ысындан рух илсеһеме,

мөхәббәт йырсыһымы улар? Бармы беҙҙә илем, телем, көнөм тип янған Рәми Ғариповтағы фиҙакәрлектәр? Бармы Мостай Кәримдәге донъя кимәленә сығарырҙай фәлсәфи юғарылыҡтар? Бармы Назар Нәжми кеүек уй-кисерештәр даръяһынан моң гәүһәрҙәрен табыусылар? Шәхестәр бармы бөгөн шиғриәттә?

“Башҡортостандың халыҡ шағиры” исемен алыуҙар, мәртәбәле премияларға лайыҡ булыуҙар – былар күтәрәме дәүергә торошло шәхес кимәленә? Быуатыбыҙ асыҡлар әле быны. Ә бөгөнгө көндә беҙ хаҡлы рәүештә иң элек Рауил Бикбаевтың исемен айырым атап әйтәбеҙ. Затлы әҫәрҙәре – поэмалары, граждандлыҡ пафосы, сәсәнлек саялығы, мөхәббәт лирикаһы менән бөгөнгө лидерыбыҙ ул. Тотанаҡһыҙ йылдарҙа Яҙыусылар союзының бөтөнлөгөнә, дәрәжәһенә гарант булған, дәүләт эшендә танылған уҙаманға рәхмәтлебеҙ барыбыҙ ҙа.

Республикабыҙҙағы иң ҙур һәм бай тарихлы, халыҡтың да, хөкүмәттең дә күҙ уңында булған ижади ойошмаға ун алты йыл буйына етәкселек итеү – был үҙе үк фиҙакәрлек. Артабан да үҙе бер таяныс булыр абруйлы шәхесебеҙ.

Рауил Бикбаев бына нисек билдәләй шағирҙың сифаттарын:

*Тауҙар кеүек уйсан,*
*Таңдар кеүек алсаҡ,*
*Сабый кеүек ихлас,*
*Ер шикелле ябай,*
*Икмәк кеүек бөйөк,*
*Аҡһаҡалдай зирәк,*
*Әсә кеүек һиҙгер,*
*Иҫәр кеүек иҫәүән,*
*Ҡыҙ кеүек оялсан,*
*Батыр кеүек ҡыйыу,*
*Көн һымаҡ яҡты,*
*Төн һымаҡ серле,*
*Ел кеүек тынғыһыҙ...*
*Шағирҙың бар сифаттарын*
*Аңларлыҡ бармы сара?*
*Мин һанап бөтә алманым,*
*Хәҙер һин һанап ҡара!*

Күпселектә бына шундай сифаттарға эйә булған аҫыл заттар йыйылған бөгөн ҡоробоҙға, һеҙҙең менән ошондай оло йыйында бер күрешеү үҙе бер ҡыуаныс, үҙе бер ғүмер. Рәхмәт һеҙҙең барлығығыҙға! Рәхмәт һеҙҙең илһамлы, мөхәббәтле асылығыҙға!

Шағирҙың кемлеге, сифаттары, әлбиттә, барыһынан элек уның әҫәрҙәрендә сағыла. Ошоға миҫал итеп бер нисә ҡәләмдәштең ошо йылдарҙа яҙылған шиғыр юлдарын килтереп үтмәксемен. “Рух илсеһеме шағирҙар?” тигән һорауға яуап саҡтылары ла сағылыр, ихтимал, уларҙа.

Бында мин был йылдарҙа әҙәбиәт кәштәһенә һәлмәк китаптарын өҫтәгән Кәтибә апай Кинйәбулатова, Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Тимер Йосопов, Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай кеүек өлкән шағирҙарыбыҙ, Әнисә Таһирова, Факиһа Туғыҙбаева, Фәниә Чанышева, Тамара Ғәниева һымаҡ шағирәләребеҙ ижадын үҙ бейеклектәрендә – ҡаҙаныштарына тиң ҡәнәғәтлектә ҡалдырып, бөтән бер нисә ҡәләмдәштең ҡайһы бер шиғырына күҙ һирпелтәйем. Беҙ бер-беребеҙҙе лә, үҙ-үҙебеҙҙе лә яҡшы беләбеҙ, шуға күрә барыбыҙға ла туҡталыу мөмкин дә түгел, унан килеп был сығыш һандарға, мәғлүмәттәргә бирелеп барлау ҙа, баһалама ла түгел. Ҡояштың үлән өҫтөндәге ысыҡта ла сағылыуы һымаҡ булыр был миҫалдар, был уй-караштар.

Йәнде әрнетеп арабыҙҙан киткән Рәйес Түләккә – XXI быуатта алтын бағаналарҙың береһе булырлыҡ шағирға – мөрәжәғәт итәм башта. Уның “Мең дә икенсе кис...” тигән китабы – ошо ике съезд араһында сыҡҡан һиммәтле, бәҫле,

милли ырыҫлы йыйынтыҡ ул. Уны уҡығас, бына кем ул башҡортта ысын рух илселәренең береһе, бына ҡайҙа ул яңы быуаттың шиғри хазиналар ҡаҙнаһына ҡот-бәрәкәт өҫтәр ижад, тип әйтәһең ихлас күңелдән.

*Янған ағас хатта ер аҫтында*
*Һис серемәй, тиҙәр.*
*Ил хәтерендә лә һаман иҫтә*
*Янып ауған ирҙәр.*
*Тарих ҡуйынына күмелһә лә,*
*Һүнһә лә ир йәне,*
*Өшөгәндә һеҙгә һыйыналар,*
*Салауат, Бабич, Рәми.*
*Рухығыҙҙыр яна, ахыры, һаман,*
*Күпме баҡма һынап –*
*Тереләрҙең янмауҙарын күреп,*
*Янаһығыҙ һымаҡ...*

Ҡайһы бер тереләрҙең – шымарып алған һөнәрмәндәрҙең янмай ғына яҙыуҙарын абайлап, күләм артынан ҡыуып, йылдар буйы бер көйгә өҙләкһеҙ ыңһырлауҙан, моңдан мәхрүм риториканан продукция етештереп, декламация өсөн генә, китап өсөн генә шиғыр әүәләүселәрҙе күреп, хәҙер инде Рәйес тә теге донъяларҙа көйөнәлер төҫлө.

Ошо урында вафаты ифрат үкенесле, ижады һөйөнөслө Ғилман Ишкининды ла иҫкә алып, ул да ниҙәрҙер өсөн һыҙланып та яталыр, тип әйтмәй ни сара?

Шөкөр, бергә-бергә йәшәп ятҡан, төп йөктө тартып барған шағирҙарҙан Мәүлит Ямалетдиндың ижады һәлмәк тә, үҙенсәлекле лә, шуның менән ҡиммәтле лә. Прозаның уҙаманы ул, шиғриәттең азаматы. Хоҙай Тәғәлә бирһә бирә шул: бар яҡлап та уңған, тилбер, фиҙакәр зат. Ҡурайын уйнап та, йырлап та ебәрһә, үҙе ни тора! Фәһемле, зауыҡлы шиғырҙары, робағиҙары йәйге селләлә йотлоғоп шишмә һыуын эскән кеүек итеп уҡыла. Шағир – ул рух илсеһе тигәндә мин иң тәүгеләрҙән, әлбиттә, Мәүлитте күрәм.

*Яҙманым мин йырҙарымды шөһрәт өсөн,*
*Яҙҙым бары елкенсәккә ғибрәт өсөн.*
*Яҙғанымды күңеленә ҡабул итһә,*
*Милләтемдең дарманына ҡеүәт өсөн.*

Милләт дарманын ҡеүәтләп яҙған Мәүлит Ямалетдиндың күп яҡлы ижады һис шикһеҙ юғары баһаға торошло. Быны бик тә талапсан булған халыҡ шағиры Назар Нәжми элек тә бер әйткәйне инде.

Салауат Әбүзәр ҙә ҡыуандыра килә. Ул, әйтерһең, остаздарҙан фәһем алып, тәбиғәте тартҡан өсөндәр ҙә драматургияла матур итеп юл яра башланы. Яҡшы пьесаларҙы шағирҙар яҙа ул, тип әйтә бит сәхнә сәнғәте бөркөтө Әхтәм Абушахманов. Уның Салауатҡа өмөттәр бағлауы ерле юҡтан түгел, әлбиттә. Әммә был таланттың асылында, үҙәгендә – шағирлыҡ. Уның "Йыһан емеше" тигән яңы китабында "Ир ҡанаты" тигән ыҡсым һәм тос поэмаһы, заман йәйәһенән атылған уҡтай мәргән фекерле шиғырҙары тупланған. Ирония ла, сарказм да бар шағирҙа. Дәүер һыҙаттарын бына нисек тотоп алған һәм ҡойоп ҡуйған:

*Менттар менән донъя тулған,*
*Менттар – беҙҙең фундамент.*
*Уңда ла – мент, һулда ла – мент,*
*Бында ла – мент, унда – мент.*
*Менталитет беҙҙең шулай,*
*Ил башында – парламент.*
*Гүйә, беҙҙең тормошобоҙ –*
*Менттан торған орнамент.*

*Енәйәттән торған илдең,*
*Ни әйтһәң, даны – мент.*
*Булғас булһын: шул менттарға*
*Асайыҡ бер монумент.*

Рәсәйҙең башы көрсөктән сыҡмағанғамы, монументтан ваз кисеп, Салауаттың шиғыры тәьҫиренәнме, мент тип үсекләнгән милицияны полицияға үҙгәртергә мәжбүр булдылар. Бына бит шиғырҙың көсө!

Һуңғы йылдар шиғриәтенә күҙ һалғанда, уның терәк булыр таяныстары тураһында уйланғанда Хисмәтулла Юлдашевты ситләп үтеү мөмкин түгел. Ул һүҙгә, образ һәм һығымта оригиналлегенә, форманың замансалығына, ғөмүмән, үҙ-үҙенә талапсан. Был яуаплылыҡ ҡайһы саҡта ниндәйҙер рационализмға юлыҡтырһа ла, шағир үҙ асылын аса, үҙ тауышын ишеттерә, үҙ һуҡмағын һала. Һүҙ уйнатыу оҫталығы ла, ихласлыҡ та, бер ҡатлыға һалышыу ҙа, тел төбөндә ятыр кинәйәлек тә бар унда. Яһалма тәрәнлектән ҡасып, бик тә тәбиғи тыҡылған бына был шиғыры:

*Иҫә генә,*
*Киҫә генә,*
*Иҫкә алдым кисә генә:*
*Кем ҡәберҙә,*
*Кем Себерҙә,*
*Кем һыйынған бисәһенә,*
*Кем – башҡалар иҫәбенә...*
*Себер еле иҫә генә,*
*Иҫә генә, киҫә генә.*
*Йөрө, тине, иҫән генә,*
*Йән киҫәгем – бисәм генә.*
*Себер еле иҫә генә,*
*Иҫә генә – киҫә генә.*
*Йөрәккәйен киҫеп бирер*
*Минең кеүек иҫәр генә.*

Быны уҡығас, уйлайһың: иҫәрҙәр бер ҙә үҙен иҫәр тимәҫ, ә игелекле, изгелекле, моңло кешеләр, бигерәк тә шағирҙар фиҙалыҡҡа барып әйтер был һүҙҙе. Донъя ҡыуыусыларға, дәүләт ҡаҙнаһы бурҙарына, бигерәк тә маңҡорттарға илем, телем, рухиәтем тип йөрәккәйен киҫеп бирерҙәй “иҫәр”ҙәр нисек инде баһалы булһын?! Ләкин халыҡ ҡара һарыҡ түгел. Рух илселәрен – сәсәндәрен, йырсыларын, шағирҙарын белә, уҡый, ярата, ҡанатлы юлдарҙы, милли аһәңле моңдарҙы күңелдән-күңелгә тарата. Быға беҙ республикабыҙҙың ауыл-ҡалаларында ла, күрше өлкәләрҙәге ҡәрҙәштәр янында ла, Мәскәүҙә лә, Ҡазанда ла күп тапҡырҙар шаһит булдыҡ. Ижади сәфәрҙәрҙә, әҙәби осрашыуҙарҙа, төрлө байрамдарҙа төп йөктө, ғәҙәттә, шағирҙар күтәрә бит.

Әҙәбиәтебеҙ тарихында оло бер ваҡиға булып һуңғы йылдарҙа Өфөлә, Мәскәүҙә, Төркиәлә сыҡҡан зиннәтле шиғри антологияларҙы хәҙер ҡайҙа һәм кем генә ҡиммәтле хазина итеп һаҡламай икән! Башҡорт шиғриәтенең был мәртәбәһенә тап бына ике съезд араһында өлгәшелде. Уларҙа сәнғәтле һүҙ оҫталарының быуаттар буйына, беҙҙең көндәргәсә ижад ителгән шиғыр өлгөләре мең алтын ҡиммәтенә торорлоҡ итеп тупланған.

Халҡыбыҙҙа таланттар әле лә үҙ-үҙен аса, раҫлай килә. Шуларҙың береһе – Мөхәммәт Закиров. Уның ижады, “Тыуған йорт” тигән яңы китабы хаҡында һүҙ әйтелә килде. Әле иһә был донъяның фанилығын әллә ниндәй бер ябай тәрәнлек менән иҫкәрткән шиғырын килтереп үтке килә:

*Аҙа икән күңел, бер аҙынһа...*
*Сәйгә шәкәр нимә? Бал кәрәк!*

*Балы мотлаҡ йүкәнеке булһын,*
*Ауылымды хәтерләтеп торһон:*
*Юҡҡамы ул – Йүкәлебеләк.*
*Һаман хәтеремдә. Атай иҫән.*
*Оло умарталыҡ – йорт алды.*
*Башта әллә йорттан умарталар,*
*Әллә атай, унан умарталар*
*Юғалды...*

Ошо “юғалды” тигән бер һүҙгә генә лә шиғырҙың йөрәге һалынған. Бына нисек тыуа моң! Ә бит, бер ҡараһаң, үтә лә ябай бер хәтирә, ғәҙәти һүҙҙәр. Йөрәге булған, йөрәге тибеп торған ошондай шиғырҙар аса шағирлыҡты.

Эйе, донъя ғына мәңгелек. Беҙ үтәбеҙ унан, беҙ китәбеҙ. Ҡәҙерен белеп йәшәһәксе бер-беребеҙҙең! Ошо йыйындың рухы ла бер-беребеҙгә ғәзизлекте, шиғриәткә, әҙәбиәткә арналыр берҙәмлекте йәйғор һымаҡ балҡышлы итеп сағылдырыуҙалыр, ихтимал.

“Рух илсеһеме шағирҙар?” тигән һорауҙы ваҡыт, заман, милләт һәм Ватан һәр саҡта ла ҡуясаҡ. Ҡыуанып, дәлилләп яуап бирерлек булһын һәммәбеҙгә. Глобализация донъяны бер усҡа ҡыҫырыҡлап, йомарлап алырҙай, милли ҡиммәттәр юғалырҙай түгелме һуң хәҙер, тип, мәрхәмәтте күктән көтөп кенә йөрөмәҫкә, илселәр генә түгел, яугирҙар булырға – шул кәрәк беҙҙән. Шиғриәттең ҡеүәтен, ҡөҙрәтен иң элек бына шул иҫбатлар. Башҡортостан тураһында, мәҫәлән, симфонияларға торошло, яңыса һулышлы шиғри әҫәрҙәрҙе күрге, ишетке килә. Өмөт, әлбиттә, йәштәрҙә. Улар беҙҙән зирәгерәк, беҙҙән саяраҡ, беҙҙән оҫтараҡ булырға тейеш. Бармы шундай йәштәр беҙҙә?! Яуапты ваҡыт хөкөмөнә ҡалдырайыҡ.

Тормоштоң һәләкәтле һыҙаттары ла асыҡланһын, кешеләрҙең күҙе асылһын. Бөгөнгө көнөбөҙҙө һүрәтләп, миҫалға, поэмалар ҙа һирәкләп яҙыла тора. Тойғондоң “Осрашыу” тигән әйбере шулай башланып китә:

*Һаңғырауҙар баҙарымы? Ғәжәп!*
*Була микән шундай баҙар ҙа?*
*Хәтәр булмаһа ла, хәтирәләр*
*Әйҙәй тағы әллә ҡайҙарға.*
*Иҫкә төштө алыҫ бер сәфәрем,*
*Бер хикәйәт кеүек ул сәфәр.*
*Бер уйлаһаң – күҙҙе йоморлоҡ ул,*
*Бер уйлаһаң – күҙҙән ут сәсрәр –*
*Шулай тыуҙы минең был әҫәр.*

Был әйбер “Ағиҙел”дең быйылғы 4-се һанында баҫылып сыҡты. Уның тураһындағы һүҙ әйтелер әле.

Һәр хәлдә, шиғриәтебеҙ шулай һаман тулылана бара. Табыштар бар. Эҙләнеүҙәр бар. Етешһеҙ яҡтар ҙа етерлектер. Хәйер, тәнҡитселәргә өлөш ҡалһын әйҙә. Әҙәбиәт белгестәренә.

Йәшерен-батырын түгел: уртаҡул шағирҙар ҙа, шиғырсылар ҙа бар арала. Был йәһәттән уҙаманыбыҙ Рәшит Шәкүрҙең ике юллығын килтереп, шулай ҙа була, тип әйтергә генә ҡала:

*Талантлылар, талантһыҙҙар бәйгеһендә*
*Уртаҡулдар уҙып китә һәммәһен дә.*

Улар хаҡында әле ваҡытты сарыф итеү кәрәкме икән? Билдәле бит: талант ул уҡып та, тәнҡит менән дә яулана торған әйбер түгел.

Бер үтенесем: берүк кисерә күрһен китабына йәки шиғырына туҡталып өлгөрмәгән ҡәләмдәштәрем. Беҙҙә бит шағирҙар аҙ түгел. Шиғри ҡаҙна ла шөкөр итерлек. Артабан да, һис шикһеҙ, шулай булыр.

Был фекеремә Ғәлим Дәүләди, Муса Сиражи, Риф Мифтахов, Фәнил Күзбәков, Әхмәҙин Әфтәх, Азамат Юлдашбаев, Бәхтейәр Хәлитов, Дамир Шәрәфи һәм Мөнир Ҡунафиндар ҙа, Гөлфиә Юнысова, Гөлнур Яҡупова, Таңһылыу Ҡарамышева, Йомабикә Ильясова, Тамара Искәндәриә, Айһылыу Ғарифуллина, Лариса Абдуллина, Гөлназ Ҡотоева, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Нәжибә Әминева, Фәниә Ғәбиҙуллина, Рита Фәтҡуллина һәм Гүзәл Ғәлиевалар ҙа ҡушылыр, тип ышанам.

Шулай ҙа Салауат Рәхмәтулла, Рәдиф Тимершин, Марсель Сәлимовтарҙың сатирик, юмористик шиғырҙарын, тапҡыр пародияларын уҡып, күп тапҡырҙар "Афарин!" тигәнемде әйтмәй ҡалһам, күңел тыныс булмаҫ ине.

Хәҙер иһә Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһы эшенән хисап биреп үтәйем. Биш йыл буйына күрелгән хәстәрҙәр хаҡында баштан-аяҡ һөйләү кәрәкмәҫтер. Хәйер, йыллыҡ йыйылыштарҙа әйтелә-еткерелә килде бит. Эште һуңғы йыл миҫалында яҡтыртып үтеү урынлы булыр.

Ун кешенән торған секцияның ултырыштары әленән-әле уҙғарылды. Ситтән абруйлы иптәштәр ҙә саҡырылды. Рәхмәт барыһына ла.

Бурыстар ентекле атҡарылды. Пушкиндың "Изге тойғоларҙы лирам менән уяттым мин", Некрасовтың "Шағир булмауың да ихтимал, тик граждан булыу – бурысың" тигән һүҙҙәре һәр осраҡта девизыбыҙ булды.

"Шиғриәтебеҙ – милләтебеҙҙең рух көҙгөһө ул" тигән ҡараш һәр ҡулъяҙманы тикшергәндә лә иҫкә төшөрөлдө. Классик шиғриәттән өйрәнергә, интеллектуаль кимәлгә өлгәшергә – талаптар шулай булды. Төрлө автор, төрлө ҡулъяҙма... Түҙемлек тә, тотанаҡлыҡ та кәрәк ине. Хупланмаған осраҡта ла аңлы авторҙар бер ҙә генә лә күңеле кителеп китмәне. Йәлләп кенә, ташламалар яһап ҡына ултырырға беҙгә шиғриәттең киләсәген уйлау рөхсәт итмәне. Ыңғай баһа алыусылар ҙа байтаҡ булды. Уларҙың ҡулъяҙмаларын "Китап" нәшриәте "Йәштәр тауышы" серияһында сығара килде.

Былтыр ғына ла тиҫтәләгән ултырыш үткәрелде. Бер күсмә ултырыш Стәрлетамаҡта ижади конференция төҫөн алды. Шундай уҡ конференция ике көн буйы Учалыла булды. Фәнил Бүләков, Мөнир Иҡсанов, Урания Вахитова, Гөлнара Яҡшыбаева, Резеда Шәрифуллина, Рәшит Зәйнуллиндарҙың йыйынтыҡтары баһаланып ҡына ҡалманы, башҡорт, урыҫ, донъя әҙәбиәте миҫалында ҙур һәм яуаплы фекер алышыуҙар булды.

Секцияла шулай уҡ Ырымбурҙан Дауыт Амангилдиндың, Силәбенән Ҡамса Мортазиндың, Медногорскиҙан Риф Дауыттың йыйынтыҡтары ҡарап хупланды, китап нәшриәтенә юл алды.

Шиғриәт секцияһы үҙенә күрә рухи-эстетик тәрбиә биреү, ижади тәжрибәне уртаҡлашыу, шәхесте асыу, үҫтереү мәктәбенә әүерелде, тип әйтә алам. Киләсәктә бигерәк тә күсмә семинарҙар, конференцияларҙы йышыраҡ үткәреү, билдәле шағирҙарҙың ижади хисап биреүен ойоштороу файҙалы булыр.

Был тәңгәлдә һүҙҙе түңәрәкләп, яңынан һайланасаҡ секцияға уңыштар теләргә генә кәрәк.

Яңырыштар булырға тейеш. Иман ғына яңырмай ул. Донъя яңы, йәш көстәр менән алға бара. Бөтөнөһө лә һәйбәткә, бәрәкәткә булһын.

Ә шиғриәт шулай уҡ заманса яңырыштар кисерер. Үрҙәр артында ла үрҙәр бар бит. Нигеҙебеҙ ныҡлы. Ҡаҙнабыҙ затлы. Берҙәмлектәр ҡаҡшамаҫ. Беҙҙең барыбыҙҙы ла шул бер үк һорау һәр саҡ ҡуҙғытып, йөрәкһетеп торор: рух илсеһеме шағирҙар? Тормошто – әҙәбиәткә, әҙәбиәтте – тормошҡа. Һүҙ оҫталары тарафынан рухи юғарылыҡтар ошо юлда яуланыр һәм һаҡланыр.

**Сабир ШӘРИПОВ,**
**проза секцияһы рәйесе**

# Бары ла, юғы ла – үҙебеҙҙеке...

Проза секцияһының отчет докладында айырым әҫәрҙәргә, бәғзе авторҙарҙың яҙыу манераһына, юғалтыу-табыштарына оҙон-оҙаҡ туҡталмаҫҡа иҫәбем. Берҙән, йыллыҡ йыйылыштарҙа байтаҡ анализ яһалды, өҫтәүенә, ваҡытлы матбуғатта ла, теле-радио сығыштарында ла прозабыҙ торошо, уның көнүҙәк проблемалары әленән-әле яҡтыртылып тора. Бары менән – байрам, сөнки бары ла, юғы ла – үҙебеҙҙеке, үҙебеҙҙең ҡаҙаныш йә кәмселек. Икенсенән, ҡайһы бер ҡәләмдәштең ижадына теләк юҫығында ғына дәғүә белдер – һеркәһе һыу күтәрмәй, йылдар буйы кенә тотасаҡ, үпкә һаҡлаясаҡ. Өсөнсө сәбәп тә бар, һәм быныһы әһәмиәтлерәк тә... Ғилләһе шунда: һуңғы осорҙа «башҡорт прозаһы барыбер ҙә йомшағыраҡ» тигән һынамыш, хатта ки ғәмләндергес, сәмләндергес баһа эфирҙан да яңғыраны, ташҡа ла баҫылғыланы. Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта әңгәмәләшәйек, тейешенсә булдыра алманиһәм, һеҙ ярҙамға килерһегеҙ, тип өмөтләнәм.

Бигүк күңелгә ятып бөтмәгән, бигәйбә, пессимистик характеристика менән ҡапылғара килешергә лә, килешмәҫкә лә мөмкин. Шәхсән килешмәү яғындамын. Сөнки тоҡос ҡына һөйләмдән торған ҡаты ҡылыҡһырлау бер ниндәй күҙәмәнән дә дәлилләнмәгән, орҙо-бәрҙерәк сәпәлгән. Аҡты аҡ, ҡараны ҡара тигәндә лә ниндәйҙер раҫлау, таяныу нөктәһе булырға тейеш. Әлеге баһаның томанлы икәне тағы бер асыҡлыҡ һорай: ҡайһы осорға ҡарай һуң йомшаҡлыҡ? Уҙған быуатҡамы, хәҙергеһенәме, тигәндәй. Улайға китһә, совет осоронда үҙебеҙҙә ҡат-ҡат баҫылған, етмәһә әллә нисәмә телдәргә тәржемә ителгән романдар, повестар, тотош Союз йыйынтыҡтарына, альманахтарына ингән хикәйәләргә ни һан?! З. Биишева трилогияһы, Һ. Дәүләтшина, Шакир Янбаев, Ә. Хәкимов, Р. Солтангәрәев әҫәрҙәренә... Мәскәүҙә Я. Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары»ның рус телендә икешәр, өсәр йөҙ мең тираж менән өс мәртәбә баҫылып таралыуы, художество кимәленә дәғүә белдергән хәлдә лә, элекке автономия һәм совет иле күләмендә мәҙәни күренеш булды лаһа. Тиҙҙән тотош Рәсәй 1812 йылдағы Ватан һуғышының 200 йыллығын патриотик елкенеү менән билдәләргә йыйынғанда, ошо дилогияның ҡәҙере артып, абруйы ҡабат балҡый түгелме? Фашистик ҡара яуҙы айбарлы ҡайтарыуға, армия һәм тыл ҡаһарманлығына арналған прозабыҙ ҙа уҡымлы, патриотик рухлы, унан һуңғы

осорҙағыһы ла – массовый уҡыусының күңел кәштәһендә. Ҡазанда 15 йыл эсендә, ҡәрҙәш татар теленә тәржемә ителеп, «Каләмнәр туганлыгы» серияһында 30-ҙан ашыу китап сыҡҡан һәм шуның яртыһы сәсмәүер икән, был да прозабыҙҙың ҡеүәһен күрһәтә. Бәлки, егерме беренсе быуат башынан бөгөнгәсә ижад ителгән прозаға ҡарата төбәлгәндер үрҙәге баһа? Булыуы ихтимал, шаңҡытҡыс реформалар бихисап һүҙ оҫталарын ярайһы албырғатты, күптәр ниндәй тема, ҡайһы осор, ниндәй герой, ниндәйерәк идея-йөкмәтке һайлау тәңгәлендә яйыраҡ ҡуҙғалды, үкенесле, был һүлпәнлек һаман да үҙен һиҙҙертә.

«Кинйә» роман-эпопеяһының (Ғәли Ибраһимов) өсөнсө китабын, «Ҡанлы бәхет» (Суфиян Поварисов), «Яңы башҡорт» (Флүр Ғәлимов), «Һәҙиә» (Гөлсирә Ғиззәтуллина), «Аслыҡ» (Рәлис Ураҙғолов), («Ҡатындар») Гөлнур Яҡупова романдарын, халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың яңы редакциялағы томдарын, Талха Ғиниәтуллин, Әмир Әминев повестарын, Ғайса Хөсәйенов фәлсәфәләрен, Йыһат Солтанов тарихнамәһен, Барый Ноғоманов, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Рәшит Низамов, Хәбир Дауытов, Мәүлит Ямалетдин, Ринат Камал, Хәйҙәр Тапаҡов, Түләк Ғирфанов, Мөхтәр Сабитов, Лира Яҡшыбаева, Фәниҙә Исхаҡова, Иҙрис Ноғоманов, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Фәрзәнә Аҡбулатова, Мөҙәрис Багаев, Рәсүл Сәғитов, Мөнир Ҡунафин, Дамир Шәрәфетдинов, Нияз Алсынбаев, Рәйлә Сабитова, Рәмилә Торомтаева, Рәзилә Рыҫҡужина һ.б. әҫәрҙәрен күҙ уңында тотһаҡ, ҡыуаныс-маҡтаныстар ҙа ярайһы. Бына бит, исем-шәрифһеҙ отчет яралмай шул. Кемдәрҙеңдер исеме төрөк, инглиз баҫмаларында, «Дружба народов», «Наш современник», «Урал», «Бельские просторы» журналдарында донъя күрҙе, бәғзе авторҙар төрлө кимәлдәге наградалар, премиялар алды, ҡайһы бер проза сәхнәләштерелде йә иһә фильм сценарийы итеп файҙаланылды. Был йәнгә рәхәт теҙмәне ихлас дауам итергә мөмкин.

...Һуңғы осорҙа йыш уҡ ҡулланыла башлаған «әҙәби фекер» тигән термин әҙип күңелендәге уйланмыштан (замысел) алып ул ижад иткән әҫәрҙең таралмышына (реализация) һәм уҡылмышына тиклем арауыҡты үҙ эсенә ала. Ошо йәһәттән профессор Роберт Байымов мәрхүмдең «Каруан килә Бағдадтан» һәм прозаик, төркиәтсе Ғәлим Хисамовтың «Аһура Мазда» романдарын телгә алыу зарур. Улар уҡыусының талапсан зауығын тәрән этнографик һәм киң географик мәғлүмәттәр менән байыта. Тиҙҙән «яңыса әҙәби фекер» тип нарыҡланырлыҡ «Яңғыҙ сағыл» (Мәхмүт Хужин) эссеһының, шулай уҡ «Ҡарабаш турғай» (Ишғәли Нурғәлиев) яҙмышнамәһенең, йәғни автобиографик новелланың дауамы менән танышасаҡбыҙ. Ике әйберҙең дә һимməте хаҡында ике йыл әүәлге йыйылышта кәлимә әйтелгәйне инде. Иң мөһиме, улар хаҡында уҡыусыларҙан байтаҡ хуплау хаттары алдыҡ. Әлбиттә, секциябыҙҙың үҙәге һәм йөҙө булған «Ағиҙел» адресына.

Һүҙ ыңғайында: һуңғы өс йылда «портфелебеҙ» өс романға, ете повесҡа, утыҙлаған хикәйәгә тулыланды. Тимәк, һан яғынан аҙмы-күпме үсеш күҙәтелә, сифат яғынан да алға китеште тоҫмалларға мөмкин. Дәлилләйек. Ошо арала тиҫтәләгән яҙыусыға, әҙәбиәт белгесенә рәсми булмаған һорау менән мөрәжәғәт иттем: прозабыҙҙа ыңғай үҙгәреш бармы? Күпселек, бар, тине һәм беренсе планға тасуирлау стилистикаһының байый, камиллаша барыуын билдәләһә, әҙселек форма, композиция тәңгәлендә яңылыҡтарға ынтылышты, хәбәр һөйләүҙән арынып, һүрәтләү сараларының баҙыҡланыуын, психологик картиналарҙың ишәйеүен хупланы, ҡалғандар иһә башҡа жанрҙар менән сағыштырғанда күберәк тиражда нәшер ителгән проза китаптарының сауҙала йылдамыраҡ һатылыуын белдерҙе.

Шуныһы ҡәнәғәтләндерә: Көнбайыш Европаның имәнес әҙәбиәтенә эйәреү ят һәм ситен беҙгә. Юғиһә, Рәсәйҙең теге йәки был мөйөшөндә лә шаҡы-шоҡо яҙыла, тарала, тимәк, үҙ уҡыусылары табыла тора. Мин уларҙың айышына ғына

ишара яһамаҡсы: ҡала романы, мөхәббәт фәнтәзийе, ҡатын-ҡыҙ йә иһә ир-ат өсөн әҫәр һ.б. Башҡортостан әҙиптәре ундай арзан, аҙғын, көс ҡулланыуға ҡоролған сюжет менән мауыҡмаҫ, киләсәктә лә ундай яҙыҡ аҙымдан иманыбыҙ һаҡлар, тип ышанғы килә. Беҙҙекеләрҙең артелгә ойошоп, коммерция маҡсатында детектив-фәлән яҙғаны булманы, булмаҫ та.

Ләкин... «ләкин»дәр ҙә байтаҡ шул. Иң бәкәлгә һуҡҡаны – тематика ярлылығы, проблема һайлығы; һайлылығынан бигерәк, теңкәгә тейгән, үҙәккә үткән проблемаларҙың өҫтән-мөҫтән генә сағылыуы. Әйтәйек, конкурстар иғлан ителеп тә, беҙҙә алкоголизмды, наркоманияны һәм замананың бүтән әшәкелектәрен күҙгә элгәндә лә фәнгә, халыҡ педагогикаһына таянып, кәрәгенсә һүрәтләргә һәләтебеҙ етмәй. Коррупция, криминал, уйыномания, енси хәсислек мәсьәләләрен күрмәгән, күрергә теләмәгән хәлдә лә, беҙгә урбанизация йоғонтоһон ҡәләм осона алырға ваҡыттыр. Ауылдарыбыҙ нигеҙе ниңә ҡорой? Ҡалаларыбыҙ ни хәлдә? Себерҙә һәм башҡа тарафтарҙа, сит илдәрҙә ереккән милләттәштәребеҙ нисек йәшәй? Эйе, һанап бөткөһөҙ темалар ҡуя тормош, беҙгә тик дәртләнергә, әүҙәмләнергә генә кәрәк. Бер төрлөлөк теңкәгә тейә, ағай-эне, ә был зәхмәт уҡыусыларыбыҙҙы нәфис әҙәбиәттән биҙҙертә бит. Ысынлап та, күпме повестар һәм хикәйәләр бер осо ителгән һөйөү «өсмөйөшө»нә, тарҡалған ғаилә, әйтелмәгән мөхәббәт, фирма-фәләндә, зат-нәҫелдә мөлкәт бүлеү ише бушаҡ, көндәлек, ҡәҙимге мелодраматик ваҡиғаларҙы тасуирлай – һанарға керешһәк, осона сыға алмабыҙ. Тимәк, ниндәйҙер әҫәргә тотонорҙан алда, ошо ижад емешем хәжәтме хәҙерге уҡыусыға, рухиәткә берәй фәһемле биҙәк өҫтәй алырмы ул, тип төптән уйланыу фарыз.

Бер төрлөлөк, тематик һәм проблематик оҡшашлыҡ геройҙар галереяһын да ярлыландыра. Уҡытыусы, механизатор йә бригадир, уҙа китһә, теге йәки был учреждение директоры, һатыусы йә лесник, ауылынан ситкә сыҡмаған әбекәй йә ил күргәнде күргән аҡһаҡал, замана зимагорҙары, еңел-елпе йәшәргә ынтылған йәш-елкенсәк... Әлбиттә, йәшенә, милләтенә, һөнәренә, социаль булмышына ҡарамай, һәр замандаш, һәр һөнәр эйәһе әҙәби герой була ала, әммә мин, тематик ярлылыҡ үҙе үк геройҙар төркөмөнөң шыйыҡлығын, йәғни типикһыҙлығын хасил итә, тип ҡабатламаҡсымын. Ҡышын шағир Ирек Кинйәбулатов менән әҙәбиәтебеҙҙе яратҡан һәм аңлаған, һәр яҡтан апаруҡ алдынғы район хакимиәте башлығы менән әңгәмә ҡорғайныҡ. Шунда хөрмәтле чиновник урынлы ғына өгөт ысҡындырҙы: «Ниңә китаптарҙа хакимиәт вә хөкүмәт әһелдәренең образы үтә һирәк?..»

Әлбиттә, район йә ҡала түрәләренең дә төрлөһө бар, мәгәр «ниңә?» тигән баяғы һорауҙың ғәли йәнәптәрҙән ҡуйылыуы ла бик тәбиғи, минеңсә. Күпме оло эштәр атҡарыла йә атҡарылмай министрҙар, депутаттар, йәмәғәтселек лидерҙары, завод йә трест, ул-был фонд, вуз, төҙөлөш, сәнәғәт, бизнес, дин, фән һ.б. тармаҡ етәкселәре тарафынан, беҙ иһә ундай әһелдәрҙең заманса образын тыуҙырырға әллә ҡыймайбыҙ, әллә кәрәк икәнлеген аңлап етмәйбеҙ. Әгәр хәтерләһәк, уҙған быуатта нисәмә «беренселәр»ҙең, «сам»дарҙың йә «зам»дарҙың, ҡыҫҡаһы, төрлө кимәлдәге түрә-ғараның портреттары ҡабарынҡы ғына яҙылды. Дөрөҫ, һирәктәренә генә ҡара яғылды, күптәре коммунистик ҡараштан ыңғай герой, һөйкөмлө персонаж дәрәжәһенә күтәрелде, шуғамылыр зауыҡлы уҡыусы иҫендә әллә ни ҡалманы, ә хәҙерге йәшерәк быуын уларҙы бар тип тә белмәй. Был хаҡта оҙон-оҙаҡ хәбәр сурытмайса, барыбер ҙә прозабыҙға «тәүәкәллек етеңкерәмәй» тигән баһалама таман. Ерҙәребеҙ, урмандарыбыҙ, һыуҙарыбыҙ оятһыҙ бизнес баҙарында йәшерен-боҫорон һатылғанда – уйҙарҙан уйылаһың: урындағы халыҡтарға ултырып иларлыҡ ер ҡалырмы һуң? Социаль тигеҙһеҙлек, рухи маяҡтарҙы нәфсе, матди бол-мал туплау идеологияһы баҫып

барған бер дәүерҙә, ирекһеҙҙән, «үтә байҙар һары бал эсә, ярлы ятып һыу эсә...» тигән ябай ғына, ләкин мәғәнәһе әрнешле йырҙар ҡабат яңғырай башлар кеүек.

Отчет осоронда секциябыҙ ун алты протокол тултырҙы, шуларҙың күбе – ҡульяҙмалар буйынса. Дөйөм һүлпәнлектер – бер генә роман ҡаралды! Хупланған прозаның етәүһе китап рәүешендә нәшер ителгән, бәғзеләре журналдарҙа, Интернет селтәрендә сыҡҡан, нисәһелер радиоэфирҙан тыңлана. Секция юллаған алты авторға Яҙыусылар союзының ағзалыҡ билеты тапшырылды. Сибайҙа былтыр уҙған йәш прозаиктарҙың республика семинарында ун ҡульяҙма анализланды, бөтәһе лә тиерлек «йәшел ут» алды, өс ҡульяҙманың «Йәштәр тауышы» нда быйыл уҡ донъя күреүе ихтимал. Серияның киләһе сығарылышына кемдәр өмөтләнә, кемдәрҙе өгөтләрбеҙ – әлегә һорау асыҡ ҡала. Әйтәгүр, бының менән мин йәш прозаның киләсәгенә йәнә бер мәртәбә борсоулы ишара яһайым.

Эйе, яңы идара, секцияның яңыртылған бюроһы йәш прозаға айырыуса иғтибар йүнәлтергә тейеш. Семинарҙар уҙғарылһын, ижади командировкалар, мастер-кластар ойошторолһон, өмөтлө ҡәләмдәр өсөн аҙмы-күпме грант йә стипендия түләү һымағыраҡ дәртләндереү ҡулланылһа ине, һәйбәт прозабыҙ рекламаланһын, башҡа телдәргә тәржемәләнһен – һәммәһе лә файҙаға, һәммәһе лә ҡулдан килерлек, тик проза мәктәбенә йәшерәктәрҙе, унан бигерәк төрлө һөнәр эйәләрен йәлеп итеү отошло буласаҡ. Юғиһә, һуңғыһында семинарсыларҙан ҡырҡты ҡыуған ҡатын-ҡыҙ һикһән процентты тәшкил итте, һөнәри яҡтан да ҡойтолоҡ шәйләнде: уҡытыусылар һәм журналистар ғына йыйылды.

Заманында прозабыҙға Азат Мағазов штурмовикта һауаларҙан шоңҡарҙай шыҡыйҙы, Хәкимйән Зарипов суд хеҙмәткәре мундирында тотонһа, Камил Йыһаншин тайғанан яурынына мылтыҡ аҫып, һунар саңғыһына баҫып атланы, ә Рәшит Солтангәрәев «Йылы ямғыр» повесын нефтселәр араһынан алып ҡайтты. Рамаҙан Өмөтбаев уҙаман дәүләт вазифаһын үтәгәндә тәүге хикәйәһен яҙһа, Әмир Гәрәев илһамында диңгеҙ повестары бескозырка кейгән, Хәбир Дауытовта сауҙала ҡайнашҡан сағында яралды. Хәҙер хаҡлы ялдағылар – Учалынан йәмәғәт эшмәкәре Спартак Ильясов йөрәк ҡола менеп, Белореттан металлург Мансур Һиҙиәтов тау-урмандарҙа электротрасса ботап, Сибайҙан Тимерғәле уҙаман Бүләков сиҙәм сәхифәләре, Кушнаренконан Радик Әхмәтов ауыл хужалығы кадрҙарына дәрес биреүсе булараҡ проза майҙанында бәйге тотмаҡсы.

Башҡа республикаларға һәм өлкәләргә ҡарағанда, Башҡортостаныбыҙ матбуғатында төрлө айыштағы проза сағыштырмаса күберәк баҫыла. Журналдар, гәзиттәр әленән-әле конкурстар ойоштора, уларҙа танылғандарына йәнәш өрйәңы автор ҙа апаруҡ өлгөргән ижад емештәре менән сығыш яһай. Алаһы ла, ҡолаһы ла, тигәндәй, бешеп етмәгән емештәр ҙә осраштыра, был инде үрҙәге «йомшағыраҡ...» тигән баһаламаға үҙе бер сәбәпсе. Осрай, ғәҙәти мәҡәлә йә һүрәтләмә хикәйә, юҡ-бар очерк – повесть, ҡайһылары хатта роман күләймәһе менән баҫыла, тимәк, редакцияларҙың әҙәбиәт бүлектәренә талапсанлыҡты, мөхәррирлекте күтәрергә кәрәк.

Үҙәк каналдарҙа һәм прессала «властарға ышаныс», «чиновниктарға ихтирам», теге йәки был партияларға «эйәреү» кеүек сетерекле юҫыҡта дискуссиялар ҡужғыған бер хәлдә, әйҙәгеҙ, ризалашайыҡ: күп милләтле әҙәбиәтебеҙ ошоғаса властелиндарға әллә ни ҡаршы барманы, бармаһын да, шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр даим эшмәкәрлеген ыңғайға һыпырыу электән килешмәне, киләсәктә лә килешмәҫ. Иң мөһиме, йәмәғәтселек хәрәкәтен һиҙгер, фәйләсуфтәр ҡоласы менән, мәшһүр Мостайҙар, Ғамзатовтар васыят иткәнсә, халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлап, алдан атлаусы булайыҡ. Өҫтәр инем: фальшивка яһаусы йәки мыжыҡ ялыусы түгел, ә ихлас, илһөйәр, телһөйәр, илгиҙәр яҙыусы булайыҡ. Шул саҡта, прозабыҙ былай, прозабыҙ тегеләй, тип борсолмабыҙ, амин.

**Наил**
**ҒӘЙЕТБАЙ,**
**драматургия секцияһы рәйесе**

# Пьесалар бар, тик кәртәләр ҙә байтаҡ

Башҡорт драматургияһы, башҡа әҙәби жанрҙар һымаҡ уҡ, әүҙем үҫешә. Һуңғы биш йыл эсендә күҙгә күренерлек уңыштарға ла ирешелде, шул уҡ ваҡытта хәл итәһе проблемаларыбыҙ ҙа етерлек. Ғәҙәттәгесә, драматургия менән беҙҙә танылған шағирҙар, прозаиктар шөғөлләнә.

Талантлы шағирыбыҙ Салауат Әбүзәр кеше тәбиғәтенең асылы, йәшәү мәғәнәһе тураһында фәлсәфәүи, поэтик яңғырашлы пьеса ижад итте. Шуға ла борон-борондан кешелек донъяһын уйландырған мәсьәләләрҙе күтәргән пьесаны бер юлы ике театрҙың репертуарына индереүенә һәм ҙур аншлаг менән барыуына ғәжәпләнәһе түгел.

Мәрйәм Бураҡаеваның фольклор нигеҙендә ижад иткән пьесаһы башҡорт халҡы ғөрөф-ғәҙәттәренең ғәҙеллеген, матурлығын данлай. Стәрлетамаҡ башҡорт театры сәхнәһендә ҡуйылған был әҫәр, Төркиәләге фестивалдә ҡатнашып, дипломант булды. Бер нисә концерт тамашалары өсөн сценарийҙар авторы булараҡ уңышлы сығыш яһап, Зөһрә Бураҡаева сәхнә закондарын яҡшы белеүен күрһәтте.

Прозаик Флүр Ғәлимов, сәсмәүерҙә әүҙем ижад итеү менән бер рәттән, үҙен драматургияла ла һынап ҡараны – Стәрлетамаҡ театрында ҡуйылған нескә юморлы пьесаһы тамашасылар тарафынан йылы ҡабул ителде.

2000 йылдар башында шағирәләр Тамара Ғәниева, Гөлшат Әхмәтҡужина, Светлана Чураева, Лариса Абдуллина, журналист Мөнир Ҡунафин бер нисә пьесаһы менән ҡыуандырып та, өмөтләндереп тә ҡуйғайнылар. Һуңғы арала уларҙың сәхнә донъяһынан бер ни тиклем алыҫлашып тороуына ҡарамаҫтан, беҙ уларҙан яңы пьесалар көтөп ҡалабыҙ.

Таңсулпан Ғарипова ла драматургия өлкәһендә емешле ижад итә. Бер нисә пьесаһы Сибай дәүләт драма театрында ҡуйылғайны, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында сәхнәләштерелгән «Ғилмияза»һы ла йылы ҡабул ителде, балалар өсөн тәғәйенләнгәне Мәҙәниәт министрлығы тарафынан ойошторолған конкурстарҙың береһендә икенсе премияға лайыҡ булды.

Рәсимә Ураҡсина, иң һыҙғанып балалар өсөн пьесалар ижад итеү менән бер рәттән, театрҙарыбыҙҙың репертуарын сит ил классиктары пьесаларының уңышлы тәржемәләре менән байытты. Сәрүәр Сурина балалар һәм ҡурсаҡ театрҙары өсөн пьесалар әүҙем ижад итә.

Шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙина бөгөнгө ғаилә һәм мәктәп проблемаларын күтәргән ике пьеса яҙып ҡыуандырҙы. Шағир Айҙар Хөсәйенов, ҡыҙғаныҫҡа

ҡаршы, беҙҙе үҙенең яңы пьесалары менән ҡыуандырмай. Иҫегеҙҙәлер, уның бер пьесаһы билдәле драматург Николай Коляда тарафынан ойошторолған «Евразия» конкурсында ҡатнашып, дипломант исемен яуланы һәм олпат сәхнә мәтрының үҙенән хуплау алғайны. Айҙарға әүҙемерәк булырға кәңәш итер инем. 2008 йылда Талҡаҫта уҙғарылған семинарҙа барлыҡ режиссерҙар Сабир Шәрипов менән Радик Өмөтҡужиндың пьесаларына ыңғай баһа биреп, ҡулъяҙмаларын еренә еткереү өсөн авторҙарға кире ҡайтарғайны. Ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, улар һаман да эштәрен аҙағына хәтлем еткермәгән.

Хәмит Ирғәлиндың унға яҡын пьеса авторы булғанлығын, уларҙың бер нисәүһе профессиональ театрҙар тарафынан ҡуйылыуын барыбыҙ ҙа яҡшы беләбеҙ. Пьесаларының башҡалары ла сәхнәләштереүгә әҙер тиерлек, Хәмиткә ни бары сәхнә үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға ғына кәрәк.

Мөҙәрис Багаев ҡатмарлы яҙмышлы кешеләр тураһында хикәйәләр оҫтаһы булараҡ танылыу яулаған. Драматик үткерлеге, киҫкен конфликтлылығы менән улар – ҡойоп ҡуйған әҙер пьесалар, тип әйтергә була. Ниһайәт, Мөҙәрис ике хикәйәһенән дөйөм бер пьеса ижад итеп, театрҙа сәхнәләштерелеүенә өлгәште.

Сибайҙа йәшәүсе Зөһрә Фәйзуллина менән Әминә Яхиналарҙың урындағы театрҙа бер нисә пьесаһы ҡуйылғайны. Уларға ҡыйыуыраҡ булырға һәм әҫәрҙәрен башҡа театрҙарға ла тәҡдим итеп ҡарарға кәңәш итер инем.

Тәжрибәле драматургтарыбыҙ ҙа яңы пьесалары менән ҡыуандырҙы. Рәшит Солтангәрәевтың киң билдәле «Татар менән башҡорт» хикәйәһе фәлсәфәүи тәрәнлеге, актуаллеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Драматург Рәлиф Кинйәбаев хикәйәне сәхнә закондарына ярашлы махсус эшкәртеп, ваҡиғалар өҫтәп, конфликтын көсәйтеп пьеса әҙерләй. Иғлан ителгән Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылында был әҫәр халыҡтар дуҫлығын нығытырға саҡырыуы менән уғата әһәмиәтле.

2007 йылда Рәлиф Кинйәбаевтың Өфө дәүләт «Нур» театрында ҡуйылған «Гүргә инер сер ине-2» яңы пьесаһы сәхнәләштерелде. Был әҫәрендә автор аҡса ҡолона әүерелә барған кешеләрҙән торған бөгөнгө йәмғиәт ҡоролошоноң серек тәбиғәтен фашлай.

Владимир Жеребцовтың Сибай театрында сәхнәләштерелгән «Һәйкәл» пьесаһы хаҡында айырым туҡталып китеү зарур. Автор ҙур оҫталыҡ менән, типик ваҡиғалар ярҙамында үткер проблемалар ҡуя һәм тамашасы иғтибарына әҫәрҙең идеяһын еткерә алыуға өлгәшә.

Флорид Бүләковтың «Мәскәү – Васютки» пьесаһы башҡорт драматургияһы фестивалендә иң яҡшыһы тип табылды.

Тәжрибәле драматургыбыҙ Нәжиб Асанбаевҡа быйыл 90 йәш тула. Шөкөр, бөгөн дә ағайыбыҙ егеттәрсә йәш һәм дәртле. Публицистикала ла, драматургияла ла берҙәй әүҙем эшләгән авторыбыҙҙың Стәрлетамаҡта, Туймазыла, Сибайҙа, Өфө «Нур» татар дәүләт театрында пьесалары сәхнәләштерелде. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Нәжиб Асанбаевтың пьесаһы буйынса ҡуйылған «Зәки Вәлиди» спектакле Башҡортостандың театр сәнғәте донъяһында оло ваҡиға булды. Биш йыл эсендә Салауат башҡорт дәүләт драма театры дүрт пьесаһын сәхнәләштерҙе. Ошо арала был театр Нәжиб Асанбаевтың йәнә бер әҫәрен тамашасы иғтибарына тәҡдим итте. Беҙгә, сағыштырмаса йәшерәк яҙыусыларға, ағайыбыҙҙан өлгө алырға кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа сәхнәләштерелгән пьесаларҙың ҙур булмаған исемлеге шуның менән тамам.

Яңыраҡ ҡына бер ихтирамлы театр эшмәкәре «Башҡортостан» гәзитенә биргән интервьюһында: «...республикала драматургтар юҡ»,– тигән яңғырауыҡлы фекерен белдерҙе. Күп кенә актерҙарыбыҙ һәм режиссерыбыҙ һымаҡ уҡ, ул да яҙыусыларыбыҙҙың пьесаларын уҡымай. Уҡығыһы килмәй, уға шулай

уңайлыраҡ. Шул уҡ ваҡытта алдан телгә алғандарҙың да, телгә алмаған яҙыусыларҙың да өҫтәлдәрендә әҙер пьесаларының ятыуын беләм. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, Мәҙәниәт министрлығы тарафынан уҙғарылған конкурстарҙа бихисап авторҙарҙың ҡатнашырға теләк белдереүе быға асыҡ миҫал булып тора. 2009 йылда БР-ҙың Мәҙәниәт министрлығы үтенесе буйынса 31 яҙыусы араһында үткәрелгән һорау алыу шуны күрһәтте: баҡтиһәң, әҙиптәребеҙҙә һикһәндән ашыу тамамланған пьеса ята. Тимәк, әҙер пьесалар бар, ә театрҙар ҡыҙыҡһыныу белдермәй. Алда телгә алынған конкурстарҙа 120-нән ашыу драматургик әҫәр ҡатнашты, шуларҙың ни бары икәү-өсәүһе генә рампа яҡтылығын күреү бәхетенә ирешә алды. Йомғаҡлап әйткәндә, әҙиптәребеҙҙең ижади портфелендә сәхнәгә барып етмәгән 200-ҙән ашыу пьеса ята. Был пьесаларҙың авторҙары исемлеге араһында башлап яҙыусыларҙың да, билдәле яҙыусыларҙың да илленән ашыу фамилияһы бар. Драматургия секцияһы председателе булараҡ, пьесаларҙың барыһын да уҡ булмаһа ла, күпселеген уҡып сыҡҡанмын. Дөйөм алғанда уларҙы, бер аҙ төҙәтмәләр индергәндән һәм эшкәрткәндән һуң, сәхнәләштерергә мөмкин, тигән фекерҙәмен. Әлбиттә, драматургтарға тәжрибә етеңкерәмәү арҡаһында, пьесаларҙың кәмселектәре лә юҡ түгел. Шулай ҙа, театрҙарҙың тырышлығы һәм теләге булғанда был етешһеҙлектәрҙе төҙәтергә мөмкин булыр ине, тип әйтергә нигеҙ бар.

Ни өсөн пьесалар сәхнәләштерелмәй? Бында бер нисә сәбәп бар. Беренсенән, Мәҙәниәт министрлығы театрҙарҙың репертуарын даими күҙәтеп барыуға күп көс һалманы, афишаларҙа башҡорт авторҙары фамилияларының күпселекте тәшкил итеүен талап итмәне. Ни өсөн Мәҙәниәт министрлығы был мәсьәлә менән шөғөлләнергә тейеш, тиһегеҙме? Сөнки беҙ Башҡортостан Республикаһында йәшәйбеҙ, башҡорт мәҙәниәтенең, әҙәбиәтенең, тимәк, драматургияһының да үҫешенә булышлыҡ итергә тейешбеҙ. Башҡортостандан ситтә был проблема менән бер кем дә шөғөлләнмәйәсәк тә, уны хәл дә итмәйәсәк. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был хәҡиҡәтте күп кенә театр эшмәкәрҙәре аңламай һәм аңларға ла теләмәй. Бөгөн режиссерҙар пьесаларҙы сәхнәләштереү кимәленә еткереү маҡсатында драматургтар менән берлектә эшләргә теләмәй. Өфөнөң, Стәрлетамаҡ рус театрҙарының, баш ҡалабыҙҙың Мостай Кәрим исемендәге йәштәр, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрҙары рус труппаларының биш йыл арауығындағы репертуарында бер башҡорт авторының пьесаһы күренмәне. (Юбилей айҡанлы махсус ҡарар нигеҙендә ҡуйылған Мостай Кәримдең пьесалары иҫәпкә инмәй.) Был театрҙар сәхнәләренә башлап ҡәләм тирбәтеүсе авторҙарҙы түгел, әҫәрҙәре Рәсәй, Татарстан, Урта Азия, сит ил сәхнәләрендә уңышлы ҡуйылған тәжрибәле, олпат драматургтарҙы яҡын ебәрмәй.

Йыл эсендә беҙҙең театр сәхнәләрендә илленән ашыу спектакль ҡуйылһа, шуларҙың ни бары 10 –15-е генә беҙҙең авторҙарҙыҡы. Һандар теленә күсерһәк, улар 20 – 25 процентты тәшкил итә. Бик аҙ был. Татарстанда, мәҫәлән, татар драматургтарының әҫәрҙәре театрҙар репертуарының етмеш процентын тәшкил итә.

Алдан әйтелеп кителгәнсә, пьесалар йыш ҡына ҡайтанан эшкәртелеүгә мохтаж. Режиссер театр штатында драматург менән пьеса өҫтөндә бергәләп эшләү һәм билдәле бер кимәлгә еткереү өсөн тора ла инде. Театрҙар сәхнәләштереү өсөн тулыһынса әҙер пьесалар менән генә эшләргә теләһә, штатты ҡыҫҡартып, ситтән саҡырылыусы режиссерҙар менән эшләр ине. Мостай Кәрим, Әсғәт Мирзаһитов, Нәжиб Асанбаев, Флорид Бүләков кеүек олпат драматургтарҙың һүҙенә ҡарағанда (по признанию), уларҙың пьесалары театр режиссерҙары менән бергә эшкәртелгәс кенә тамашасы иғтибарына тәҡдим ителә. Төрлө замандарҙа йәшәгән рус драматургтары Максим Горький, Антон Чехов, Алексей Арбузов, Виктор Розовтар мемуарҙарында ошо хаҡта яҙа.

Пьеса өҫтөндә бергәләп эшләү теләге тап театр етәкселегенән, режиссерҙарынан килергә тейеш, ләкин уларҙа был теләк Мәҙәниәт министрлығы репертуарҙы ентекле тикшергәндән һәм унда башҡорт авторҙарының да булыуын талап иткәндән һуң ғына тыуасаҡ. Тап шунда ғына режиссерҙар башҡорт драматургтарына йөҙө менән бороласаҡ.

Афишаларҙа яңы исемдәрҙең күренмәүенең йәнә бер сәбәбе – йәш драматургтар семинарының уғата һирәк уҙғарылыуында.

Мәҙәниәт министрлығы 1992 йылдан алып 1996 йылға тиклем йәш драматургтар семинарҙарын Талҡаҫ күле буйында йылына ике тапҡыр берәр аҙналап үткәрһә, 1997 йылдан алып 2001 йылға тиклем был семинарҙар ике аҙнаға һуҙыла һәм йылына бер тапҡыр үткәрелә. Шулай итеп, 1992 йылдан алып 2001 йылға тиклем башлап яҙыусы драматургтарҙың пьесаларын тикшергән һәм билдәле бер кимәлгә еткереүгә булышлыҡ яһаған барлығы 14 семинар уҙғарыла. Семинарға Рәсәйҙең билдәле театрҙарында эшләүсе режиссерҙарҙы, драматургтарҙы, театр белгестәрен саҡыра инек. Эшебеҙҙең һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәне: туҡһанынсы йылдарҙа афишаларҙа егерменән ашыу яңы исемдәр барлыҡҡа килде.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был семинарҙарҙың файҙаһын баһаламаусылар ҙа табылды, шунлыҡтан 2002 йылдан алып 2011 йылға тиклем, тимәк, ун йыл эсендә, ни бары өс семинар уҙғарылды. Һуңғы семинар 2008 йылда үткәйне, артабанғыһы ҡасан ойошторолор, билдәһеҙ. Семинарҙарҙың һирәкләүе яңы авторҙарҙы үҫтереү эшенә лә йоғонто яһамай ҡалманы: ун йыл эсендә ни бары өс кенә яңы исем барлыҡҡа килде: Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Салауат Әбүзәр, Флүр Ғәлимов.

Мәҙәниәт министрлығында драматургтарға гонорарҙар түләү мәсьәләһе буйынса ҡыйынлыҡтар килеп тыуыуы хаҡында ла әйтеп китеү зарур. Вәт шулай: кемдер, башҡорт драматургтары юҡ, тип зарланырға мөмкинлек таба, ә кемдер олпат драматургтарҙы министрлыҡ тупһаһын ҡат-ҡат тапатырға һәм бер ниһеҙ ҡайтып китергә мәжбүр итә.

Театрҙың һәм чиновниктарҙың драматургтар менән берлектәге эшмәкәрлеге даими һәм әүҙем булырға тейеш. Ошоно иҫәпкә алып, беҙ, БР Яҙыусылар союзы идаралығының драматургия секцияһы ағзалары, Мәҙәниәт министрлығы менән бергә театрҙарға аҡсалата премияһыҙ булһа ла иң яҡшы пьесаға автономлы конкурс иғлан итергә тәҡдим иттек. Конкурста еңгән пьеса, автор һәм режиссер тарафынан еренә еткерелгәндән һәм эшкәртелгәндән һуң, мотлаҡ рәүештә ҡуйылырға тейеш.

Шул уҡ ваҡытта Мәҙәниәт министрлығы драматургия секцияһы менән берлектә аҡсалата премия ҡаралған иң яҡшы пьесаға конкурс уҙғарырға планлаштыра. Мәҫәлән, быйыл 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған иң яҡшы пьесаға конкурс иғлан ителергә тора.

Театрҙарҙың башҡорт драматургияһына иғтибарын йүнәлтеү маҡсатында Мәҙәниәт министрлығында художество-экспертлы совет булдырылыу эше бара. Советҡа билдәле режиссерҙар, актерҙар, драматургтар, театр белгестәре йәлеп ителәсәк. Улар ҡуйылған спектаклдәрҙең художестволы кимәлен билдәләйәсәк, оҫталыҡ мәсьәләләре буйынса кәңәштәрен бирәсәк, йәш драматургтарҙың, бигерәк тә башлап яҙыусы башҡорт драматургтарының, исемдәре театр афишаларында урын алыуға булышлыҡ яһаясаҡ.

Министрлыҡҡа яңы етәкселәр килде. Улар башҡорт драматургияһының – әҙәбиәтебеҙҙең төп жанрҙарының береһенең проблемаларына төшөнөр һәм драматургия секцияһы ағзалары менән бергә уның юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеүенә йоғонто яһаясаҡ, тип өмөтләнәбеҙ.

**Факиһа**
**ТУҒЫҘБАЕВА,**
**балалар әҙәбиәте секцияһы рәйесе**

## «Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән...»

Ғаилә һәм бала, йәмғиәт һәм бала — был хаҡта халҡыбыҙ тәрән уйланып, борон-борондан берсә шатлыҡлы, берсә моңһоу йырҙар, ҡобайырҙар, әкиәттәр, риүәйәттәр ижад иткән. Уларҙың төп асылы — балаңдың, ырыуыңдың дауам итеүенә ышаныс, илеңдең таянысы булыуына өмөт.

Бала культы — ғаиләне тотоп тороусы нигеҙ ташы, шуға күрә лә бер ояла унар баланың тәрбиәләнеүе тәбиғи күренеш булған. Быға башҡорттарҙың X быуатта ислам динен ҡабул итеүе лә булышлыҡ иткән.

Әҙәбиәтебеҙҙең Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев кеүек алтын бағаналары, халҡыбыҙҙың менталитетын белгән мәшһүр әҙиптәр, Тыуған илде, тыуған ерҙе унда йәшәгән ғаилә менән бер бөтөн итеп данлаған. Олуғ ғалим-мәғрифәтсе, атаҡлы дин әһеле Ризаитдин Фәхретдинов ғаилә нигеҙҙәре ҡаҡшамаҫ булһын өсөн «Ҡыҙ балаларға нәсихәттәр», «Ир балаларға нәсихәттәр» кеүек аҫыл мираҫ ҡалдырған. Уларҙың традицияларын мәшһүр Шәйехзада Бабич, Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Төхфәт Йәнәби, Ғариф Ғүмәр, Ғабдулла Амантай, Рәшит Ниғмәти, Мөхәмәтйәров Хәй, Ғәлимов Сәләм, Мәлих Харис, Хәниф Кәрим, Ҡадир Даян, Баязит Бикбай һәм башҡа күренекле яҙыусылар дауам иткән.

Минең был исемдәрҙе тәфсирләп теҙеп сығыуыма шул сәбәпсе: бөгөн дә балалар яҙыусыларының миссияһы бик ҙур — уларға Тыуған илебеҙҙең киләсәге тапшырылған. Ләкин, үкенескә ҡаршы, мәрхүм ғалим Суфиян Сафуановтың «Башҡорт балалар әҙәбиәте тарихы» китабынан башҡа балалар әҙәбиәтенән бүтән ғилми хеҙмәт юҡ, уның тарихы ла өйрәнелмәгән. Дөрөҫ, Рәсимә Ураҡсина менән Ғәҙилә Бүләкова, балалар әҙәбиәте тарихына арналған хеҙмәт яҙып, фән кандидаттары булып китте. Уларҙың эшен дауам итеүселәр күренмәй әлегә. «Башҡорт балалар яҙыусылары» хрестоматияһын, шулай уҡ «Балалар әҙәбиәте антологияһы»н башҡорт һәм рус телдәрендә баҫып сығарыу бик кәрәк беҙгә. Уларҙа борон-борон замандағы сәсәндәр ижадынан алып бөгөнгө балалар әҙәбиәтенә тиклем тупланырға тейеш, тип уйлайым.

Балалар матбуғатының тарихы ла бик бай һәм ҡатмарлы. 1929 йылда ойошторолған «Керпе» журналынан башлап 1991 йылда сыға башлаған «Аҡбуҙат»ҡа тиклем ҙур, ғорурланып әйтәм, данлыҡлы юл үтте. Балалар матбуғатында һәр ваҡыт бала йәнле әҙиптәр эшләне, әҙәбиәттә ҙур эҙ ҡалдырҙы. Шулар араһынан Зәйнәб Биишева, Шәриф Бикҡол, Муса Ғәли, Абдулхаҡ Игебаев, Сафуан Әлибай, Булат Рафиҡов, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Мөкәрәмә Садиҡовалар ҙың исемен әйтеү ҙә етә.

Быйыл ғинуар айында «Аҡбуҙат» журналы сыға башлауға 20 йыл тулды.

Мин, уның ойоштороусыһы һәм 20 йылға яҡын эшләгән тәүге баш мөхәррире булараҡ, сабыйҙарҙа үҙаң һәм туған телгә мөхәббәт тәрбиәләүҙе төп маҡсат итеп ҡуйҙым һәм, Аллаға шөкөр, ошо йүнәлештә күп уңыштарға ирешелде. Балаға үҫештәге шәхес итеп ҡарау, уның кескәй йөрәгенә илһөйәрлек тойғоһо һалыу минең төп эш критерийҙарым булды. Башҡортостанға, Оло Ватаныбыҙ — Рәсәйгә хөрмәт һәм граждандлыҡ хистәре, әлбиттә, ғаиләнде яратыуҙан башлана икәнен белеп эш иттем. «Аҡбуҙат»тың кәңәшселәре Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев һәм башҡа бик күп әҙиптәр: «Һеҙҙең баҫмағыҙ — ул ғаилә журналы», — тип әйтә торғайны. Сөнки әле хәреф тә танымаған балаға «Аҡбуҙат»ты ата-әсәһе, ағай-апаһы, өләсәй-олатаһы уҡый бит. Күренекле яҙыусылар, ошо хәҡиҡәтте аңлап, бәләкәстәргә хатта фәлсәфәүи әҫәрҙәр ижад итте. Мостай Кәримдең әкиәт-хикәйәләре, Булат Рафиҡовтың бәләкәй күләмдәге әҫәрҙәре, «Филекәс һәм уның мажаралары» әкиәт-повесы, Рәшит Солтангәрәевтың тормошсан хикәйәләре бөгөн кескәйҙәр өсөн әҙәбиәттең алтын фондын тәшкил итә.

Атаҡлы рус тәнҡитсеһе һәм балалар әҙәбиәтенең дә теоретигы В. Г. Белинскийҙың түбәндәге һүҙҙәрен һис тә оноторға ярамай: «Народность обыкновенно выпускается у нас из плана воспитания. Часто дети знают о древнегреческих авторах, об исторических деятелях европейской империи, но не имеют никакого понятия о сокровищах своей народной поэзии, русской литературе, Петре I». Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа рәсми педагогиканың халыҡ педагогикаһы менән берлектәге үҫеше, минеңсә, йәш быуында, белем биреү менән бергә, илһөйәрлек, граждандлыҡ позицияһы тәрбиәләүҙә бик уңышлы күренеш булды һәм буласаҡ, тип уйлайым.

Беҙ үтә ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ һәм ижад итәбеҙ. Бөгөнгө көндә республикала һәр ун никахтың ете-һигеҙе айырылышыу менән тамамлана, сабыйҙарҙың 20 — 25 проценты никахһыҙ донъяға килә. Наркотик, алкоголь эсемлектәргә йәш үҫмерҙәрҙең ныҒыраҡ ылыға барыуына нисек борсолмайһың да нисек уйға ҡалмайһың?! Былтырғы 11 айҙа үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һанының 1315 кешегә етеүенә нисек ҡайғырмайһың? Кем нисектер, был әҙәп-әхлаҡ һаҙлығынан сығыуҙы мин иң беренсе сиратта ғаилә нигеҙҙәрен нығытыуҙа күрәм. Бала идеалһыҙ тора алмай; тәрбиә ғаиләнән башлана, иң тәүҙә ул ата-әсәһенә оҡшарға тырыша, уларҙың ҡылыҡтарын, хатта хәрәкәттәрен ҡабатлай.

Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ араһында балаға, ғаиләгә һөйөү тәрбиәләүҙә айырыуса әҙибәләребеҙ уңышлы эшләй. Йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡованың «Күсле ил — көслө ил» йыйынтығы ысын мәғәнәһендә ғаилә китабы ул. Унда «Йәш ғаиләгә нәсихәттәр»гә тиклем бар, шулай уҡ йыйынтыҡтың «Күсле ил — көслө ил» бүлегендә халҡыбыҙҙың әҙәп, әхлаҡ тәрбиәһе, ғаилә традициялары

тураһында бик күп мәҡәл-әйтемдәр йыйылып, уларға тәрән аңлатма бирелгән. Тот та ғаилә кодексы итеп түр башына элеп ҡуй. Күренекле әҙибәләр Айһылыу Йәғәфәрованың «Һандуғас моңо», «Тирмәкәй» йыйынтыҡтары, Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» китабы тәрбиә өлкәһендә бер ҡасан да үҙҙәренең актуаллеген юғалтмаясаҡ. Зөһрә Ҡотлогилдинаның «Һуғыш балалары — тарих яралары» китабы ла беҙҙең ата-әсәләрҙең Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күрһәткән рух көсөнә мәҙхиә булып тарихта үҙ урынын аласаҡ, тип уйлайым.

Яңыраҡ ҡына 75 йәшен билдәләгән хөрмәтле юбилярыбыҙ Барый Ноғомановтың «Ҡыйҙаш ҡиссаһы» документаль романы тәрбиәүи әһәмиәте менән ҡиммәтле. Һигеҙ ул, ике ҡыҙ тәрбиәләп үҫтереп, ете улын Бөйөк Ватан һуғышында юғалтҡан ҡаһарман рухлы әсә Майкамал апайҙың тормош юлы — бөгөнгө йәш быуын өсөн өлгө ул. Автор Тыуған илде яратыу, үҙ ғаиләңде, балаларыңды, ата-әсәңде яратыуҙан башлана, тигән билдәле хәҡиҡәтте тетрәндергес ваҡиғалар, образдар аша күрһәтә. Параолимпия уйындарында дүрт алтын миҙал яулаған башҡорт егете Ирек Зариповтың тормошо тураһындағы «Ҡулдарымда минең бар донъя» повесы менән, йәш быуынға бөгөнгө көндә лә идеал булырлыҡ ҡаһармандарыбыҙ заманыбыҙҙың йөҙөн билдәләй, тип раҫлай әҙип.

Республикабыҙҙың Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фаkил Мырҙаҡаевтың «Яңылыштым», «Ҡайын һуты», «Хушлашыу вальсы» повестары, Луиза Азаматтың «Йәшәмеш аҡыл йыя», Тәскирә Даянованың «Ышан, урман!», Марс Әхмәтшиндың «Атайҙар менән бер сафта» китаптарын уҡыусылар шулай уҡ яратып ҡабул итте.

Салауат Кәрим балалар һәм йәш үҫмерҙәр өсөн әҫәрҙәрендә яңынан-яңы художестволы алымдар менән һөйөндөрә. «Күңел йылыны» китабындағы «Хәйҙәр» повесында ул, мәҫәлән, аллегорияны уңышлы ҡуллана: замандың насар күренештәрен янғын менән сағыштыра.

Мөҙәрис Багаев «Төпһөҙ күлдең төбө нисә ҡат?» повесы менән балалар әҙәбиәтендә фантастика жанрын үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерҙе.

Минең йәш үҫмерҙәр өсөн проза жанрына ҙур иғтибар биреп китеүем осраҡлы түгел. Үҙенең яҙыусылыҡ яҙмышын нәҡ оло жанрға бағышлаусылар бик һирәк. Ул да булһа берҙән-бер әҙип — Фаkил Мырҙаҡаев. Заманында Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Әнүәр Бикчәнтәев, Фәрит Иҫәнғолов, Рәйес Ғабдрахманов, Вәзих Исхаҡов, Динис Бүләков, Раил Байбулатов, Наил Ғәйетбай, Мөкәрәмә Садиҡова, әҙәбиәттең ошо өлкәһендә эшләп, ҙур ҡаҙаныштарға ирешкәйне. Бөгөн: «Әй, һеҙ, йәш үҫмерҙәр өсөн проза яҙыусылар, ҡайҙа?!» — тип оран һалғы килә.

Йәмғиәттәге үҙгәрештәр иң тәүҙә йәш быуынға ҡағыла. Ә бит Үҙәк телевидение уларҙы үлтереш-һуйышҡа, әҙәпһеҙлеккә, еңел аҡса табыуға ҡоролған «тәрбиә»һен һаман да дауам итә. Йәш быуын быны ысын тормош тип ҡабул итә, сөнки әлегә уның рухи иммунитеты нығынып етмәгән. Ошо йәһәттән үҙебеҙҙең телевидениеның, «Тамыр» каналын асып һәм «БСТ» каналынан «Башҡорт телен өйрәнәбеҙ» тапшырыуын алып барып, йәш быуында үҙаң һәм туған телгә һөйөү тәрбиәләү, милли һәм дөйөм кешелектең гуманлыҡ традициялары нигеҙендә әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын пропагандалау буйынса эше хуплауға лайыҡ.

Бөгөн ҡанлы «боевиктар»ҙы ҡарап, шундағы ҡанэскестәргә оҡшарға тырышҡан балаларыбыҙға ниндәй идеал тәҡдим итә алабыҙ һуң? Бар ундай

идеал, бар! Башҡорттоң бихисап батырҙары, сәсәндәре, аҡыл эйәләре, ил башлыҡтары — уларҙың һәр береһенең яҙмышы тетрәндергес кино һәм театр, әҙәби әҫәр геройҙары булыр ине. Дөрөҫ, Аллаға шөкөр, тарихи романдарыбыҙҙа, поэма-дастандарыбыҙҙа мәңгеләштерә алдыҡ беҙ уларҙы һуңғы ун йылда. Ләкин балалар өсөн махсус яҙылған бындай китаптарыбыҙ юҡ. Башҡортостандың иҫ киткес бай тарихы, тәбиғәте, Арҡайым һәм Таналыҡ кеүек милли ҡомартҡылары — беҙҙең балалар яҙыусылары алдында бөтмәҫ- төкәнмәҫ тема һәм эш тора. Фольклор өлгөләре нигеҙендә яҙылған әҫәрҙәргә, башҡорт мифологияһын бер системаға килтереп яҙылған китаптарға ла мохтажлыҡ кисерәбеҙ. Дин нигеҙҙәрен аңлатҡан, шулай уҡ сәләмәт тормош нигеҙҙәренә өйрәткән популяр китаптарыбыҙ ҙа һаман юҡ. Был проблемаларҙы беҙ, яҙыусылар, Мәғариф министрлығы һәм педагогтар менән берлектә генә хәл итә алабыҙ. Мәҫәлән, Мәғариф министрлығының заказы буйынса яҙыусы менән ғалим берлектә әҫәрҙәр ижад итә алыр ине.

Әйткәнемсә, йәш үҫмерҙәргә проза әҫәрҙәре бик аҙ. Ошоно иҫәптә тотоп, Башҡортостан Мәғариф министрлығы «Мәктәп китапханаһы» серияһында Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Баязит Бикбай, Дауыт Юлтый, Һәҙиә Дәүләтшина, Әнүәр Бикчәнтәев һәм башҡа классиктарыбыҙҙың мәктәп программаларына ингән әҫәрҙәрен китап итеп баҫып сығарҙы. «Мәктәп китапханаһы» серияһының артабан да дауам итеүенә өмөт итәбеҙ.

Балалар әҙәбиәте йәш быуындың йәш үҙенсәлектәрен мотлаҡ иҫәпкә алырға тейеш. Мәктәпкәсә йәштәге һәм башланғыс класс балалары, унан өлкәнерәктәр һәм йәш үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнә ул.

Мәктәпкәсә йәштәге һәм башланғыс класс балалары өсөн сәсмә әҫәрҙәргә туҡталып китмәксемен. Дүртөйлөлә йәшәүсе Илдус Тимерханов «Ут-Күҙ», «Тал-тирәктәр ҡуйынында» китаптары менән оҫта әкиәтсе булып танылды.

Күренекле прозаик Фәрзәнә Аҡбулатованың роман-повестар менән бер рәттән кескәйҙәр өсөн әкиәт, әкиәт-пьесалар яҙыуына һоҡланмау мөмкин түгел. Бынан биш йыл элек әле ул, Ертыңлар, Күлуртлар, Урман батыр, Тау батыр һәм башҡа фольклор геройҙарын төп образдар итеп алып һәм башҡорт халыҡ фольклорына нигеҙләнеп, уңышлы роман ижад итте. Үкенескә ҡаршы, был әҫәр һаман донъя күргәне юҡ.

Бәләкәстәргә яҙылған әҫәрҙәр ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙың үҫеше, киҫкен сюжеты менән сабыйҙың күңеленә, хис-тойғоларына тәьҫир итә. Нотоҡҡа ҡоролған дидактик яҙмаларҙы бала ҡабул итмәй. «Кто не почувствовал истины, тот и не понял и не узнал ее. Преимущественное развитие чувства дает детям полноту, гармонию и поэзию жизни... Они должны знакомить их с таинством страдания, показывая его, как другую сторону одной и той же любви», — тип яҙған рус балалар классигы Корней Чуковский.

Ғалимә һәм шағирә Рәмзәнә Әбүталипованың «Мин үҫәм» китабындағы әкиәт һәм пьеса-әкиәттәре, Фәнис Янышевтың әкиәт китаптары, Флүр Яхиндың «Айыу батша һәм башҡалар» йыйынтығындағы әкиәттәре фантазияға бай булыуы һәм художестволы камиллығы менән айырылып тора.

Гөлнара Мостафина, Рәсүл Сәғитов, Гөлнара Хәлфетдинова, Зөлфиә Күскилдина, Фәриха Вәлиуллина, Рәшиҙә Мәһәҙиева, Венер Исхаҡов, Миләүшә Ғәйфуллина кеүек өмөтлө ҡәләмле яҙыусыларҙың балалар әҙәбиәтенә килеүе ҡыуандыра.

Балалар әҙәбиәте үҙенә бөтөн жанрҙарҙы туплауы менән үҙенсәлекле.

Республика ҡурсаҡ театры ла, Мостай Кәрим исемендәге Йәштәр театры ла, «Сулпан» балалар театры ла һәм Мәжит Ғафури исемендәге академия драма театрынан алып башҡа олпат театрҙар ҙа яҙыусыларыбыҙҙың драма әҫәрҙәрен ҡуйып тора. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең байтаҡ проза әҫәрҙәрҙе Йәштәр театрында уңышлы сәхнәләштерелде. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипованың «Ғилмияза», балалар яҙыусыһы Рәсимә Ураҡсинаның «Сыңҡылдаҡ», Сәрүәр Суринаның «Сыйырсыҡ тәсбихе» һәм «Ҡот тәңкәһе» китабындағы пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәр, Мостай Кәрим исемендәге Йәштәр театры һәм Республика ҡурсаҡ театрҙарында уңыш яуланы. Күренекле шағир Сафуан Әлибайҙың пьесалары буйынса Республика ҡурсаҡ театрында һәм «Сулпан» балалар театрында спектаклдәр ҡуйылды. Сибайҙан Зөһрә Фәйзуллина, Дүртөйләнән Мөҙәрис Мөсифуллин йәш үҫмерҙәр өсөн пьесалар яҙып тора. Зөһрә Фәйзуллинаның тик пьесаларҙан ғына торған «Етегән йондоҙ» китабының тиҙ арала таралып бөтөүе лә был жанрға ҡытлыҡ кисереүебеҙ тураһында һөйләй. Яңыраҡ ҡына Республика ҡурсаҡ театры Зөһрә Бураҡаеваның «Рух илендә» спектакленең премьераһы менән ҡыуандырҙы. Бындай тамашаларҙың ҡуйылып тороуы шатлыҡлы, әлбиттә. Ләкин йәш быуын өсөн пьесалар барыбер етмәй. Республикабыҙҙың халыҡ театрҙары, шулай уҡ мәктәп театрҙары, ҡурсаҡ театрҙары өсөн пьесалар юҡ тиерлек, шунлыҡтан улар проза әҫәрҙәрен сәхнәләштерергә мәжбүр.

Педагогтарға ярҙам йөҙөнән Башҡортостан Мәғариф министрлығы «Мәктәп сәхнәләре өсөн пьесалар»ҙы китап итеп сығарҙы.

Балалар матбуғаты хеҙмәткәрҙәре пьеса һәм инсценировка яҙыусыларға даими рәүештә үтенес менән мөрәжәғәт итә. Ләкин балалар өсөн пьесалар кәрәклеге тураһында нисәмә йылдар һөйләгән һүҙебеҙ ҡоро һүҙ генә булып ҡала бирә.

«Йәншишмә» гәзите һәм «Аманат» журналындағы «Яҙыусы трибунаһы» тигән бик кәрәкле рубрикалағы публицистик мәҡәләләрҙе балалар ҙа, уҡытыусылар, тәрбиәселәр ҙә көтөп ала. Әҙибәләребеҙ Әнисә Таһирова, Гүзәл Ситдиҡова, Фәниә Чанышева, Әлфинур Вахитова, Зөһрә Ҡотлогилдиналарҙың әхлаҡ-әҙәп темаһына йөрәк йылыһы менән яҙған мәҡәләләрен билдәләп үтергә мөмкин.

Һуңғы егерме йылда беҙҙең иң кескәйҙәр һәм башланғыс мәктәп йәшендәгеләр өсөн шиғриәтебеҙ алға китте. Халыҡтың ихтирамын ҡаҙанған өлкән әҙибәбеҙ Кәтибә Кинйәбулатованың «Ҡолонсаҡ» китабының быйыл Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булыуы — әйткәнемә бер дәлил.

Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, «Донъя менән танышам», «Мөғжизәле сәйәхәт», «Йөҙ йыр» кеүек киң билдәле китаптарҙың авторы Гөлфиә Юнысова аҡ ҡағыҙ кеүек сабый күңеленә донъяның матур биҙәктәрен төшөрөп ҡыуандыра.

Әсхәл Әхмәт-Хужаның «Ямғыр тамсыһы», Рәсимә Ураҡсинаның «Башҡортостаным — йәннәтем», Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның «Серле ҡумта», «Башҡортомдан батыр юҡ икән» шиғри йыйынтыҡтарында фольклор ижади файҙаланыла. Был шағирҙар кескәйҙәр бөгөн нимә белергә һәм өйрәнергә тейеш — шулар тураһында яҙа; төрлө һүҙ уйнатыуҙар, тиҙәйткестәр, башватҡыстарҙы ҡулланып ижад итә, туған телебеҙҙең мөмкинлектәрен тулыһынса

файҙалана. Авторҙарҙың балалар баҡсалары һәм башланғыс мәктәптең уҡытыу программаларынан сығып яҙылған уңышлы әҫәрҙәре бик күп — улар дәреслектәрҙә урын алған.

Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның «Башҡортомдан батыр юҡ икән» йыйынтығы Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы ойошторған конкурста, «Балалар өсөн иң уҡымлы китап» номинацияһында еңеп, «Балалар әҙәбиәтенең алтын коллекцияһы»на индерелде.

Шағир Нияз Сәлимов өлкәндәр өсөн дә, балалар өсөн дә берҙәй уңышлы ижад итә. Уның «Ҡояш ҡошмо?» тигән китабы тәрбиәселәрҙең һәм уҡытыусыларҙың өҫтәл китабына әйләнде, сөнки автор Башҡортостан, уның тарихи шәхестәре, мәҙәниәте тураһында ҡыҙыҡлы сюжеттарға, образдарға ҡоролған мауыҡтырғыс шиғырҙар яҙа.

Шағирҙарыбыҙ Сафуан Әлибай, Рауил Шаммас, Әнисә Таһирова, Әлфиә Әсәҙуллина, Гөлсирә Шафиҡова-Батталова, Рәшит Заһиҙуллин, Рәшиҙә Шәмсетдинова, Булат Кәрим, Миңлегөл Хисамова һәм тағы ла бик күп әҙиптәребеҙ балалар әҙәбиәтенә бик етди, мөһим эш итеп ҡарай, әҫәрҙәре китап булып та, ваҡытлы матбуғатта ла донъя күреп тора.

Балалар әҙәбиәте — күренекле әҙибә һәм педагог Айһылыу Йәғәфәрованың ғүмерлек яҙмышы, ул ошо өлкәлә арымай-талмай ижад итә. Үҙенең күп йыллыҡ тәжрибәһен туплап Миндибай Юлмөхәмәтов менән берлектә төҙөгән «Йәйғор» тигән хрестоматия — балалар баҡсаһында бик кәрәкле әсбап. А. Йәғәфәрова тәржемә өлкәһендә лә уңышлы эшләй. Уның тәржемәһендә А. С. Пушкиндың әкиәттәре, шулай уҡ «Кил һин беҙҙең тирмәгә!» әкиәттәр йыйынтығы башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күрҙе.

Байҡап сыҡһаң, иғтибарға лайыҡ китаптарыбыҙ күп. Ләкин балалар әҙәбиәте өлкәһендә тәнҡит бөтөнләй юҡ, әҫәрҙәребеҙ тураһында ла мәҡәләләр бик һирәк баҫыла.

Үткән съезда әйткән фекеремде мин фән докторы Фәнил Күзбәков «Ағиҙел» журналында уҙғарған әңгәмәлә ҡабатлағайным, бөгөнгө мәртәбәле йыйынға ла шул тәҡдимем менән мөрәжәғәт итәм. Әҙәби ижадҡа һәләте булған балалар өсөн республика кимәлендәге махсус гимназия ойошторолоп, унда туған тел менән бер ҡатарҙан сит телдәр, иҫке төрки теле, башҡорт, рус һәм сит илдәр әҙәбиәте, уларҙың тарихы, теорияһы, донъя сәнғәте тарихы, психология, философия, фольклор кеүек фәндәр тәрәндән уҡытылһа, журналистикаға һәм әҙәбиәткә әҙерлекле әҙиптәр, тәржемәселәр, әҙәбиәт белгестәре килер ине. Был мәктәпкә уҡыусыларҙы һайлап алыу ҙа ауырлыҡ тыуҙырмаясаҡ. Башҡортостан Мәғариф министрлығы тарафынан «Урал батыр» конкурсы һәм туған телдәр, әҙәбиәт буйынса олимпиадалар йыл һайын уҙғарылып тора бит.

Башҡорт әҙәбиәтенә йәштәрҙең килеү-килмәүе — йәмғиәттә туған телдең хәл-торошон барыһынан ныҡ күрһәтеүсе ҙур билдә ул. Телһеҙ әҙәбиәт юҡ, тигән аксиома бөгөн бигерәк тә актуаль.

Сығышымда мин башлыса бөгөнгө башҡорт балалар әҙәбиәтенең йөҙөн билдәләгән китаптарға, шулай уҡ заман тыуҙырған проблемаларға туҡталдым. Йәш быуында Тыуған илебеҙгә, халҡыбыҙға һөйөү тәрбиәләүсе әҫәрҙәрҙең күберәк ижад ителеүен теләргә генә ҡала. Сөнки Н. Чернышевский әйткәнсә: «Милләттең иң ҙур байлығы—халыҡтың юғары әхлаҡлы йәш быуыны».

**Айҙар**
**ХӨСӘЙЕНОВ,**
**тәржемә секцияһы рәйесе**

# Алға барабыҙ, камиллашабыҙ

Минең фекеремсә, һуңғы йылдарҙа тәржемә өлкәһендәге иң мөһим ваҡиға ошо көндәрҙә уҙҙы – ЮНЕСКО-ла башҡорт халыҡ эпосы «Урал батыр»ҙың презентацияһы буласағы иғлан ителде. Ни өсөн был шул тиклем мөһим һуң? Хикмәт шунда: ниндәй генә халыҡты алып ҡарама, уның иң юғары ҡаҙаныштарына кешелек донъяһы эйә һәм ул шулай тейеш тә. Интернетты американлылар уйлап сығарғанға йәки «Илаһи комедия»ны итальянлы Данте ижад иткәнгә бер кем дә бәхәсләшмәй. «Урал батыр» эпосында кешелектең мәңгелек принциптары, йәшәйештең иң юғары үлсәме – изгелек төшөнсәһе, үлемгә ҡаршы тороусы көс булараҡ йәшәүгә ынтылыш тойғоһо һалынған. Донъяла тап ошо күренештәрҙең ифрат етешмәүе менән килешәһегеҙҙер.

Ҡыуандыра: Республика Президенты Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға булған йылдағыса яҙма мөрәжәғәтендә эпосыбыҙҙан өҙөк еткерҙе.

Интернет беҙгә һөйөнөслө хәбәрҙәр еткерҙе. 2011 йылдың 24 мартында ил Президенты Д. Медведевтың мәҙәниәт эшмәкәрҙәре менән уҙғарылған осрашыуы һөҙөмтәһендә башҡарылырға тейешле эштәрҙең исемлеге раҫланды. Мәҫәлән, Рәсәй Федерацияһының Хөкүмәтенә Рәсәй Федерацияһы халыҡтары теленән нәфис әҙәбиәт өлгөләрен рус теленә, рус теленән Рәсәй Федерацияһының башҡа һәм сит ил телдәренә художестволы тәржемә итеү системаһын үҫтереү буйынса тәҡдимдәр индереү ҡаралды. (Башҡарыу ваҡыты – 2011 йылдың 15 сентябре. Яуаплы – Путин В.В.)

Был саранан мәскәүҙәр генә түгел, беҙҙең тәржемәселәребеҙ ҙә файҙа күрер һәм һөҙөмтәһе әҙәбиәтебеҙҙә сағылыш табыр, тип ышанғы килә. Әммә беҙ художестволы тәржемәнең әҙәбиәтебеҙҙә бик аҙ урын биләгәнен танырға мәжбүрбеҙ. Бигерәк тә Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылында тәржемәләр, башлыса, кеше әллә ни уҡып бармаған аҙ тиражлы баҫмаларҙа донъя күрә. Республика һәм ҡала гәзиттәрендә тәржемәүи әҫәрҙәрҙе түгел, ғөмүмән, нәфис әҙәбиәтте күреү мөмкин түгел. «Китап»

нәшриәте шулай уҡ аңлашылып торған ҡыйынлыҡтар арҡаһында тәржемә әҫәрҙәрҙе күпләп баҫыуҙан тыйыла. Телевидение өлкәһендә лә тәржемә ҡайғыһы юҡ. Ярай әле радиола тәржемә ителгән хикәйәләр һәм шиғырҙар уҡыла. Бәлки, кемдеңдер даими күҙәтеүе етешмәйҙер? Етди генә әйтһәк, был инде хәл ителеүҙе талап иткән бик ҙур проблемаға әйләнде. Ғөмүмән, әҙәбиәт һәм, айырым алғанда, тәржемә резервацияла йәшәргә тейеш түгел, мәҙәниәт юҡҡа сыға, тигән һүҙҙәр менән ҡапланып, уның киң уҡыусы аудиторияһына юлын ябырға ярамай.

Шуға күрә лә «Ватандаш», «Бельские просторы», «Истоки» кеүек тәржемәүи әҙәбиәтте баҫтырыу мөмкинлеген биргән майҙансыҡтарҙың барлығы ҡыуандыра. Уларҙа донъя күреп, һынау үткәндән һуң, әҫәрҙәр Рәсәй уҡыусыһын күберәк таба.

Мәҙәниәт бер үк ваҡытта үлә һәм кире терелә. Быға асыҡ миҫал булып быуын-быуын исемһеҙ сәсәндәрҙең, «Урал батыр» эпосын беҙҙең көндәргә еткереүсе Ғәбит сәсәндең, Мөхәмәтша Буранғоловтың тормош юлы тора. Киләсәк быуын уларҙың хеҙмәтен тейешенсә баһаларына өмөттән өҙөлмәйек.

Эйе, яҙыусы башҡа кешеләрҙән йәшәйеш проблемаларын әҙәби ижад ярҙамында сисергә ынтылыуы менән айырыла. Юристар үҙ бурысын – юридик, сәйәсмәндәр – сәйәси, инженерҙар инженерия саралары менән хәл иткән кеүек, тәржемәселәрҙең дә үҙ юлы бар. Мин хатта, тәржемә – асылда тәржемәселәр үҙҙәре ул, тип әйтер инем.

Иң олпат тәржемәселәребеҙҙең береһе Марсель Ғафуров һуңғы йылдарҙа дөйөм тиражы 60 мең булған 11 роман тәржемә итте. Улар араһында Зиннур Ураҡсиндың «Карат», Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй», Рәшит Солтангәрәевтың «Кешеләр» һ.б бар. Нисәмә йылдар буйына мин дөйөм бер тәржемә үҙәге булдырырға кәрәк икәнлекте ҡабатлайым. Марсель ағай үҙенең өлгөһөндә тәржемә хеҙмәте өсөн түләгәндә, был осраҡта ул хаҡлы ялдағы пенсионер булған хәлдә лә, ни тиклем күп тәржемә итергә мөмкин икәнлекте иҫбатланы. Һуңғы йылдарҙа атаһының ғына түгел, М. Әхмәтшин, Р. Бикбаев, Ғ. Хөсәйеновтарҙың хеҙмәттәрен русса яңғыратҡан Гүзәл Хамматова бик емешле ижад итте.

Тәржемә өлкәһендә Светлана Чураева, Сергей Янаки, Вера Капустина, Любовь Әфләтунова һәм башҡалар бик мауығып эшләй.

Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтын тамамлаусы Зөһрә Бураҡаева менән Фәрит Әхмәҙиев тураһында айырым әйтеп үткем килә. Улар тәржемәгә тоғро, әүҙемлектәре һүрелмәй. Институтта беҙҙең менән бергә тиҫтәләгән Рәсәй халыҡтарының башҡа телдәренән тәржемәселәр әҙерләп сығарылғайны, тик уларҙың береһе лә тәржемәсе булып китә алманы. Эйе, бөгөнгө көндә Рәсәй халыҡтары теленән иң яҡшы тәржемә итеүселәр – Башҡортостан тәржемәселәре.

Быны Өфөлә нәшер ителгән «Башҡортостан шиғриәте антологияһы»-ның һәм Мәскәүҙә сыҡҡан «Быуаттан быуатҡа» антологияһының донъя күреүе иҫбатлай. Беләһегеҙме, мәскәүҙәр тәүҙә абхаздарҙың шиғри антологияһын баҫтырып сығарырға ниәтләгәйне, килеп сыҡманы – тәржемәләре булмай сыҡты. Беҙҙең иһә тәржемә менән бәйле проблемаларыбыҙ булманы. Көсөргәнешле эшләү һөҙөмтәһендә китап ҡыҫҡа ваҡыт арауығында әҙер булды. Бындай уңыштың нигеҙендә егерме йыл элек

Яҙыусылар союзының Мәскәүгә тәржемәселәр төркөмөн уҡытырға ебәреүе, тәржемә секцияһы асылыу, йылдар буйына тәржемә корпусын камиллаштырыу ята.

Ошо трибунанан Мәскәүҙә «Рәсәй халыҡтарының хәҙерге әҙәбиәте» антологияһының алты томлығы донъя күреүен дә телгә алыу урынлы. Унда Талха Ғиниәтуллиндың, Әмир Әминевтың, Роберт Байымовтың, Азамат Юлдашбаевтың проза әҫәрҙәре баҫылған. Әйткәндәй, улар артынан прозаик Мөнир Ҡунафин иң яҡшы хикәйәгә иғлан ителгән Шукшин конкурсында уңышлы ҡатнашты. Хикәйәне шағир, журналист Дамир Шәрәфетдинов руссаға ауҙарғайны. Мөнир Ҡунафин менән Лариса Абдуллинаның Түбәнге Тагилда ойошторолған Бөтә Рәсәй йәш яҙыусылары кәңәшмәһендә ҡатнашыуы ла хәтерҙә. Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ, шул иҫәптән йәштәре лә, ниндәй генә телдә ижад итмәһендәр, илебеҙҙең башҡа өлкәләрендәге коллегалары менән әүҙем аралашырға тейеш, тигән фекерҙәмен.

Башҡорт әҙәбиәтенең Рәсәй уҡыусыларында ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын Рәсәй халыҡтары телдәренән тәржемә сайтының уңышы иҫбатлай. Беҙҙең тәржемәләребеҙҙе көнөнә бөтә донъянан йөҙгә яҡын кеше уҡый, өс йыл эсендә сайттың популярлығы яҡынса өс тапҡырға артты. Был – бик актуаль мәсьәлә, сифатлы тәржемә итеү, унан инде үҙ уҡыусыһыңды табыу фарыз. Был эштәрҙең барыһын да әҙәбиәтебеҙҙең үҫешендә ҡыҙыҡһынған, уның хәстәрҙәре менән йәшәгән, яҡшы ойоштороусы сифаттарына эйә кешеләрҙән тыш башҡарыуы мөмкин булмаҫ ине. Ошо тәңгәлдә Азамат Юлдашбаевтың да әҙәби, журналистик, йәшәү тәжрибәһе байтаҡ.

«Бүре килә!» тип ҡурҡытып, кешеләрҙе ике мәртәбә алдаған малай тураһындағы әкиәтте барығыҙ ҙа беләһегеҙҙер. Әкиәт буйынса, бүре кеше йәшәгән урынға ысынлап та килгәндә, малайға бер кем дә ышанмай. Секциябыҙҙың эшмәкәрлеге ошо әкиәткә ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә: нисәмә йылдар буйы беҙ «тәржемә, тәржемә!» тип һөрән һалабыҙ һәм эш, бер нигә ҡарамай, алға бара. Был, әлбиттә, ҡыуандырмай ҡалмай. Союзыбыҙҙың тиҙ ағышлы тормош алдында үҙ йөҙөн һаҡлап килеүе, һәр кемебеҙҙең әҙәбиәт үҫешенә үҙ өлөшөн индереүе лә шатландыра. Әйҙәгеҙ, артабан да бер-беребеҙҙең ижадын ихтирам итеп, яҙыусы хеҙмәтенә лайыҡлы баһа биреп, изгелек өсөн көс һалайыҡ.

**Миңлеғәли**
**НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**тәнҡит секцияһы рәйесе**

# Ғилем үә тәнҡит нисбәте

Ижади секциябыҙ “Әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит” тип исемләнгәс, был ике йүнәлеш тураһында ла һүҙ әйтеп үтеү фарыздыр. Сөнки һуңғы съездан һуң ике өлкәлә лә күпмелер эштәр башҡарылды, ярайһы уҡ уңыштарға өлгәшелде, шул уҡ ваҡытта айырым етешһеҙлектәр, кәмселектәр ҙә булды. Бигерәк тә әҙәби тәнҡиттең торошо борсоуға һала.

Әҙәбиәт ғилеме өлкәһендәге уңыштарҙы барлағанда иң элек аҡһаҡалыбыҙ, ғалим һәм яҙыусы Ғайса Хөсәйенов хеҙмәттәрен атар инем. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ул йәштәрсә дәрт, зиһен менән бынамын тигән фәнни һәм фәнни-популяр китаптар әҙерләп донъяға сығарҙы. Уның бигерәк тә ике киҫәктән торған “Башҡорт әҙәбиәте поэтикаһы” тигән хеҙмәте иғтибарға лайыҡ. 2003 йылда донъя күргән “Башҡорт шиғыры. Шиғриәт һүҙлеге” китабы кеүек үк, ул милли һүҙ сәнғәтебеҙҙең теоретик мәсьәләләренә арналған. Унда конкрет әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә поэтиканың мөһим теоретик проблемалары күтәрелә, башҡорт шиғырының тарихи, психологик һәм милли һыҙаттары яҡтыртыла. 2008 йылда рус телендә нәшер ителгән “Гуманитарий. Литература. Духовная культура. Фольклор. История. Археология” исемле китабында ла Ғайса Хөсәйеновтың әҙәби әҫәрҙәре менән йәнәш әҙәбиәт тарихына һәм заман әҙәбиәтенә ҡағылышлы төплө мәҡәләләре урын алған. Уның шул уҡ йылда сыҡҡан “Рауил Бикбаев. Тормошо һәм ижады” китабы иһә айырым әҫәрҙәрҙе, шиғри шәлкемдәрҙе анализлау аша халыҡ шағирының ижади эволюцияһын, тормошҡа ҡарашын, рухи донъяһын, мораль-этик, эстетик принциптарын яҡтыртыуға арналған.

Яҙыусылар союзы етәксеһе, халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы Рауил Бикбаев әҙәбиәт донъяһында күренеш булырҙай хеҙмәттәре менән әленән-әле ҡыуандырып тора. Уның 2007 йылда нәшер ителгән “Рәми” исемле китабы халҡыбыҙҙың һөйөклө шағирының тормош һәм ижад юлына бик мауыҡтырғыс сәйәхәт булараҡ ҡабул ителә. Ул әҙәбиәтсе ғалимдар өсөн дә, ябай уҡыусы өсөн дә берҙәй ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Рауил Төхвәт улы Башҡортостан шиғриәте гәүһәрҙәрен рус телле уҡыусыларға еткереү,

донъяға танытыу өлкәһендә лә әүҙемлек күрһәтте. 2007 йылда Азамат Юлдашбаев менән берлектә “Антология поэзии Башкортостана” тигән китап әҙерләп сығарҙы, уға бик төплө итеп баш һүҙ яҙҙы. Билдәле булыуынса, һуңыраҡ ошо уҡ хеҙмәт, бер ни тиклем йыйнаҡландырылып, Мәскәүҙә лә донъя күрҙе. Һүҙ ыңғайында шуны әйтергә кәрәк: Рауил Бикбаев даими рәүештә милли шиғриәтебеҙгә йыллыҡ күҙәтеүҙәр ҙә яһай бара. Башлыса “Ағиҙел” журналы биттәрендә баҫылған был материалдар хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит үҫешенә ҙур этәргес бирә.

XIV съездан һуңғы йылдарҙа әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә Ғиниәт Ҡунафин да ҙур әүҙемлек күрһәтте. Уның 2006 йылда нәшер ителгән “Замандарҙың рухи балҡышы” хеҙмәтен айырым билдәләп үтергә кәрәк. Ғалим был китабында үткән һәм хәҙерге әҙәбиәтебеҙгә бәйле бик күп мөһим мәсьәләләр күтәрә, әҙәбиәт теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса киң һәм төплө фекер йөрөтә, күренекле әҙиптәребеҙҙең ижади портреттарын тәҡдим итә. Шул уҡ йылда рус телендә сыҡҡан “Культура Башкортостана и башкирская литература XIX – начала XX века” китабында иһә, исеменән үк күренеүенсә, Башҡортостан һәм башҡорт мәҙәниәте, әҙәбиәтенең XIX – XX йөҙ йыллыҡтар башындағы үҫеш юлдары, үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ алып бара. Уның 2010 йылда баҫылған “XIX быуат башҡорт әҙәбиәте” китабы күп томлы “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”ның икенсе томын үҙенсә үҫтерә һәм күп йәһәттән байыта.

Ғалим һәм прозаик Мирас Иҙелбаевтың 2007 йылда донъя күргән “Боронғонан аманат” китабы боронғо әҙәби мираҫыбыҙҙы барлауға, уның йәшәү, үҫеү үҙенсәлектәрен асыуға тос өлөш булып ҡабул ителә. Унда автор халҡыбыҙ ауыҙ-тел әҙәбиәтенең сал быуаттар төпкөлөнән XX быуат башына тиклемге үҫеш юлын күҙаллай, данлыҡлы йырауҙар һәм сәсәндәрҙең ижадына байҡау яһай.

Теоретик пландағы хеҙмәттәрҙән ғалимә Зәйтүнә Шәрипованың 2008 йылда баҫылған “Башҡорт әҙәби фекере” исемле китабы үҙенең яңылығы, уй-фекерҙәр һәлмәклеге менән айырылып тора. Был монографияла боронғо төркиҙәр заманынан алып хәҙергәсә халҡыбыҙҙа әҙәби-эстетик аңдың, художестволы фекерләүҙең, зауыҡтың үҫеү юлдары, этаптары яҙма әҙәбиәт һәм фольклор ҡомартҡылары, күренекле әҙиптәр ижады миҫалында яҡтыртыла.

Хәҙерге әҙәбиәткә, бөгөнгө әҙәби процесҡа арналған монографияларҙың иң төплөһө, йөкмәткелеһе, моғайын, Гөлфирә Гәрәеваның 2009 йылда донъя күргән “Хәҙерге проза үҙенсәлектәре” китабылыр. Унда бөгөнгө башҡорт прозаһының төп үҫеш тенденциялары, ысынбарлыҡты сағылдырыу принциптары, стиль өлкәһендәге эҙләнеүҙәр, сәсмә әҫәрҙәрҙең сюжет үҫтерелешендәге, композиция ҡоролошондағы үҙенсәлектәре төрлө яҡлап анализлана. Ғөмүмән, заман прозаһы хаҡында киң фекер йөрөтөлә һәм объектив баһа бирелә.

Әлбиттә, бында әҙәбиәт ғилеме буйынса сыҡҡан барлыҡ хеҙмәттәргә туҡталыу маҡсаты ҡуйылманы. Әммә өҫтәп шуларҙы ла әйтеү кәрәкле булыр: 2007 йылда “Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. Икенсе том. XIX быуат” китабы донъя күрҙе (төҙөүселәре Ғ. Хөсәйенов, М. Нәҙерғолов, З. Шәрипова); әлеге көндә рус телендә өс томлыҡ “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” яҙылып, “Китап” нәшриәтендә сират көтөп ята; ғалимдарыбыҙ башҡортса әҙәбиәт тарихының 7-се томын (ул бөгөнгө әҙәбиәткә арналған) әҙерләүгә тотондо,

Аллаһы бирһә, 2014 йылда уны баҫырға тәҡдим итә алырбыҙ, тигән уйҙабыҙ.

Әҙәби тәнҡиткә килгәндә, алда әйткәнебеҙсә, һөйөнөстәр ҙә бар, көйөнөстәр ҙә етерлек. “Тәнҡит мәҡәләләре” тигәнебеҙҙең күпселеген теге йәки был яҙыусының юбилейы уңайынан яһалған сығыштар тәшкил итә. Ундай мәҡәләләрҙә, белеүебеҙсә, ысын тәнҡиткә, реаль баһаға урын бөтөнләй тиерлек бирелмәй. Юбилейҙарҙан тыш сығыштарҙа ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фәҡәт ыңғай баһа, хатта кәрәгенән артыҡ шаштырып маҡтау өҫтөнлөк алып бара.

Быларҙың сәбәбе, беҙҙең ҡарашҡа, тәнҡитселәрҙең йомшаҡлығынан, халыҡ теле менән әйткәндә, эшкинмәгәнлегенән генә түгел. Бөгөнгө беҙҙең ижадсылар тәнҡитте бөтөнләй яратмай, ҡабул итә алмай һәм быға өйрәнмәгән. Уларҙың күпселеге үҙен берҙән-бер һәм бөйөк ҡәләм оҫтаһы итеп тойорға күнеккән. Мин-минлелек шул тиклем көслө – берәй әҫәргә ҡарата бәләкәй генә тәнҡит фекере әйтеп ҡара, уның авторының хас дошманына әйләнәһең. Был – бик хәүефле симптом. Ул әҙәбиәтебеҙҙең үҫешенә һис кенә лә булышлыҡ итмәй, киреһенсә, тотҡарлай, артҡа этәрә.

Шулай ҙа, тәнҡит өлкәһендә уңышлы эшләгән ҡәләмдәштәребеҙ бөтөнләй юҡ, тип әйтеү һис тә дөрөҫ булмаҫ ине. Мәҫәлән, Бөрө ҡалаһынан Әнғәм Хәбировты атарға була. Бына нисәмә йылдар инде ул ошо ауыр йөктө төпкә егелеп тарта. Уның мәҡәләләре, ғәҙәттә, конкрет ижадсыға бағышланып, әҫәрҙәргә тәрән анализ яһалыуы, әйтелгән фекерҙәрҙең төплө һәм нигеҙле булыуы менән характерлана. Әйтәйек, 2007 йылда “Ағиҙел” журналының 11-се һанында донъя күргән “Ҡояш та бит, ана, эстән яна…” тигән мәҡәләһен ул шағир Зөфәр Вәлит ижадын тикшереүгә арнаған. Яҙмала шағирҙың 2001, 2003, 2005, 2007 йылдарҙа “Ағиҙел” биттәрендә баҫылып сыҡҡан лирик шәлкемдәренә хәҙерге башҡорт шиғриәте фонында төрлө яҡлы анализ яһала. Автор һәр шиғырҙы тиерлек күҙҙән үткәреп, уларҙың уңышлы һәм ҡайһы бер етешһеҙ яҡтарын атай, ижадсыға уйландырырлыҡ кәңәштәр бирә, тәҡдимдәр яһай. Әнғәм Хәбировтың төп әҙәби журналыбыҙ биттәрендә баҫылған “Ебәктән дә нескә күңелем ҡылы…”, “Үҙенә тоғро шағир”, “Беҙ бит әле һалдат улдары”, “Яуланған үрҙәр баһаһы”, “Сабырлыҡтың төбө – һары алтын” кеүек мәҡәләләре лә анализдың төпсөрлөгө, тәрәнлеге менән арбай.

Әйтергә кәрәк, ваҡытлы матбуғатта баҫылған тәнҡит мәҡәләләренең күпселеге шиғриәткә арналған. Үткән съездан һуңғы “Ағиҙел”, “Ватандаш”, “Башҡортостан ҡыҙы”, “Башҡортостан”, “Ҡыҙыл таң” кеүек баҫмаларға байҡау яһау быны асыҡ дәлилләп тора. Ошо тиҫтәләгән мәҡәләләр араһынан шиғриәтебеҙҙең ыңғай һәм кәмселекле яҡтарын уртаға һалып, ҡыйыу һәм тура һүҙ йөрөткәндәр иҫәбендә иң элек Фәнил Күзбәковтың, Лариса Абдуллинаның сығыштарын атау кәрәктер.

Фәнил Күзбәковтың “Ағиҙел”дең 2008 йылдағы 1-се һанында баҫылған “Ҡылдарҙа заман заңымы?” тигән мәҡәләһе, моғайын, шиғриәт һөйөүселәрҙең береһен дә битараф ҡалдырмағандыр. Унда автор 2007 йылда журналда донъя күргән шиғри шәлкемдәргә күҙәтеү яһап, замандаштар, бигерәк тә йәш шағирҙар ижадындағы төрлө тенденцияларҙы һиҙгер тотоп ала, урынлы тәнҡит итә, кәңәштәрен, теләктәрен әйтә. Тәнҡитсенең “Ағиҙел” биттәрендә былтыр яһаған сығышы ла күптән түгел генә ҡәләм тирбәтә башлаусыларға арналған. “Йәштәр тауышы: ни ишетелә, нисек ишетелә?” мәҡәләһендә ул Урания Вахитова, Фәнил Бүләков, Айгөл Ишемғужина, Индира Муллаянова,

Кристина Андрианова, Фәйез Харрасов, Лида Хәйретдинова, Нияз Алсынбаев, Венер Исхаҡов һәм Александр Двинскихтарҙың “Йәштәр тауышы” исемле альманахта донъя күргән шиғри әҫәрҙәренә ҡарашын белдерә.

Лариса Абдуллинаның 2009 йылда “Башҡортостан” гәзитенең 11 август һанында баҫылған “Шағир булып майҙан тотор алдынан…” мәҡәләһе лә әҙәбиәт, шиғриәт һөйөүселәр даирәһендә оло ҡыҙыҡһыныу уятты. Унда автор “Салауат вариҫтары” тигән серияла баҫылған шиғри йыйынтыҡтар тураһында һүҙ алып бара. Рәмилә Ибраһимованың “Донъяны яратам”, Мәүлит Кәримовтың “Миләштәр”, Рәйлә Нәҙерғолованың “Аҡҡош һағышы”, Зөлфирә Сөләймәнованың “Йәйғорло күҙ”, Руша Ҡәҙербәкованың “Аҡ шоңҡарым”, Барый Хисамитдиновтың “Йырланмаған йырым һин”, Рәшиҙә Мансурованың “Таңғы ямғыр”, Фирүзә Алсынбаеваның “Донъяны мин асам үҙемә”, Сәйет Ибраһимовтың “Тауҙар гиҙәм”, Зөһрә Үтәғолованың “Һыу юлы”, Зиниә Байназарованың “Һағыш тиҫбеһе”, Кинйәғәли Абдуллиндың “Күҙгө ямғыр”, Мөхәммәт Илбаевтың “Эскән һыуҙар” исемле китаптарын күҙҙән үткәреп, бөгөнгө шиғриәтебеҙгә бәйле етди мәсьәләләрҙе күтәрә, үҙе әйткәнсә, “шиғриәткә ғашиҡ кешеләрҙең яҙғандарын тәнҡитләүе һис еңелдән булмаһа ла, кәрәклеген аңлап, бик ғәҙел тәнҡит һүҙҙәрен дә әйтә.

Бөгөнгө прозабыҙға ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәре лә, әлбиттә, аҙ түгел. Яңы китаптарға, айырым прозаиктар ижадына гәзит, журналдар биттәрендә әленән-әле байҡауҙар яһалып тора. Рафаэль Аҙнағолов был өлкәлә егәрле эшләй. Уның сығыштары төплө, киң планлы әммә шуныһы: уларҙан тәнҡит, кәңәш һүҙҙәрен табыуы бик ҡыйын.

Съездар араһы йылдарында сәсмә әҙәбиәттең ҡайһы бер ҡытыршы, кәмселекле яҡтары хаҡында йәшерәк быуын ҡәләмдәштәребеҙ күберәк һүҙ әйтте. Әммә был осраҡта ла уларҙың һүҙе, нигеҙҙә, йәш ижадсыларға төбәлгән ине. Ошо йәһәттән Зәки Әлибаевтың 2010 йылда “Ағиҙел”дең 4-се һанында баҫылған “Дәүер һулышын тойоп” исемле мәҡәләһе иғтибарҙы йәлеп итә. Унда Нияз Алсынбаев, Мөнир Ҡунафин, Гөлдәр Әхмәҙишина, Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева, Рәсүл Сәғитов, Гөлнара Мостафина һәм Зөһрә Бураҡаеваның яңы сыҡҡан әҫәрҙәре жанр төҙөлөшө йәһәтенән тикшерелә һәм, уңыштар менән бергә, ҡайһы бер етешһеҙлектәр ҙә атала. Автор, мәҫәлән, айырым йәш прозаиктарҙың әҫәрҙәрҙе бер ҡалыпҡараҡ һуҡтырыуын, хәтирәләр йәки хаттарға, ретроспектив һүрәтләү алымдарына саманан тыш йыш мөрәжәғәт итеүен билдәләй.

Заман прозаһының структур һыҙаттары хаҡында Гөлфирә Гәрәева ла бер нисә тапҡыр сығыш яһаны. Миҫал өсөн уның 2010 йылда “Ағиҙел”дең 8-се һанында донъя күргән “Хәҙерге прозала сюжеттан тыш элементтар” исемле мәҡәләһенә иғтибар итәйек. Унда автор оло һәм йәш быуын прозаиктарҙың, шул иҫәптән Хәйҙәр Тапаҡов, Ринат Камал, Хәлисә Мөҙәрисова, Гөлсирә Ғиззәтуллиналарҙың повесть һәм романдарына мөрәжәғәт итеп, уларҙа өҫтәлмә эпизод, пейзаж, хат кеүек элементтарҙың нисек һәм ниндәй оҫталыҡ менән ҡулланылыуын конкрет үрнәктәрҙә күрһәтә. Шуны ла әйтергә кәрәк: Гөлфирә Гәрәеваның 2008 йылда журналдың 1-се һанында баҫылған “Ҡәләм осонда – кеше һәм уның йәшәйеше” мәҡәләһендә тәнҡитсел ҡараш күберәк урын алған. Был, бәлки, мәҡәләнең яҙылыу маҡсатына ла бәйлелер: унда 2007 йылда “Ағиҙел” биттәрендә донъя күргән барлыҡ сәсмә әҫәрҙәргә лә байҡау яһала, уларҙағы ыңғай һәм етешһеҙ яҡтар билдәләп үтелә.

Әгәр прозаға тәнҡит шиғриәткә тәнҡиттән самалыраҡ булһа, драма әҫәрҙәренә әйтелгән һүҙҙәр республика матбуғатында тағы ла һирәгерәк күренә. Хәйер, сәхнә әҫәрҙәре үҙҙәре лә йыш баҫылмай. Был хаҡта 2008 йылда “Ағиҙел”дең 4-се һанында сыҡҡан “Драматургияның бөгөнгө проблемалары” мәҡәләһендә секция рәйесе Наил Ғәйетбай журналдарҙың баш мөхәррирҙәренә әҫәрҙәрҙе баҫтырыуҙан баш тартҡандары өсөн үпкә һүҙҙәре лә белдергәйне.

Йәш драматург өсөн “Тамаша” журналы – үҙе бер ижади мәктәп. Ундағы айырым мәҡәләләр, бигерәк тә Наил Ғәйетбайҙың сығыштары, ҡәләм тирбәтеүселәргә сәхнә әҫәрҙәренең серҙәрен өйрәтә, жанр талап иткән ҡанундарҙы төшөндөрә, конкрет миҫалдарҙа хаталарҙы, кәмселектәрҙе күрһәтә.

Әлбиттә, бүтән журнал һәм гәзиттәрҙә лә сығыштар юҡ түгел. Мәҫәлән, 2009 йылда “Ватандаш” журналының 7-се һанында Риф Әхмәҙиевтең “Ҡаһарманлыҡ драматизмы һәм героик драма” исемле мәҡәләһе баҫылғайны. Унда автор Флорид Бүләковтың “Шайморатов генерал”, Ибраһим Абдуллиндың “Йыр булып ҡайтырмын”, Нәжиб Асанбаевтың “Алтын бишек”, Хәким Ғиләжевтең “Ил балаһы” кеүек әҫәрҙәренә туҡталып, башҡорт драматургияһында героик-патриотик тематиканың үҫеш юлдарын күҙаллай, уның хәҙерге көндәге торошона баһа бирә.

Әҙәби публицистикаға килһәк инде, уға ҡарата тәнҡит мәҡәләләре бөтөнләй юҡ кимәлендә. Буласаҡ ғалимдарҙың, диссертанттарҙың ундабында сыҡҡан мәҡәләләрен иҫәпкә алып та булмай, уларҙа факттарҙы атау, йөкмәткене һөйләп сығыуҙан ары китеү юҡ. Ошо бушлыҡты тойопмолор, “Башҡортостан” гәзитенең былтырғы 3-4 февраль һандарында Лариса Абдуллина уҡыусылар иғтибарына заманында күренекле әҙип Рәшит Солтангәрәевтың радиоға яҙҙыртҡан әңгәмәһен тәҡдим итте. “Яҙғаның китапҡа инерлек булһын” тигән был интервьюла тәжрибәле ижадсы очерк жанры һәм публицистика тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша, фәһемле кәңәштәр бирә.

Бына ошондай ижад тәжрибәһе менән уртаҡлашыуҙар айырым мәҡәләләр рәүешендә матбуғатта күберәк баҫылһын ине, сөнки уның кинәйәле йоғонтоһо көслө була. “Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла” тигән халыҡ әйтемендәгесә, уны уҡыған йәш кеше үҙенә ғибрәт алыр ине.

Фекер уртаҡлашыу тигәндән, былтыр “Ағиҙел”дең 9-сы һанында Фәнил Күзбәковтың Ғайса Хөсәйенов менән ойошторған әңгәмәһе бик һирәктәрҙе битараф ҡалдырғандыр. “Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?” тип исемләнгән был яҙмала бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең, тәнҡитебеҙҙең торошо, заман менән бәйләнеше, уҡыусыларҙың, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең зауыҡ кимәле кеүек бик күп мөһим мәсьәләләр күтәрелә. Артабан журналда ошондай әңгәмәләр быйылғы 3-сө һанға тиклем даими дауам иттерелде.

Әҙәбиәт ғилеме лә, әҙәби тәнҡит тә – һүҙ сәнғәте өсөн һулар һауалай кәрәк нәмәләр. Улар үҫешмәһә, оператив булмаһа, әҙәбиәттең үҫеше лә яйлы бармай. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә тәнҡит ғилемгә ҡарағанда арттараҡ һөйрәлә. Бында, әлбиттә, секция рәйесе буларак, үҙемдең дә ғәйебем барҙыр. Төп эштәге вазифам, фәнни эш, уҡытыусылыҡ хеҙмәте мине бөтөнләй йүгәнләп тота.

**Владимир**
**ДЕНИСОВ,**
**рус яҙыусылары берләшмәһе рәйесе**

# Ваҡыт баһа бирер

Ике съезд араһында рус һәм рус телендә яҙыусылар берләшмәһе үҙҙәренең сафын Интернет ярҙамында, шулай уҡ йәш әҙәбиәтселәр менән эшләүҙең яңы формаларын эҙләү, әҙәбиәтте пропагандалауҙың заманса сараларын ҡулланыу иҫәбенә тулыландырырға тырышты. Был йәһәттән «Бельские просторы» журналы редакцияһы юл ярыусы булды. Былтыр, мәҫәлән, берләшмәнең яңы положениеһы раҫланды, «Гипертекст» журналы, «Истоки» гәзите һәм «Вагант» нәшриәте берләшмәбеҙҙең юридик ағзалары итеп танылды. «Вагант» тарафынан байтаҡ китаптар, дөрөҫ, әлегә әҙ тираж менән, нәшер ителде. Етәксеһе – шағир, прозаик Салауат Вахитов.

Бер үк ваҡытта эштең традицион формаларын да ҡулландыҡ. Әйтәйек, йәш авторҙарҙың ҡулъяҙмаларын тикшереү, рәсми булмаған осрашыуҙар ойоштороу, йәшенә ҡарамай, берләшмә ағзаларының ижади отчеттарын тыңлау – барыһы ла файҙаға ғына. Биш йыл эсендә 40-ка яҡын ҡулъяҙма тикшерелеп, бәғзеләре «Китап» нәшриәтенә, журналдарға йә гәзиттәргә тәҡдим ителде. Берләшмә ағзаларының 16 китабы сығыу ҙа күп нәмә хаҡында һөйләй. Геннадий Баннов, Юрий Горюхин, Айҙар Хөсәйенов, Георгий Кацерик, Николай Грахов, Кристина Андрианова, Рөстәм Вахитов, Нина Турицына һәм башҡа ҡәләмдәштәр бар был исемлектә. Теләк юҫығында шуны ла билдергем килә: элек «Йәш тауыштар» серияһында бер йылда ике китап сығарыу күҙ уңында тотолһа, хәҙер бер генә китапҡа ҡалдыҡ. Тимәк, йәштәребеҙ китап сығарыуға ҡарағанда тиҙерәк өлкәнәйә бара.

Быйыл Союзыбыҙға берләшмәбеҙҙән ике ағза ҡабул ителде. Улар – Эдуард Байков менән Салауат Вахитов. Элгәре йылдарҙа йылына бер йә ике йылға бер генә иптәшкә ағзалыҡ билеты тапшырыла торғайны. Ә бит хәҙер арабыҙҙа Сергей Янакиише талантлы шағирҙар һәм тәржемәселәр байтаҡ. Ҡайһы берҙәрен, ҙур йыйынтыҡтары сығыуын көтмәй ҙә, үҙнәшер ысулы менән нәшер ителгән уңышлы китаптарын күҙ уңында тотоп, Яҙыусылар союзына ҡабул итергә мөмкин, тип уйлайым.

Башҡа секцияларҙа хәл нисектер, беҙҙә иһә быуындар бәйләнеше йәһәтенән

проблемалар ҙа етерлек. Уның тамырҙары, әлбиттә, тиҫтәләгән йылдар төпкөлөнән үк килә, ҡайһы бер сәбәптәре – республикабыҙ сиктәренән ситтә, Рәсәй Яҙыусылар союзы ниндәйҙер кимәлдә ҡаҡшай башлағандан уҡ. Проблеманың асылы шунда: авторҙарыбыҙҙың берәүҙәре эксперимент рәүешендә ижадҡа йәбешеп, ҡалыплашҡан традицияларҙы һәм әҙәбиәттә нығынған быуындар бәйләнешен инҡар итә; икенселәре ҡәҙимге «массовый продукция» биреүҙе хуп күрә, үкенескә, уларҙың художество кимәленә етди дәғүәләр белдерергә мөмкин.

Бөгөнгө йыйында тәржемә проблемаһына ла оло иғтибар бирелер, моғайын. Әҙәби тәржемәнең сифатына һәм ваҡытында матбуғат биттәрендә донъя күреүенә өлгәшеү – кәрәкле эш, изге маҡсат. Ә бит һуңғы йылдарҙа тәржемә кимәле күҙгә күренеп төштө. Был фекерҙе дәлилләү өсөн «Бельские просторы» журналы иғлан иткән тәржемә конкурстарына анализ яһау ҙа етә. Һорау тыуа: берләшмәбеҙ эргәһендәге тәржемә секцияһы ысынлап та бармы, эшләйме, эшләһә, ниндәй сараларҙы бойомға ашыра? Миңә, мәҫәлән, тәржемәселәр төркөмөндә уның етәксеһе А. Хөсәйеновтан башҡа ағзаларҙың тупланыуы йә ниҙер эшләүе мәғлүм түгел. Н. Грахов етәкселек иткән балалар секцияһы баҡсаһына ла тәнҡит ташы ырғытырға ярай, әммә был төркөм, исмаһам, онотҡанда бер ҡулъяҙмалар тикшерә, һуңынан улар китап булып сыға йә журналдарҙа баҫыла. Һүҙ ыңғайында Мәскәүҙә баҫылған «Башҡорт поэзияһы антологияһы»на ҡарата ла ҡарашымды белдерергә теләйем. Берҙән, авторҙар уйланмай һайланған, икенсенән, ҡалын баҫма ярайһы күркһеҙ нәшер ителгән.

Ҡыҫҡаһы, берләшмәнең эше дауам итә – уның составында үҙгәрештәр ҙә булмаҡсы. Ә эш һөҙөмтәләрен иһә ваҡыт күрһәтер.

---

**Рәшит**
**САБИТ,**
**татар яҙыусылары берләшмәһе рәйесе**

# Иғтибар үҙәгендә – йәштәр

Башҡортостан Яҙыусылар союзының татар телле әҙиптәр берләшмәһе егерме йылға яҡын эшләп килә. Был осорҙа ул үҙенең сафын шаҡтай нығытты. Айырыуса һуңғы йылдарҙа Союзға йәш яҙыусылар Лилиә Сәғиҙуллина, Мөнир Вафин, Илдус Фазлетдинов, Фәниә Ғәбиҙуллиналарҙың ҡабул ителеүе эшебеҙҙе йәнләндереүгә бер этәргес булды. Хәҙер әҙәби секциялар ултырышы уларҙан башҡа үтмәй.

2010 йылдың йәйендә “Аҡсарлаҡ” альманахының презентацияһы булып үтте. Был китапҡа 20-ләп башлап яҙыусының шиғырҙары, хикәйәләре, нәҫерҙәре һәм әҙәби тәнҡит мәҡәләләре инде. Авторҙарҙың әҫәрҙәренә анализ биреп, әлеге яҙыусыларыбыҙ Лилиә Сәғиҙуллина, Мөнир Вафин, Илдус Фазлетдинов һәм башҡалар сығыш яһаны. Әлбиттә, бындай сараларҙан өлкән иптәштәребеҙ ҙә ситтә ҡалмай. Шағирҙар Әхәт Ниғмәтуллин, Марат Кәримов, Сәғит Хафизовтар

китап тураһында, айырым авторҙарҙың әҫәрҙәре буйынса үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты.

Бындай сараларҙы үткәреү традицияға әйләнеп бара. Уларҙы беҙ Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте мөхәррире Динә Мырҙаҡаева менән бергәләп ойоштторабыҙ. Кисәбеҙгә, яҙыусылар менән бер рәттән, әлеге альманахта әҫәрҙәре урын алған 15 – 20 башлап яҙыусы ла (күпселеге райондарҙан), Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты студенттары ла саҡырыла. Авторҙарыбыҙ яңы шиғырҙарын уҡый, йыш ҡына үҙҙәре яҙған йырҙарҙы ла башҡарып күрһәтә. Шулай итеп, кисәләребеҙ, ғәҙәттә, байрам төҫөн ала.

Һуңғы йылдарҙа әҙәби кисәләр үткәреү һирәгәйҙе. Әлегә беҙ өс кенә кешенең, айырым алғанда Фәтих Сайфран, Рафаил Хафизов һәм Илдус Фазлетдиновтарҙың кисәләрен үткәрҙек. Фекер алышыуҙарҙа, был авторҙарыбыҙҙың ижадтарын нигеҙҙә хуплау менән бергә, уларға фәһемле кәңәштәр ҙә әйтелде.

Өлкән һәм абруйлы шағирҙарыбыҙ әҙәби аҙналарҙа үҙ әҫәрҙәрен уҡырға ни өсөндөр ҡыйынһына. Был сараның әҙиптәр өсөн дә, әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн дә файҙалы булыуын иҫәпкә алмайҙар. Ошо кисәләрҙә уларға үҙ әҫәрҙәренә матбуғатта булмаған ихлас әйтелгән фекерҙәрҙе ишетергә мөмкин.

Йәш ҡәләмдәштәр һәм башлап яҙыусылар менән семинарҙар ойоштороу ҙа эшебеҙҙең бер төрө булып тора. Борай, Балтас, Ҡалтасы райондарында яҙыусыларҙың Яңауыл ойошмаһы менән берлектә үткәрелгән был саралар күп кенә һәләтле авторҙарыбыҙҙы активлаштырҙы. Улар араһынан, мәҫәлән, Фатима Ғилметдинова, Фәнзәлиә Мәснәүиева, Аида Хәйретдиновалар тәүге китаптарын да күрҙеләр инде.

Әҙәбиәт, айырыуса шиғриәт – йәшлек. Һәләтле йәштәрҙең беҙгә килеүенә шатланабыҙ. Күрелмәгән хәл тиергә мөмкин: һуңғы биш йылда, беҙҙән фатиха алып, унлап йәш әҙип «Йәштәр тауышы» серияһында тәүге китаптарын сығарҙы. Уларҙың ҡайһы берҙәре нәшриәткә икенсе китаптарын да тәҡдим итте инде.

Башҡорт дәүләт университеты студенттары менән бәйләнешебеҙ ныҡый бара. Улар беҙҙең әҙәби аҙналарҙа, китаптарға презентация үткәргәндә даими ҡатнаша. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттарын да күҙҙән төшөрмәйбеҙ. Филология факультетынан 4-5 башлап яҙыусының әҫәрҙәрен әҙәби аҙнала тикшерҙек. Шуларҙан Руслан Сөләймәновтың тәүге йыйынтығын секция ултырышында нәшриәткә тәҡдим иттек. Илүсә Исмәғилованың ҡулъяҙмаһы ла өмөт уята, секция ултырышында ҡараласаҡ.

Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты татар һәм рус телдәре бүлеге студенттарынан бер нисә башлап яҙыусының ҡулъяҙмаларын киңәйтелгән секция ултырышына ҡуйҙыҡ, йәш ҡәләмдәштәребеҙгә үҙебеҙҙең теләктәребеҙҙе, кәңәштәребеҙҙе әйттек. Өмөтлө йәштәребеҙ бар, тик уларға, минең уйымса, ең һыҙғанып эшләү өсөн ихтыяр көсө етмәй. Ә әҙәбиәт ул даими һәм бирелеп эшләүҙе талап итә. Мин йәш ҡәләмдәштәргә шуны һәр ваҡыт иҫтә тотоуҙы теләр инем.



**Мәхмүт**
**ҺИБӘТ**

# ҒАЛӘМ ТҮҢӘРӘГЕ

## ПОЭМА

*Хис ҡыйралып, күңел төңөлгәндә,*
*Ҡояшым янған көйө һүнгәндә,*
*Сыҡтым эргәмдәге урманға мин,*
*Унда ғына донъя ҙур моңға тиң.*
*Шул моң терелткәндер ҙә сәмемде,*
*Һиҙҙерткәндер, тим, үрәсәгемде:*
*Ҡуш табаным баҫҡан был ерҙе лә,*
*Гел-гел күҙем баҡҡан эңерҙе лә*
*Мәлдең тын ғына тартып алырын,*
*Йәнемдең бер ғаләмһеҙ ҡалырын.*
*Ни һаҡланыр ғаләмһеҙ өнөмдә?*
*Хис йәшәй алмай үрһеҙ хәлендә.*
*Ғаләм түңәрәге — серҙе бар иткән,*
*Бөтә йыһанды аҡ нурҙай иткән,*
*Ере булғанды ғына гөл иткән*
*Ғаләмдән килгән ҡояш нурҙары,*
*Наҙҙарын ҡушып изге, юғары.*
*Ерһеҙ, йәтим рухым, биҙеп, осасаҡ*
*Алыҫ йыһанға. Шунан һуң, бер саҡ*
*Ҡайтыр ҙа иңрәп төпһөҙ күктәрҙән,*
*Ҡырҡ төн һыҡтар, еркәй, тип, үтәргән*
*Үпме фажиғә. Әйткәс бәддоға,*
*Тойормон алда нурһыҙ бер доға.*
*Ул, ғибрәт йәйғор, әле үк һыға,*
*Көнөмдө хәтәр ыуына тыға.*
*«Йәнемдә — тамуҡ, ер ҡулдан киткәс,*

---

*Мәхмүт Һибәт (Мәхмүт Һибәт улы Уразаев — 1936) Ейәнсура районының Ғәббәс ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай, республика баҫмалары редакцияларында эшләй. Унлап китап авторы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәше менән ихлас тәбрикләйбеҙ!*

*Тыуған нигеҙем урыны кипкәс,*
*Өрпәгем ҡаъбәм булған хәленән,*
*Яҙып, мәрхүмдәй, бөтә йәменән,*
*Түмәр тиңендәй ҡалып, бер үҫкәс,*
*Үрҙән батырҙар ораны киткәс,*
*Ҡояшым офоҡ түренән сиккәс,*
*Ары ни генә ҡыла алырмын?*
*Көн эңеренә, моңом, тарырһың».*
*Ошондай хәүеф, шом менән киләм,*
*Урманда ғына — шифалы ел, йәм.*
*Урман — тыныс, һил, әсә тынындай,*
*Ул бит яһиллыҡ ыуындай ҡурмай.*
*Урман — ер йәне, наҙлап, шыбырлай,*
*Шиңгән илһамым, тоям, ҡыбырлай,*
*Терелә башлай, көс, хис, нур йыйып.*
*Ул бында инде эйелмәҫ аҫҡа,*
*Хәлһеҙләнеп тә ятмаҫ ул башҡа.*
*Илһамым нурын күктәргә атһа,*
*Офоҡто биҙәп, йәйғорҙай ҡалҡһа,*
*Унлата сер-көс ҡайтыр һиллеккә,*
*Илаһиланыр мөхәббәт таты,*
*Еркәйҙә артыр ғәшиҡтар анты.*
*Илһамым, терел, терел, көс йый ҙа,*
*Үргә ынтылған һөрөмдө ҡый ҙа.*
*«Мин йолҡонғанмын әле һуң ниҙән?*
*Еркәйҙе тартып, йә, ал һин минән!» —*
*Тиеп әжәлгә өндәш үҙәрҙән,*
*Әжәлдең йөҙө булыр күгәргән,*
*Йә, көл төҫөндәй, булыр ағарған,*
*Ә һин балҡырһың, йәнең — моңдарҙан!*
*Мин бер бөтөндөр Арҡайым менән,*
*Ер хасил иткән һәр тауым менән,*
*Тауҙай сал төйәк — Таналыҡ менән,*
*Өҫкәлектәге һәр балыҡ менән,*
*Һуҫән үҫтергән һәр ҡамыш менән,*
*Үлемһеҙ сәсән, йор Бабич менән!*
*Бар тыным, көнөм — изге тәҡдирҙән,*
*Мине ни йолҡор тупраҡтан, үҙән?!*
*Әсәмде ҡыуып ҡарағыҙ гүрҙән,*
*Меңәр йыл элек яралғас, ерҙән*
*Беҙгә мәңгелек көсө бирелгән,*
*«Ул көс, хис-ҡөҙрәт — Башҡорт!» — тиелгән.*
*Мине өтөр йән үҙе ер-илдән,*
*Ҡанат-ваҡыттан, алтындай телдән,*
*Моң ғына күрер бөйөк ҡәҙерҙән*
*Мәхрүм ҡалыр, бел, көлгәс һәр ниҙән.*
*Мин мәңгелектең үҙ йөҙөн күрҙем,*
*Илткән юлымды алдан гел белдем.*
*Мин, еркәй, йәнә — һил урманыңда,*
*Тере илһамдың мин йыһанында.*
*Табаным йылы тупраҡҡа һеңә,*
*Ҡарашым — өҫтә, нур уҡтарында,*
*Сихри ут — ылыҫ, сер уҡтарындай.*

*Ғәжәпмен, еркәй, күк шифаһына,*
*Йән ирей былдай наҙ ҡосағында!*
*Наҙ шул, наҙ тулай ер йырында ла,*
*Ауырлы әсә ҡарынында ла.*
*Наҙ — селләле ғинуар ҡарында ла,*
*Боҙ һулышының ҡурыуында ла,*
*Сөнки ҡыш йәне — тулар яҙ тыны,*
*Ә яҙ ҡарыны — тыл, тыл ялҡыны!*
*Йыр ҙа — ғәләм ул! Былай тиеү аҙ,*
*Ерҙә тыуа тыл, йәйғорҙай моң-саз.*
*Тирәмә бағып, тындым. Серт-сертләп,*
*Акациялар орлоҡ өлгөртә,*
*Йәшәү — сер кеүек, нур, тыл тирбәтә.*
*Бушҡа үҙемде әммә йыуаттым,*
*Йән борсолғандай. Мин ни юғалттым?*
*Юғалтыу мәле һәр саҡ ул өлгөр,*
*Һуңғы мәлемме әллә был эңер?*
*Тертләр өндәрме хәҙер һәр үрҙә?*
*Эҙләй инем бит тын һиллек ерҙә.*
*Эҙләп тә инде хозурлыҡ йәмен,*
*Теләп был йәнем уның бит тәмен,*
*Сыҡҡайным бында — урманға тиеп,*
*Киләменме ни хәҙер баш эйеп,*
*Офоҡ иңенә ҡарай ҙа алмай,*
*Хисем, асыл, тим, асыл һин, йылмай.*
*Күңелем, үрҙәй, бул, тим, сыҙамлы,*
*Сыҙамлыҡ менән еркәй ҙә данлы.*
*Ҡуҙғалдым алға, сәмем артҡандай,*
*Ағас үренә ут-үрт ҡапҡандай*
*Булып күренде миңә шул мәлдә,*
*Ут түгел, тейен ине ул әлдә.*
*Тейен ырғыны шыршы суғынан*
*Шыршы суғына, һәм үрт яңынан,*
*Ҡабат ҡабынды уның эҙендә,*
*Йылмайып ҡуйҙым быға үҙем дә.*
*Йәнлек, ҡош ерҙә — һиллек йүне ул,*
*Бер йыуатыусым — тейен, эйе, ул.*
*Был утлы йомғаҡ, бәүелтеп сүкты,*
*Юғары, ары, арыға осто.*
*Бына йөрәгем... Йыш-йыш ул һукты,*
*Хәлһеҙ ҡалды ла мине лә йыҡты.*
*Мине — хәлһеҙҙе, йә, кем ҡурсалар?*
*Һәр төрлө яттар бында сыҡһалар,*
*Йығылғанымды ситтән күрһәләр,*
*Эскәндер йүнһеҙ, тип ҡул һелтәрҙәр,*
*Яҡын да килмәҫ улар ярҙамға,*
*Иркенлек хәҙер әжәл-яҙаға.*
*Тик күҙем әле күрә, аң — теүәл,*
*Китһәм китермен. Белер үҙе мәл.*
*Ғаләмдә йәнем осоп йөрөгәс,*
*Галактикала мең донъя күргәс,*
*Шунда ул ҡалыр оҙаҡ-оҙаҡҡа,*
*Һағынып тулар шунан, аҙаҡтан*

*Еркәйҙе — ғәзиз Урал-ватанды,*
*Унда тыуған ал, илаһи таңды*
*Хәтәр һағынып, әйләнеп ҡайтыр...*
*Ҡайтыуҙың тиңһеҙ шатлығын татып,*
*Бирелеп һөйгән йәрենең йәмен,*
*Иңрәнеп һүнгән шишмәнең тәмен*
*Ҡабат ҡайтарыр көнгә, терелтеп, —*
*Моңдоң ҡөҙрәтле сер-үре күптер!*
*Нурҙай ҡанатлы илһамым менең,*
*Үрҙәр иңендәй нур-аңым менең*
*Шунан һуң ғына һүрелеп, байыр,*
*Ул байыр, шәфәҡ булып йылмайыр...*
*Ҡояш офоҡҡа һеңеп барамы?*
*Йәнгенәм һүнеп, һүнеп барамы?*
*Бөтөп тын, шиңеп барамы йөрәк?*
*Әжәл үсенә шул ғына кәрәк.*
*Төлкө үттеме? Ул, тейә яҙып,*
*Минән өрктөмө? Эҙләйҙер аҙыҡ.*
*Ятам. Офоғом һүнерме тиҙҙән?*
*Һәр ир ҙә үлгән, әжәлгә түҙгән.*
*Офоҡ — тып-тыныс. Ул: «Иң мөһиме —*
*Тәңре-ваҡыттыр, ваҡыт», — ти ине.*
*Ваҡытмы ни, йә, ерҙә йәм иҙгән,*
*Илаһилыҡтай үрҙәр донъяһын*
*Гел-гел, гел аҫҡа — гүрҙәргә күмгән,*
*Изгегә тиңләп йотор һауаһын?*
*Ваҡыт, һауа, ер — Тәңре серҙәре,*
*Намыҫ, мөхәббәт — кеше үрҙәре,*
*Уның айбары ынтылыр үрҙәр,*
*Үрҙәрҙә кеше үҙ ишен эҙләр.*
*Ғашиҡтар ғына була көн-илле,*
*Тик ғашиҡ булып йәшәү еңелме?*
*Илармы офоҡ, мине юғалтып,*
*Таң һарылары, йөҙөн үңалтып?*
*Ғаләм бөрөлә кеүек, һыҡтанып,*
*Таң йәме ҡалыр инде тутланып,*
*Көн килә алмаҫ һымаҡ һутланып.*
*Ни һуң ҡоротоп, иҙә был ерҙе?*
*Ерҙә бығаса һәр ни ҙә түҙҙе.*
*Көнгә, мәлгә лә тынғы юҡ, тынғы,*
*Үр әҙерләйме ваҡытҡа ҡынды?*
*Ошолай, еркәй, көнөң яҙмышы,*
*Был яҙмыш — ниндәй иблис ҡарғышы?*
*Ниңә һуң тиңһеҙ серҙәй йәшәгән*
*Сал, оло ғаләм — донъя анаһы*
*Ер менән бергә иңрәй, яралы?*
*Ниндәйҙер бер ыҫ йота йөрәгем,*
*Мин хәҙер — ни һуң? Уймы терәгем?*
*Уйым да — хәлһеҙ. Тик ул — ирektә.*
*Уй ҡанатының көсө — ирлектә,*
*Ир сағым менең ҡайҙа? Һиллектә*
*Бирәмме мин йән? Күҙем — тын, күктә...*
*Шул мәл ут тубы миңә һикерҙе,*

*Шайтанмы эшен шулай еткерҙе?*
*Хәҙер алыр ул, матҡып алҡымдан,*
*Яҙҙырыр тәүҙә айыҡ аҡылдан.*
*Эй, рәхмәт төшкөр, туп-ҫрт тигәнем,*
*Миңә ул әжәл килде тигәнем —*
*Ялҡындай ғына тейен икән дә,*
*Мәрхәмәт ҡалған әле ул йәндә.*
*Мине ул күреп торған, аңлаған,*
*Һүҙҙәрен генә әйтә алмаған.*
*Ул мине йәлләп, ҡурҡыуын еңеп,*
*Бына, йәшәгер, бәшмәк килтергән!*
*Беләм: үҙенә күп ризыҡ киптергән,*
*Ниндәй гонаһһыҙ, тимен, йәнлектәр,*
*Улар — донъяның йәне кеҫектәр.*
*Ә һуң иң вәхши бәндәләр — ниҙән?*
*Ананан тыуып, көләләр ерҙән,*
*Һыу эсеп үҫеп, көләләр һыуҙан,*
*Көлмәйҙәр бары йәне туңыуҙан.*
*Тау, күк, ҫр кеҫек бейек көндөң дә*
*Утлы көс тулы йөрәге туңһас,*
*Әйт, минең йәнем нисек сыҙаһын?*
*Ысын дәүерҙәр ил, ҡот, йән быумаҫ,*
*Хисте, аҡылды, тойғоно алдап,*
*Алданмаһалар, әжәлдәй янап.*
*Аҡыл тамсыһы ятамы ҡороп?*
*Хисте ҡара ҫр алырмы һурып,*
*Төн китмәҫ өсөн килерме, ныҡып,*
*Тойғомдоң һуңғы мәлен дә һығып?*
*Мәхшәр эсендә ҡалырмы Урал,*
*Ҡалырмы донъя? Ах, шом, тим, юғал,*
*Юғал, тим, ерҙән йәндәр туңлығы.*
*Бар ҫрҙә ғаләм, таңдарҙың уғы,*
*Шул уҡ-нурҙарҙыр көндәрҙең һағы.*
*Йәнем, ышансы аҡыл ҫренә,*
*Ул күмелмәгән упҡын төбөнә...*
*Уйымдың йәне — тере төйөндәй,*
*Миңә үҙ йәнен һонған тейендәй,*
*Үтер-ҫтмәҫ сер — эңер көйөндәй,*
*Тын ғына осҡан ҡанат елендәй,*
*Ҡуҙым һүнәме, бөтөп көскәйе?*
*Йән ҡуҙының ул юҡтыр кескәйе,*
*Олуғ йәндәр ҙә, офоҡтай яныр,*
*Ялҡын-уттары бөткәндәй һүнә.*
*Әжәл һәр кемдән, таңдан да көлә,*
*Минән дә көлһөн, көлһөн... Алыҫта,*
*Офоҡ сигендә, йә, ни шартланы?*
*Шартлауҙар — хәтәр, ниҙе йотманы,*
*Күк менән ерҙе бергә бутаны,*
*Бөтөрҙө йәмде көйҙөрөп, иҙгәс,*
*Шартлауҙар: «Туйҙым, туҡталам», — тимәҫ.*
*Кемгәлер һүҙем — бушлыҡ ҡыналыр.*
*Әжәл, иҫертеп, көлөп торалыр,*
*Бәлки, эргәмдә, сигем — ошолор?*

*Юҡ, тойғом һис, һис һаташмай, иҫән*
*Шартлауҙан йәнә йәнһеҙ ҡалғандыр*
*Йылға екәне, моң тигән елкән.*
*Тулһеҙ ҡалғандыр йәш, саф ғашиҡтың*
*Янып һөйгәне, наҙым тигәне.*
*Таттан яҙғандыр өлкән ҡортсоноң*
*Солоҡтан алған балы — йәй тәме.*
*Ҡурҡыныс ыҫ шул шартлау донъяһы,*
*Шуны килгәйне тетеп, ҡыяһы.*
*Йөрәгем сәнсте, тишкәндәй сир-үк,*
*Гүйә, аҫауға ташланды ҡороҡ.*
*Һулышһыҙ ҡалған йән менән моңдай,*
*Сер хисе, эңер офоҡтан ҡолай.*
*Миңә тын ғына кәрәктер донъя,*
*Ер һәм кис ашар ризыҡ менән дә*
*Мәңгегә инде хушлашыу. Әле —*
*Шул хушлашыуҙың мәле етеүҙер,*
*Мәл йүгереүен өҙөп китеүҙер.*
*Ауырҙы алдап, урап уҙа ла,*
*Ялбарып, мәлде алға һуҙа ла*
*Белмәм. Сигемдән мин сигенмәм дә,*
*Ҡурҡмайым, кәрәк эш ҡылғас көн дә.*
*Мөҙҙәтһеҙ ауып, мин ни сикләнем?*
*Сыҙам тау, әле һине иҫләнем.*
*Күстәр — халыҡтар, дәүерҙәр — сыҙам,*
*Күктәй, өмөттәй, ил-ерҙәр — сыҙам,*
*Сыҙамлыҡ барҙа таң, түл яралған,*
*Үрле, шифалы нур, бел, яралған...*
*Китермендер мин төн менән бергә,*
*Көнөм аҙағы һаран нур-сергә,*
*Миңә әйләнеп килмәҫ көн ҡабат,*
*Илһамым — ер тип, таптым мин ҡанат.*
*Бейек офоҡ, күк, ғаләм үрендә,*
*Ә һуңғы мәлем — көсһөҙлөк тирендә.*
*Миңә ғазапһыҙ яҙмыштыр гүрҙә:*
*Бит юҡ гонаһтың язаһы булмаҫ,*
*Ерҙә һөйөүем шифаһы тынмаҫ.*
*Тейен, ялҡын-түп, килсе янғараҡ,*
*Юҡ, күр, йүнәлә был яҡҡа берәү,*
*Булмаҫ ул Йәркәй, Бейештәй терәү.*
*Яуыздан ҡурҡҡан шикелле, тейен*
*Ҡинәт ырғыны, боҫто суғына,*
*Ә мин ҡалҡына бирҙем тын ғына.*
*Эте сапҡайны, китте артынан,*
*Кемдәр юҡ хәҙер тарлыҡ затынан,*
*Яттан, ҡатынан ни файҙа көтмәк?*
*Ҡатылыҡ илгә үстермәй икмәк.*
*Күрһә лә меҫкен хәлемде урман,*
*Ул миңә — һаҡтыр, терәген ҡорған.*
*Ҡояш һүнеп үк бөтөп барамы?*
*Тейен бер аҙҙан килде тағы ла,*
*Сәйер был мәлдәй, иңгә ҡағыла.*
*Тейен... мин. Юҡтыр инде аралыҡ,*

Был — мәл уйыны, тиеп юрарлыҡ.
Эй, тейен, өмөт күҙендәй ҡарай,
Ул — йыуатыуҙай, ул белмәй алдай,
Белмәй үрт һона, донъяһы — таңдай.
Мин хушлашырмын — көн һүнгәс тамам —
Был донъя менән. Тик яңғыҙ ҡалмам,
Эргәмдә тейен илап ултырыр,
Ятҡан еремдә шыршы тамыры
Артабанғы көн, йәшәү хаҡына
Арымайса дым һурыр тын ғына.
Эйе, ул талмай дым һурыр, һурыр,
Һәр олон көндәй сатырын ҡорор,
Үр-сатыр — бейек, ул — тиңһеҙ бер бәҫ,
Унан шом яуып, таш булып бәрмәҫ.
Дым һура тамыр, әле теребеҙ,
Йөрәгем генә — хәлһеҙ, ул үрһеҙ,
Быны бит, тойоп, тейен дә белә,
Шуға ул йәнә яҡын үк килә.
Тик алыҫтағы баяғы шартлау
Бер аҙға ғына иҫтән сыҡҡандыр,
Ниндәй елдәрҙең ҡанаты ҡатҡандыр
Бындай шартлауҙан? Ул ни һыҡҡандыр?
Шартлауҙарҙың бар үҙ ялсылары,
Күк-үр — ялсымы? Көс ул юғары.
Шуға ла уның һәр мәле — гөлдәй,
Беҙ генә быны, йәшәпме һиҙмәй,
Йәм асыллығы тәңреһе итеп,
Табыныу үре итеп алмайса,
Килә бирәбеҙ таңдан таңғаса,
Шартлауҙармы ни көнгә юл аса?
Шифалы ҡөҙрәт — күк күкрәүендә,
Йәшен йәненең тиңһеҙ серендә.
Ошо күкрәүгә генә табыныр
Моң сәме йәшәй хисем үрендә.
Йәшәйҙер йәнә Арҡайым сере —
Тормошоботоҙоң бик-бик сал эҙе...
Унан да сал ҡурай тамыры, түле.
Башҡорт ҡанымын, ти, Ванга үҙен,
Ул — сер-аң, биҙәй йыһандың йөҙөн.
Хистәрҙең нурлы күкрәүе — ул йыр,
Ғаләмгә үҙҙер бындай күкрәүҙәр.
Кеше күңеле гел күкрәһен тип,
Изге иңдәрен йәйгән күк-үрҙәр.
Шәфәҡ шиңәме, бөтөп барамы?
Минең күҙемдә эңер янамы?
Эргәмә тағы ул — тейен килә,
Аңымда — хәлһеҙ ут-төйөн генә.
Эй, ғаләм — йәшәү, көн түңәрәге,
Һиндер мәңгелек түлдең йөрәге,
Ерҙәге мәлдәр тылсымдарындай,
Йәнең — илаһи, сер-өндәргә бай.
Тик миңә был мәл — әжәл ҡапҡаны,

*Эңер һиҙҙермәй ары атланы,*
*Мине ҡалдырып тейен янында,*
*Әжәл ҡабыҙған һалҡын янъында.*
*Тейен, төн, шом да янымда ҡуныр,*
*Ыршы тын ъына ерҙән дым һурыр.*
*Тейенем килеп, янъа һыйынды,*
*Асылмаҫ бер сер булып уйылды.*
*Төн — шифа, төндә сафлыҡ көсәйә,*
*Сафлыҡ — һиҙгерлек, ул ҡолас йәйә.*
*Төндә ул йөрәк хәл дә кәр туплай,*
*Төндә йылъа ла сафыраҡ, ҡоттай.*
*Тейен йәнемә, бәлки, ут өҫтәр,*
*Ерҙән ҡалҡмай гел ҡараңъы көстәр.*
*Мәлдәр йүгерһә, ҡараңъы сүгер,*
*Һылыу ҡыҙҙай алһыу таң миңә*
*Гүзәл биҙәкле ҡулъяулыҡ сигер.*
*Илһамлы, наҙлы, алсаҡ нур килеп,*
*Йылыһын һирпеп, битемдән үбер.*
*Ә, бәлки, яныр ҡуҙҙай, ошонда*
*Ослаԥыр, бөтөр был тамсы ъүмер?*
*Донъянан, эйе, донъянан үтәм,*
*Юҡ, уны мин бит таңдаръа илтәм.*
*Был төнө ъаләм түңәрәгенең*
*Ҡырыҫ бер һөйөүҙер ҙә ъазаптыр.*
*Йәнең нур булһа, түлле нур булһаң,*
*Бар үрендә лә донъя — азаттыр,*
*Йәнең ыу булһа, күккә ыу һонһаң,*
*Ғаләм менән бергә Ер, Ер ҡатыр,*
*Туң нур ул була алмай таң-батыр.*
*Тын ъына ҙурлап ъаләм түңәрәген,*
*Таңды көтәбеҙ: еркәй, мин, тейен,*
*Беҙгә урман төн, дым, һулыш бирҙе,*
*Күк-сер йәнемә гел өмөт өрҙө,*
*Нәҡ ъаләмдәй аҡлан түңәрәге —*
*Инде был аҡлан изге төйәгем,*
*Уъа ышанып тибә йөрәгем.*
*Ҡаты йәндәрҙең ҡанһыҙ теләге —*
*Ғаләмһеҙ ут ул, һис бер киңлекһеҙ.*
*«Изгелек-нур — йән күге ҡояшы», —*
*Был таң, тейен, мин — шулай тинек беҙ.*
*Шулай тине мәңгелек үр — ъаләм,*
*Ғаләм үрендә — мең үр, мең серҙер,*
*Ғаләм түңәрәге — сикһеҙ биләм,*
*Хыял ул шул киңлектә йүгерер,*
*Ҡанатында уның моң өлгөрөр...*
*Мин аяҡҡа баҫтым. Аҡлан шаһит:*
*Донъя терелгәнен Күк күрер.*
*Ғаләм түңәрәге, мине алып,*
*Сикһеҙ йыһандарҙа елдерер!..*

*1995*



**Лариса**
**АБДУЛЛИНА**

## *Зыяратта*

*Ә зыяратта — тынлыҡ. Әйтерһең дә,*
*Хатта ваҡыт ҡалған туҡталып.*
*Бәндә ғүмеренә шаһит таштар*
*Ҡибла яҡҡа тора үҡталып.*

*Тик бындағы ошо серле тынлыҡ*
*Күңелдәргә бирмәй тыныслыҡ.*
*Тормош — даръя. Кеше ғүмерҙәре —*
*Шунда йөҙгән кескәй юныслы.*

*Ҡәберлектә — боронғолоҡ рухы,*
*Мәйет еҫе килмәй үлемдән.*
*Күпме бәндә менән заман заңы*
*Тупраҡтарға бергә күмелгән.*

*Йыһандарға һыймаҫ әҙәми зат*
*Күреп белә ҡәбер тарлығын.*
*Ниндәй йәмдәр табып йәшәй кеше,*
*Аңлай тороп үлем барлығын...*

*Әллә ниңә ошондағы шомлоҡ*
*Уйландыра йәшәү хаҡында.*
*Байлыҡ, дандар — кәртә арттарында,*
*Рухи сафлыҡ ҡына хаҡ бында.*

---

*Лариса Абдуллина (1975) Дәүләкән районы Мәкәш ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты.*

*Зыярат — фәһем, мәғәнә лә төҫлө,*
*Ер-әсәгә һеңһен хаҡ бәндә.*
*Ҡәберле лә булыу — бәлки, бәхет,*
*Нисек баһаларҙар «тегендә»?..*

*Әллә ниңә ошо ҡәберлектә*
*“Йәшәү — бәхет!” — тинем. Әкәмәт...*
*Намыҫ ташлар сиктән йолоп алһын*
*Хоҙайыма илтер мәрхәмәт.*

## Йәй

*Матурлыҡҡа күҙҙәр тиҙ өйрәнә,*
*Йәшел төҫтө ҡараш үҙһенә.*
*Сағыу йәйҙең һәр бер биҙәгендә*
*Иркәләнә кеүек күҙгенәм.*

*Хыялдарҙы яҙлыҡтырыр мәлдәр —*
*Офоҡтарҙа ҡараш аҙаша.*
*Танһыҡ булмаҫ ине был миҙгелем,*
*Мин килмәһәм көҙ, ҡыш, яҙ аша.*

*Күктәремдең төпһөҙ зәңгәрлеген*
*Айҡап булыр микән уйымда?*
*Бөгөн шундай мин бәләкәй кеүек,*
*Кисә етә ине буйым да.*

*Йәшел генә ошо ағастарҙың*
*Үтһәң икән һыйпап башынан.*
*Ә көндәрем сәскә кеүек һулый,*
*Хисләнергә шунда ашығам.*

*Бесән еҫен уртлап алып китәм,*
*Урлап алып китәм ҡалаға.*
*Илһамыма тулған мәлдәремде*
*Хәтерләтер әле ялағай.*

*Еләктәрҙе өҙөп алырғамы*
*Иҫтәлеге итеп йәйҙәрҙең?*
*Һәр һулышым тынды ярып инә,*
*Әллә микән үҙем үҙгәрҙем.*

* * *

*Һиҫкәндереп ойоп барған йәнде,*
*Өтөп алды миҙгел сасҡауы.*
*Баш әйләнде сағыу ҡояштан да,*
*Бөтә донъя барҙы хас ауып.*

*Яйлап ҡына түгел, боҙҙары ла*
*Аҡтарылды һыймай ярына.*

*Әйтерһең дә, йылға хатта үҙе*
*Бер йәшерен серҙән арына.*

*Бөрөләр ҙә иркәләнеп түгел,*
*Салт ҡояшҡа шартлап асылды.*
*Бар ғаләмгә һыймаҫ кеүек хистәр,*
*Тыйып булмаҫ кеүек ҡар-һыуҙы.*

*Ҡайын тәңкәләре араһына*
*Күңелдәген һирпер ел тулыр.*
*Әй, тәрән хис, ярһыу яҙҙарҙа ла*
*Йәшәмәнең ниңә сер булып?*

* * *

*Иҫкерҙеме йән дә күҙҙәр еткәс,*
*Ярһыу күңел көттө яңылыҡ,*
*Юҡмы әллә быйыл күктәрҙең дә*
*Болоттары аҡ ҡар яуырлыҡ.*

*Ҡышҡы сафлыҡ шундай зарыҡтырҙы,*
*Ҡанат ҡаҡһын ине нурлы таң.*
*Һағындыңмы ерҙе, күк сәләме?*
*Ә мин һиңә ғашиҡ ҡабаттан.*

*Бик тилмереп көтәм ҡарашыңды,*
*Ерҙә балҡыр бына тәүге ҡар.*
*Ошо һалҡын сихри бөртөктәрҙең*
*Күңелдәрҙе имләр нуры бар.*

*Яҡтылыҡты көҫәп ергә тубыҡланам,*
*Ҡара тупраҡ көтә аҡ ҡышты.*
*Ерҙән күтәрелгән томан булып*
*Теләктәрем күккә олғашты.*

## Ҡыйыҡһыҙ хыял

*Йәй көндәре, их, һүрелде инде —*
*Август күҙе тамам сыланды.*
*Тарковский фильмындағы һымаҡ,*
*Болот баҫты беҙҙең соланды.*

*Ураҡандай бер ҡоралы ғәскәр,*
*Бар тирәне ҡурғаш ҡаманы.*
*«Уҡ»тар ергә табан яуҙы ғына —*
*Ышыҡ табыр урын ҡалманы.*

*Шымсыларҙай, ямғыр тамсылары*
*Үтер урын тапты ҡыйыҡтан.*

*Һин тағы ла вәғәҙә бирерһең:*
*— Һарай һалам һиңә, байыҡһам!..*

*Ул һарайға һис ни үтә алмаç.*
*Мин булырмын унда ханбикә:*
*Иртә ятып, бик-бик һуң торормон,*
*Ҡыланышым булыр бик иркә.*

*Бик күп итеп гөлдәр үçтерербеҙ,*
*Баҡсабыҙҙа һайрар былбылдар...*
*Хыялдағы ошо һарайыңа*
*Күскем килеп китә быйылдан.*

*Танһыҡ ҡына булған уйҙарымдан*
*Атылған «уҡ» ҡабат уятыр.*
*Окоп итеп тас ҡуяйым әле,*
*Ә һин хыялыңды уйлай тор...*

## *Яныу*

*Әллә ниҙәр әйтмәнең дә кеçек,*
*Өнһөҙ генә киттең ҡалдырып.*
*Ҡапыл гөлтләп тоҡанды ла һүнде*
*Йәнде йылытыусы тандыр ут.*
*Аһ, йөрәгем...*
*Өҙөлмәне лә ул,*
*Тик боҙланды кеçек был йөрәк.*
*Күктән ҡөҙрәт хәбәр ебәргәндәй:*
*Һыуынырға әле иртәрәк.*
*Был быуатта һис йылынмаç инде*
*Йөрәгемдең туңған яртыһы.*
*Ә һаҡларға теләгем дә бар ул:*
*Ебәрегеҙ Урал артышын!*

## *Ҡыш көçәү*

*Ҡыштыр-ҡыштыр тигәс көҙгө япраҡ,*
*Ҡыштыр тигән инем офоҡта.*
*Әле булһа төçһөҙ монарҙарҙың*
*Тынлыҡ тигән көйө ойота.*

*Буран ҡайҙа бураларын бурай?*
*Бәүелсәге ҡайҙа аҡ ҡыштың?*
*Миләш игеҙәге — ҡыҙылтүштән*
*Ошо хаҡта бөгөн һораштым.*

*Ни тип әйтһен инде кескәй йөрәк,*
*Емештәрҙең киткәс саф тәме,*
*Ҡыштыр-ҡыштыр тигәс һуңғы япраҡ,*
*Килер был ҡыш һуңмы, иртәме...*

***

*Шәлкем аша һиңә хат яҙырмын,*
*Шиғырҙарҙа булыр кәлимә.*
*Үткәндәрҙән ишаралар эҙләп,*
*Яраларға тойғо бәйләмәм.*
*Үткән үткән инде,*
*Тик унда ла бар шул*
*Күңел ҡанатланған минуттар.*
*Йөрәктәрҙе бөгөн дөрләтерлек*
*Осҡон күҙҙәрендә мең ут бар.*
*Һүрелерлек, төңөлөрлөк булһа,*
*Уттай янмаҫ ине был яра.*
*Әйтелмәгән һүҙем әләм булып,*
*Ихтилалдар көҫәп болара.*

## Беҙҙең яҡ

Н. Ягодинцеваға

*Беҙҙең яҡта тауҙар сыр-яланғас,*
*Күккә тейеп тормай түбәһе.*
*Олатайҙар маңлайылай һырлы*
*Тау битенән килә үбәһе.*

*Беҙҙең яҡтың йылғалары серле,*
*Кемдер әйтә хатта: юҡ төбө.*
*Һығылмалы, йөҙ бөгөллө улар,*
*Ҡараш йыйыр тимә шуҡ ебен.*

*Беҙҙең яҡтың күле — сихри даръя,*
*Башҡорт малы сыҡҡан был күлдән.*
*Ошо ерҙә зифа Һыуһылыуҙың,*
*Ошо ерҙә Заятүләктең дә*
*Аҫыл һөйәккәйе күмелгән.*

*Беҙҙең яҡтың ҡара урманы бар,*
*Йырып сығып ҡара һин уны.*
*Нисә быуат элек олатайҙар*
*Һайлап алған йәшәү урынын.*

*Беҙҙең яҡты, ялан яғы, тиҙәр:*
*Күңеле киң шуға халыҡтың,*
*Ҡараштары иркен, эштәре күп,*
*Хеҙмәт һөйгәндәргә ял юҡтыр.*

*Беҙҙең яҡтар...*
*Минең тыуған яҡты*
*Үҙеңдеке кеүек ҡабул ит!*
*Иләүестән беҙҙе иләүсе лә,*
*Йырсы итеүсе лә тап ул бит!*



**Салауат**
**РӘХМӘТУЛЛА**

**«Эҙләп тапҡан алтын — ҡыйбат түгел,
Алтын эҙләп тапҡан баш ҡыйбат!..»**

## *Әсәйем һүҙҙәре*

*«Үҙең күрәһен — күрерһең,*
*Бүтән — башҡаһын күрер:*
*Байлыҡ артынан ҡыумаһаң,*
*Исемең алдан йөрөр!..»*

*Йыр йырлап барам, үҙемә*
*Үҙем юл яра-яра:*
*Алдан йөрөтөр байлыҡ юҡ,*
*Исемем алдан бара!*

* * *

*Сит илдә солтан булғансы,*
*үҙ илеңдә олтан бул...*
(Мәҡәл)

*Илемдә — олтан мин...*
*...Бик күп*
*Илдәрҙә йөрөп ҡайттым,*
*Ситтә — ситен:*
*Әллә ниҙәр*
*Ситтәрҙә күреп ҡайттым!*
*Осоп ҡайттым!*
*Һағынып ҡайттым!*

*Салауат Рәхмәтулла (1942) Ауырғазы районы Солтанморат ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Армия хеҙмәтенән һуң оҙаҡ йылдар укытыусы була, мәҙәниәт өлкәһендә, гәзиттә эшләй.*

*Туғыҙ китап авторы. Тәржемә менән дә шөғөлләнә. Хәким Ғиләжев, Ғәлимйән Ибраһимов, Илдар Юзеев, Ғәли Ибраһимов исемдәрендәге әҙәби премиялар лауреаты.*

*Күңелдәр тулып ҡайттым:*
*Үҙ тыуған илемдә*
*Олтан*
*Булмаҫҡа булып ҡайттым!..*

## *Күҙ асып, күҙ йомған араларҙа...*

*Бөтә нәмә — алдан уйланылған,*
*Бер нәмә лә — булмай тиктомал:*
*Күҙ асып,*
*Күҙ йомған араларҙа*
*Әллә ниҙәр булыу ихтимал.*

*...Кемдәргә һуң илдә ни етмәгән?*
*Дошмандар — кем булған, кем — дуҫтар? —*
*Күҙ асып,*
*Күҙ йомған араларҙа*
*Пушкинһыҙ ҙа ҡалған урыҫтар...*

*...Егерме ете йыл — хәстә һәм ас*
*(Булды микән берәй туҡ айы?!):*
*Күҙ асып,*
*Күҙ йомған араларҙа*
*Татарҙың да... киткән Туҡайы...*

*...Әлбиттә, һүҙ — әйтелеп тә бөтмәй,*
*Яҙылып та бөтмәй яҙыр һүҙ:*
*Күҙ асып,*
*Күҙ йомған араларҙа*
*Башҡорт ҡалды... Рәшит Назарһыҙ...*

*Эх... был илдә мин булмам бер саҡ,*
*Булмауым да булмаҫ тиктомал:*
*Күҙ асып,*
*Күҙ йомған араларҙа*
*Әллә ниҙәр булыу ихтимал...*

* * *

*Кейгән кейем нисек туҙа,*
*Ғүмерҙәр шулай уҙа...*

(Халыҡ йыры)

*Ғүмеремдең нисек үткәнлеген*
*Хәҙер —*
*Һөйләй кейгән кейемдәр:*
*Ҡыр(ы)ҡмаһа ҡыр(ы)ҡ туҙған кейем*
*Аласыҡта — өйөм-өйөмдәр...*
*Өҫ-баштағылары — һуңғыларҙыр,*
*Йәшәр ғүмер алда — һанаулы...*

*Эх...*
*Ҡыр(ы)ҡмаһа ҡыр(ы)ҡ төрлө кейем,*
*Ҡыр(ы)ҡмаһа ҡыр(ы)ҡ ямаулы...*

* * *

*Пенсионер «шырпысы»лар*
*Һөйләнә шыпын, бик һаҡ:*
*«60 бөртөк шырпы ине*
*Шырпы ҡабында ул саҡ!..*

*Хәҙер... 40 бөртөк кенә,*
*Иренмә — һанап ҡара!..»*
*Эх, шырпы ҡаптарында ла*
*«Үҙгәртеп ҡороу» бара...*

## Ер өҫтөндә, Ер аҫтында...

(Сәйәси фараз)

*1*

*...Нефткә хаҡ арта:*
*Байҙар арта*
*Ер аҫтында нефть барында!*
*Нефть — түгел,*
*Тамаҡ фәлсәфәһе*
*Ер өҫтөндә, халыҡ зарында...*

*2*

*...Нефткә хаҡ кәмей:*
*Байҙар кәмей*
*(Шулай булыр кризис үтмәйсә...) —*
*Эх...*
*Ер өҫтөндә хәйерселек бөтмәҫ,*
*Ер аҫтында нефть бөтмәйсә...*

## Кеше

*Ҡояш булып ҡына сыға алмай,*
*Йәшен булып ҡына йәшнәмәй:*
*Эх...*
*Ниңә икән кеше тик бер йәшәй?*
*Ниңә икән ике йәшәмәй?..*

*Ҡояш булһа — сыҡмаҫ, йәшен булһа —*
*Атыр ике, хатта йәшнәмәй:*
*Эх!*
*Ярай әле, кеше тик бер йәшәй!*
*Ярай әле, ике йәшәмәй!..*

* * *

(Танышым һөйләгәндәрҙән)

*...Ниңә ъцмерлек цсләшец?! —*
*Бөтөрөц кәрәк цсте:*
*Ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ —*
*Парлап*
*Килделәр байрам кисте.*

*Йөҙҙәрендә — йылмайыуҙар,*
*Өмөт бар һцҙҙәрҙә лә:*
*— Ҡунаҡ ашы — ҡара-ҡаршы,*
*Булырбыҙ беҙҙәрҙә лә!..*

*Көнөн әйттеләр...*
*— Барырбыҙ.*
*(Белмәйҙәр «Вольво»быҙҙы!):*
*— Үҙебеҙ килеп алырбыҙ,*
*Көтөгөҙ «Волга»быҙҙы!..*

*«Һцрелгәндер цс... » — тип өмөт*
*Иттек тә, итмәнек тә...*
*«Алыръа «Волга» килер», — тип*
*Көттөк тә, көтмәнек тә...*

*Килһәләр генә —*
*Барырбыҙ,*
*Кемдәргә ашыъабыҙ?!.*
*...Телеграмма һуҡтылар:*
*«Ватылды машинабыҙ...»*

## ***Ҡыҫка шиъырҙар***

* * *

*Бәхет тә бәхет ҡәҙерен*
*Белгәндәрҙе цҙ итә:*
*Йә —*
*Үҙен... тартып алалар,*
*Йә —*
*Үҙе ташлап китә...*

* * *

*Дцрт һаным да — тецәл*
*(Ерҙе*
*Ураным һымаҡ атлап...):*
*Нисек йөрөлгән*
*Шуларҙы*
*70 йыл буйы һаҡлап?!.*

* * *

...Заманалары — харап:
Ашау — эшкә ҡарап түгел,
Эшләү — ашауға ҡарап...

* * *

Милиция — ышанысһыҙ...
Хәҙер
Этһеҙ йөрөү үҙен аҡламай:
Кешеләрҙе хәҙер...
Эттәр яҡлай,
Кешеләрҙе кеше яҡламай...

* * *

Маяҡлы юлдар үттем!..
...Маяҡһыҙ юлға еттем:
Маяҡһыҙ юлдарҙа йөрөп,
Юлдарҙан яҙып бөттөм...

* * *

Китермен — донъя үҙгәрмәҫ,
Шул килеш ҡаласаҡ ул:
Ҡалһын! —
«Шул килеш» тә һине
Уттарға һаласаҡ ул!

## Хәләл ҡатындар

Йәше — йоҡо бүлмәһендә,
Ҡарты — аш бүлмәһендә:
Белгән ир белә быларҙы,
Белмәгән — белмәһен дә...

* * *

— Бар ғүмерең һинең юлда үтә,
Нindәй кәңәш миңә — юлсынан?
— Бул сыҙам!..

* * *

Ғүмеремдең ҡай осоро — дөрөҫ?
Ҡай осоро — уның ялғаны?! —
Өндәү (!) менән 50 йылым үтте,
Һорау (?) менән уҙа ҡалғаны...

* * *

(Йылмайып-көлөп кенә)

Ҡалам тулы — аптекалар
(Ҡалалар илдә — нисә?!):
Ҡартаймаҫ та һымаҡ кеше,
Дарыуҙар эсә-эсә!
...Ҡартаймай кеше! — Ҡартаймай...
Теге донъяға күсә...

* * *

*Өйөмдә... көн буйы — һуъыш,*
*Төн буйы секс бара...*
*Һиндә лә — шул! —*
*«Юҡ — ю-у-уҡ!»лама:*
*Өйөңдә... «телик» ҡара!..*

* * *

*Сәйәсәткә яраҡлашыусылар,*
*Ҡәкре һөйләп, тота тура һын.*
*Ә мин...*
*Ә мин — яраҡлашалманым:*
*Ҡәкрәйҙем — һөйләп тураһын...*

* * *

*Беҙ — ҵлмәйбеҙ: ҡәберҙәрҙе*
*Беҙ ишектәр итәбеҙ*
*Һәм...*
*Мәңгелек йортобоҙъа*
*Ҡайтып ҡына китәбеҙ...*

* * *

*Шиъыр уйлап йоҡлап китәм,*
*Төшкә лә шиъыр керә...*
*...Тауыҡ та бит*
*(Тауыҡ та бит!)*
*Төшөндә... тары кҵрә!*

* * *

*Эсәбеҙ! —*
*Ҡаҙнала һаман*
*Аҡсалар ятмай тулып:*
*Эсмәҵеләр илдә, гҵйә,*
*Йәшәй енәйәт ҡылып...*

* * *

*— Илдә етеш йәшәҵ өсөн*
*Халыҡҡа нишләҵ кәрәк?..*
*— Себерҙә эшләҵ кәрәк!*

* * *

*Әй кҵңелһеҙ донъя килде*
*(Бер кем көтөп алманы...):*
*Йырҙаръа ҡушып йырларъа*
*Даһиҙар ҙа ҡалманы...*

## *Сәсмә әҫәрҙәр*



**Мөкәрәмә**
**САДИҠОВА**

# ҺАҒЫШ СӘСКӘҺЕ

**Хәтирә-уйланыу**

Һары сәскә – ҡояштың иң нәфис, йылы нурҙарынан яралған ғәжәп тә сағыу, мөғжизәле бер бүләге ер йөҙөнә. Бүтән төҫтәрҙәге ҡәрҙәштәре араһында ул айырыуса матур үҙенсәлек менән балҡып, тирә-яҡты нурлай. Иртә яҙ көндәрендә, Ҡатын-ҡыҙҙар байрамында башҡа гөл-сәскәләр йүнләп үҫеп тә, асылып та өлгөрмәгән бер мәлдә, көньяҡтан килтерелгән йәмле йәй хәбәрсеһе – һары мимозалар бик шәп бүләк һаналһа ла, аҙаҡтан, нишләптер, һары сәскә һағыш, хыянат билдәһе итеп ҡарала. Хатта йырҙа ла: «Һары сәскә – һары һағыш», – тип йырлана. Шунлыҡтандыр инде ир-егеттәр һөйөклөләренә мотлаҡ аҡ, ҡыҙыл, күк төҫтәрҙәге сәскәләрҙе бүләк итергә ынтыла. Өйҙәрҙәге тәҙрә төптәрендә лә гөлдәрҙең һары сәскә атҡаны үҫтерелмәй. Шуға ҡарамаҫтан, һары сәскәләрҙең йөҙҙәрсә төрө үҫеп, тирә-яҡты ғына түгел, беҙҙең күңелдәрҙе лә нурлап балҡыта.

Зыярат – беҙ йәшәгән мөхиттең иң һил, аулаҡ бер урыны булһа ла, күңел асып, ял итә торған сәхрә йә баҡса түгел инде. Йәй көндәрендә ул йәшеллеккә, гөл-сәскәләргә төрөнөп, ағас ҡыуаҡтарында һайраған ҡоштар тауышына күмелеп торһа ла, әле генә ерҙә һин дә мин матур итеп йәшәгән яҡындарыңдың инде ошондағы ер ҡуйынында гүр эйәһе булыуынан сараһыҙлыҡ һағышы биләй күңелде. Бәлки, шуғалыр ҙа мосолман йолаларында мәрхүмдәрҙе ерләгәндә һәм, ғөмүмән дә, ҡыҙ-ҡырҡынға, ырыуҙан ҡалмаған бисә-сәсәгә зыяратҡа йөрөү кәңәш ителмәй. Өлкәндәр быны зыяраттағы ауыр кисерештәрҙең йомшаҡ тәбиғәтле аҫыл заттар зиһененә, сәләмәтлегенә зыян килтереү ихтималлығы менән аңлата: улар үҙҙәрен киләсәктә тыуҙырасаҡ балалары өсөн һаҡларға тейеш.

Әллә ошо йола арҡаһында, әллә тормош мәшәҡәттәренә ныҡлап уралғанлыҡтан, минең үҙемә йәшерәк саҡта ҡәберстан тарафтарына йыш йөрөргә тура килмәһә лә, олоғая төшкәс, бергә ғүмер иткән бик күп ҡәрҙәштәремдә, яҡындарымды мәңгелеккә оҙатҡанлыҡтан, уларҙың төп йортона бармайынса

---

*Мөкәрәмә Садиҡова (1931) — билдәле яҙыусы, драматург, публицист. Уға ошо көндәрҙә 80 йәш тула.*
*Юбилейығыҙ менән, өлкән ҡәләмдәшебеҙ!*

һис тә булмай. «Иҫәндәрҙең ҡәҙерен бел, мәрхүмдәрҙең ҡәберен бел!» – тигән бит беҙгә боронғолар.

Зыярат – иғтибарлы кеше өсөн үҙе бер музей һымағыраҡ донъя. Ундағы ҡәберҙәргә ниндәйерәк һәйкәлдәр ҡуйылмаған да, уларға йәдкәр ителгән һүҙ-ҙәрҙең ниндәйе генә яҙылмаған!.. Йәш кенә бер егеттең һүрәте ҡуйылған ябай ғына һәйкәлдәге: «Әй, кешеләр, әлегә һеҙ бары тик ҡунаҡта, ә мин инде мәң-гелек аулаҡта», – тип яҙылған һүҙҙәр минең күңелемә ғүмерлеккә уйылып ҡалды. Ысынлап та, беҙ был донъяла ваҡытлыса ғына килгән ҡунаҡ шул...

Миңә көнбайыш илдәрендәге зыяраттарҙың бер нисәһен күрергә лә насип булды. Уларҙа мәрхүмдәрҙең мәңгелек төйәге – бөтөнләй икенсе бер юғары кимәлдә йыһазланған иҫтәлекле баҡса һымағыраҡ бер донъя. Рәссамдарҙың сәнғәт йәүһәрҙәренә тиң ғәжәп тә үҙенсәлекле һәйкәлдәре шунда урынлаш-ҡан. Ил гиҙеп йөрөүсе туристар шуларҙы мотлаҡ фотоға төшөрөп алырға ын-тыла. Зыяраттарҙың ҡупшылығы – шул төбәктә йәшәүсе халыҡтың тормош кимәленең сағылышы инде ул. Беҙҙә лә бит хәҙер мәрхүмдәр төйәге, үҙгәреш-тәр кисереп, арыулана, матурлана бара – иҫтәлекле һәйкәлдәр ҙә, ҡоймалар ҙа төрлөләнә, шәриғәттә ҡәбер өҫтөндә мәрхүмдәрҙең фаниҙағы һүрәтен ҡу-йыу тыйылһа ла, һуңғы йылдарҙа был ҡағиҙә үҙгәрә шикелле. Бигерәк тә бай-ҙарға, иҫән сағында «текә» тип аталған (йәки атаҡлы ҡараҡ даны менән тетте-реп йәшәгән), тик, нишләптер, йәш кенә килеш ләхетен тәхет итергә мәжбүр булғандарға ғәжәп тә яғымлы төҫ-киәфәтле, ыҫпай буй-һындары менән үк тө-шөрөлгән береһенән-береһе бейегерәк һәйкәлдәр ҡуйыла башланы. Уларҙың ҡоймалары ла әллә ниндәй ҡалын, биҙәкле тимерҙән ел-дауылдар һис тә ҡаҡ-шатмаҫлыҡ итеп яһалған. Исем-шәрифтәрен уҡып ҡараһаң, иҫән саҡта әллә ни ҙур батырлыҡтар ҡылып, ғәләмгә игелек күрһәткән билдәле шәхестәр ҙә түгел үҙҙәре. Ишелеп ҡалған мал-мөлкәттәрен мираҫҡа алған яҡындары уларҙы шулай ер һелкетеп йәшәгән ғәййәр бәһлеүән итеп күргәс, ихтыяр-ҙары инде. Ни аяныс, тик ерләнгәндән һуң бер кем дә килеп ҡарамаған, ҡәбер өҫтөндәге тупрағы емерелеп төшкән, ҡалай һәйкәле ауып ятҡан ҡәберҙәр ҙә осрап ҡуя... Һоҫко һымаҡ киң суҡышлы ҡара ҡоҙғондарҙың шул тирәлә ем-теккә темеҫкенеп осоуы күңелгә шом һала. «Емерек ҡәбер эсендә ятҡан мәр-хүмкәйҙәрҙең әлегеһе көндә бер генә лә туған-тыумасалары, яҡын дуҫ-иштәре ҡалмағанмы икән ни был донъяла?..» – тип эстән ытырғанып үтәһең. Ай-һай, хәтәр ҙә, алдатҡыс та был тормош!.. Беҙгә иң мөһим эштәребеҙҙе башҡа-рырға, бурыстарыбыҙҙы үтәргә гел ваҡыт етмәй ҙә ҡуя. Ә ҡалған эшкә ҡар яуа, тиҙәр – был бик тә хаҡ.

Баҡһаң, ғәйеплеләрҙе, вайымһыҙҙарҙы эҙләп әллә ҡайҙарҙа йөрөйһө түгел, ә үҙебеҙҙең гонаһ тоҡсайының ауырлығын самаларға кәрәк булған икән дә. Яҙ көнө, ер ҡарҙан асылғас, Өфөнөң көньяғындағы Затон зыяратына барып, ер ҡуйынындағы яҡындарыбыҙҙың төп йорттарын хәл ҡәҙәре тәрбиәләп йөрө-гәндә, үткән көҙ ҡар ҡатыш ямғыр яуып торған бер көндә ерләнгән Хөснөлхаҡ еҙнәй өҫтөндәге ҡыҙыл балсыҡтың бер яҡтан убылып төшкәнен күреп, «аһ!» иттек. Ҡулға көрәк алып, тупраҡты йүнәйтеп өйөргә тура килде. Ваҡытлысаға иҫәпләп кенә ҡуйылған һәйкәле алдына йәшел шыршы ботағынан үрелгән кәрзиндәге яһалма розаларҙы ултыртҡас, Хөснөлхаҡ еҙнәйҙең һуңғы йорто ла ташландыҡ, етем хәленән арынып, шөйлә арыуланып ҡалды – шөкөр! Уны тағы ла матурлау өсөн ситтән бер аҙ ҡара тупраҡ ташып һибергә, күпйыллыҡ үлән йә сәскә орлоҡтары сәсергә кәрәк ине. Был эште мин икенсе тапҡыр Хөснөлхаҡ еҙнәйҙең ҡыҙы Эльза менән бергәләп килеүгә ҡалдырып ҡайттым.

Донъяла туҡһан йылға яҡын ғүмер итеп, бик күп изге ғәмәлдәр ҡылған, һәйбәт уҡытыусы, һәр эшкә маһир Хөснөлхаҡ еҙнәй ирем яғынан беҙгә

ҡәрҙәш ине. Туғанлыҡҡа кем нисек ҡарай бит... Бәғзе берәүҙәр бик яҡын туғандары менән дә уртаҡ тел тапмайынса, тырым-тырағай көн итә. Ә беҙ ирем (ул да мәрхүм инде хәҙер) менән өйләнешкәндән бирле һәр ике яҡтың да туған-тыумасаларын яҡын итеп, аралашып йәшәнек.

Хөснөлхаҡ еҙнәй менән Мөршиҙә апай ғүмерҙәренең байтаҡ осорон Үзбәкстандың баш ҡалаһы Ташкентта йәшәп үткәрһәләр ҙә, һәр саҡ тыуған яҡты һағынып, нисек тә ҡайтып төпләнеү хаҡында хыял итеп, шул маҡсатҡа ынтылып йәшәнеләр. Ял ваҡыттарында ҡунаҡҡа ҡайтҡанда улар мотлаҡ беҙҙә туҡталыр ине. Йәштән үк тырышып уҡыған юғары белемле уҡытыусылар, Ташкентта матур тормош ҡороп, һәйбәт йәшәһәләр ҙә, пенсияға сығыу менән, фатирҙарын алыштырыу яйы табылыуға, йәһәт кенә йыйынып, ҡайтып та төштөләр. Ғүмерлек хыялдары шулай, ниһайәт, бойомға ашыуҙан уларҙың йөҙҙәре ҡояштай балҡый ине. Бынан һуң инде беҙ үҙ-ара тағы ла нығыраҡ яҡынлашып, шатлыҡтарҙы ла, ҡайғыларҙы ла уртаҡлашып, сирек быуат самаһы бер-беребеҙгә терәк булып йәшәнек.

Сабый саҡтарынан уҡ бергә уйнап, мәктәпкә бергә йөрөп үҫкән һәм өйләнешкәндән һуң да мөхәббәттәре һис һүрелмәгән ҡушаҡтарҙың үҙ-ара ифрат хәстәрлекле, яғымлы мөнәсәбәте, йәшәү рәүеше беҙҙең өсөн һәр саҡ өлгө булды. Улар Ҡариҙел йылғаһы аръяғында баҡса алып, шунда әллә күпме еләкемеш, сәскәләр үҫтерҙеләр һәм беҙҙе лә шунда саҡырып ҡунаҡ иттеләр. Ҡыш көндәрендә улар яңы дуҫ-иштәре менән бергәләп театрҙарға, әҙәби кисәләргә, концерттарға йөрөп кинәнделәр.

Эйе, был донъяла бөтөнләй үк ҡайғы-хәсрәтһеҙ генә бармай тормош. Мөршиҙә апайҙарҙың барлыҡ борсолоуҙары шәхси тормошонда бигүк уңмаған берҙән-бер ҡыҙҙары – бик тә сая, уңған, һөләтле, әммә үтә лә үҙһүҙле Эльза һылыу һәм яңғыҙ әсәһе тәрбиәһендә үҫкән ейәнсәрҙәре Йәзилә менән бәйле ине.

...Һәйбәт уҡып, аспирантура тамамлағандан һуң ғалимлыҡ дәрәжәһенә ирешкән Эльза, Ташкенттағы көйләнгән тормошонан тайпылып, атай-әсәйҙәренең тыуған еренә күсенеүҙе ҡулай тапмаған. Уға, бәлки, үҙ тыуған ере ҡәҙерлерәк булғандыр.

Тормош бер ыңғайҙағы ағышында ғына бармай шул, ул һис көтмәгәндә емерелеп йә түңкәрелеп тә ҡуя. Иренән айырылһа ла, тырышып эшләп, ҡыҙына музыка һөнәре биреү өсөн бөтә шарттарҙы тыуҙырған әсә уны һис тә бүтән ерҙә түгел, ә мотлаҡ Мәскәү консерваторияһында уҡытып, юғары белемле итергә ниәтләгән. Әсә кешенең ниәте изге булһа ла, уны бойомға ашырыу юлдары ифрат ҡатмарлы икән шул. Рәсәй баш ҡалаһындағы консерваторияла конкурс шул тиклем ҙур булғанлыҡтан, Йәзилә һылыу унан үтмәй тороп ҡала.

Маҡсатына ирештереү өсөн Эльза һөләтле ҡыҙын алдағы йыл конкурсына һәйбәт репетитор ярҙамында әҙерләмәксе була. Баш ҡалала репетиторҙар быуа быуырлыҡ – аҡсаң ғына мулыраҡ булһын. Бының өсөн Эльзаға ғалимлыҡ дипломын сумаҙаны төбөнә үк һалып, кафеға, аҡсаһы мулыраҡ төшә торған эшкә, урынлашырға, ә төндәрен бала сағынан өләсәһенән өйрәнгән тегеү һөнәренә лә егелергә тура килә. Шулай көндө төнгә ялғап тырыша торғас, ике йыл тигәндә уның ҡыҙы ла консерваторияның үҙенә үк булмаһа ла, икенсе бер юғары уҡыу йортона инеүгә ирешә. Уны юғары белемле музыкант итеү өсөн әсә кешегә Ташкенттағы фатирын да, булған йыһаздарын да һатыуҙан башҡа сара ҡалмай. Өфөләге атаһы менән әсәһенең үҙ пенсияларынан өҙөп-йолҡоп ебәргән аҡсаһы ла, күҙгә һис күренмәй, һурылып тора. Аптырағас, әсәһе менән ҡыҙы Мәскәү өлкәһендәге кескәйерәк ҡалалағы яңғыҙ бер әбейҙең

бүлмәһендә йәшәү әмәлен табалар, ә уҡыуға һәм эшкә, шул төбәктәге күптәр һымаҡ, электричкала йөрөүгә яраҡлашалар.

Эльза Өфөгә килеп, атаһы менән әсәһен үҙҙәре ҡулайлашҡан ҡалаға күсенергә өгөтләп ҡараһа ла, ҡарттар үҙҙәрен бәхетле тойған урындан билдәһеҙ бер төбәктәге бөтөнләй икенсе мөхиткә күсенергә йөрьәт итмәй.

– Һин үҙең Ташкенттағы фатирыңды һатып, аҡсаһын елгә осорҙоң бит инде, беҙҙеке менән дә шундай хәл килеп сыҡһа, ҡартлыҡ көнөбөҙҙә нишләрбеҙ ? – ти улар, һағайып. – Сит яҡ тупрағында ятып ҡалыуҙы хуп күрһәк, беҙ шул тиклем атлығып тыуған яҡҡа ҡайтыр инекме ни? Юҡ, хәҙер беҙ бынан төп йортобоҙ – зыяратҡа ғына күсенербеҙ инде.

– Һеҙ ғүмер буйына бары тик бер-берегеҙҙе генә яратып, икәүегеҙ мәнфәғәтен генә алға ҡуйып йәшәнегеҙ, ә ҡыҙығыҙ менән ейәнсәрегеҙ яҙмышы яр буйында булһа ла, иҫегеҙ китмәй. Балаларын белемле итеп, йүнле юлға сығарыу хаҡына күп кенә ата-әсәләр үҙҙәре лә Мәскәүгә, ҡыҫанығыраҡ фатирға булһа ла күсенеп, уларға тотҡа булып йәшәй. Ә һеҙ?.. – Ихластан үпкәләгән Эльза ҡыҙы эргәһенә китә.

Был низағ ҡарттар өсөн еңел генә үтмәй, әлбиттә. Һикһән биш йәшенә тиклем теттереп донъя көткән, баҡсаларына йөрөгән һәм өйҙәге барлыҡ эштәрен орсоҡтай бөтөрөлөп башҡарған Мөршиҙә апай түндәрен йоҡлай алмайынса уйланып үткәрә. Был инде уны бик тиҙ йонсота. Көндөҙ урамда ике-өс тапҡыр башы әйләнеп йығылғандан һуң, ул өйҙән сығып йөрөмәҫкә, бер аҙҙан урында ятырға мәжбүр була. Бер йылдан ашыу Хөснөлхаҡ еҙнәй уны үҙе дауалап, тейешле уколдарын ҡаҙап тәрбиәләне. Ләкин әжәл көслөрәк булып сыҡты. Атаһы биргән хәбәргә ҡайтып еткән ҡыҙын Мөршиҙә апай танымайынса йәнтәслим ҡылған.

Яҡты донъяла үҙен белә башлаған сабый сағынан уҡ яратышып, бергә ғүмер кисергән иң ҡәҙерле ҡушағынан айырылып, бер яңғыҙы ҡалған Хөснөлхаҡ еҙнәй үҙенең дә көндән-көн нығыраҡ хәлһеҙләнә барыуын тоя. Ярты йыл самаһы өйҙәрендә нисек етте шулай көн итһә лә, Эльза, әсәһенең мираҫына инеү өсөн ҡайтып, үҙҙәре йәшәгән ергә бергәләп күсенергә өгөтләгәс, бисарағa ни сара, тигәндәй, ул ризалашҡандай ҙа була. Бүтәнсә кейәүгә сыҡмайынса, гел ҡыҙы хәстәрлеге менән генә йәшәүсе Эльза ҡала ситендә ер биләмәһе һатып алған һәм бындағы фатирҙы һатҡан аҡсаға шунда йәһәт кенә бер ағас өй төҙөтөргә иҫәпләгән икән. Аҡсанды түләһәң, ундағы төҙөлөш фирмалары ике-өс айҙа бөтә уңайлыҡтары ла булған өр-яңы өйҙө төҙөп бирә икән хужаларына. Ҡарт эшлекле ҡыҙының яңы ерҙәге матур пландарын ҡыҙыҡһыныу менән тыңлай, һорауҙар биреп төпсөнә. Бөтәһе лә һәйбәт уйланған һәм мотлаҡ бойомға ашыр һымаҡ тойола. Ниәттәр береккәндән һуң үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҙә һәйбәтләнә.

Ағымдағы бер кистә, шулай күндәм генә һөйләшеп ултырғанда, ҡарт ҡыҙынан буласаҡ яңы өйҙәренең планын һыҙып күрһәтеүен үтенә. Ни тиһәң дә, йәш сағында ул үҙе лә төҙөлөш техникумында математика һәм һыҙма геометрия уҡытҡан кеше бит әле. Эльза яңы ерҙә төҙөләсәк ике ҡатлы ағас өйҙөң планын ҡағыҙға һыҙып аңлата:

– Аҫҡы ҡатта – кухня, ванна, солан һәм бәҙрәф, өҫтә – һул яҡтағы ҙур бүлмә – Йәзилә менән минеке, уртала – зал, ә бынауы, уң яҡтағы бөтә уңайлыҡтары ла эсендә булғаны – һинеке! – тип күрһәтә ул, етеҙ ҡәләме менән карауат, өҫтәл, стенаға беркетелгән йыуыныу краны менән тасты һәм мөйөштәге бәҙрәфте лә төшөрөп.

Хөснөлхаҡ еҙнәй парланып киткән күҙлеген ҡулъяулығы менән һөртөп кейә лә һүрәтле ҡағыҙҙы үҙ ҡулына алып ҡарай.

– Ә тәҙрәләр ҡайҙа? – тип төпсөнә ул. Ҡыҙы ҡулындағы йүгерек ҡәләме

менән үҙҙәренең бүлмәһенә ике тәҙрә, залға һәм атаһы бүлмәһенә берәр тәҙрә төшөрә.

– Хуш, быныһы ярай, – тип ризалаша ҡарт. – Тик нишләп мин бәҙрәфле бүлмәлә йәшәргә тейеш булам? – ти ул, ғәжәпһенеп.

– Һуң, ҡыҫталған һайын аҫҡы ҡатҡа бер төшөп, бер менеп яфаланмаҫ өсөн, – тип аңлата ҡыҙы. – Оло кешенең, үҙең беләһең, төрлө сағы була...

– Ула-ай, – тип уйға ҡала ҡарт. – Тимәк, мин шунда ашайым, шунда уҡ бушанам? Төрмәләге мәхбүс ише йәшәтмәксеһегеҙ икән, – тип үҙенсә һығымта яһап ҡуя ул ахырҙа.

– Ниндәй мәхбүс була ти инде? – тип ярһый ҡыҙы. – Һин уға мөмкин тиклем аулаҡ, бөтә уңайлыҡтары эсендә булған яҡшы шарттар тыуҙырырға тырышаһың, ә ул тиктомалдан сөй сығарып ултыра. Әгәр әсәйем кеүек урында оҙағыраҡ ята ҡалһаң, һине нисек күтәреп, баҫҡыстан төшөрөп-мендереп йөрөтмәк кәрәк? Беҙ бит Йәзилә менән икәүләп тырышһаҡ та, һине күтәрә алмаясаҡбыҙ. Шуны бер ҙә аңламайһыңмы ни?

– Аңламаған ҡайҙа, бик аңлайым. Ә бына был фатирҙа миңә төшөп-менеп йөрөү талап ителмәй. Ошо, әсәйең менән ғүмер буйына тырышып эшләп, хәләл көсөбөҙ бәрәбәренә алынған туғыҙ бүлмәле фатирҙы, бөтә йыһаздарҙы пыран-заран килтереп, һеҙҙең шул бәҙрәфле бүлмәгеҙгә алмаштырайыммы? Ҡартайып, ҡомо ҡойола башлаған, тигәс тә, башыма тай типмәгән бит әле...

– Тай типмәһә лә, буталаһың, атай, ниндәй туғыҙ бүлмәле фатир хаҡында һүҙ ҡуйыртаһың? Был ике генә бүлмәле фатир ҙа баһа! Ышанмаһаң, бына рәсми документҡа ҡара! – Тулҡынланыуҙан Эльзаның йөҙөнә ҡыҙыл таптар бәреп сыға.

Атай кеше, ҡыҙын юрый шаяртҡандай итеп, тырпайған бармаҡтарын берәм-берәм бөкләп, үҙ фекерен иҫбатларға керешә:

– Ҡағыҙҙа ғына шулай ике бүлмәле тип теркәлгән ул. Ғәмәлдә иһә беҙҙең йоҡо бүлмәһе менән зал эргәһендә ҙур коридор, кухня, ванна, солан, бәҙрәф, быяла менән көпләнгән лоджия менән балкон – йәмғеһе туғыҙ бүлмә бит! Фатирыбыҙ үҙе ҡала үҙәгендә, үҙе өсөнсө ҡатта ғына, көньяҡ тәҙрәләре Ҡариҙел буйындағы урманға ҡарай. Ҡәҙерен белгән кешегә ерҙәге ожмах ошо бит инде ул, ҡыҙым. Әсәйең менән беҙ ошонда ҡайтҡандан бирле гел ҡыуанышып, Аллаға шөкөр ҡылып йәшәнек. Тик Йәзилә менән һеҙ генә беҙҙең төйәкте мөрхәтһенмәнегеҙ. Мәскәү, тинегеҙ ҙә, шуға иҫегеҙ китте. Унда хәҙер тын алыр әмәл дә юҡ, тиҙәр. Ундағы ҡыйбатсылыҡ...

– Мин бит һине Мәскәүгә алып китмәйем, ә унан йөҙ саҡрым ситтәге ҡалаға күсенәбеҙ. Өйҙө төҙөтөп ингәс, көндөҙ – беҙ эштә саҡта – һин хужа булып, өйҙө һаҡлап торорһоң.

– Ә-һә-ә, һеҙҙең йортҡа һаҡсы ла кәрәк була икән дә... Әгәр минең ул вазифаны үтәрлек кәрем ҡалмаһа, нишләрһегеҙ икән? Сығарып ташларһығыҙмы?

– Ҡуй әле, атай, нишләп улай туҙға яҙмағанды һөйләп ултыраһың? Юҡты сурытырға сабый бала түгелһең дә...

– Уныһы шулай, – тип ризалаша ҡарт. – Тик барыбер ҙә был осраҡта төрлөһөн уйламайынса булмай. Кейемде лә тегерҙән алда ете ҡат үлсәп, бер тапҡыр бесергә кәңәш ителә. Ә бында берҙән-бер ышаныслы терәгебеҙ булған фатирҙы һатыу мәсьәләһе хәл ителә. Әгәр ҙә теге, һиңә йәһәт кенә яңы өй төҙөргә вәғәҙә иткән фирма, үҙенде алдап ҡуйһа – хәҙер бит бөтә нәмә гел алдашыуға ҡоролған – төп башына ултырып ҡалырбыҙмы? Минең хәҙерге шомбайҙар менән алышырлыҡ хәлем юҡ. Ана телевизорҙан әллә күпме халыҡтың аҡсаларын йыйып, сит илдәргә ҡаҫҡан алдаҡсы «төҙөүселәр» хаҡында һөйләп торалар. Ә һинең кеүек яңғыҙаҡ бисәне алдау уларға сүп тә тормай. Бында ашығыу ярамаҫ, ныҡлабыраҡ уйлашайыҡ әле.

Ҡыҙы менән бәхәсле һөйләшеүҙән йөрәге ҡуҙғалған ҡарт, дарыуҙарын эсеп ятһа ла, төрлөһөн уйлап, төндө йоҡоһоҙ үткәрә. Ә иртән урынынан көскә тороп сәй эсергә ултырғас, оҙонайып киткән танаулы һарғылт йөҙөн ҡыҙына табан бороп, тоноғораҡ тауыш менән, әммә ҡәтғи итеп әйтә:

– Тойоп торам: һин, әлбиттә, тағы ла рәнйеп, асыуланырһың, әммә хәҙергә был өйҙән мин бер ҡайҙа ла китмәҫкә ҡарар иттем. Пенсиям үҙемә етеп тора, дарыуҙарҙың ҡыйбатлығы бәкәлгә һуҡһа ла, һеҙҙе борсомаҫҡа тырышырмын. Бында мин күптән таныш табиптар күҙәтәселегендә, ҡәрҙәш-ырыу, күрше-күлән менән бергә йәшәүгә күнеккәнмен. Өйҙә стеналар ҙа ярҙам итә, тиҙәр.

– Уныһы шулай ҙа ул, тик ныҡлап ауырып китһәң, улар бит һинең эргәңдә ултыра алмаясаҡ, сарсап ятҡанда бер йотом һыу биреүсе лә булмаҫ, атай, кешегә ҡалған көнөң – ҡараңғы төнөң, – тип өгөтләүгә күсә Эльза.

Ҡарттың үҙ туҡһаны туҡһан:

– Ныҡлап ауырыуға ҡалһа, Йәзилә менән һин дә минең теге бәҙрәфле бүлмәлә оҙаҡ ултыра алмаҫһығыҙ, ҡыҙым. Күреп, аңлап торам: һеҙҙең һәр ҡайһығыҙҙың үҙ эштәре, үҙ мәнфәғәттәре алғы планда. Әлегә мин әкренләп үҙ көнөмдө үҙем күрәм, тигәндәй. Инде хәлем урында ятыуға ҡалһа, бәлки, әмәлен табып, ҡайтырһың, ә, бәлки, берегеҙҙе лә мәшәҡәтләмәйенсә генә лә китеп тә ҡуйырмын. Хаҡ Тәғәлә ни яҙһа, шул булыр. Ә фатирҙы мине әсәйең эргәһенә оҙатҡандан һуң теләһә нишләтерһең. Бәлки, уғаса аҡылға килеп, ошонда ҡайтып төпләнерһегеҙ. Үҙ илендә сәпсек үлмәй, һеҙгә бында рәхәтләнеп йәшәү өсөн бөтә шарттар бар: Ҡариҙел аръяғындағы емештәре үҫеп ултырған өйлө, мунсалы баҡсаға тиклем әҙер. Ниңә инде әллә ҡайҙа, сит кеше өйөндә фатирсы булып, михнәт сигеп йәшәргә?..

Мөңгөр-мөңгөр генә атаһының тәртәне бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп ҡуйыуы Эльзаның әллә ҡасан ныҡлап ҡорған матур пландарын бер юлы емерә. Бынан һуң ул тағы бер нисә тапҡыр һүҙ ҡуҙғатып ҡараһа ла, ҡартласты һис үҙ юҫығына бора алмай. Һүҙгә – һүҙ, ҡуҙға – ҡуҙ өҫтәлгәнлектән, бер мәлдә өйҙә яман ыҙғыш ҡуба – һәр кем үҙ дәғүәһен нигеҙләп, икенсе яҡты хыянатта ғәйепләй. Тамам ярһып, сығырынан ысҡынған ҡарт:

– Улай Мәскәү еҫенә бик иҫең киткәс, ана бара юлың! – тип ҡалтыранған ҡулы менән ишекте күрһәтә.

Ҡыҙында ла үҙ һүҙле атаһының ҡаны йүгерә бит инде, ул да яуапты артығы менән сәпәй:

– Ә һин ҡорошоп ҡат ошо өйөңдә яңғыҙың! Тик шуны белеп тор, ҡәҙерлем: һин иҫән саҡта, ниндәй хәлгә тарыуыңа ла ҡарамаҫтан, бүтәнсә мин бында аяҡ баҫмаясаҡмын! – Өйҙә ғүмерҙә лә булмаған асыулы ыҙғыштың ҡыҙыуынан стеналар ҙа дер һелкенгәндер, моғайын.

Йәһәт кенә йыйынып, ишекте ҡаты бәреп сыҡҡан Эльза таксиҙа вокзалға йүнәлә. Поезда унның тиҫкәрегә ҡатҡан еңмеш атаһына ниндәйерәк рәнйешле ҡәһәр осорғанын ул үҙе генә белә. Бәлки, тап бына шул асыулы сағында ул күңеленән: «Үлгәс, ҡәбереңде лә барып күрмәйәсәкмен!» – тип ант иткәндер.

Атаһы менән ҡыҙының был бәрелешенән һуң ике йылға яҡын ғүмер үтте. Шул дәүер арауығында улар үҙ-ара бер генә тапҡыр ҙа, хатта телефон аша ла, һөйләшмәне. Бер-береһенең хәл-әхүәлдәре ял ваҡытында берәй аҙнаға олатаһына ҡунаҡҡа килгән студент Йәзилә һылыу аша мәғлүм булды. Һуңғы килеүендә ул көскә йән аҫраусы олатаһына кеҫә телефоны бүләк итеп, шуның аша үҙенә һәр көндө бер тапҡыр шалтыратып торорға өйрәтеп киткәйне. Был элемтә ике-өс ай дауам итһә лә, аҙаҡ әллә телефон боҙолоп, әллә бүтән

сәбәптән, аралашыу туҡталды. Унда-һанда иҫенә төшкәндә Йәзилә үҙе шылтыратҡылаңы.

Хөснөлхаҡ еҙнәй япа-яңғыҙ тороп ҡалғандан һуң уның хаҡындағы хәстәрлекте беҙ ғаиләбеҙ менән үҙ өҫтөбөҙгә алдыҡ: кәрәкле аҙыҡ-түлеген, дарыуҙарын алып илттек, фатиры-телефоны өсөн айлыҡ түләүҙәрен һаҡлыҡ кассаһы аша пенсияһы иҫәбенән күсертеүгә ирештек. Һуңға табан, хәле һаман һарҡып, үҙ-үҙенә ышанмай башлағас, ирем йә улым уны ваннала йыуындырышып ҡайтты, ә мин керҙәрен автоматта йыуҙырып, өйөн йыйыштырҙым. Әйтергә кәрәк: яңғыҙлыҡ касафаттарын ул, ел-дауылдарға бирешмәҫ ғорур имән һымаҡ, һис һыҡранмай, ҡылыҡтары өсөн үкенмәй генә кисерҙе. «Мәскәү!» тип ауыҙ һыуҙарын ҡороҡкан һәм шул төбәккә йәбешеп ятҡан ҡыҙы менән ейәнсәренә бер ҡасан да рәнйемәне. Уларҙың ығышлығын аҡлағандай ҙа төҫлө ине хатта.

– Кеше хәҙер сит илдәргә китеп тә йәшәй, – тине ул. – Төшөмләрәк әмәл табылһа, йәһәннәмгә барып, ғазраил йомошон үтәргә лә әҙер күптәре. Мөршиҙә иҫән булһа, мин туҡһандың теге яғына ла бер аҙ йәшәй инем әле, – тип кенә уфтанды.

Еҙнәйҙең әүәлдән үк үҙен һиҙҙерә килгән бөйөр сырхауы көсәйеп киткәйне. Дауалаусы табиптар, төрлө яҡлап тикшереү үткәргәндән һуң, уның операцияны кисерә алмауын белдерҙеләр һәм, ныҡлап дауалап ҡарағандан һуң, һауығыуына өмөт юҡлығын аңлатып, ҡыҙын саҡырырға кәңәш иттеләр.

Телефондан атаһының ауыр хәлен хәбәр иткәс, Эльза тиҙ арала самолетта ҡайтып та етте. Ҡыҙын күргәс, атай кешенең тона башлаған күҙҙәре йәшләнеп, йөҙө бер аҙ йәнләнеберәк китһә лә, улар араһындағы һалҡынлыҡ үҙгәрмәне. Эльза атаһының ауыртыныуҙарын нисек тә еңеләйтеү йәһәтенән табиптар ҡушҡан бөтә ғәмәлдәрҙе теүәл үтәһә лә, үҙенең эшенән ике аҙнаға ял көндәре алып ҡына ҡайтыуын һәм, шул арауыҡта нимә генә булһа ла, бында оҙон-оҙаҡ тотҡарланырға иҫәбе юҡлығын аңлатты. Хәҙер уның күңелен, атаһының хәленән бигерәк, ҡыҙы хаҡындағы хәстәрлек биләй ине шикелле. Ә уныһы тегендә әсәһенә бик үк оҡшап етмәгән егет ишараты менән урала һәм, аулаҡтан файҙаланып, уларҙың ҡушылып ҡуйыу ихтималлығы ла бар икән. Әсә кеше ҡулына таяҡ тотоп ҡаршы торһа ла, үҙ-ара яратышҡан йәштәрҙе тыя алмауы көн кеүек асыҡ инде, юғиһә. Тик һәр кемдең сөскөрөүе үҙенсә.

Бер көндә иртән, нәүбәттәге уколынан һуң, хәле бер аҙ еңеләйә төшкән ҡарт, ҡыҙын карауаты эргәһенә ултыртып, күңелендә күптән йөрөткән нәсихәтен әйтә.

– Был минең, бәлки, һуңғы һүҙем булыр, ҡыҙым, тыңла әле, – ти ул. – Беҙ әсәйең менән һине тормош ҡыйынлыҡтары алдында ебеп, юғалып ҡалмаһын тип, үҙ аллы донъя көтөүгә һәләтле итеп тәрбиәләргә тырышҡайныҡ. Тырыша торғас, йомшаҡ күңелле, нәфис ҡыҙыбыҙҙан аждаһа һымаҡ бер ирәүкә үҫеп сыҡҡан икән шул. Ярай, ни булһа булған, уҡаһы уңған тигәндәй, хәҙер инде һин үҙгәрмәҫһең. Тик шуны иҫеңдә тот: ата-әсәһенең фатихаһын алмаған кеше, әллә нindәй шәп булһа ла, тормош юлында уңмай. Шуны ла белеп тор: һин гел хата юлда йөрөйһөң. Әгәр шуны аңлап, аҡылыңа килмәһәң...

Тап шул саҡта Эльзаның кеҫә телефоны шылтыраны һәм атаһының әсе хәҡиҡәт уғылай йөрәгенә ҡаҙалып, йәнен теткеләгән һүҙҙәренән нисек ҡотолорға белмәгән ҡатынға икенсе бүлмәгә томоролоуға бер һылтау була. Йәзиләһе шылтырата икән. Әллә ни мөһим хәбәре булмаһа ла, әсә менән ҡыҙ, юҡбар һүҙҙәрен сурытып, ун биш минут самаһы һөйләшә. Тынысланыу өсөн

кухняла бер аҙ һалҡын һыу эскәндән һуң, үҙен көскә мәжбүр итеп сырхау ҡатына ингәндә, атаһы күҙҙәрен йомғайны инде. Әлбиттә, ҡыҙы уны ҡайтанан ҡуҙғатманы.

...Мәрхүмде һуңғы юлына беҙ: Эльза, үҙе лә яман ауырыуға тарыған ҡартым, улыбыҙ һәм мин – дүртәүләп кенә оҙаттыҡ. Уны ерләү өсөн тәғәйенләнгән ҡәбер тап Мөршиҙә апай ятҡан төбәктә, квартал аша ғына ҡаҙылғанын күреп, ниндәйҙер мөғжизәгә тарығандай, ғәжәп итеп, ихластан ҡыуандыҡ. (Зыяратта ла ҡыуаныс булыр икән!) Әйтерһең, пар күгәрсендәрҙәй гөрләшеп, бергә ғүмер иткән ҡушаҡтарҙың төп йорттарын да Хоҙай Тәғәлә үҙ шәфҡәте менән шулай яҡын иттергән!..

* * *

Өфөнән бер аҙ ситтә күп яҡындарыбыҙ, таныштарыбыҙ һуңғы төйәген тапҡан ғәләмәт ҙур майҙанды биләгән Көньяҡ зыяратына тағы килергә тәүге ҡар яуып, тиҙҙән ҡыш башланыр мәлдә генә форсат төштө. Был юлы улым менән мине үҙ машинаһында иремдең ҡустыһы Геннадий алып килгәйне. Хәҙер инде үҙе лә ошо мәрхүмдәр ҡалаһында һуңғы төйәгендә ятҡан ҡартымдан башлап, йәмғеһе һигеҙ ҡәберҙе ҡоро-һарыларҙан таҙартып, мин һәр береһенә белгән доғаларымды уҡығандан һуң, Хөснөлхаҡ еҙнәбеҙ ҡәбере эргәһендә туҡталдыҡ. Ундағы ҡыҙыл балсыҡ өйөмө шаҡтай баҫылып түбәнәйһә лә, үлән-фәлән ныҡлап үҫмәгәс, эше әллә ни булманы ла. Алдағы яҙҙа сәскә орлоҡтары сәсеп үҫтерергә йәтеш булыр тип, яҡындағы ҡойма артындағы соҡорҙан, көрәк менән ҡаҙып, пакеттарҙа дүрт-биш биҙрә самаһы ҡара тупраҡ килтереп һиптек. Тупраҡты тигеҙләберәк таратҡанда яһалма роза сәскәләре кәрзинен ҡуҙғатып ҡуйырға тура килде. Шул саҡта мин кәрзин аҫтынан үҫеп сыҡҡан ялбыр башлы һары сәскәне күреп, үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмағандай, тертләп киттем. Зыяраттағы иң ҡараулы ҡәберҙәр өҫтөндәге барлыҡ гөл-сәскәләр ҡороп шиңгән, күпйыллыҡ үләндәр ҙә ҡышҡы йоҡоға талған мәлдә нисек шулай теремекләнеп үҫеп сыҡҡан да нәҙек кенә һабағынан һалҡын елдә өҙөлмәйенсә нисек елпенә?.. Иғтибар менән ҡарай торғас, күҙгә сәүкә йоморт-ҡаһы дәүмәлендәге тумалаҡҡа һырышҡан ҡыңғырау сәскәләрҙең күплеге, ҡояшлы йылы көндәр булһа, уларҙың айырым ботаҡтарға тармаҡланып үҫеп китергә әҙерлеге, әммә көҙгө һалҡын елдә шулай бергә уҡмашып йәшәү мәжбүрлеге аңлашылды: ҡыйын саҡтарҙа беҙ ҙә шулай бер-беребеҙгә һыйынышып йәшәүгә ҡулайлашабыҙ бит.

– Күрәһегеҙме, бынауы һары сәскә ҡайһылай талпынып беҙҙе сәләмләй! – тинем мин балсыҡ һибеп булашҡан юлдаштарыма. – Хөрмәтләүебеҙ өсөн, бәлки, еҙнәй һөйөнөсөн ошо сәскә аша белдерәлер, ә?

– Әй, ысынлап та?!. Ә нишләп беҙ уны тәүҙә үк күрмәнек әле? – тип ғәжәпләнде улым.

– Ә ул бына беҙ балсыҡ ташыған арала ғына еҙнәй әмере буйынса күрешергә үҫеп сыҡҡандыр, бәлки, – тип шаяртты һөнәре буйынса рәссам Геннадий.

– Бик ихтимал, – тип был фаразды элеп алды математика ғилеме өлкәһендә эшләүсе улым. – Фанилыҡтан баҡыйға күскәндәрҙең йәне лә – атом бит инде ул – туҡтауһыҙ хәрәкәтен дауам итеп, йә тереклектәргә, йә үҫемлектәргә күсә, тигән тәғлимәт бар ҙа инде. Ғалимдар уны реинкарнация тип атай. Был хәҡиҡәт Ҡөрьәндәге аятта ла иҫкәртелә.

Ыжғыр ел һары сәскә тумалағын тарта, йолҡа һәм, бына-бына уны өҙөп, ситкә быраҡтырыр һымаҡ. Әммә тамырҙары кәрзин аҫтындағы йылы тупраҡҡа береккән, аҫҡы яҡта үҙенең мәңгелек йортонда тынғылыҡҡа талған Хөснөлхаҡ

еҙнәйҙең үҙе кеүек һере сәскә елдәрҙе бәүелсәге иткәндәй кинәнеп, ҡәбер өҫтөндәге йондоҙ һымаҡ нурҙар һирпеп балҡый бирә.

Эштәр тамамланғандан һуң, беҙ өсөбөҙ ҡәберҙең өҫ яғында баҫҡан хәлдә бер килке шым ғына торғанда, зыяратты ҡыҙырған ыжғыр елдә ниндәйҙер һағышлы һыҡтау һарҡылғандай тойолдо. Унда, бәлки, беҙҙең еҙнәй рухының берҙән-бер ҡыҙы Эльзаның үҙ ҡатына бер тапҡыр ҙа килеп урамауы өсөн һағышланып һыҡтауы ла барҙыр, һары сәскә аша шул һыҡтауҙы елдәргә тапшыралыр...

Машинала ҡайтҡанда юл буйына Хөснөлхаҡ еҙнәй ҡәбере өҫтөндә көҙгө елдәргә башын һалып елпенеүсе теремек һары сәскә минең күҙ алдымдан һис кенә лә китмәне. Ни аяныс, Эльзабыҙҙың хәлдәре һис кенә лә ҡыуанырлыҡ түгел ине шул әлегә. Ул ата-әсәһенең күптән көткән мөлкәтен мираҫ итеп алыуға ғына, бәхетһеҙгә ел ҡаршы тигәндәй, илдә көрсөк ғәләмәте башланды ла уның бойомға ашырға ғына торған матур пландарын йәнә лә пыран-заран килтерҙе: фатирҙарға хаҡтар яртылаш тиерлек осһоҙланды, һатып алырға теләүселәр, банкылар ҙур кредиттар биреүҙе туҡтатыу сәбәпле, бер юлы төңөлгәндәй, шымып юғалдылар. Уларҙы көтә торғас, аптыраштa ҡалған ҡатын Өфөлә ваҡытлыса эшкә урынлашырға мәжбүр булды. Сөнки һаман да кеше йортонда йәшәүсе ҡыҙына аҡсалата ярҙам итергә лә кәрәк ине. Йәзилә юғары һөнәри белем алғандан һуң ике урында эшләй, тик йәш кешегә заманса йәшәү өсөн донъя ташы бихисап күп талап итәлә. Өҫтәүенә, ныҡлы ғына эш урыны таба алмаған кейәү-балаҡай хәҙер уға һөләктәй йәбешкән. Үҙе иренән уңмаған Эльза ҡыҙының да шул яҙмышҡа тарыуынан шөбһәләнеп борсола. Донъя – ҡуласа...

...Йәй көнө мин, бер нисә тапҡыр шылтыратып, Эльзаны бергәләп зыяратта йөрөп ҡайтырға саҡырһам да, уның әле бер, әле икенсе кисектергеһеҙ эштәре булған саҡҡа тура килеп, ҡаҡлыҡтым. Һуңғы сәфәребеҙ хаҡында ла алдан уҡ иҫкәртһәм дә, ул тап ошо көндә фатир ҡарарға киләсәк кеше менән осрашырға вәғәҙәләшкәнен әйтте. «Кеше күңеле – тәрән даръя» тиҙәр. Уның эске кисерештәрен кем генә белһен... Бәлки, үҙенең бөтә уңышһыҙлыҡтары, юғалтыуҙары өсөн ул теге тормош арыу ғына ағышында барған саҡта теләгән ерен кәсенеп китеүҙән баш тартып, үҙен өйөнән ҡыуып сығарған, һуңғы нәсихәтендә «аждаһа» тип мәсхәрәләгән атаһына рәнйешен һаман онота алмайынса йыҡланалыр, ә, бәлки, ғөмүмән, мәрхүмдәрҙең ҡәберҙәренә барып, хәсрәт ҡуйыртып йөрөүҙе мөрхәтһенмәйҙер. Әгәр шунда барғас, уға теге саҡта атаһының: «Яңылыш юлда йөрөйһөң», – тип битәрләүе ишетелерҙәй тойолһа, ни ғәжәп?..

* * *

Тырыша торғас, Эльза атаһының фатирын уңышлы ғына һатып ебәреүгә ирешә һәм, өй эсендәге бөтә йыһаздарҙы контейнерҙарға тейәп, үҙҙәре көн иткән ҡаласыҡҡа оҙатты. Шунда ул ҡала ситендә бер бинамә һатып алып, күптән хыял иткән ике ҡатлы ағас өйҙө төҙәтеүгә керешә. Өйҙөң түбәһе ябылып, евротәҙрәләр ҙә ҡуйылғас, эске яҡтағы ҡайһы бер «сутлайһы ла хуплайһы» эштәре генә ҡала. Уңған хужабикә ауырға ҡалып бәпес көтөүсе ҡыҙы һәм никахһыҙ ғына йәбешеп йәшәүсе кейәү тейешле ир-егет ярҙамында бәхетле мәшәҡәттәр менән сыуалған көндәрҙең береһендә, быҒаса һис күрелмәгән яман ҡоролоҡто килтергән эҫе йәйҙең касафаты буларак, Мәскәү тирәһендәге ҡалаларға ябырылған аяуһыҙ янғындар уларҙың ҡурсаҡ өйөләй матур, өр-яңы ағас йортон да ялмап алып, көл итә. Ярай әле, үҙҙәре иҫән ҡала – шуныһына мең шөкөр!



**Ишғәли**
**НУРҒӘЛИЕВ**

# ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ*

Яҙмышнамә

## Хәйерсегә ел ҡаршы!

– Һиңә телеграмма бар!

Беҙҙең ауылда телеграмма алыусылар һирәк. Шундуҡ аңланым – армияға. Бөгөн 4 декабрь, ә 6 декабрҙә миңә Стәрлетамаҡ военкоматына “явиться”. Һөйөнөсөмдө бер кемгә лә һиҙҙермәҫкә булдым, телеграмманы кеҫәмә һалып, почтальон Мәғиә апайға “ярар” тип кенә әйттем. Ә ауылда “тел телеграфы”нан ниҙәр генә ишетмәҫһең: “Ҡара, ҡара! Армияға китә, ти. Стәрленән үк әйләнеп ҡайта ул. Ана, тирәк кеүектәр комиссия үтә алманы...”

Нишләйһең, сәләмәтлек – минең иң ауыртҡан урыным. Үҙем генә беләм: бәләкәйҙән йүтәл менән интектем, эсемдәге сирҙәр тураһында әйтеп тораһы ла юҡ, иҫтән яҙған ваҡыттарым булды. Ә тән тартышыу... Танау ҡанау... Уҡып белдем: миндә ҡан әҙ икән. Мин түҙә лә беләм: бар ауыл грипп менән интеккәндә, бригадирҙы алыштырҙым, киҙеү – минең өсөн сир түгел. Ә трахома? Минән дә арыу күреүсе юҡтыр. Ә ҡағыҙҙа яҙылған: трахома. Диагнозды кем ҡуйған? Ҡылый күҙ Рауза Ҡолмәтова. Бер күҙе ҡиблаға ҡараһа, икенсеһе – тиреҫкә, күрәһең, матур күҙлеләрҙән көнләшкән. Хикмәт өҫтә генә: илдә медицина бар, тинеләр, ә трахома – иң уңайлы сир. Эйе, сирлеләр һаны күп булырға тейеш. Ә дауалау нисек? Ҡот осҡос ысул менән дауаланы Рауза апай.

Күңелем һиҙгән: бал әсегән, бер тәпән. 4 декабрь кисе беҙҙә – мәжлес, тимәк, оҙатыу... Типтерәбеҙ икән. Ә кем һыйҙан ҡаса? Ысынлап, ҡәҙер артты, көтөргә ризалашыусы үҙе әйтеп һалды. Тимәк, алда – өс йыл. Алһалар... Ә иртәнсәк? Күңел күтәренке. Оҙатыусылар урам тулы. Көлөүселәр ҙә бар.

– Күреһегеҙ, иртәгә үк әйләнеп ҡайта...

Ауылдан сығып, Ишембайға юл тоттоҡ. Мине оҙатыусы – еҙнәм. Сәлихте үткәс, буран сыҡты. Хәйерсегә ел ҡаршы, тигәндәр. Юлыбыҙ – ҡиблаға, ә ел – ҡибланан. Ат бармай... Богдановкаға еткәс, еҙнәм бороларға теләне.

---

*Ишғәли Нурғәлиевтың "Ҡарабаш турғай" яҙмышнамәһе ("Ағиҙел", №"11-12, 2009 йыл) уҡыусыларҙа оло ҡыҙыҡһыныу уятҡайны. Әле әҫәрҙең дауамын тәҡдим итәбеҙ.*

– Әйҙә, әйләнеп ҡайтайыҡ, ҡайтыуға ел дә ыңғай.

– Ҡайтмай ни! Бар ауыл көләсәк! Юҡ инде...

Сананан төшөп, атты үҙем етәкләнем. Бына аптыраш, Көҫәпҡолға килеп ингәс тә буран туҡтаны. Автовокзал. Бәй, Стәрлетамаҡҡа автобустар йөрөмәй, юлдар күмелгән. Хәйерсе хәлендә ултырғанда, ишетәм: тимер юл вокзалына ҡәҙәр бер автобус бирелә. Ултыр ҙа кит, ә унда поезд көтөп тора. Ә иртән мине Стәрлетамаҡ военкоматында тиҫтәнән артыҡ врач тырышып тикшерә, һәрмәй, тыңлай, һораша. Ауыртҡан ағзам юҡ, сәләмәтмен.

Аллаға шөкөр, трахома тураһында иҫемә лә төшөрөүсе булманы. Күҙ врачы яҡшылап ҡараны. Ә ҡағыҙҙа? Минең трахоманы дауалап булмай, өсөнсө стадия, тип яҙылған. Хикмәт ниҙә? Трахома Нурғәлиевта... Ә мин – бында, врачтар алдында, атай фамилияһы менәнмен, йәғни Үмәрбаев. Икенсе көнө военкоматҡа беренсе булып килдем. Һалдатҡа китеүселәр күренә башланы. Үҙемә иптәш табыу маҡсаты менән ҡараштырам. Үҙем кеүек буйға тәпәш егет, ауылдан. Таныштыҡ, ул да ун класс бөткән. Бергә булырға һөйләштек. Бына ҡыҙыҡ, шул таныш – Хәләф менән өс йылға яҡын бергә булдыҡ. Ҡаахҡа гарнизонында.

Ниһайәт, беҙҙе йыйып теҙҙеләр. Ур-ра! Китәбеҙ, бөгөн кис.

Көн үтте, кисен беҙ тимер юл вокзалында инек. Стәрлетамаҡ вокзалы ярым емерек, лапаҫҡа оҡшаған бина. Вокзал буфетына ла инеп ҡараштырам. Ҡыҙыл ыуылдырыҡ, ҡараһы бар, ә ат хаҡына кем алһын? Ярар, яңы дуҫым килеп етте.

Көтә торғас, дикторша хәбәр һала: “Күмертау – Өфө” поезы килә. Ә минең яңы дуҫым ни эшләргә белмәй, ул әлегәсә поезда йөрөмәгән икән. Ә мин? Мин үткән йыл Өфөгә комсомол кәңәшмәһенә барып ҡайттым. Поезда. Вагонда нисек урын һайларға беләм, иң мөһиме – вагонға алданыраҡ инеү. Яңы дуҫыма әйттем: мин вагонға алданыраҡ инәм, өҫкө ҡаттан икебеҙгә лә урын алам. Ҡулымда әйберем юҡ, вагонға беренсе булып күтәрелдем. Ә иң тынас урын өҫтә, иртәнгә тиклем – Өфөгә еткәнсе тынас йоҡларға була. Тиҙ генә ике урын алдым, береһенә менеп тә яттым. Хәләф дуҫымды көтәм. Хәләф күренмәй, ә уның ҡарауы, бер ярым иҫерек миңә күҙҙәрен аҡайтып аҡыра:

– Эй, деревня, а ну оттуда, я буду там спать!

Сәстәрем үрә торҙо. Вокзал тулы оҙатыусы, ҡала малайҙары ла армияға китә. Миңә аҡырған тинтәк тә ҡаланыҡы, урынымдан ҡыуып төшөрмәксе. Бына уның башы өҫкө полканан, мин ятҡан тәңгәлдән, күренде:

– А ну проваливай отсюда, деревня! Иначе я тебя выкину.

Үҙем дә уйлап өлгөрмәнем, һул аяғым дорфаның томшоғона тейешен бирҙе, теге дөбөр-шатыр тәгәрәп китте. Тәгәрәп китеү артынса уҡ быяла ватылған тауыш ишетелде. Оҙатыусылар тышҡы яҡтан вагон тәҙрәһен вата икән. Мин теге тинтәктең дуҫтары менән килгәнен көткәйнем, ә ул ҡасты. Ҡурҡыуын ҡурҡмағандыр, ғәрләнерлек тәгәрәне шулай ҙа. Юлда әлеге “деревня” үҙен һиҙҙермәне. Ә беҙҙең офицер “шуҡ” булып сыҡты, оҙатыусылар тәҙрә ватты, ә беҙ шуның өсөн берәр һум түләнек. Уның ҡарауы, Өфөгә тиклем Хәләф дуҫ менән өҫкө һәндерәлә йоҡлап барҙыҡ.

Бына иң яуаплы мәл. Башҡалар әйтеүенсә, Өфөләге комиссия үтә талапсан икән. Киреһенсә булып сыҡты. Ике-өс сәғәттә “годен” тамғаһын алдым. Тағы бер яңылыҡ: оҙатыусылар бында аҙналап ята икән. Ағас урындыҡтарҙа. Көтөрбөҙ. Ә мин Хәләф дуҫыма “уңыш”ты йыуып алырға тәҡдим иттем. Киттек гастрономға. Бер кило колбаса, өс сәкүшкә, бер буханка икмәк топчанда юҡ ителде, ә беҙҙе күргән кеше юҡ. Баштарҙы автобустарға тейәп алып китәләр. Көтмәгәндә беҙгә лә: “Теҙелергә!” – тигән команда бирелде. Тимәк, ҡунмайбыҙ. Теҙелдек, беҙҙең алға йәп-йәш лейтенантты (“покупатель”) килтереп баҫтырҙылар. Ә ул

Төркмәнстандың Чарджоу ҡалаһынан килгән. Беҙҙең өсөн автобус юҡ, йәйәү атлайбыҙ. Ә минең (эскәндән һуң) ҡабырғам аҫтында ут яна, үҙем генә беләм, һиҙҙермәҫкә тырышам. Ә шулай ҙа лейтенантҡа трамвай менән барырға теләгемде белдерҙем.

– Я тебе дам трамвай. Ты в армии, шагом марш!

Бына беҙ трамвай юлы аша атлайбыҙ, ә туҡталышҡа трамвай килә ята. Мин һә тигәнсе, лейтенант күрмәгәндә, халыҡ араһына сумдым да трамвайға һикереп мендем. Әлеге лә баяғы, хәйерсегә ел ҡаршы: Ленин урамындағы трамвай юлында ремонт бара икән, оҙаҡланым. Хәйерселектең үҙ сифаты бар. Ниндәй? Хәйерсе алама кейенә. Эйе, армияға барам, 1958 йылдың декабрь айы. Ә кем был ваҡытта армияға арыу кейем кейеп бара? Өҫтөмдә иҫке-моҫҡо. Өфө вокзалына инеп тә өлгөрмәнем, бер әҙмәүер эргәмә йүгереп килде лә ҡулымды шаҡарып тотто, икенсе ҡулы менән свистогын һыҙғыртты, һә тигәнсе ике милиционер килеп сыҡты. Бер һүҙ ҙә әйтергә бирмәй, мине вокзал алдындағы бинаның подвалына алып та төштөләр. Милиция бүлмәһе икән.

Әҙмәүер миңә бәлә яға башланы, ике милиционер кеҫәләремде тентей. Ә мин һүҙһеҙ тормайым:

– Алама кейем өсөн бәйләнәһегеҙме? Мин армияға китеп барам! Ә был иҫәрегеҙ юҡты һөйләй, мин вокзал алдына әле генә килеп еттем, инеп тә өлгөрмәнем...

– Ярар, ярар, документың ҡайҙа?

– Ниндәй документ? Документ лейтенантта.

– Ебәрегеҙ.

Эйе, капитан әйткәндән һуң, ике милиционер бер-береһенә ҡарашып алдылар. Киттем.

Ошо көнгәсә милиция тураһында яҡшы уйҙа түгел инем. Йәнәһе, милицияға аҡылы барҙы алмайҙар йәки был эш үҙе аҡылһыҙлыҡҡа килтерә. Вокзалдарҙа, башҡа урындарҙа милиция эшен күҙәтеүсән булдым. Был турала китаптың яртыһы яҙылған.

Үҙебеҙҙекеләрҙе табырға тип перронға сыҡтым, ә ҡаршыма, ҡарсыға кеүек осоп, лейтенант йүгерә, ҡулындағы бирсәткәләре менән сикәмә һелтәй. Саҡ ҡулымды ҡуйып өлгөрҙөм. Ярар, беҙҙең поезд көтөп тора, вагонға индек. Оҙаҡ торманыҡ, ҡуҙғалдыҡ. Вагонда лейтенант үҙен күрһәтә башланы. Күрәҙә кәрәкмәй, лейтенант өсөн мин – иң насар зат. Шуға ла өндәшмәйем, ә күҙәтәм. Күрәҙә кәрәкмәй, иң насары булғас, иң яҡшыһы ла булырға тейеш. Лейтенант үҙ тирәһенә бер нисә егетте тупланы. Күренеп тора: ул ҡаланыҡыларҙы ярата, имеш, уның тирәһендәгеләр – буласаҡ сержанттар, буласаҡ отличниктар. Лейтенант йыр өйрәтте, һәм вагон оҙаҡламай клубҡа әйләнде.

Кинель станцияһында байтаҡ торҙоҡ. Ғәрип-ғөрәбә, һораныусылар күп. Һораныусылар күп, биреүселәр әҙ. Ә лейтенант тик тормай. Бына ул үҙ командаһын йыйып алды, аңлата. Баҡтиһәң, ғәскәри хеҙмәттәгеләр (шулай булғас – барыусылар) ябай пассажир поезында ғына йөрөргә хаҡлы икән. Ә тиҙ йөрөшлө “Мәскәү – Ашхабад” поезы Кинелгә юл тота. Беҙҙең “суточный” аҡсалар лейтенант кеҫәһендә. Өҫтәмә аҡса түләһәң, тиҙ поезға ултырып була, ти. Лейтенант йырын йырлаусылар бик тиҙ ризалашты. Шулай тәүлек аҡсаларҙан ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Мин иһә тиҙ иҫәпләп алдым: өҫтәмә түләү менән тәүлек аҡсаһы араһында байтаҡ айырма бар. Тимәк, был аҡса лейтенант кеҫәһендә ҡала. Был турала лейтенантҡа әйттем. Ә ул мине тамбурға алып сығып, үҙ өлөшөмдө кире бирәсеген әйтте. Бирмәне, йәһүд ине лейтенант. Ҡайһы бер станцияларҙа поезд оҙаҡ тора, лейтенант һатыу нөктәләрен

ҡараштыра. Ҡиммәтле кәнфиттәр ала, имеш, бисәһе шоколад ярата. Беҙҙең тәүлек аҡсаһына ҙур ғына сумка тултырып күстәнәс йыйҙы. Ә малайҙар йырлаша. Бына шулай Чарджоуға килеп еттек. Вокзалда беҙҙе, яңынан вагонға ултыртып, әле генә үткән Аму-Даръя күпере аша алып сыҡтылар. Күперҙән ярты саҡрым аранан аҫтараҡ полк мәктәбе урынлашҡан. Аму-Даръя күпере, әйтеүселәргә ышанһаң, СССР-ҙағы иң оҙон күпер икән. Был ҡалала урынлашҡан зенит-артиллерия полкы ошо күперҙе һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән. Полк – ҡалала, ә полк мәктәбе “күпер аҫтында” тип әйтергә мөмкин.

Тимәк, беҙ барыбыҙ ҙа – буласаҡ сержанттар? Ә иң ҡыҙыҡлыһы аҙаҡтан булды. Лейтенант беҙҙе сафҡа теҙҙе лә, штабтан сыҡҡан капитанға тырышып рапорт биргәс, үҙ юлы менән китеп барҙы. Һәм лейтенантты беҙ башҡаса күрмәнек.

## Чарджоу

Ышанырлыҡ та түгел, туғыҙ көндә шунса ваҡиға. Карантин һүҙен ишеткәнем бар. Яңынан алынғандарҙы карантинда тоталар. Теҙеп ҡуйғас “рота”, “взвод” тигән түгел, ә “карантин” командаһы яңғырай. Мунсаға килтереп, сисенергә, кейемдәрҙе бер урынға өйөргә бойорҙолар, һалдат кейемдәре бирҙеләр. Мин иҫке-моҫҡо менән килгәнмен, ә быймам яңы. Юлда һораусылар, хаҡ биреүселәр ҙә булды, бирмәгәйнем. Һаман армия сафында икәнлегемә ышанып етмәйем. Хәҙер мин һалдат кейемендә. Көлкө лә, ҡыҙыҡ та. Ҡайһыларға форма бөтөнләй килешмәй. Бер-беребеҙгә ҡарап көлөшәбеҙ. Минең һәр саҡ хәсрәтем бар. Армияға атайым фамилияһы менән алынғанмын, мин – Үмәрбаев. Ә комсомол билетымда Нурғәлиев фамилияһы яҙылған, мәктәпте Нурғәлиев булып тамамланым, аттестатымда шулай.

Һалдат кейемендә ҡыйыулана төштөм, был турала командирҙарға әйттем. Ишетергә лә теләмәйҙәр. Туҡта, мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел, дөйөм командаларҙы үтәйем, ә үҙемә аталған командаларҙы, йәғни Үмәрбаевҡа тәғәйенләнгәндәрен, ишетмәйем дә ҡуям. Аптыраш, штабҡа алып инделәр. Аңлаттым, комсомол билетын күрһәттем. Аңланылар, үҙгәрттеләр. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ – Үмәрбаевтар, мин генә Нурғәлиев. Ниңә? 1946 йылдың октябрь айында мин, мәктәпкә килеп, уҡырға теләгемде әйткәйнем, уҡытыусы Хәнифә апай: “Олатайыңдың исеме Нурғәли булған, тимәк, һин Нурғәлиев булаһың”, – тип яҙҙы ла ҡуйҙы журналына. Ә яҙғанды һыҙыу ҡыйын. Тағы. Күмәк урында бер-береңдән көлөү күберәк. Кем алданыраҡ көлә, шул өҫтөнлөктә. Һиҙеп алдым, көлгәс әсерәк көлөргә, алдараҡ көлөргә яй табыу мөһим. Табам. Карантинда бер генә минут та буш тотмайҙар. Команда артынан команда. “Тиҙ! Тиҙерәк!” Иң ҡыйыны – ашханала. Тиҙерәк сәйнәү мотлаҡ, ашап өлгөрмәһәң, буш ҡорһаҡ менән сығаһың. Төндә лә тынғы юҡ. Өсөнсө төндә ҡайҙалыр алып киттеләр, баҡтиһәң, платформа бушатырға икән. Көрәк менән ҡырсын һелтәнек. Кемдер, был эш – ҡырҡҡа яҡын вагон бушатҡан өсөн аҡса тейеш, тигән булды. Беҙгә ауыҙ асырға ла ярамай. Гимнастеркаларҙы һалдыҡ... Ындағы декабрь һауаһы дымлы, ә ике-өс градус йылылыҡ зыянлы. Иртәгәһенә карантиндың 90 проценты кәшкелдәргә тотондо.

Мәскәүҙән ике полковник килеп, шәхес культы тураһында ашханала беҙгә лекция уҡыны. Ҡысҡырып һөйләйҙәр, ә бер нәмә лә ишетеп булмай, бар зал йүтәлләй. Бына һиңә йылы яҡ! Ә мин, ниңәлер, йүтәлләмәнем. Һалдат мәхрүмлеккә түҙергә тейеш, тигәнен аңғарттылар, буғай.

Аму-Даръяның икенсе яғына, ҡалаға, алып барҙылар, НЗ пушкаларын таҙарттыҡ. Төшкө ашҡа полк ашханаһына алып барҙылар, әммә ашатманылар.

Продаттестат килтерелмәгән, тинеләр. Ә кем килтерергә тейеш? Тейешле кеше шелтә алдымы? Юҡтыр. Ике йөҙ кешенең төшкө ашы күпме тора? Ай-һай... Кискә табан ас ҡалған карантин ҡайтыу яғына атлай. Ә мине, стройҙан сығарып, старшина ҡарамағына бирәләр. Вокзалға килеп, күпер сығарыу өсөн вагонға белье тейәйбеҙ. Бельены тейәп бөткәс, вагонға кем хужа икәнлеге күренә. Ыҙғыш, талаш. Беҙ старшина менән икәү, үзбәктәр күмәк. Беҙ бирешмәйбеҙ, шулай ҙа бельелар перронға ырғытыла. Бына һиңә интернациональ. Аңлайым: үзбәктәр һалдатты яратмай. Ә күпер аша үтәһе икенсе вагон иртәнсәк кенә буласаҡ. Старшина менән әлеге бельеларҙы машинаға тейәйбеҙ, паромға китәбеҙ, пристангә төшәбеҙ. Бельеларҙы паромға тейәйбеҙ, ә паромда өс машина. Аңлашылды: беҙҙең полк командиры Аму-Даръяның был яғына сыға икән. Полковник миңә лә иғтибар итте. Әле мин бер аҙна хеҙмәт итмәгәнмен, мәгәр смирно торорға тырыштым. Ул минең яҡа аҫтындағы аҡ сепрәктең дөрөҫ тегелмәгәнлеген әйтте лә был турала үҙемдең командирға “докладывать” итергә ҡушты.

“Слушаюсь!” тип честь бирҙем, ул “Проверю” тигән булды...

Бына шулай, күпер төбөндәге полк мәктәбендә туғыҙ көн карантинда булдыҡ. Һигеҙ класс белеме булғандарға ла уҡыу һөнәре табылды. Ә туғыҙынсы көн 22 кешене, стройҙан сығарып, тимер юл вокзалына оҙаттылар. Аму-Даръяның буйраҡ һыуын күреп хеҙмәт итергә яҙмаған икән.

## Чарджоу — Ҡаахҡа

1958 йыл, декабрь. “Ташкент – Красноводск”. Был – беҙ ултырған поезд. Чарджоуҙан Каспий диңгеҙенә тиклем юлдың күп өлөшө сүллектәр аша үтә. Бик ҡыҙыҡлы юл. Ярар, әлегә мин был юлда беренсе тапҡыр. Күҙәтергә яратам, аптыраштамын. Ни өсөн? Поезд Кавказ халҡы менән тулы.

Чечендар, ингуштар. Ҡаҙағстандан Кавказға депортациянан ҡайтыусылар икән. Шатлыҡтары эстәренә һыймай, әммә бер генә иҫерек кешеләре юҡ. Барыһы ла бейей. Тағы аптырайым, вагондар араһындағы тамбур бейерлек түгел, бигерәк тар, ә әзмәүерҙәй чечен шул урында ҡолас кереп, һикереп йә сүкәйеп бейей. Ҡарап тороусылар булһа, дәртләнеберәк бейейҙәр. Бер-берен уҙҙырырға тырышалар, һәр береһе ҡатмарлыраҡ хәрәкәтте күрһәтергә ынтыла. Һуңғараҡ мин чечендар хәрәкәтен ҡабатлап ҡараным. Юҡ шул, бер хәрәкәт тә тейешенсә килеп сыҡмай... Беҙҙең купела тағы ике таулы бара, икеһе лә ҙур кәүҙәле, мыйыҡлы. Береһе фотоаппарат менән, мине лә төшөрөп алды. Бына ул минең сәғәткә күҙ һалды, үҙенекенә алышыуҙы үтенде. Миндә “Старт” сәғәте, тышы анодланған, тимәк, ситтән ҡараусыға алтын булып күренә. Ә минең бирге килмәй. Был ике таулы төкөрөктәрен сәсрәтеп бәхәскә инде, һуғышырға әҙерҙәр. Бәхәсте араларға миңә мөрәжәғәт иттеләр. Ризамын. Дөрөҫлөк миндә булмаһа, сәғәт китә, дөрөҫ булһа, ике сәғәтле булам. Сәғәттәр төркмән ҡартына күсә. Минеке дөрөҫ түгел? Һөйләшкәндәр, тимәк. Тауыш күтәрҙем. Имеш, спортсылар. Ә беҙ, салага булһаҡ та, һалдаттар. Бер иптәш килде. Дилмөхәмәтов: “Һеҙгә, Кавказ мөртәттәренә, сәғәт тәтемәй”, – тине. Эй үртәлде мыйыҡлы зат. Арыу кейенгән, аҡсалыға оҡшаған, ә бер ябай сәғәт өсөн әллә ни эшләргә әҙер.

Абайландым. Мары ҡалаһында был поездан төшөп ҡалдыҡ. Беҙ, Чарджоу полк мәктәбе өсөн “артыҡ” 22 малай, перронда торабыҙ. Поезд ҡуҙғала, ә теге ике таулы тәҙрәнән ҡарап ултыра. Малайҙар теге икәүгә бармаҡ менән күрһәтеп һыҙғыра. Минең өсөн был – яҡшы һабаҡ. Ә сәғәтте һуңынан барыбер алышырға тура килде. Ташкентта, комсомол кәңәшмәһендә. Теңкәмә тейҙе минең кеүек комсорг грузин, алыштым.

Беҙҙе Мары ҡалаһындағы радиотехника полкына килтерҙеләр. Нишләйһең,

беҙ әле “йәшелдәр”, ҡаланы ҡарап булмай, күҙәтеү юҡ. Ҡала Мургаб ярында. Эйе, был Аму-Даръя түгел, шулай ҙа Төркмәнстан өсөн мөһим йылға. Бында һыу ҡәҙерле. Ленин исемендәге Ҡараҡом каналы әлегә Марыға килеп етмәгән. Мары урынлашҡан оазиста матурлыҡ бар, йәшел парк та бына тигән. Марыла бер генә көн булдыҡ, иртәгәһенә шул уҡ “Ташкент – Красноводск” поезы менән беҙҙе, дүрт егетте, Каахҡа тип аталған район үҙәгенә оҙаттылар. Стәрлетамаҡта танышҡан беренсе дуҫым да минең менән әлэкте.

## Каптинармус

Каахҡа. Бына шулай. Әйтмәһәләр ҙә, аңлап була, әйтеп тә ҡуйҙылар: “Өс йыл ғүмерегеҙ ошонда үтәсәк”. Аптырарғамы, юҡмы? Аптыраш юҡ. Ҡыҙыҡһыныу ғына бар. Мин күрмәгән ғәләмәттәр күп: антенналар, радиолокаторҙар... Бында белгестәр генә хеҙмәт итә. Күберәге Мәскәүҙән. Ә мин? Хәйер, ваҡ-төйәк эштәрҙе үтәүселәр ҙә кәрәк.

Башланды: иң күп дәрес – строевой, табандар ауыртҡансы шаҡ-шоҡ атлаталар, йүгертәләр, ятҡыралар. Бындағылар әйтеүенсә, иң ҡыйыны – “подъем”. Ошо иртәнге, тәүге команданы беренсе булып үтәргә өйрәндем. Сөнки бәләкәйҙән сос, һәләтле булдым, ялҡау түгелмен. 41 секундта кейенеп, стройға баҫырға – һәм мин бер тапҡыр ҙа һуңламаным. Хәрби тормошҡа өйрәнеүем тиҙ. Бында һинең һәр аҙымың алдан билдәләнгән, яҙылған. Устав, устав, тағы устав. Бер-ике аҙнала күнекмәләргә өйрәндем. Ә нисек өйрәнмәйһең, бында аяҡҡа силғау урауҙы ла көн һайын күрһәтәләр. Иғтибарһыҙ булһаң, көт тә тор – сираттан тыш наряд алаһың.

Устав. Командир. Ә тағы ни бар? Бар, осраҡлы хәлдәр ҙә бар. Әгәр мин бер ай хеҙмәт иткәс, ҙур булмаған гарнизонға киҙеү сире килмәгән булһа? Аптырарға түгел, минең хеҙмәт юлы икенсерәк булыр ине. Сирлеләрҙең барыһын да дауаханаға оҙатып булмай. Ленин бүлмәһе лазаретҡа әйләнде, санинструктор үҙе лә ауҙы. Ротаның яртыһынан күберәге сирле, сирләргә “яратыусылар” ҙа етерлек. Мин үҙем бәләкәйҙән сирләргә яратманым, ә киҙеүҙе бөтөнләй һанға һуҡманым. Бында ла шулай килеп сыҡты. Эйе шул, бындағы иң ауыр эш – кухнялағы “ярҙамсы” эше. Шулай, сирләп ятҡандар ҙа буш ҡорһаҡ менән ҡалырға теләмәй. Кухняла бер нисә тәүлек бер үҙем эшләнем.

Башҡа йомоштарға ла өлгөрҙөм. “Ауырымайһыңмы?” – тип һорағандарға “юҡ” тип яуап бирҙем. Тора-бара мине “күреп” алдылар. Иғтибар иттеләр. Хеҙмәттәге күпселек “көн уҙһын, сабата туҙһын” тигән принцип менән йәшәй. Ә минең күҙҙәр һәр саҡ локаторҙар әйләнешен күҙәтә, һоҡланып, үҙемсә пландар ҡорам. Мин – күҙәтеүсән, аңланым: белгестәрҙең күбеһе ысын белгес булып килмәгән. Бында ла белгес булырға өмөт бар. Нишләйһең, тәүге ынтылышым үтәлмәне. Биш-алты кешене операторҙар мәктәбенә оҙаттылар. Ленинабадҡа. Үҙемде лә ебәреүҙе һораным, тик ебәрмәнеләр. Командир һүҙе аптыраштa ҡалдырҙы: “Русса насар һөйләшәһең”. Кавказ халҡы минән дә насар һөйләшә. Ә тағы бер йылдан шул уҡ командир: “Һин иң аныҡ һөйләүсе оператор”, – тип әйтәсәк. Әлегә мин һағайҙым, өндәшмәнем. Аҙаҡ аңланым: командир үҙенсә уйлаған. Элек гарнизондарҙа бик ҡыҙыҡлы штат йәки дәрәжә бар ине, рәсми яҙылышы “писарь – каптинармус”. Юҡ, ҡағыҙ эше түгел, ысынбарлыҡта ул – склад мөдире. Ашамлыҡ, кейем-һалым һәм башҡа нәмәләр каптинармус ҡарамағында, һәм ошо урынды “әләктереү” өсөн күптәр тырыша. Һалдаттарҙың байтағы Мәскәүҙән, күптәр Кавказдан, Украинанан, һәр береһе үҙен каптинармус итеп күрә. Бына шулай мине, салаганы, приказ менән каптинармус итеп тәғәйенләнеләр. Хәҙер офицерҙар ҙа аҙыҡ-түлекте складтан минең ҡулдан сират

тороп ала. Каптеркала “ЗИС” һыуытҡысы, эҫе көндә татлы боҙло һыу эсергә офицерҙар ҙа һирәк баҙнат итә.

Ләкин каптинармус ялҡауҙар эше түгел. Сифатлы икмәк һәр саҡ етерлек булырға тейеш. Ситтән ҡарағанда, икмәк килтереүе еңел: барҙың – килтерҙең. Юҡ шул, ваҡыт факторы бар. Ит яғы ҡыйыныраҡ. Беҙ хеҙмәт иткән дәүер, Аллаға шөкөр, һалдаттар өсөн беренсе сорттан кәм аҙыҡ бүленмәне, эйе, икмәк тотоп ант итергә әҙермен. Насар ашатҡан урындар ҙа осрағандыр, моғайын. Тимәк, командир һәм старшина ҡомағай, йүнһеҙ булған. Беҙҙең командир, старшина бер генә хата яһаманы. Аҙыҡты үҙем барып алғас, беләм: мәҫәлән, шәкәр ҡаптарының тышына “Экспорт в Иран” тип яҙылған һ.б.

Төрлө ваҡыт була. Бына бер саҡ старшина менән соҡор ҡаҙып, бер мискә бына тигән тоҙланған тресканы күмәбеҙ. Сөнки ашамайҙар, артып ҡала. Ә старшина: “Ашамайҙар, тип әйтергә ярамай, норманы кәметерҙәр” – ти. Йәнә беҙгә, сик буйындағыларға, ит, шәкәр нормаһы арттырылған. Беҙ – күктәге сик һаҡсылары.

Командирҙың “помещик” ҡушаматы бар ине, хужасыл ине ул. Бәләкәй генә сусҡа фермаһы тотто
ҡ, артыҡ аҙыҡ әрәм-шәрәм ителмәне. Командир урындағы хужалыҡтар менән дә эш итә белде, йәшелсәгә лә аптыраманыҡ. Виноград, алма урларға йөрөмәнек. Ә ни өсөн был турала сурытам? Сөнки күп йылдар үткәс, өс тапҡыр улым хеҙмәт иткән урынға, Байконурға, барҙым. Айырма бигерәк күп. Казармалар кондиционерлы, бынаһы беҙҙең төшөбөҙгә лә кермәне. Ә бына ашауҙары ташҡа үлсәйем. Мине офицерҙар бүлмәһендә ашаттылар. Әммә беҙҙең сифатҡа яҡын да килмәй. Беҙгә килтерелгән ярмала элек бөртөк тә сүп булмай торғайны.

## Старшина

“Бог создал отбой и тишину, а черт создал подъем и старшину” – был һалдат мәҙәге күп старшиналарҙы дөрөҫ һүрәтләй.

Ә беҙҙең старшинаға бындай һүрәтләү бөтөнләй килешмәй. Александр Захарович Пастольник – беҙҙең старшина, оло йәштә, ғүмере буйы ғәскәри хеҙмәттә. Ҡыҙыҡлы шәхес: милләте украин, һирәкләп үҙ телендә әйткеләй, таҙа рус телендә һөйләшә, төркмән телендә иркен аралаша. Һөйләү һәләтлеге менән старшина күп генералдарҙы уҙыр ине. Ә ниңә ул офицер булмаған? Юҡ, был һорауҙы бирергә мин баҙнат итмәнем, үҙемсә генә уйланым. Әлеге лә баяғы, ул ваҡытта ла кеше яҙмышы сәйер хәл ителде. Бынаһы мин әйткәнсә: “Дуракам – дорога, умным – задачи, остальным – работа”.

Ә иң беренсе күргән старшинам Чарджоу ҡалаһындағы полк мәктәбе старшинаһы ине. Ендән тыуған, һәр минут һайын бәйләнергә сәбәп эҙләп кенә тора. Күрәһең, старшина тураһында алданыраҡ ишеткәнмендер. Чарджоуҙа ҡыланыштарына ныҡлап күҙ һалдым. Ысынлап та, тәүге ҡарашҡа йәш старшина артыҡ бәйләнсек, имеш, барыһын да күрә, барыһын да белә. Күрә белгәс, ни өсөн һуң бер көндө тотош карантинды ас ҡалдырҙы? Полк ашханаһы ваҡытында хәбәр алмаған, норма бирелмәгән, ике йөҙ кеше төшкө ашһыҙ ҡалды. Старшина күҙгә әтәс кеүек урынһыҙ тауышлана. Уйлап ҡуйҙым: был заттың беренсе бурысы – үҙен күрһәтеү. Эйе, арала Чапайға оҡшарға теләүселәр йәки Котовский булмаҡсылар ҙа бар. Һәр зат үҙенә билгеле данлыны һайлай, шул затҡа оҡшарға самалай. Уйлап ҡараһаң, күптәр үҙен күрһәтеүҙе беренсе урынға ҡуйып, үтәргә тейеш эштәрен онота башлай.

Ә был старшина бер минут та үҙен күрһәтеү менән мауыҡмай. Сүллектәге ҙур булмаған гарнизонда бер генә тапҡыр ҙа ашау проблемаһы булманы. Ә аҙыҡтың

сифаты? Аҙыҡ сифатлы ла ине. Хәстәрле үҙен маҡтауҙы талап итмәй. Каптинармус, йәғни старшина ярҙамсыһы булғас, аңлап алдым: атайым да минең өсөн был тиклем хәстәрле булманы. Әйтәһен теүәл урында әйтә. Теңкәгә тейеү – унының ғәҙәте түгел. Ул миңә генә түгел, гарнизонға ысын “батька”.

Беҙҙең казарма фин блоктарынан ғибәрәт, маҡтарлыҡ түгел, ҡышҡы көндәрҙә һыуыҡ, ел үтә. Шыма таҡтаға балсыҡ йәбешмәй, ә нисек йәбештерергә? Командирҙың кәңәше ябай: “Һалдат уйлап табыусан булырға тейеш”. Таптым. Ҙур кухня бысағы менән телеп, ағастан дранкалар яһаным. Бер үҙем. Ҡаҙауҙар юҡ, тимер сым тураным. Дранкаларҙы стенаға ҡаҡтым. Ә бына штукатурка эшенә ярҙам итеүселәр табылды. Ул ваҡытта устав буйынса “мертвый час” бар ине. Төшкө аштан һуң бер сәғәт йоҡлау мотлаҡ. Ә мин, йоҡламай, дранкалар ҡағам. Мыҫҡыллаусылар, хатта ҡурҡытыусылар бар. Ишетмәнем. Үҙемдекен эшләйем. Үҙемә баһа алдым. Ә көҙгә табан – һалдат өсөн иң яҡшы бүләк – ун көнгә өйгә ҡайтырға. Беренсе йыл хеҙмәт иткәндәргә бындай бәхет эләкмәй. Ә миңә эләкте. Бына шулай, тәүге йылдың үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Сүллектәге хеҙмәттә аҡылдан шашҡандар ҙа, үҙҙәренә ҡул һалыусылар ҙа булды. Был турала һөйләргә теләк юҡ. Шулай, старшина тәрбиәсем генә түгел, уҡытыусым да булды. Армиялағы тәүге йылымды мин юғары уҡыу йортонда ике йыл уҡыуға тиңләр инем.

Старшина – партия ағзаһы. Мине лә беренсе йылымда уҡ партияға инергә өгөтләнеләр. Рекомендацияның береһен миңә старшина бирҙе.

Ҡултамғаһын ҡуйғанда әйткән һүҙен онотмайым: “Запомни сынок – партия может поднять на небеса, но может бросить и в бездну”. Ысынлап та, беҙҙең дәүер үҙ ҡағиҙәһенән тайпылманы.

Мин старшина монологын һәр саҡ иҫемдә тоттом. Ә барыбер яҙмыштан уҙмыш юҡ. Юҡҡа әйтмәгәндәр, һиҙгәндәр минең башҡорт холҡон. Ярар, был турала икенсе урында.

*...Ҡарабаш турғай. Ғәжәп ҡош һин. Күңелемә һеңгәнһең... Минеңсә, һәр кемдең шәхсән яратҡан йә ратмаған ҡошо була. Берәүҙәр кәнәриҙе, күгәрсенде, һандуғасты, ҡарсығаны, һайыҫҡанды һөйһөнмәй. Ә һеҙҙең ҡоштарға мөнәсәбәтегеҙ нисек?*

## Һыбайлы һалдат

Бындағы ат минең өсөн ҙур табыш, йыуаныс булып сыҡты – һыбайлыҡҡа өйрәткәс, эш бөтөнләй көйләнде. Һыбайлы кәйефен башҡорт белмәгәс кем белһен. Уҡып белдем – ғәрәп тоҡомо бар, Төркмәнстан ерендә атаҡлы ахалтекин тоҡомо бар. Ә миндәге ат атаҡлы тоҡомдан түгел. Шулай ҙа нисауа.

Сүллектең дә үҙ йәме бар. Бына февраль аҙағы, мин ат өҫтөндә. Бындағы матурлыҡты һүрәтләү мөмкин түгел. Иҫ китерлек күренеш. Ат өҫтөнән, ҡалҡыулыҡтан, тирә-яҡҡа ҡарап, аптырашта ҡалам. Күҙең күпме күрә – шундай ҡыҙыллыҡ. Ҡайҙа ғына ҡарама – ләлә сәскәһе. Салғы менән сап та кәбәнгә өй. Юҡ, минең ҡулдан килмәҫ сабыу, бер бөртөгөн өҙөргә баҙнатым етмәй. Ҡәнәфер сәскәһенең күплеге! Ана, тегендәрәк тюльпан шул тиклем ҡуйы күренә, энә тығырлыҡ та урын юҡ. Барып етәм, юҡ шул, алыҫтан ғына шулай күренә. Ана ҡара, тегендәрәк, ҡалҡыулыҡта, аттан төшөп, сиҙәмгә ятып ял итеп булалыр. Барам, аттан төшәм, ятып ҡара! Ҡайҙалыр ташбаҡа ашыға: һағыраҡ, һағыраҡ! Йылан түгелме? Бынау кәҫте ҡуҙғатып ҡарайым. Тейә күрмә, ана, скорпион әҙер, ҡулың һуҙылғанын көтә. Ә бында, моғайын, фаланча аңдып ята. Яңылыш баҫтым, аяҡ аҫтынан оҙон ҡойроҡло сысҡан сығып сапты.

Ярай, бындағы донъяны һүрәтләп бөтөп булмаҫ. Сүллек – бушлыҡ, имеш.

Бушлыҡ түгел. Сүллек йәшәй, сүллек яза бирә лә белә. Сүллек үҙенә ихтирам талап итә. Шул мин каптерканың иҙән мөйөшөндә шымарып бөткән тишек күреп ҡалдым. Бына тишектән ҡап-ҡара ҙур үрмәксе килеп сыҡты. Ә мин, ниңәлер, эйелә биреп, үрмәксегә ҡулымды һондом. Бер ни һиҙмәй ҡалдым, мине ҡапыл кемдер көслө этәрҙе, бер яҡҡа тәгәрәнем. Баҡтиһәң, үрмәксегә ынтылғанды старшина күреп ҡалған, әйтергә ваҡыт ҡалмаған, мине этеп йыҡҡан.

Был үрмәксе иһә – тарантул, ә төркмәнсә "ҡара ҡурт" икән, саҡһа, кеше үлә. Тарантул үҙе кешегә бер ваҡытта ла һөжүм итмәй, тейеп ҡара, кәрәгеңде алаһың. Был турала старшина миңә лекция уҡып алды. Аңланым. Бында бал ҡорттары ла бар, эйе, тик умарталарын күрмәнем. Бер нисә кеше аптыраашта: "Ана, ҡарағыҙ стенаға, аңламайбыҙ, ни ғәжәп!" Мин йүгереп барҙым, бына һиңә кәрәк булһа – күс, бал ҡорттары күсе. Оҙаҡ уйлап тормай, химия ҡоралына ҡаршы масканы, кипкән йәшелсә барабанын, резина бирсәткә кейеп, башҡаларҙы аптыратып, ҡорттар күсен бикләнем. Умартаһын да үҙем яһар инем, киске поезд менән Ташкентҡа, комсомол кәңәшмәһенә, барыр кәрәк. Ҡайтҡас, ҡорттарҙың һәләк булғанлығын белдем. Ниңә эш белмәгән зат тотона икән? "Мин дә беләм", – тиеп әйтеүсе табылған. Бына шулай, ат мине сүллек менән генә таныштырманы. Бер көн ул тышауһыҙ килеш алыҫҡараҡ киткән. Эҙләп таптым, ә ул тоттормай, ҡаса ла ҡаса. Үҙем дә һиҙмәй ҡалғанмын: беҙ ҡайҙа? Йөҙөм баҡсалары, диуарҙар, ҡоймалар ҙа балсыҡтан. Мине яҡын ебәрмәй, арабыҙҙа 200 метр самаһы. Ҡара әле, теге диуарҙар артынан биш-алты йәнлек йүгереп сыҡты. Аптырап туҡтаным, өрәләр, тимәк, эттәр. Кит әле, шул тиклем ҙур эттәр буламы? Эттәр минең атты ҡамап алды. Ә ат, нишләһен, минең яҡҡа саба. Бына ат миңә һырылды. Ҡулымда ат башлығынан башҡа бер нәмә лә юҡ. Тынысланырға тырыштым, ә төркмәнсә бик әҙ беләм. Эйе шул, хәтеремдә, әле мин каптинармус түгел саҡта, старшина, минең арыу яҙышыуымды белеп алғас, ҡалайға плакаттар яҙҙыртҡайны. "Чекмек гадаган" тип яҙғайным, "запретная зона" йәки "проход запрещен" тигәнде аңлата. Ярар, эттәр минең "тел"де аңларға тейештәр, миңә тыныс булыу мотлаҡ. Атҡа атланыу мөмкин түгел, тештәре эй үткер, аяғыңдан әләктерерҙәр. Атты етәкләп әкрен генә атлайым, һиҙҙеләр – беҙ биләмәләренән китеү юлындабыҙ. Әҙерәк барғас, алдыбыҙҙағылары артҡа күсте, тимәк – солох. Атҡа һикереп мендем, тиҙерәк китеп була, ат йәнфарманға әҙер. Ҡотолдоҡ. Ат йән-фарман, мин уйҙарым менән сабам, һуңынан старшинанан һорашып белдем: төркмән тоҡомло овчаркалар бар, башмаҡ кеүек эреләр, уҫалдар. Ә миңә ошонан һуң һыбай йөрөргә сик ҡуйылды. Бәй, рота киске разводҡа теҙелгән, ә мин, йән-фарман сабып, ҡасабанан ҡайтып киләм. Беренсе каптерканы уҙғанда бина артынан көслө ҡойон килеп сыҡты, ниндәйҙер картон киҫәктәрен юлыбыҙға сығарып бәрҙе. Ат, өркөп, туҡһан градусҡа тайпылды. Ә мин тураға остом, нисәләр метр балсыҡ һөрҙөм. Бер яҡ битемдең тиреһе һыҙырылды. Бәләкәй сағымда ла аттан күп ҡоланым. Ә бында? Ярар, бер генә һөйәгем дә һынмаған. Ә зыян хәтәр. Һыңар битле булып ҡалам бит! Һыҙланманым – мин түҙемле. Ә бына битем? Ҡыҙҙар яратмаҫ хәҙер. Көйөндөм. Бына һиңә, ямаулығы үҙемдә, төҙәлде, эҙе лә ҡалманы, әйтәм бит, миндә эт организмы. Икенсе көнө командир бар ротаны теҙҙе, мине стройҙан сығарып баҫтырҙылар. Приказ уҡылды: "Нурғәлиевҡа һыбай йөрөү тыйыла".

## Байрам аҙағы

1959 йылдың 1 май көнө беҙҙе ҡасабаға килтерҙеләр. Майҙанда сафҡа теҙелдек. Сик һаҡсылары күп, ә беҙ – бер генә рота. Доклад һөйләнде, ҡул сабыуҙар булды. Тантаналы марш ваҡыты етте. Мамыҡсылар, һарыҡсылар үтте, барыһын

да милли кейемдәге төркмән ҡатыны рус телендә ҡотлай, ҡотланғандар һөрән һала. Бына сик һаҡсылары тигеҙ саф менән атлап уҙа, ә теге ҡатын:

– Да здравствуют советские пограничники! – Йәшел погонлылар өс тапҡыр “Ура!” ҡысҡырып үтә. Беҙҙең сират. Һынатмайбыҙ, бына тигән атлайбыҙ.

– Да здравствуют советские черногонники! – “Ура!” ҡысҡырыусылар әҙ булды. Был ҡотлау дәррәү көлөү тыуҙырҙы. Ысынлап та, ҡасаба халҡы беҙҙе “ҡара погонлылар” тип атай. Беҙ иһә был атамаға күнеккәнбеҙ. Көлөшә-көлөшә, машина кузовына тейәлеп ҡайтырға булдыҡ. Мин машинаға ултыра алманым, замполит саҡырып алды. Бараһы урын бар икән. Балалар йортона киттек. Унда беҙҙән алда уҡ килеп торғандар, ә мин комсомол секретары булараҡ кәрәкмен. Бала-саға менән осрашыу булды, миңә лә бер нисә һүҙ әйтергә тура килде. Бына һиңә, тәрбиәсе ҡатындарҙың береһе, мине ситкәрәк саҡырып:

– Миңә оҡшайһың, мин һиңә ҡыҙымды бирәм, – тимәһенме!

Урыҫ ҡатыны әйтте, ә мин ҡыҙын күҙ алдына килтереп булашам. Адресын әйтеп, өйөнә саҡырҙы. Ризалаштым. Ысынлап та, бәләкәй гарнизонда ҡыҙҙар менән бәйләнеш тотҡан һалдаттар бик әҙ. Ундайҙар, о-ой, маҡтана! Беҙҙең расчетта минән бер йылға элгәре армияға килгән Голев һәр көн маҡтана – ҡасабала ҡыҙы бар. Ирһеҙ ҡатындарға йөрөүселәр ҙә табыла, быңдайҙар ҙа әллә кем булып һөйләшә. Күптәр тансыға барып, танышыу юлын эҙләй. Ләкин таба алмай. Ә миңә ниңә ҡаушарға? Саҡырған ергә бар...

Махарадзела тыуған грузин дуҫым посылка алды. Өс шешә чачаның береһен миңә бирҙе. Эйе, чача – көмөшкә, йөҙөм емеше ҡалдыҡтарын әсетәләр ҙә ике тапҡыр ҡыуалар. Алтмыш градуслы, ҡәһәр һуҡҡан нәмә! Таҙа эсемлек, коньягың ары торһон. “Увольнительный” алып, әлеге шешәне тотоп, ҡунаҡҡа киттем. Барып индем, тик мин уйлағанса булманы. Ҡатын үҙе урыҫ, ә ҡыҙы төркмән, имеш. Бына ни өсөн Рәсәй кешеһенә бирергә иҫәп тота икән?! Ә ҡыҙыҡай буйға бейек, иҫән-һау, зифа, битендә йөйө бар. Ярар. Детдомдан алынған балаларҙың холҡон беләм, өндәшмәй ултырам. Мине аңлау ҡыйын да түгел, сөнки армиянан кәләш алып ҡайтыу – һирәктәр яҙмышы. Грузин чачаһы бик тиҙ башҡа бәрә, ә мин яңылышыуҙан ҡурҡам. Ҡыҙыҡай ҙа бик тиҙ генә “баш биреүсе”гә оҡшамаған. Булмағайы! Һорауға яуап көтмәгән яҡтан килеп сыҡты. Өс-дүрт төркмән егете килеп инде. Ҡыҙ артынан килгәндәр. Өҫтөмдән ауыр йөк төштө түгелме? Урманға утын алып бармайҙар... Эйе, ҡыҙыҡай ғынам ҡарас егеттәр менән ҡайҙалыр олаҡты. Ҡотолдом. Әрмегә өйләнер өсөн килмәйҙәр.

Шулай ҙа әлеге ҡатын өйөнә тағы бер тапҡыр барырға тура килде. Яңы йыл байрамында грузин дуҫ менән барып индек. Сәй, шарап эстек, теге ҡатындың йәш әхирәте лә килеп ултырҙы. Ә теге ҡыҙ өйҙә булманы, ул турала һүҙ ҙә сыҡманы.

Барыһын да грузин егет аңлатты. Хәйер, бисәләр үҙҙәре ниҙер теләй кеүек... Нишләйһең, коньякта йәшәгәндәр енси мөнәсәбәткә икенсе күҙлектән ҡарай шул.

## Мираж

“Подъем!” – һәр кем өсөн, ә күпселеккә был команда оҡшамай. Ялҡау мәскәүҙәр өсөн әйтәһе лә түгел, бәлки, әйтемде лә улар тыуҙырғандыр: “Бог создал покой и тишину, а черт – подъем и старшину”.

ПВО һалдаты “подъем” командаһынан һуң 40 секундта кейенеп, теҙелешкә баҫырға тейеш. Мин бер генә тапҡыр ҙа теҙелешкә һуңламаным, өлгөрҙөм – был ғәҙәтем бәләкәйҙән. Күрәһең, ошо ғәҙәтемде һиҙеп, командир мине каптинармус итергә уйлағандыр ҙа. Ярар, быныһы – командир эше, каптинармус икән

– каптинармус, минең өсөн бигерәк уңайлы, ни тиһәң дә, барыһын да иртән физзарядкаға ҡыуалар. Плацты уратып алған юлды ике-өс тапҡыр йүгертеп үтеү рәхәт түгел.

...Ат эҙләргә сығам. Уны кистән, тышаулап, сүллеккә ебәрәм. Бикләп тоторға кәрәкмәй, хайуан да иркенлекте ярата. Ә яҙғы көндәрҙә яҡын-тирәлә йәш үлән дә бар. Минең ҡулда бер генә ат, егеү аты, ә миңә тиклем был атты бер кем дә һыбай йөрөргә өйрәтмәгән. Ә мин, башҡорт, армияға китер алдынан бер нисә тайҙы һыбай йөрөшкә үҙем өйрәткәйнем. Бынығын да өс-дүрт көндә өйрәттем. Эйәр юҡ, булмаһа ни, ауылда ла мин эйәрһеҙ саптым. Бына шулай, иртүк ат артынан китәм. Зарядканан ҡотолам, имеш, ат егеп икмәккә барыу фарыз. Атты табып, икмәк кисәге ҡаптырам да, йүгәнләп, арҡаһына менеп ултырам. Ат өҫтөнән алыҫҡараҡ ҡарап була. Хәйер, алыҫҡа ҡарауҙың кәрәге лә юҡ. Копетдаг тауҙары яҡын, күп булһа ун-ун биш саҡрымдыр.Ниндәй тауҙар? Мин башҡаларҙан һорашырға яратмайым, ә үҙем аңлап етмәйем. Нишләп тауҙар ҡола? Ни өсөн йәшел урмандары, болондары юҡ? Текә ҡаялар, ташлы тауҙар. Икһеҙ-сикһеҙ Ҡараҡом сүллеге ошо тауҙарға килеп терәлә.

Диңгеҙ... Утрауҙар... Пальмалы, йәшел урманлы утрауҙар. Туҡта, ана тегендәрәк томан тарала. Кит әле, диңгеҙ ярында – йәмле ҡала. Ә тегендәрәк? Карап йөҙә. Ныҡлабыраҡ ҡарайым – һыу аҫты кәмәһе ҡалҡып сыға. Бына ғәжәп! Ниндәй гүзәллек! Э-эх, күренеште үҙем генә күрәм, ә тәьҫораттар менән уртаҡлашҡы килә. Тик яҡын-тирәмдә бер кем юҡ. Ләкин оҙаҡ ҡарап та булмай, әлегә мин – һалдат, атты егеп, икмәккә бараһым бар.

Икенсе көнө үҙемдең баштағы белемдәремдә көнө буйы теүәлләп йөрөнөм. Мираж был, мираж тигән күренеш. Ә иң ҡыҙыҡлыһы – бында, Көньяҡ Төркмәнстан ерендә, йәмле мираждарҙы күреү өсөн ваҡыт, урын һайлай белеү мотлаҡ. Эйе, тәүге күреүем осраҡлы, әммә бигерәк уңай урында, кәрәк ваҡытта булған.

Мираж... Ҡыҙыҡлы һүҙ. Ошоға тиклем, мираж – һаташыуҙың, хыялланыуҙың бер төрө, тип кенә уйлай торғайным. Бына шуның өсөн дә мин үҙем күргән мираж тураһында иң яҡын дуҫтарыма ла һөйләмәнем. Бер нисә йөҙ кеше менән бергә хеҙмәт иттем, мираж тураһында һөйләүсе булманы. Тимәк? Тимәк, мираж күҙәтеүселәр юҡ.

## Сурик

Интернациональ ғәскәри берәмектә хеҙмәт итәбеҙ, һанап тороуҙың кәрәге юҡ. Немец бар, болғар, латыш, мари бар. Кавказдар байтаҡ, тик төркмән, урындағы халыҡ вәкиле юҡ. Әрмән – икәү, берәүһе менән хатта яҡындан таныштым. Сурик Аветисян – хозвзвод водителе, һыу ташыусы. Үҙе тураһында һөйләргә ярата, Севан күленә яҡын урындан килгән. Өр-яңы “Москвич” автомобиленә хужа, килемле баҡсаһы ла бар икән. Минең менән һөйләшергә әүәҫлеген дә аңлайым, хәйер, каптинармус менән яҡынлашырға теләүселәр етерлек. Мин – салага, ә ул ҡайтыу ваҡытына яҡынайған, тимәк, минең өсөн “старик”. Дөрөҫөн әйткәндә, ул ялҡау, хәйләкәр. “Подъем”дан һуң ул мине йыш йөҙәтә: “Дежурныйға әйт әле, ҡасабаға бараһы бар...” Эйе, ул да зарядка яратмай, бигерәк тә иртәнге кросс булаһын белеп алһа, миңә бәйләнә. Һирәкләп үтенесен тыңлайым, теләһә ни йомошҡа водовозка менән барғылайым, ә ҡасабаға мин ат менән дә бара алам. Бер көн Сурик, миңә үҙенең ышанысын белдереп, ҙур серен асты. Бында һыу ҡәҙерле, әлегә беҙҙең гарнизонда артезиан ҡоҙоғо бырауланмаған, ә Ҡараҡом каналын ҡаҙыу башланған ғына мәл. Һыуҙы Иран сигенән барып алабыҙ. Сурик йөрөткән “ЗИС” менән. Йорттар балсыҡтан төҙөлә, өй төҙөү өсөн дә, баҡсаларға ла һыу кәрәк. Шулай, ул минән рөхсәт һораны, ә мин

ризалаштым. Бер төркмән ике цистерна өсөн 25 һум түләй, етмәһә, өйөнә индереп һыйланы. Бына шулай, мин беренсе тапҡыр төркмән өйөнә индем. Өйҙәр балсыҡтан һалына. Солан юҡ, ишекте асаһың – һин өй эсендә, ә иҙәнгә келәм түшәлгән, таҙалыҡ. Ашъяулыҡ йәйеп, беҙҙе иҙәнгә ултырттылар, былау, йәшелсә-емеш ҡуйҙылар. Төркмән халҡы араҡы, вино эсеүҙе хупламай, ә беҙҙең өсөн араҡы ла ҡуйылды. Былауҙарын әйтәм, телеңде йоторлоҡ.

Шулай булды, беҙ Сурик менән иҫерештек, тип әйтергә була. Аветисяндың шатлығы эсенә һыймай – килемле көн дә баһа. Тулы цистерна менән ҡайтыу юлындабыҙ, кәйеф шәп, йырлашабыҙ. Сурик – әрмәнсә, ә мин башҡортса ебәрәм, һәр кемдең үҙ көйө. Беҙ ҡайтып еткәндә, киносыбыҙ Козлов сеансын башлаған. Киноны беҙ Сурик менән кабинала ултырып ҡараныҡ, тышта. Эскәмйәләр тышҡа сығарыла. Ғөмүмән, Төркмәнстанда асыҡ кинотеатрҙар модала. Суриктың тағы бер ғәҙәтен белдем. Йәйге эҫе көн, тын алыуы ҡыйын, үпкә бешерлек һауа. Бындай эҫелектә һәр йән туҡтауҙы хуп күрә. Ә беҙҙең старшина – тынғыһыҙ зат. Ана, каптерка артында, күләгәлә, водовозка тора. Старшина машинаға күҙ һала. “ЗИС” аҫтында Сурик ремонт менән мәшғүл.

– Молодец, Сурик, работает! – Старшина, машина тирәләй өсөнсө тапҡыр үткәндә, эйелә биреп ҡарай. – ...Твою мать! Встать! Я тебя!

Тауышҡа мин дә каптерканан йүгереп сыҡтым. Эйе, кәмитең ары торһон, бына ниндәй ҡыҙыҡ. Сурик, ысынлап та, машина аҫтында салҡан ятып, ике ҡулын сепрәк менән кардан-валға бәйләгән дә, рәхәтләнеп йоҡлай. Вәт хәйләкәр! Был хәлде старшина менән минән башҡа бер кем дә күрмәне-белмәне. Нишләйһең, иртәгәһенә үк водовозкаға башҡа кеше ҡуйылды.

Ә Аветисян мине онотманы. Комсомол секретары итеп һайланғас, ул ғариза менән килде: партия сафына инергә теләй икән. Өс рекомендацияның береһен комсомол комитетынан алырға өмөтләнә. Шулай тейеш тә ине.

Мин үҙ-үҙемә ҡайһы саҡта аптыраштa ҡалам – бюро ла йыйып торманым, Аветисян ғаризаһына кире ҡағыу ҡултамғаһын ҡуйҙым. Эйе, Уставты тупаҫ боҙҙом, замполиттан бының өсөн шелтә алдым. Шулай, үҙем дә КПСС-ҡа ингәндә комсомол рекомендацияһын юлламаным. Миңә өс командир: замполит, старшина, өлкән лейтенант Вахатов рекомендация бирҙе. Суриктьı партияға алманылар. Үпкәләне. Хеҙмәтен тултырғас, Аветисян ҡайтып китте, онотолдо. Бына шулай, онотоп бөткәс, замполит миңә Суриктан килгән хатты уҡырға бирҙе. Хатты йүнләп уҡып булмай, грамматика йәки почерк тураһында әйтеп тормайым, эстәлегендә – көс етмәҫлек үпкә.

Суриктьı партияға алғандар икән! Йәне теләгән – йылан ите ашаған, тиҙәр. Ашаһын...

## Комсомол

Беҙҙең заман билгеһе – комсомол билетында. Мин комсомолдан ситтә ҡалманым: мәктәптә класс комсоргы, тамамлағас, үҙебеҙҙең колхоз комсоргы булдым. Ә бындағы комсорг – көнләшерлек кәүҙәле, бер ниндәй етешһеҙлеге булмаған Дон казагы Шевченко.

Бына ҡыҙыҡ: мин беренсе йыл хеҙмәт итәм, ә йәп-йәш лейтенант та тәүге йылын Ҡараҡом сүлендә башларға мәжбүр. Ул да теге һүҙҙе белә: “В Союзе три дыры – Памир, Кушка и Мары”. Мары тигәне – беҙ. Ҡыҫҡаһы, сүллектәге гарнизонға килгән йәш офицер үҙен кәмһетелгәнгә тиңләй. Ысынлап та, был – трагедия. Ә шулай ҙа ил сиген һаҡлау – изге эш. Хәрби училищеға бер кемде лә көсләп алмайҙар, тимәк, зарланыу урынһыҙ. Был лейтенанттың йәһүд икәнлеген бер көндә белдем. Плацта строевой бара, ул команда бирә, беҙ

үтәйбеҙ. Ә мин: “Кругом!” командаһын уң яҡтан боролоп үтәйем, ул минең хатаға иғтибар итә. Ә мин: “Не все ли равно?” – тигән булам.

“Как все гавно, нет, не все гавно”. Ә мин һиҙҙермәйем, башҡалар һиҙмәй. Эйе, йәһүд акценты. Дөрөҫөн әйткәндә, был офицерҙың башҡаларҙан айырмаһы юҡ. Устав күптәрҙе тигеҙләй... Ә бына бер көн Ташкенттан, Мары ҡалаһынан бер тиҫтә офицер килеп төштө. Политработниктар, комсомол эшмәкәрҙәре. Комсомол йыйылышына әҙерлек башланды. Әлеге офицер оборона министры Малиновскийға ун ике биттән торған хат яҙған икән? Хатты йыйылышта ҡысҡырып уҡыйылар, ә эстәлеге иҫ китерлек. Совет системаһы, бигерәк тә армия, насар яҡтан ғына һүрәтләнгән. Ташкенттан килгән политработниктар ҡыйын хәлдә – был затҡа тейеш баһаны кем бирер? Ябай комсомолецтар һүҙе кәрәк. Мин сығыш яһаным, колхоз тормошо бындағынан ҡыйыныраҡ икәнлеген дә аңлаттым. Ә ни өсөн һин хәрби-радиотехник училищеға барҙың, бер урынды биләнең, ә мин бара алһам, яҡшыраҡ булыр ине, тип өҫтәнем. Дөйөмләштереп әйткәндә, тегене тетеп һалдым. Башҡаларҙың сығышы кәрәкмәне, минең телмәргә ярашлы ҡарар сығарылды. Маршал Малиновский Тарантинды ғәскәри хеҙмәттән ҡыуған, ә беҙ Шевченконы комсомолдан ҡыуҙыҡ. Комиссия тағы бер ҡарар тәҡдим киткән: “Комсомол секретары итеп Нурғәлиев һайланырға тейеш”. Һайланыу тиҙ арала үтәлде. Бер йылда комсомол тормошо миңә бик күпте күрһәтте. Генерал менән президиумда йәнәш ултырыуға ла ирештем. Иң мөһиме, башҡаларға белергә тейеш булмаған хәбәрҙәрҙе ишеттем, байтағын күреп белдем. Ҡыҙыҡ хәбәрҙәр күп булды, күңелһеҙҙәре лә етерлек ине.

Ә Тарантин? Китте ул, китте, ә мин уйландым: теге Өфөнән Чарджоуға алып килгән лейтенант та йәһүд ине бит, ул миңә тәүлек аҡсаһын тәки бирмәгәйне. Уйымса, ул мине насар һүрәтләне, бына шуның өсөн мине Марыға оҙаттылар. Мин ул лейтенантҡа “яуап” бирә алманым. Тарантин иһә миңә зыянлыҡ ҡылманы. Әйтергә кәрәк, йәмәғәтсе булырға мине Эҫкол мәктәбе өйрәтте. Ә бында? Бында активистарҙы бигерәк яраттылар, етмәһә, миндә үҙемде күрһәтеү ынтылышы башымдан ашҡан. Шулай булғас, мәскәүҙәр минең йөрәкте әрнетерлек һүҙҙәр эҙләне, имеш, рус телен тупаҫ акцентлаған салага комсорг итеп һайланды.

Мин дә тапҡыр яуап таптым, Маяковскийҙы яттан белгәнлегемде, Гюгоны тулыһынса уҡығанымды әйттем. Ә бына тарихҡа килгәндә, минең менән бәхәсләшерлек кеше бөтөнләй юҡ ине. Шулай булғас...

Күҙәтеүсәнлек. Был сифат, беренсе ҡараšта, һәр кемде алға, файҙалы яҡҡа этәрергә тейеш. Әллә шул... Был турала оҙаҡ һөйләгем килмәй, күпте күреү минең файҙаға булманы. Киреһенсә... Кем ул комсомол етәксеһе? Комсомол етәксеһе һәр кем менән бәйләнеш таба белергә тейеш. Ә мин таптыммы? Юҡтыр. Сөнки миңә ҡаршы килеүселәр байтаҡ булды.

Бына минең йыл һалдаты Базаров, ул Әстерхан ҡалаһынан, күп һүҙле, бигерәк тә дини темаға һүҙ бororға ярата, христиан динен ҡеүәтләй. Мин уға айырым иғтибар итмәйем, һиҙенәм кеүек, ә яҡынлашыу юҡ. Йыл ярым хеҙмәт ителгәс, Базаров “арбуз тәгәрәтеп” сығарҙы, замполитҡа ла, миңә үҙенең комсомол билетын күрһәтте. Был турала полк замполиты подполковник Панков та ишетте. Күренеп тора: шелтә миңә. Бындай “эш”тәр күп булды. Күп йылдар үткәс, үҙемдең кем икәнлегемде аңланым. Бер етәксе, минең дуҫ кеше, миңә “Робеспьер” ҡушаматын бирҙе. Хәлбүки, күпте күреү, етешһеҙлектәргә ҡырҡа ҡаршы тороу – бер кемгә лә ҙур уңыш килтермәй. Әммә Хоҙай биргән ғәҙәттән һис ҡотолоп булмай икән шул.

## Генерал килгәс

– Генерал Вотинцев килә!

Хәбәр гарнизон тормошон ҡырҡа үҙгәртте. Ҡайнашыу башланды. Вотинцев – Төркөстан Һауа ғәскәрҙәренә ҡаршы оборона округы командующийы. Белеүебеҙсә, бик абруйлы, күренекле генерал. Шуға ла әҙерлек ысын күңелдән. Тәртип, таҙалыҡ, яҡшылыҡтарҙы күрһәтергә, булған етешһеҙлектәрҙе күренмәҫтең күренмәгән урынына йәшерергә кәрәк.

Башланыҡ. Аяҡтар ауыртҡансы “строевой”, ҡулдар талғансы техниканы “драить” итеү, таҙартыу, матурлау. Булмаған буяуҙар табыла, булғандары ла табыла, кәрәкмәгәндәре йәшерелә. Ә быныһы ҡыйынараҡ, сөнки сүллек урман түгел.

Бына көткән көн етте. Генерал кәперәйеп йөрөргә яратмай икән. Беҙ плацҡа теҙелеп баҫтыҡ, өр-яңы мундирҙарҙабыҙ. Команда яңғырай:

– Офицерҙар – егерме биш, сержанттар ун аҙым алға атларға, марш!

Бындай команданы мин беренсе тапҡыр ишетәм, әлегә мин салага, ябай һалдат. Генерал офицерҙар менән оҙағыраҡ һөйләшә.

Аңлашыла: бер генә офицерҙың да сүллектә оҙаҡ хеҙмәт иткеһе килмәй. Генералды ла аңлап була – кем Ҡараҡом сүленә үҙе теләп килһен? Тимәк, һәр кемгә йылы һүҙ табыу кәрәк.

Сержанттар менән һүҙ ҡыҫҡараҡ, билдәле: генералдан тағы бер лычка һорау урынһыҙ. Ғөмүмән, һоранып сержант булып булмай. Сержант бурысы – һалдатты интектереү. Генерал әйтмешләй, сержанттар нығыраҡ тырышырға тейеш. Тырышһындар, эштәре шул.

Бына генерал беҙҙең рәткә, һалдаттар теҙелешенә, күсте. Иғтибар менән ҡарайым: иҫ киткес яғымлы, эйе, яһалмалыҡ бөтөнләй юҡ. Ә мин ғүмерем буйы, генералдар уҫал йөҙлө икән, тип иҫәпләнем. Бына генерал миңә яҡынлашты, әлегә ул бер һалдатҡа ла айырым һүҙ ҡушмағайны, туҡтауһыҙ дөйөм фразалар менән сикләнә ине. Беренсе тапҡыр миңә, бер үҙемә, һүҙ ҡушты:

– Как служится, солдат?

– Отлично, – әҙерләп ҡуйған һүҙем түгел, уйламаҫтан ысҡындырҙым, уйлаған булһам, икенсерәк әйтер инем. Ярар, генерал үҙе аңланы, һиҙҙе, эйе, ҡыйын хеҙмәттә – көр тауыш. Ә кем һуң был һүҙгә баһа бирә? Әлбиттә, генерал.

– Ә артабан хеҙмәтең нисек буласаҡ?

– Шулай уҡ яҡшы буласаҡ.

Икенсе һорау ҙа, яуап та урынлы булып сыҡты, генерал тейешле һүҙҙәрҙе барыһы ла ишетерлек итеп әйтте.

– Шулай, йәш совет һалдаты тормош шатлығы, саф күңеле менән хеҙмәт итә. Һалдаттарға ышанысыбыҙ ҙур, мин ҡәнәғәтмен.

Генералдың ваҡыты тар, беҙҙең ҙур булмаған гарнизонда оҙаҡламаны, күршеләргә китте. Төшкө аш генералды күреү ҡыҙығы менән барҙы – генералды һәр кем оҡшатҡан.

Мин үҙемсә уйланым. Быға тиклем ике генералды күргәйнем, эйе, бөтөнләй ауралары һиҙелмәй ине шул. Бына был, исмаһам, ысын генерал, кешенең хисен, уйҙарын уҡый белә, был сифат – мәшһүрлек, талант. Күршеләрҙә генерал төшкө ашта булған. Һалдаттар ашарға ултырғас, генерал ашханаға ингән, үҙе аш биреү амбразураһы алдына килеп баҫҡан, ашнаҡсыға һүҙ ҡушҡан.

– Йә, иптәш повар, ниндәй аш менән һыйлайһың?

Повар-грузин тиҙ яуап биргән:

– Борщ, товарищ генерал.

– Ә борщ ниндәй иттән?
– Биком, товарищ генерал.
– Как как? Говядина или баранина?
– Нет. Биком, товарищ генерал, биком.
Аптыраған генералға өсөнсө тапҡыр һорау биреү уңайлы түгел:
– Әллә... дөйә итеме?
Повар-грузин аш өләшә торған тишектән башын сығара биреп, генералға аңлата:
–Бик, б-и-и-к, товарищ генерал, бик – это муж коровы.
Бына шундай анекдоттар ҙа тыуа, был мәрәкә ваҡиғаны күптәр ишетте. Хеҙмәттең һуңғы айҙары Баба-Дурмас биҫтәһендә үтте. Әлеге грузиндың бешергән аштарын ашаным.
Генерал Вотинцевты Ташкентта, Чирчикта комсомол кәңәшмәләрендә бер нисә тапҡыр күрергә тура килде. Кәңәшмәләрҙә армия генералы Федюнинский ҙа булғыланы.
Һалдат халҡы генералдар таланты тураһында һүҙ алып бара алмай. Генералды яратыу-яратмау – һалдат эше. Ә беҙ генерал Вотинцевты яраттыҡ. Барыбыҙ ҙа.

## Каахҡа

Комсомол ерле халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә булырға тейеш. Беҙҙә мәскәүҙәр күп, улар төркмәндәрҙе яратмай. Репродукторҙан һәр саҡ Ашхабад һөйләй. Тапшырыу "Гәпләр Ашхабад" тип башлана. Был – "Говорит Ашхабад" тигән һүҙ. Мәскәүҙәр был һүҙҙе "Гитлер в Ашхабаде" тип мыҫҡыллай. Ә мин, башҡорт булараҡ, төркмәндәргә ихтирамлымын.
Каахҡа, район үҙәге, тимәк, бында комсомол райкомы бар. Райком пленумдарын ҡалдырмаҫҡа тырыштым, эштәрендә ҡатнаштым. Көн тәртиптәре мамыҡ үҫтереү менән генә сикләнмәй. Төркмәнстанда оҙон сүсле, иң яҡшы мамыҡ биргән сорт үҫтерелә. Тағы ниндәй мәсьәлә? Бына бер төрө. 14 йәштәге йәп-йәш ҡыҙҙы 65 йәшлек ҡартҡа кейәүгә биргәндәр. Ә ҡарт, аҡсалы булһа ла, туберкулез менән сирләп үлгән. Ҡыҙ атаһына ҡайтҡан, яңынан икенсе урынға, ҡалым өсөн, кейәүгә бирелгән. Яңы кейәү йәш кәләшен йыш туҡмаған. Кәләш ҡасып ҡотолорға булған. Ә кейәү кәләшен ҡыуып тотҡан, алып ҡайтып тағы туҡмаған. Кәләш яңынан ҡасҡан, ә кейәү тағы ҡыуа төшкән, сүллектә тотоп, тағы үлтергәнсе туҡмаған. Кәләште кем ерләргә тейеш? Бына ошо һорау пленумдың көн тәртибенә ҡуйылғайны.
Быныһы – үҙем күргән күренеш. Тағы бер комсомол йәшенә еткән ҡыҙҙы ҡарт кешегә кейәүгә биргәндәр, ә ҡыҙ риза түгел. Ә ризалыҡтың кәрәге юҡ, ҡалым алынған. Ҡыҙыҡай һуңғы сиктә үҙ өҫтөнә кәрәсин һибә лә шырпы һыҙа. Мин аппендицит менән район больницаһында ятам. Ә теге ҡыҙ ятҡан палатаның тәҙрә төбөндә, тышҡы яҡтан, күмәкләп көтөп торалар. Ышаныс бөтөнләй юҡ, ҡыҙҙың тән яныуы йөҙ процентҡа яҡын, үлер сәғәте генә билдәһеҙ. Ишек төбөндә лә көтәләр, ике яҡ көтә. Ата-әсә яғы, ҡалым түләгәндәр яғы. Ҡыҙ үлеп етмәгән – штурм башланды. Төркмәндәр үлекте моргка һалыуҙы хупламай. Больница персоналы бер ни ҙә эшләй алмай ҡарап тора.
Мәҫәлән, икенсе ваҡиға. Дауаханаға килгән төркмән, үлем хәлендә булһа ла, үҙ хәлен урыҫ телендә аңлатмаясаҡ, һөйләшеү тик үҙ телендә. Шулай, төркмән телен белмәгән табип бында эшләй алмай, бөтөнләй эшләй алмай. Беҙҙең торған урын ҙур колхоз ерендә. Колхоз председателе бында "башлыҡ" тип атала. Хәбәр таралды: хөкөмгә тарттырылған. Хөкөм бер нисә көн барҙы. Ни өсөн?

Башлыҡ үҙе руль артында “Победа”ла, ә эргәһендә – баш бухгалтер. Ике арала ыҙғыш. Ә ваҡиға сүллектә бара. Башлыҡ бухгалтерҙы типкеләп, сүлдә ҡалдыра, һыуһыҙ, ашамлыҡһыҙ – үлемгә, шакалдарға ҡалдыра. Ә бухгалтер үлмәй... Әлеге лә баяғы колхоз тәртибе: чабандар көтөүҙән бер көнгә һуңлағандар икән, ҡайтҡанда тап булып, бухгалтерға һыу бирәләр. Бухгалтер йәшерен ҡайта, һауығып, һиҙҙермәй генә Мәскәүгә китә, унда барып, бар серҙе асып бирә.

Ә кем һуң башлыҡ? Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР Юғары Советы депутаты, Үҙәк Комитет ағзаһы, Төркмәнстан Юғары Советы депутаты һ.б.

Ә хәҙер башлыҡтың өйөнә “инәйек”. Илле метр оҙонлоҡтағы өйҙөң киңлеге 12 метр самаһы икән. Өй иҙәнендә ике-өс ҡат киммәтле келәм, һәр метр һайын ебәк мендәр. Башлыҡ өсөн айырым бүлмә автоматлаштырылған, ҡайһы бисәһе кәрәк – шул кнопкаға баҫа. Теләгән нәфсеһен үтәйҙәр. Колхоздың бер нисә мең ҡуй һарығы – сүллектәге көтөүлектәрҙә. Яртыһынан күберәге башлыҡтың милке һанала. Бухгалтер менән бәхәс тә ошонан ҡупҡан, имеш.

Бына шулай, Ашхабадта ла, Каахҡала ла КПСС-ты данлайҙар. Ә КПСС-тың район секретары, районда иң абруйлы коммунист – үҙ ҡыҙын кейәүгә ҙур ғына ҡалымға бирә. Ҡалымдар ниндәй! Бына ни өсөн ир бала булған төркмән өйөндә ашау үтә ҡыҫынҡы, икмәк тә сәй, шәкәр һирәк ҡулланыла. Төркмән туйҙарын да күрҙем, бер генә тамсы ла иҫерткес эселмәй, ә былау – мул.

Ғөрөф-ғәҙәт төркмән өсөн иң өҫтөн. Бөйөк Октябрҙе данлау Төркмәнстанда ла әүҙем башҡарылды. Шулай ҙа парктарҙың береһендә командарм Буденныйға һәйкәл ҡуйып маташҡандар. Һәйкәл шул уҡ төн ауҙарылған. Буденный тураһында һүҙ башлау – төркмәнде кәмһетеү. Эйе, башҡорт ерен дә ҡанһыҙ Блюхер талаған, ә буденныйсылар күмәгерәк тә, үләтерәк тә булғандар. Бына һиңә атаҡлы фильмдағы Сухов!

Каахҡала ла 1 май байрамында митинг, демонстрация уҙа. Пограничниктар урындағы халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Эйе, шунһыҙ ярамай. Төркмәндәр ҙә сик һаҡсыларына ихтирамлы. Ә беҙҙе әллә ни яратмайҙар. Беҙ урындағылар өсөн – “ҡара погонлылар”, черноголовники.

## Һөйәркә

Салаганың юлы таҡыр, тауыш-тынһыҙ ғына атларға хаҡы юҡ. Асфальт тапап тәпәй ауырта. Ә мин түҙәм, түҙә беләм. Юҡ шул, ҡушылғанды ғына эшләү минең өсөн әҙ. Тәүге йәйҙә казарманы ремонтланым. Маҡтанылар, иң мөһиме, ун көн өйҙә булыуға ирештем. Беренсе йыл хеҙмәт итеүсегә былдай өлөш бик эләкмәй, миңә эләкте. Отпуск бирелде, ә ҡайтып булмай, комсомол секретарымын, кәңәшмәләр, конференциялар... Марыға, Ташкентҡа барғылайым.

Икенсе йыл хеҙмәт итәм, ниһайәт, февраль аҙағында ҡайтып килергә булдым. Бына мин юлда. Күптәр һөйләүенсә, Ашхабад – Ташкент – Ырымбур юлынан да күңелһеҙерәк юл юҡ. Шулайҙыр, ризамын, тик был юлдағы ҡыҙыҡлы нәмәләр ҙә башымдан ашҡан. Сәмәрҡәнд ҡалаһында поезд оҙаҡ тора, ә бында поезд туҡтағас уҡ, вагонға йәп-йәш ҡыҙ килеп инде. Оҙаҡ урын эҙләмәне, минең менән йәнәш урынлашты. Күреп торам: татар ҡыҙы, уртаса кейенгән. Тиҙ таныштыҡ, Башҡортостанға ҡайта икән, икебеҙ бер юлдабыҙ. Бына һиңә, һырынып маташа бит, ике-өс кенә сәғәт үтте: мин – һөйәркә... Әллә төш күрәмме? Бәй, теләгән ерен һәрмә, ул риза. Мин үҙем ундайҙарҙан түгел, ул үҙе инеп килә. Бына һиңә, тамбурға сығып, ҡосаҡлашабыҙ: иҫең китер, ҡайҙа ғына барып етмәй ҡулдары. Эйе, аулаҡ бүлмәлә булһаҡ, нишләмәк? Ташкентҡа барып еткәндә, егетенең фотоларын йыртҡылап, вагон тәҙрәһенән осорҙо, имеш, мин яҡынырaҡ. Аҡсаһы ла бар икән, мине, отпускыла саҡта, өйөнә алып ҡайтып

һыйларға иҫәбе... Шәл бәйләй белә икән, ҡул эшен ярата. Кейәүгә сығырға ваҡыты еткән. Ә миңә әле иртәрәк, ауылда ҡаҡҡан ҡаҙығым да юҡ. Бер бағана ла ултыртмай әрмегә киттем. Бына тағы, мин, хәҙер ҡайтышлай, был ҡыҙҙың өйөнә, әсәһенә барып, өс көн туйлап ятырға тейешмен икән. Вагондағы ваҡыт үҙенсә үтә, ә мин – күпте белергә, күпте күрергә теләүсе. Бер урында тапаныу – минең эш түгел. Күрше вагондағы бер купела әсәле-ҡыҙлы икәү бара. Ташкенттан Мартукка. Дөрөҫөрәге Ташкенттан ҡайтыу юлындалар. Үҙем беләм, Мартукта хохолдар йәшәй. Әсәй кеше – хохлушка. Уҡытыусы икән, ә ҡыҙы бигерәк матур, ә мин һалдатҡа ҡарашы тураһында әйтеп тораһы түгел. Эх, шул тиклем сибәр ҡыҙ Мартукта әрәм булып ятамы?

Ярар, матур ҡыҙҙың әсәһе лә һалдатҡа үтә илтифатлы. Ашыҡмай ғына кәрт һуғабыҙ. Мин үҙем бер ҡатлымын, отолам. Артығын ысҡындырмай, кәрт уйнайым, ә бар күңелем уҡытыусы ҡыҙында. Мартукка яҡынлашабыҙ. Аҡтүбәне үткәнбеҙ. Ашығырға кәрәк, минән дә ашығыусылар бар. Теге татар ҡыҙы күренде. Күҙҙәренән осҡондар оса. Ул мине күрмәй, ҡыҙға бар нәфрәтен яуҙыра:

– Минең иремде, яратҡан иремде, һалдырып алырға булдығыҙмы?

Ауыҙымды ла аса алмайым, ни эшләргә лә белмәйем. Әсәле-ҡыҙлы аптыраштылар. Ҡаршы әйтеүсе юҡ. Миңә аҡланыу урынһыҙ, әсәле-ҡыҙлыға ла бер нәмә әйтә алмайым.

Һыпырттым вагоныма, ә ул – минең арттан. Еңеүсе ҡиәфәтендә. Кем белә үткер сибәркәйҙең башындағы уйҙарын? Кинель станцияһына тиклем минең тирәлә уралды. Ә мин? Аллаға шөкөр, Кинелдә – һалдаттар өсөн айырым касса билетыма мисәт ҡуйылды. Тиҙ генә вагонға индем, иң өҫкө полкаға менеп яттым. Тәҙрәнән ҡарап ятам: бына ул сумаҙанын тотоп вокзалдан сыҡты, кемделер эҙләй, төрлө яҡҡа ҡарай. Ҡараһын, кемде булһа ла табыр. Ә мин үҙ ауылыма ҡайтам.

## Радиолокатор станцияһы

Комсомол секретары булып алғас, мәшәҡәттәр тағы артты. Ә миңә ни етмәгән? Йәнә барыһын да аптыраттым. Командирҙан иркен күрһәтелеүгә тыйылған документацияны төнгә алам да башҡалар йоҡлағанда "П-8" станцияһының схемаларын өйрәнәм. Бер айҙа операторлыҡты ташлап, белмәгәндәремде белдем, һынау алдым. Файҙалы урындан киттем, сөнки склад мөдире лә ғилемен арттыра ала. Хозвзводта физкультуранан интегеү юҡ. Бына, мәҫәлән, колхозда күберәк кемде маҡтайҙар? Трактористы, комбайнерҙы. Ә бында? Һис шикһеҙ, операторҙы. Мин һәр саҡ, һәр урында үҙемде күрһәтергә теләнем, буғай. Эйе, операторға уҡып ҡайтҡандарҙың икәүһе генә икенсе класҡа һынау үтте. Ә беренсе кластыҡҡа уҡығандарҙан Ырымбур егете Фадеев үҙе генә һынау үтә алды. Ә мин, үҙ алдыма уҡып, беренсе һынауҙы үттем.

"П-8" станцияһы киң диапозонлы эшләй. Электрон лампалары ғына йөҙҙән артыҡ. Оператор тубығы менән тапшырғысҡа терәлеп ултыра. Тапшырғыс үтә бейек йышлыҡта эшләй, сәләмәтлек өсөн бик зыянлы. Пеләш башлы буласағымды алдан уҡ белдем, риза булдым. Тапшырғыстың эсендә самауыр ҙурлыҡ ике тиратрон эшләй. Лампалар, тиратрондар һауаны ҡыҙҙыра, мунса ләүкәһе ары торһон. Операторныйҙа температураның 80 градус мәлдәре, ике сәғәттә бер биҙрә һыу эскән саҡтарым да булды. Бындай көндәрҙә өҫтә трусиктан башҡа кейем заты юҡ. Был – Уставты тупаҫ боҙоу. Шелтә яһарға маташыусы офицерҙар табылды. Мин уларҙы "өс хәреф"кә оҙата инем... Әйтәйек, оператор өсөн Пауэрс – иң уңайлы сәп, яңғыҙ самолет, бейектә оса, маневры юҡ. Шулай, яуаплы осоштар була, экран тулы сәптәр була.

Барыһы ла юғары тиҙлектә, маневрҙар яһап, төрлө йүнәлештә осалар. Бындай осраҡта күпселек операторҙар юғалып ҡала, сәп номерҙарын бутай. Ә мин бер генә тапҡыр ҙа буталманым. Армияла һәр һалдат өсөн иң абруйлы кеше – ул “батя”, йәғни полк командиры. Планшетистар әйтеүенсә, яуаплы осоштар ваҡытында мин “батя”ны ике тапҡыр “өс хәреф”кә оҙатҡанмын. Башҡа шлемофон кейелгән, микрофон – ауыҙ алдында эленгән, күп ваҡыт кем менән һөйләшкәнеңде абайламайһың да. Командирҙар өҫтәмә һорауҙар бирергә ярата, ә өҫтәмә һорауҙарға яуаптар буталышҡа килтерә. Көлмәгеҙ, иң ҡыҫҡа аңлашыу – “өс хәреф” менән, күптәр тиҙ аңлай. Яуаплы осоштарға ла күнегеп, өйрәнеп була.

– Нурғәлиев, һин өс кеше өсөн хеҙмәт итәһең! – Үҙемә төбәлгән маҡтауҙы командир әйткәйне.

Ысынлап та, күптәр “йөк тартырға” теләмәй йәки булдыра алмай. Ҡайһы берәүҙәргә йөктө башҡалар өсөн дә тартырға кәрәк. Американдар беҙгә яңы бурыс ҡуйҙы – түбәндән осош. Шулай, ҡыйынлыҡ өҫтәлә. Ҡатмарлы осоштар өсөн юғары сифатлы операторҙар талап ителә. Тимәк, байтаҡ операторҙар ситтә ҡалдырыла, ә тәжрибәлегә иҫ китмәле ауырлыҡ төшә. Экран артында тәүлегенә егерме сәғәт ултырған саҡтарым булды.

Яуаплылыҡ кеше затын һәр саҡ ике төргә бүлә. Бына Хрущев Урта Азия аша сит илгә оса. Был осраҡта беҙҙә айырым приказ уҡыла, ә экран артында юғары класлы оператор ултырырға тейеш.

Яуаплы осоштар, сик артындағы сәптәр... Баш аҫтындағы пласмасс телефон аппараты мендәрҙәрҙән дә йомшаҡ булып китә. Бына бер мәл, мин тамам хәлдән тайып, казармаға килеп, үҙ койкама яттым. Дежурный иһә станцияла булырға тейешлегемде әйтә. Дежурҙа – Кавказ әҙмәүере, ә мин өҫкө ярусҡа, үҙем ятҡан урынға, итектәремде күтәреп алам:

– Магомед! Если подойдешь еще, получишь сапогами по голове.

Магомед минең “баш тартыу”ҙы КП-ға еткерә.

Дежур офицер үҙе килә, көн эҫе, ул биленә тиклем яланғас. Уны “өс хәреф”кә оҙатам. Өлкән лейтенант КП-ға йүгерә, тулы форма кейеп, ҡыҙыл сепрәген беләгенә бәйләгән килеш минең койка алдында “смирно”ға баҫа:

– Именем Союза Советских Социалистических Республик приказываю: заступить...

Нишләйһең, кемдең трибуналға тарығыһы килә? Китәм инде станцияға.

Хеҙмәттә мин үҙемдең бер рекордымды ла ҡуйҙым, буғай. Запас позицияға күсеү хәстәре. Мине яратмаған лейтенант минһеҙ бер генә эш тә эшләй алмай. Юлда ла беҙ йәнәш, кабинала, башҡалар – йоҡола. Төн уртаһы, радиаторҙарҙағы һыу ҡайнап бөттө. Тик торған моторҙар бәләһе – майҙары яна. Һыу табыу мотлаҡ! Эш миңә йөкмәтелә. Ҡоралһыҙ йүгерәм. Алыҫта Душак уттары, шул уттарға ҡарап йүгерәм. Төнгө сүллек күңел күтәрерлек урын түгел. Бына бер урында металл сыңы тауышын ишетәм. Ятырғамы? Сәнскеле үлән араһында кобра йылан да, скорпион, фаланга ла күп. Аптыраш, бер-ике аҙымдан – тағы металл сыңы. Ҡулда ҡорал юҡ. Ҡыңғырау тағылған... ишәк! Бына кәрәк булһа... Эйе, мин һыу ташыусы хохол старожунды алып килдем.

Ә запас позицияға уңышлы күстек. Ә рекорд ниҙә? Биш тәүлек самаһы йоҡламаным. Әҙәм тиҙәгенә ятып йоҡларға булһа, йоҡлар инем, моғайын. Йоҡо бик ҡәҙерле икән дә баһа. Лейтенант Ковалев миңә пистолетын бирмәгәнлегенә үкенде. Ә ниңәлер йоҡлап ятҡандарҙы маҡтаны. Ярар, һәр кем үҙен үҙе һынай. Мин үҙ-үҙемде һынаным.

## Пауэрс

Дөбөр-шатыр тауышҡа йоҡомдан уяндым. Күк күкрәп, ямғыр яуа. Көньяҡ Төркмәнстанда май айында бөтөнләй ямғыр яумай, тип тә әйтергә мөмкин. Әле сәғәт алты тулмаған, “Подъем” командаһына иртәрәк. Дежурный минең фамилияны ҡысҡырып әйтә, “Воздух” сигналы буйынса миңә – станцияға. Беренсе май, тимәк, сигнал өйрәнеү өсөн түгел. Фамилиямды ишеткәс үк карауаттан һикереп төшөп, казарманан сығып йүгерҙем. Ялан аяҡмын, өҫтөмдә трусиктан башҡа кейем юҡ. Һә тигәнсе барып еттем. Канонирҙы һыу баҫҡан. Бер кем дә ямғыр көтмәгәйне. Минең “ЗИС”-тың тәгәрмәстәре һыу аҫтында. Аппаратныйға инеп, кнопкаға баҫтым, яуап юҡ, тимәк, электромеханик юҡ. Тимәк, беҙ дежурҙа түгел. Йөҙөп барып, дизелде, станцияны ҡабыҙҙым. Дизель әйләнешен көйләнем, миңә теүәл вольттар кәрәк. Һыу аҫтындағы кабель, Алла һаҡлаһын, һыу менән “аралашһа”, донъя менән хушлаш, әйҙә. Ярар, станциям эшләй. Наушниктарҙы кейеп, КП-ға рапорт бирҙем. Ярты секундҡа ла һуңламаным. ЦО – центральное оповещение тауышына күстем. Мине юҡҡа уятмағандар икән: “беренсе әҙерлек” командаһы бирелгән, “сик артында сәп” билгеһе менән, йәғни “цель за границей”. Был осраҡта экран артында беренсе класлы операторҙар ултырырға тейеш. Метрлы диапазонда беренсе класлы берәү – ул да булһа мин. Сәп әлегә Пакистан өҫтөнән беҙҙең сиккә еткән. Тимәк, бөгөн тыныс көн булмаясаҡ. Булманы ла. Был көн тураһында яҙмаған гәзит ҡалманы. “У-2” маркалы самолетта күк шпионы Пауэрс булды. Ә минең өсөн Пауэрс мажараһы ошо 1 майҙа түгел, ә байтаҡҡа иртәрәк башланды. Әйтергә кәрәк, совет разведкаһы йоҡлап ятманы. “У-2” самолеты тураһында мин йыл башында уҡ белә инем. Яҙға табан “У-2”-нең Пакистанға килтерелгәнлеген ишеттем. Саралар күрелде. Баку ПВО-һы аша ике “Т-3” самолеты килтерелеп, Карши ҡалаһына яҡын аэродромға ҡуйылды. “Т- 3” самолеты әле һынауҙа ғына, яңы типта. Беҙҙең округта “МИГ-17” самолеттары менән ҡоралланған “ЯК-25”, “МИГ-19” самолеты ла бар, әммә был самолеттар “У-2” бейеклегенә менә алмай. Американдар иҫәбе буйынса “У-2”– бөтөнләй хәүефһеҙ осоу карабы. Беҙ Америка мөмкинселеген яҡшы беләбеҙ, американдар ҙа шулайыраҡ уйҙа. Бына 9 апрель көнө “У-2” һауаға күтәрелде лә сик аша Арал диңгеҙенә ҡарай осто. “У-2”-не бәреп төшөрөү маҡсаты менән “Т-3” самолеты ла күтәрелде. Күрәһең, “У-2” пилоты хәүеф һиҙеп, Арал диңгеҙе өҫтөндә боролорға мәжбүр булды. Бына ошо мәлдә “Т -3”-тәге йәш летчик, ниндәйҙер вибрация һиҙеп, самолетты форсаждан сығарырға аптта ҡала. Ә форсажды яңынан ҡабыҙыу өсөн бер нисә секунд ваҡыт кәрәк. “Т-3” самолеты “У-2”-не Иран өҫтөндә, сиктән 150 км. алыҫлыҡта, ҡыуып етте, бәреп төшөрөргә рөхсәт һораны. Ә рөхсәт бирелмәне. Әйләнеп ҡайтҡан “Т-3” самолеты пломбаланды. Был мажарала мин дә ҡатнаштым. Экран артында ултырҙым, бар эште тейешенсә үтәнем. Мәскәү комиссияһы килде, көн эҫе, беҙҙе Мәскәү майоры теҙеп, “смирно”ға баҫтырҙы. Өс сәғәт самаһы ул беҙгә ләғнәт уҡыны, түбәнһетте. Аҙаҡ үҙем баҫып торған урынды ентекләп ҡараным, ҡул бармаҡтарымдан тамған тир ике соҡор яһаған. Беҙҙең полк командиры отпускыла булған, ә бына урынбаҫары, подполковник Вардамацкий вазифаһынан бушатылды, йәнә күптәргә таяҡ башы тейҙе. Эйе, 1 майҙа яңылышлыҡ булманы. “У-2” кирегә боролорға уйламаны, юлы киҫелгәйне. Шулай, Пауэрстың “У-2”-һен экранда иң беренсе күреүсе ефрейтор Лысов менән һуңғараҡ Ташкентта һәм Чирчик ҡалаһында үткән комсомол кәңәшмәһендә осраттым. Лысов та, минең кеүек, иҫке “П-8” станцияһында ил күген һаҡлай икән. Памирҙа. Ә Памир беҙҙән йыраҡ, минең “П-8” өсөн Пауэрс күренмәҫлек арала,

бәғзе саҡта, станцияны көйләп, 30 метр бейеклегендәге УНЖА антеннаһы менән Фарсы ҡултығы өҫтөндәге Америка самолеттарын күреүгә ирешә ала инем. Пауэрс осошо оҙаҡ йылдар өсөн фекер алышыуҙар һәм ҡыҙыҡлы һорауҙар тыуҙырҙы. Ул ваҡытта беҙ Америка мөмкинлеген яттан белдек. Күптәр уларға өҫтөнлөк биреп маташты, әле лә маташа. Ә мин риза түгелмен. Генерал Вотинцев кеүек етәкселәрҙе булған көстәр һынатмаҫ. Авиация әҙ-мәҙ ҡалыша ине, буғай. Ярай, беҙҙекеләр ҙә бит Иран өҫтөн иркенләп гиҙҙе, тик бәреп төшөрөргә баҙнат итеүсе генә табылманы. Ә радиотехника? Эйе, иҫкеләр менән эшләнек, “П-35”, “П-12” беҙҙең Каахҡа ла бар ине. Өр-яңы радиолокаторҙар. Бына тигән әҙерлек булды. Тағы? Хрущевтан көлөүселәр булды. Көлмәгеҙ, ул ашыҡтыра, тейешле бурыстар ҡуя белде, сөнки мәсьәләләрҙе белгестәрҙән белешеп хәл итте, Горбачев кеүек тинтәк булманы.

## Пожар

Юҡ, туған, төҙәтмә мине. Беләм, башҡорт телендә “пожар” тигән һүҙ юҡ. “Янғын” тигән һүҙ бар, һәм был ике һүҙ араһында ҡыҙыҡлы айырма ла бар. Пожар – жар, эҫелекте аңлата. Ә янғын? “Яна” тигәнде аңлата, русса әйтһәң – горит, горение.

Ярар, асыу килгәндә һүҙҙәр мәғәнәһен тикшерәм. Хеҙмәттә. Дөрөҫөн әйтәм, үҙем дә көтмәгәйнем, шатлыҡ артынан шатлыҡ килеп тора түгелме? Бына замполит Гладков ни әйтте:

– Һиңә ябай һалдат булыу килешмәҫ, офицер булырға һәләтең бар. Шуға һине юғары хәрби уҡыу йортона ебәрергә уйлайбыҙ. Әҙерлән...

Был хәбәрҙе ишеткәс, шатланыу менән генә сикләнмәнем. Кем менән булһа ла уртаҡлашыу мотлаҡ та баһа. Иптәштәргә сиселеү ярамай. Бына иң яҡын дуҫ летчик булырға хыялланған. Урта мәктәпте тамамлағас, юғары уҡыу йортона барған. Алмағандар. Кем белә, ул барыһын да әйтеп бөтмәй. Ә бына минең өсөн юғары хәрби училище ишеге ап-асыҡ. Радиоэлектрон разведка һөнәрен өйрәтергә айырым төркөм йыялар. Төндәрен йоҡламай үҙ алдыма өйрәнеүем бушҡа китмәне, тимәк. Шулай, үҙемә ҡанат үҫкән кеүек тойҙом.

Уйлай торғас, старшина менән һөйләшергә булдым. Ә беҙҙең старшина офицерҙарҙан да уҡымышлыраҡ. Мине тыңлағас, бына нимә ти:

– Иң йәш полковник буласаҡһың. Булырһың – әгәр тырышһаң. Бер ваҡытта ла үҙеңде онотма, һиндә характер бар.

Старшина йөпләүенән һуң мин ысынлап тоҡандым. Барырға, уҡырға, тырышырға. Миндә уҡырға теләк етерлек, ә юл асыҡ. Нимә кәрәк? Аттестатым үҙем менән, ә бына тыуыу тураһындағы таныҡлығым юҡ. Кәрәк икән. Шул уҡ көн үҙемдең район үҙәгендәге ЗАГС бюроһына әлеге таныҡлыҡты һорап хат яҙҙым. Таныҡлыҡтың бөтөнләй юҡлығын да беләм. Үҙенең тыуған көнөн хәтерләүсе зат донъяла юҡтыр. Хәйер, әсәйемдең хәтере көнләшерлек, ул минең йәй уртаһында тыуғанлығымды яҡшы хәтерләй. Һайлау көнө булған. Билгеле, бала табыу урыны – үҙебеҙҙең өй. Кендек инәһе – күрше Хәҙисә әбей. Һайлау комиссияһы ҡумта менән өйгә килгән.

Район үҙәге Петровскийға ебәргән хатыма яуап килде. Ҡасандыр ЗАГС бинаһы янған, минең турала белешмә юҡ. Аптырабыраҡ ҡалдым. Шулай ҙа Башҡортостан ЗАГС-ына яҙҙым. Оҙаҡламай яуап килде. Әлеге лә баяғы – янғын. Аптырағас, үҙебеҙҙең Сәлих ауыл Советына яҙҙым. Силсәүиттә эш алып барыусы Рабиға апай мине яҡшы таный, атай-әсәйемде лә белә. Тап Рабиға апай миңә белешмә ебәргән. Шуны тотоп, үҙем хеҙмәт иткән Каахка ҡасабаһы ЗАГС-ына барҙым. Бындағылар тиҫкәре түгел, шул көндө үк таныҡлыҡ бирҙеләр.

Был документым әлеге көнгәсә һаҡлана, төркмәнсә яҙылған ул, – “Догулыш хаҡында шахадатняма” – (тыуыу хаҡында шәһәҙәтнамә) тип. Урыҫса ла яҙылған, вағыраҡ хәрефтәр менән.

Мәгәр әлеге ҡағыҙ киҫәгенең миңә кәрәге теймәне. Радиоэлектрон разведкаһының уҡыу йорто мине көтөп-саҡырып торманы, сөнки минең тегеләй-былай хатлашыуым өс ай самаһына һуҙылғайны.

Хәйер, әлеге шәһәҙәтнамәләге дата минең яҙмышыма тәьҫир итте. Ниңәлер Рабиға апай минең 1939 йылдың 10 декабрендә тыуғанлығымды асыҡ яҙған. Ә мин, күп йылдар үткәс, үҙемдең 1938 йылдың 26 июнендә тыуғанлығымды асыҡланым. Тап ошо көндә Заликинды һайлағандар. Эйе, Башҡортостан автономияһының ВКП(б) беренсе секретары Быкин атылғас, Заликинды килтереп ҡуйғандар. Ҡуйылған етәксене “Һайлау спектакле” лә булған. Бына шулай, янғындар минең яҙмышымда байтаҡ урын алды. Мин бик хәтәр йылда тыуғанмын, һәр кемдең эсендә, йөрәгендә янғын ҡоторған. Бәләкәй сағымда, йәй уртаһында, ололар эштә саҡта, беҙҙең өйҙө яндырыусы ла табылған. Ярты минутҡа һуңлаһалар, беҙ, өс бала, янып үлгән булыр инек. Ә янғын кемгәлер бик кәрәк булған. Эйе, төрмәгә оҙатыу “планы” үтәлмәгән, енәйәтселәр кәрәккән. Бына шулай. Хоҙай, янғындарҙан һаҡла беРүк.

*Шулай, сүллектә лә йәнтөйәгемдәге ҡарабаш турғайҙар йыш иҫкә төшә ине. Һағышҡа сорнап, бәғер һыҙлатып...*

## Күҙең төшһә...

Дауахананан баш тартҡан һалдат юҡтыр армияла. Берәүҙәр сирлегә һабышыр өсөн үҙҙәренә зыян да яһай. Мин локатор экраны артында ике-өс норма үтәйем. Һөйләп тораһы юҡ: радиолокатор экраны һәм Көньяҡ Төркмәнстан ҡояшы хәтәр. Етмәһә, күҙ табиптары әйтмешләй, “у тебя зрачки большие, носи темные очки”. Эйе, үҙем дә беләм, миңә бер генә ҡыҙ әйтмәне: “Һине... Күҙҙәрең өсөн генә...” Бына шулай, әлеге лә баяғы Каахҡа больницаһында конъюктивит менән ятам. Бер аҙна самаһы ялҡау Посик менән бер палаталабыҙ. Шахмат уйнарға ярата. Мәскәү йәһүде үтә харамлашып уйнай. Ун партияның бер-икеһен оттороуҙы көҫәй. Нишләһен, насар уйнай. Бына минең янға Орск малайы Яковлевты һалдылар. Быныһы шахмат уйнамай, маҡтанырға ярата. Мин – ауыл малайы, ә ул, имеш, ҡаланан. Ярар, ҡарап ҡарарбыҙ. Икебеҙ ҙә йәш кенә медсестра Рәйсәне ҡараштырабыҙ. Ә ниндәй медсестра өмөтһөҙ, ти, һалдатҡа эйәреп китергә теләүселәр бында ла етерлек. Эйе шул, Рәйсә лә беҙҙе ҡараштыра. Көтөлмәгән уңыш беренсе булып миңә килде. Рәйсә процедурныйға саҡырып алды ла:

– Минең менән киноға барырға теләйһеңме? – тип һораны.

Аптырап торманым:

– Әгәр кейемде бирһәң?..

Һалдат кейемдәрен, ботинкамды складтан алып бирҙе, өс һум аҡса ла тотторҙо. Минең кейенеп алғанды күргәс, Яковлевтың балтаһы һыуға төштө. Ә мин йүгерә-атлай кинотеатр кассаһына йүнәлдем. Һалдат һәр саҡ һалдатса, ҡапҡа аша йөрөү юҡ, урау юлды үҙем беләм, диуар йәки балсыҡ ҡойма аша һикереп, терапевт бүлеген үтһәң, кинотеатр яҡын ғына. Урам аша үтергә түгел, патруль юҡ.

Бына диуар аша һикереп төштөм, ни күҙем менән күрәм: алдымда аҡ йөҙлө йәп-йәш ҡыҙ баҫып тора:

– Ҡайҙа бараһығыҙ?

– Кинотеатрға билет алырға.

– Әйҙә икәү барабыҙ, мә, ике билет ал.

Бәй, был да миңә өс һумлығын һуҙа. Алдым да йүгерҙем. Һә тигәнсе дүрт билет алып килдем.

Бына һиңә, э-эх мордва, муҡшы, үсексән. Риза түгел, үҙең икеһе менән бар, ти. Миңә береһе лә кәрәкмәй, ти. Нишләргә? Рәйсәгә ике билетты бирҙем, ярар, ул төшөп ҡалған түгел, табыр, йәш бит әле.

Кисен минең йөрәк ашҡынып тибә. Үсексән Яковлевты ҡалдырып саптым, һорап тормағыҙ, танышыу булды, исеме Фрида, фамилияһы Гофман. Немка, үҙе Фрунзе ҡалаһында тыуып үҫкән, әле бер туған апаһында йәшәй. Бигерәк сибәр, бешкән алма кеүек, буйға минән тәпәшерәк, тулы йөҙлө. Киттек киноға. Бындағы кинотеатр үҙенсәлекле, экран – үҙе бер ҡоролма, кинобудка – икенсе ҡоролма. Икеһенең араһында, асыҡ күк аҫтында эскәмйәләр. Уңмаған юл – беҙ ултыраһы урын артында... замполит ултыра. Нишләйһең, ҡулым козырек аҫтында: “Здравия желаю”. Ярар әле, беҙҙең замполит псих түгел. Көлөп ҡуйҙы, әммә өндәшмәне. Мин, бик тиҙ һөйләшеп, кеше таптым – урындарҙы алыштырҙым. Артҡы рәткә күсеп ултырҙыҡ, күрәһең, әлеге минең күҙҙәрҙе Фрида оҡшатты, осрашырға ынтылып ятты. Конъюктивит менән оҙаҡ ятҡырмайҙар, осрашыуҙар өсөн увольнение кәрәк. Ә бирмәһәләр? Самоволка. Булғыланы, нишләйһең. Бына ай яҡтыһы, көн эңер кеүек. Киттем, т-с-с, минән алдараҡ кемдер атлай. Туҡтайым, ул да туҡтай. Асыуланып ҡыҙыулайым, ул ашығып атлай. Кем һуң ул? Мине “һатырға” сыҡҡанмы? Мине күрә алмаған заттар етерлек. Әллә минең кеүек “самовольчикмы?”, кем белһен. Аҙаҡ та белә алманым. Ярар, ярты төн Фрида менән паркта булдыҡ. Факт. Беҙҙең осрашыу күптәргә хуш килмәне. Эйе шул, ҡасабала үҙенә “юбка” тапҡандарҙы бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Көнләшеү мыҫҡыллауға тартыла, булмай. Ә бына сержант Раушенбергер, исеме лә Фрид, немец, мине туҡмарға әҙер.

– Эй, һин, турок, немкаға йөрөүеңде туҡтат, туҡтатмаһаң...

– Пошел, ты, фашист, я немку...

Эйе шул, Фрид Фриданың өйөнә лә барып йөрөгән, имеш:

– Һин, немка, турок менән дуҫмы?

Быныһын Фрида үҙе миңә һөйләне:

– Ул миңә оҡшай, – тигән Фрида.

Ә бер ваҡыт Фрида миңә яҙыу ебәргән. Вокзалға килеүемде һораған. Барҙым, Фрунзеға ҡайтып китә икән.

Нишләйһең, күҙ йәштәрен күрҙем. Оҙаттым инде, нишләйһең. Матур ине Фрида. Немкалар ап-аҡ йөҙлө була шул.

## Посик

Йәмғиәткә бөтөнләй файҙаһыҙ, ә үҙе өсөн генә тырышҡан заттар бармы? Бындайҙар менән донъя тулы.

Бына ошондай шәхестәр тураһында ғүмер буйы уйландым. Беҙҙең менән хеҙмәт иткән мәскәүле Посик – торғаны тел биҫтәһе, урынлы-урынһыҙға көлдөрөүсе рядовой. Ул оҫталыҡ менән көлдөрмәй, үҙенең уңайлыҡҡа ынтылышы менән һәр кемде йылмайта.

Әйтегеҙсе, һыуыҡ һыу менән бит йыуырға яратмайым, тип кем генә һуң кухня кочегаркаһында ҡалай банкала һыу йылытып йөрөй? Посик. Кем һуң, көн һайын кремлап итек таҙартыу ҡыйын, тип итеген кузбасслак менән буяй? Посик. Һалдат махорkaһы һәр кемгә тейеш, һәр кем өсөн үлсәме лә билдәле. Ә өләшеү юҡ ине әле. Курилкала таҡтанан тартма яһалып ҡуйылған, тартмаға килонан артыҡ махорка һалынған. Төр ҙә, күпме теләйһең, көйрәт.

Сигарет пәйҙә булғас, әлеге ҡумтаға махорка һалыу туҡтатылды. Сигаретты өләшеп биреү башланды. Теләгәндәрҙең барыһы ла. Шәкәр биреү ҙә раҫланды. Тартыуҙы ташла ла шәкәрләп сәй эс. Шәкәрле сәй эсергә теләүселәр ҙә табыла. Посик ҡарар итте:

– Мин махорканы яратмайым, мин тәмәкене ташлайым. Миңә шәкәр бирегеҙ.

– Дай закурить.

Бына һиңә кәрәк булһа, махорка тартмаған мәскәүиштәр махорочный сигарет һорап тарталар ҙа баһа! Был сафта иң беренсе – Посик.

Хеҙмәттә ваҡыт оҙаҡ үтә, ә хеҙмәт – өс йыл, һәр һалдат, бер генә тапҡыр булһа ла, өйөнә ҡайтып килергә хыяллана. Яҡшы хеҙмәт иткәндәргә тантаналы рәүештә ун көнгә, юл ваҡытын иҫәпләмәй, өйгә ҡайтып килеү мөмкинлеге бирелә. Посик ике тапҡыр Мәскәүенә ҡайтып килде. Беренсеһендә – ярты йылға. Сөнки Төркмәнстанда москит тип аталған серәкәйҙән дә ваҡ ҡанатлы бөжәк бар. Бик ныҡ тешләй, серәкәй  ише генә түгел. Бигерәк тә төндә ҡан эсергә ярата. Москиттан һаҡланыр өсөн беҙгә деметилфтолат бирәләр, һөртөнәбеҙ. Яҡшы нәмә түгел. Был химикаттан тәндең ике урынын һаҡлау мотлаҡ. Береһе – ҡултыҡ аҫты, икенсеһе – бот араһы. Был урындарға тейһә, ҡыҫҡырта ла, бейетә лә. Эйе, күберәген Посик бейене, ул түҙә белмәй. Был әле – москиттың беренсе бәләһе, икенсеһе күҙөн килә. Ҡайһы бер москит йоғошло сир килтерә, ул тешләгән урында тире, мускул серей. Бер ниндәй дарыу ҙа ярҙам итмәй. Аптыраш, серегән урын ауыртмай тиерлек. Ваҡыт үткәс, тәндең был урыны үҙ аллы төҙәлә, ә урынында йәмһеҙ йөй ҡала. Был сир пиндинка тип атала. Урындағы халыҡтың күпселеге пиндинка менән йөрөй, күптәрҙең – биттәрендә. Ҡасабала мәрйә ҡыҙҙары бар ине, игеҙәктәр. Икеһенең дә биттәрендә – пиндинка яраһы, икеһенең дә ҡушаматы – “Пиндинка”. Ҡыҙҙар бына тигән, зифалар, ә биттәре йәмһеҙ. Был зәхмәт миңә лә тейҙе, зыянһыҙ, ҡултыҡ аҫтымдың береһендә бармаҡ баҫырлыҡ һыҙат барлыҡҡа килде. Был турала бер кем дә белмәне. Ә Посиктың бер бото бөтөнләй хөртәйә башланы. Посик ял, етмәһә, ярҙам, ҡәҙерхөрмәт талап итә, ҡаты сирле, йәнәһе. Эйе, өйөнә, Мәскәүгә, ҡайтарыуҙы талап итә башланы. Ҡайтарҙылар. Алты ай хеҙмәттән ситтә булды, уны махсус институтҡа һалып өйрәнгәндәр. Тел биҫтәһе был турала көнө-төнө тәтелдәне һәм Мәскәүҙән герой ҡиәфәтендә әйләнеп килде.

Ул аппендицит операцияһын да башҡаларса үткәрмәне, йәнә Мәскәүенә ҡайтыуға өлгәште, йәнәһе, яраһы оҙаҡ уңалмай. Ике ай ятты ла ҡуйҙы Мәскәүендә. Һәр машинаның файҙалы эш коэффициенты була, был машинаның мөһимлеген билдәләмәй. Ә ғәскәри хеҙмәттә эш коэффициенты аныҡ күренә, билдәләнә, баһа ҡуйыла. Нишләйһең, Посик кеүектәр етерлек, Посиктан күпкә арттырғандар ҙа осрай.

## Һуҡыр эсәк

Бында йоҡо ҡәҙерле. Беҙ – дәүләттең күҙ-колағы. Ә ни өсөн күк һаҡсылары әҙ йоҡларға тейеш? Иҫәрерәк командирҙар беҙҙең йоҡоно бүлергә бик әүәҫ.

Башҡа бимазалау ҙа тыуып тора. Әйтәйек, төн уртаһында кемдер ярылырҙай булып аҡырырға тотона. Ҡапыл сирләп китеүселәр ҙә күп, бигерәк тә аппендицит яфалай. Йоҡоно бүлгән һалдатты уятылған санинструктор ғына дауалай алмай, әлбиттә, госпиталгә оҙатыу кәрәк. Күп ваҡыт, иртән уянып китһәң, йоҡлаған урыныңда үҙ “һүрәтеңде” күрәһең – простыняла. Ашханала щи йәки борщ ашап бөткәс, ҡалай сеүәтә төбөндә сүл ҡомо ҡала. Ҡараҡом сүллеге бит,

ауыҙында һәр саҡ ҡом. Ҡолаҡта ла ҡом, күҙгә лә тула. Үҙе ваҡ, туҙан кеүек. Бына ни өсөн бында аппендицит – йыш ҡунаҡ.

Өсөнсө йыл хеҙмәт иткәндә аппендицит миңә лә килде. Төндә. Ә мин түҙергә булдым. Тауышымды бер кем дә ишетмәне, ә иртәнсәк ауыртыу туҡтағандай итте. Тейешле командирға ғына әйттем дә, дежур машинаһын талап итмәй, йәйәүләп район больницаһына юл тоттом. Ауыртыу тамам туҡтаны, шулай ҙа процедураға индем, хәлде һөйләп бирҙем.

Тикшергәс, аппендицит, тинеләр, хирургка инергә, ҡуштылар. Уныһы, ҡарапһыйпап алғас, кисекмәҫтән операцияға ятырға кәрәк тине. Бында климат насар, яралар оҙаҡ уңала. Аппендицит менән икешәр ай яталар, киҫелгән урын оҙаҡ төҙәлмәй. Шулай ҙа ризалаштым.

Операцияға әҙерләнеү ҡыҙыҡ икән дәһә. Ике көн ашамай торорға кәрәк, ә мин өс көн ашаманым. Үҙем дә белмәй бик шәп эшләгәнмен, буш эсәктәрҙе аҡтарыуы еңелерәк. Иртәгә операция, ҡырыныу приборы менән миңә медсестра килде – әҙерләнеү фарыз. Ә медсестра – үтә хөрмәтле өлкән лейтенант Вахатовтың ҡатыны. Бик оҙаҡ килешә алманыҡ: медсестрала – яуаплылыҡ, миндә – оялсанлыҡ. Юҡ инде, быңдай “эш”те үҙем, тейешенсә. Бритваһын да йыуып бирҙем. Ә кисен операционныйҙы тышҡы яҡтан оҙаҡ ҡарап йөрөнөм, күңел ниҙер һиҙә кеүек. Ишеткәнем бар: аппендицит операцияһын биш минутта яһайҙар ти. Төндә яҡшы йоҡланым. Иртән минең сират – өсөнсө. Тәүге операцияны тиҙ яһанылар, икенсеһен – оҙағыраҡ. Минең сират етте.

– Бәйләргәме, юҡмы? Операцияны наркозһыҙ яһайбыҙ.

– Белмәйем, үҙегеҙ ҡарағыҙ.

Башланды, баш осомда – медсестра, минең күҙҙәремә генә ҡарап тора. Укол ҡаҙанылар, туңдырҙылар, ауыртыу юҡ. Киҫә башланылар, ауыртыу юҡ, ә медсестра һорауҙар яуҙыра.

– Ҡайһы яҡтан? Ауылданмы? Һеҙҙә ниндәй ағастар үҫә?

Яуап бирергә тырышам. Һыҙланыуҙар башланды. Тарталар, өҙәләр. Ауыртыуҙың сиге юҡ. Йөрәгемде йолҡалар, иҫтән яҙғым килә, ә медсестра һөйләшергә көсләй. Хәлем бөттө. Тамам мәрткә киткем килә, китеп булмай. Медсестра мине һаман һөйләштерергә тырыша.

Һуңғы көстәремде йыйып һораным:

– Ниңә оҙаҡ?

– Хәҙер, хәҙер, түҙергә тырыш. – Шәфҡәт туташы маңлайымды тота, һыйпай, сепрәк менән һөрткөләй.

– Ҡасан бөтә?

– Хәҙер, хәҙер. Теләйһеңме, аппендицитыңды күрһәтәбеҙ?

– Эйе.

Миңә, пинцет менән эләктереп, һары эсәк киҫәген күрһәтәләр.

– Алдайһығыҙ, минеке түгелдер.

– Һинеке, сыҙа инде.

– Ә эсемдә ниҙер өҙөлә, ныҡ ауырта...

– Түҙ, түҙ, һин молодец...

Ниһайәт, барыһы ла яҡшы, тинеләр. Хирург, үҙенең битен асып, миңә ҡараны.

– Беләһеңме, һинең кеүек түҙемле пациент беҙгә әле эләккәне булманы. Операция бер сәғәт ун биш минут барҙы!

Икенсе көн барыһын да аңлаттылар. Хирург яңылышмаған – миндә хроник аппендицит булған. Операция ниңә оҙаҡ? Баҡтиһәң, минең эсәктәр берберейһенә йәбешеп үҫкән. Аңланым, бәләкәйҙән – ғүмерем буйы эсем ауыртты.

Ашағандан һуң, йүгергәндән, эшләгәндән дә һуң да. Операциянан һуң бындай ауыртыуҙар булманы, эсәктәрҙе айырғандар. Эсәктәрҙең йәбешеп үҫеүе – бәләкәй саҡтағы аслыҡ бәләһе.

Хирург – оҙон буйлы төркмән, йәш ине ул, күп булһа өс йыл эшләгәндер, мин уға һаман рәхмәтлемен. Операциянан һуң мин, мәскәүлеләр кеүек, оҙаҡ сиргә һабышып ятманым. Хатта киҫелгән урынымды һыңар ҡулым менән тотоп, футбол уйнайым. Бер аҙнала төҙәлгән аппендицит операцияһы Ҡааҳҡала яһалды.

## Баба-Дурмас

Алдыңды-артыңды ҡарап йөрө, тигәнде онотмайым. Старшина әйтемен дә хәтеремдә тотам, ә бына Хоҙай биргән холоҡто бер ҡасан да төҙәтә алмайым. Эйе, һаҡ була белмәйем. Барыһы ла тейешенсә бара, үҙгәрештәр юҡ. Бына тағы комсомол кәңәшмәһендәбеҙ. Мәскәүҙән килгән генерал-майор шәхес культы тураһында байтаҡ һөйләп ташланы. Кисен, йоҡлар алдынан, минең кеүек үк комсомол секретары, грузин, мине үҙ яғына ауҙарыу маҡсатын ҡуйып, хәбәр ҡуйыртты. Имеш, бөйөк Сталинды юҡҡа сәйнәйҙәр, ә ул күпме яҡшылыҡ килтерҙе, ожмахтай рәхәт тормош яулап бирҙе. Етмәһә, коллегам бармаҡтары менән минең күкрәккә ҡағылып ала, һәр һүҙен бармаҡтары менән дөрөҫләп: “Ты, – э, скажи” – тип ҡуя. Аңланым, мин дә Сталинды маҡтарға тейешмен, ә беҙҙе тыңлаусылар бар. “Ты – э, скажи” – тип ул ҡабат-ҡабат әйтә, башҡалар ишетерлек әйткәнде көтә. Әйттем, ҡыҫҡырып әйттем: “Эйе, һеҙҙең Сталин һеҙҙең грузиндар өсөн күп яҡшылыҡтар эшләне. Бына һине машиналы, затлы кейемле итте, тәмле ашатты. Ә беҙ, башҡорт ерендә, Сталин арҡаһында, көнө-төнө эшләп тә ас йәшәнек, ауыр һалымдар түләп интектек. Башҡорт халҡы батша заманында күпкә яҡшыраҡ йәшәгән. Белдеңме?” Грузин миңә башҡаса бер һүҙ ҙә әйтмәне.

Кәңәшмәнән һуң ҡайтыштыҡ, һәр кем үҙ гарнизонына. Бер аҙна ла үтмәне, беҙгә капитан – “два ноля” килде. (Ике ноль – особый отдел.) Мине саҡыртып алды. Бик тиҙ күҙ алдыма немка Фрида Гофман килеп баҫты. Беҙҙә ҡатын-ҡыҙ менән “шаярғандар” етерлек. Әлеге грузинды күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел. Шул, Ҡааҳҡала иң яҡын дуҫым Махарадзе грузины Тугуши бит. Минеңсә, грузин «стукач» була алмай. Грузиндың да төрләһө була. Бына шулай, особист бер генә тапҡыр килмәне, ә килгәс, беренсе булып минең менән әңгәмәләште.

Мине Мары ҡалаһына, полк штабына, саҡырып алдылар. Замполит подполковник Панков минең менән оҙаҡ һөйләште. Баҡтиһәң, арлы-бирле исем өсөн партия ойошмаһы бар икән. Ҡааҳҡа күршеһе, Ашхабадҡа яҡыныраҡ булған Баба-Дурмас нөктәһендә, шунда партия ағзаһы кәрәк булған. Бында командир менән замполит – КПСС ағзалары, өсөнсө ағза етмәй. Подполковник әйтеүенсә, мине партия ойошмаһын булдырырға ебәрәләр. Быныһы – әңгәмәнең әҙ өлөшө, ә төп өлөшө?

Баба-Дурмаста эштәр яҡшынан түгел икән, ә минең бурыс – күҙәтеү, барыһын да күрә белеү, етешһеҙлектәр тураһында почта йәки телефон аша хәбәр итеп тороу. Һалдаттан ризалыҡ һорамайҙар. Киттем, килдем.

Панков дөрөҫ әйткән: Баба-Дурмаста бөтөнләй икенсе хәл.

Командир маҡтанып булаша, бына ул плац төҙөй, ҡырсын йәйелгән, ә ҡырсыны эрерәк. Майҙан тирәләй гудрон һибелгән. Минеңсә, күберәген мазут һибелгән, баҫҡан аяҡты тартып алыу ҡыйын. Командир эсергә лә ярата икән, ҡыҫҡаһы, ул, русса әйтмешләй, “дураковат”. Замполит йырларға ярата, хор ойошторған, кистәрен бер нисә һалдат менән шакалдар ише олошоп алалар. Бында буш ваҡытты үткәреү ҡыйын, футбол уйнайбыҙ, замполит футбол уйынын үлеп ярата.

Замполиттың фатиры – штаб стенаһы аша, ишектәре айырым. Бисәһе лә үҙе кеүек, Мәскәүҙән. Әгәр замполит оператив дежурный икән, бисәһе ишекте эске яҡтан бикләй. Төндә ике грузин уға визит яһай. Таҙа кәүҙәле ҡатын, ә замполит – нәҙек зат.

Иң ҡыҙыҡлы зат – старшина Иванов, ул Каахҡала иң булдыҡһыҙға һаналды, бында иһә командирға ярап алған.

Старшина килтергән икмәкте бысаҡ менән киҫеп булмай, сүкеш менән онтап ашарға кәрәк. Һыу яғы проблема, уны Ашхабад яғынан тимер юл цистернаһы менән йөҙ саҡрымдан килтерәләр. Һыу һаҡлана торған ҙур мискәнең эсенә ҡараным – ниндәй генә бөжәктәр юҡ! Сүллектә мунсала йыуыныу – байрам, һыу иҫәпле, артығы бирелмәй. Старшина йораты станция начальнигы ҡыҙын ҡатынлыҡҡа алған, шунда йәшәй.

Казарманан 200 метр алыҫлыҡта Мары – Ашхабад асфальты уҙа, көндөҙгө эҫелә бер генә машина ла йөрөмәй. Төндә ҡарбуз, ҡауын тейәлгәндәре елдерә. Юл аша торба үтә, көндөҙ һалдаттар был урынды соҡоштора. Ошо урында төнөн машиналар тиҙлеген кәметә. Бер-ике һалдат, кузовҡа менеп, ике-өс ҡапсыҡты ергә бырғата.

Мине әллә ни яратманылар. Насарлыҡтар тураһында штабҡа бер генә хәбәр ҙә бирмәнем. Ошаҡ биреү ҡыйын. Йөк машиналарын талау тураһындағы сигналым ғына Төркмәнстан Компартияһына барып еткән. Быныһын подполковник Панков үҙе әйтте. Мәгәр Баба-Дурмас командиры яуапҡа тарттырылманы.

Баба-Дурмасҡа кем килһен. Замполиттың фамилияһы – Иванников, Мәскәүҙән. Старшина йораты – Иванов, Ырымбур тирәһенән килгән йүнһеҙ. Йыбытҡы Иванин да – ябай һалдат. Мәскәүҙән. Ялҡау. Мәҫәлән, һүрәт яһарға ярата: капитализм – ватыҡ паровоз, социализм – елдереүсе, өр-яңы электровоз. Белмәйем, Иванинды партияға ниңә алмағандарҙыр... Юл башын “Өс Иван” тип атаным, асылда “Баба-Дурмас” булды. Әйткәндәй, сүллектә элгәре “Тринадцать” тигән героик фильм төшөргәндәр. Өс ҡыҙылармеец һыуһыҙ интегә, әммә аҡтарҙың сотняһын ҡырып һала. Үҙҙәре лә һәләк була.

*Ҡарабаш турғай – ҡышҡа сыҙамлы ҡошсоҡ. Сүллектә нишләр ине икән? Айһай, һыуһыҙ...*

## Мургаб күпере

Баба-Дурмас. Миңә ҡағылышлы телефонограмма килгән. Иртәгә Марыла булырға кәрәк. Ә нисек барырға? Пассажир поезы киткән, тиҙ йөрөшлө “Ашхабад – Мәскәү” бында туҡтамай. Телефонограмма ваҡытында алынған, тимәк, командирҙың мәкере. Телефондан подполковник Панков менән һөйләшеүҙе талап иттем.

– Кәрәкмәй, ана, өлкән лейтенант Кравец машина менән Каахҡаға китә, шуға ултыр. Каахҡанан китерһең.

Машинала ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Ысынлап та, был юлды поезда ғына үтә алам. Ә бөгөн – беренсе тапҡыр автомобилдә. Көньяҡ Төркмәнстандың иң мөһим юлы. Бында миңә һәр нәмә ҡыҙыҡлы. Бына алда – балсыҡтан төҙөлгән мавзолей. Туҡтаныҡ. Яҡын-тирәлә әҙәм заты күренмәй, ҙур булмаған ҡомартҡыны ентекләп ҡарарға булдыҡ. Эргә-тирәһендә энә осондай ҙа сүп юҡ. Стенаһы бөгөн генә эшләнеп ҡуйылғандай һыланған, шымартылған. Эсенә индек, бик ҡәҙерләп эшләнелгән саркофаг йәки балсыҡтан яһалған табут. Иҫ китмәле таҙалыҡ, бер ниндәй артыҡ әйбер юҡ. Мавзолей – боронғонан ҡалған ҡомартҡы, ә нисек ҡәҙерләнә! Каахҡаға барып еткәнсе төркмән халҡына ихтирамым артҡандан-артты. Әле беҙ барған юл, Баба-Дурмас менән Каахҡа араһы,

ҙур юлдың сигенә иң яҡын урыны. Бында ла туҡтаныҡ – ҙур ғына Иран ҡасабаһы күренә, мәсеттәре бар... Матур күренеш.

Ҡаахҡа вокзалы. Тиҙ йөрөшлө поезға билет юҡ – һалдатҡа “тиҙ йөрөш” ҡаралмаған. Поезд туҡтағас, “һөйләшеү” башланды. Беләм, тимер юл хеҙмәткәрҙәренең күпселеге үзбәктәр, ә бында, үкенескә ҡаршы, барыһы ла үзбәк. Тиҫкәреләр. Каахҡанан барыусы ике офицерҙың дә тегеләрҙе өгөтләүе ярҙам итмәне. Бына поезд ҡуҙғала. Үзбәктәр еңдеме? Еңмәй торһон әле! Ике вагон араһына һикереп менеп баҫтым. Күреүсе булманы. Каахҡа погранзонала, тимәк, туҡтаған поезды пограннаряд ҡаршылай, оҙата. Әйтәйек, бер генә зат та поездан төшөп, был тирәлә рөхсәтһеҙ ҡала, билетһыҙ поезға ла ултырып китә алмай. Үзбәктәрҙән ҡурҡып түгел, ә пограничниктар ҡулына эләкмәҫ өсөн ике вагон араһына йәбешкән кеүекмен. Киттек, үттек. Тырышып вагон башына мендем, төнгө сүллек, тәгәрмәстәр тыҡылдауы башҡа тауыштарҙы ишеттермәй. Хөрриәт. Күпер яҡыная. Күперҙе үткәндә баҫып барыу кәрәкмәҫ. Душак станцияһында погранзона бөтә, бында контроль көслөрәк. Душакка яҡынлашҡас, вагон башынан төшәм, ике вагон араһында тик тороу позаһын алам. Поезд туҡтаны. Бәдбәхет үзбәктәр! Пограничниктарға ниҙер ошаҡлайҙар. Вагон аҫтына ҡасам. Фонариктар яҡтыртып эҙләйҙәр. Табалар. Мин энә түгел. Ике Каахҡа офицеры сик һаҡсыһы командирын күндерә алды. Миңә Марыға китергә рөхсәт бирелә.

Ә үзбәктәр? Үзбәктәргә лә хәрбисә ҡысҡырыу етә, шунан мине, хөрмәтле ҡунаҡтай күреп, вагонға алып инәләр, хатта йоҡлар өсөн айырым урын бирәләр.

Иртәнсәк Марыла беҙҙе полк автобусы менән ҡаршыланылар. Аҙаҡ Каахҡа замполиты Гладков минең юл мажараһын подполковник Панковҡа түкмәйсәсмәй һөйләп биргән. Панков белдеме, башҡалар ҙа белә тигән һүҙ. Актив йыйылышы мөһим темаға арналды: Кариб кризисы. Быныһы икенсе тема. Шуныһын ғына өҫтәйем: Куба кризисы иһә минең уҡырға китеү юлымды япты. Сәбәбе – беренсе класлы оператор үҙ урынында булырға тейеш. Ә мин – һалдат...

## Ашхабад. Госпиталь

Хәлем насар, тип һөйләргә яратмайым, ләкин хәлем мөшкөл, ашағым килмәй. Санинструктор госпиталгә китергә ҡуша, ә командир былай тине:

– Поверим, когда умрешь...

Эх, өлкән лейтенант, дүрәк һин, дүрәк булып үлерһең. Ярар, мин һаҡбай түгел. Мин Ашхабадҡа барыусы поезда. Командир белгән: документһыҙ ҡалаға барып етеп булмай, Баба-Дурмас биләмәһе погранзонала, ә поездарҙа – көслө патруль.

Һөйләшә беләм... Партбилетымды күрһәттем дә әйттем:

– Партия эше менән Ашхабадҡа барам, ә документ әҙерләп өлгөрөп булманы. Командир иҫерек, һорашып белегеҙ.

Бәхетһеҙгә ел ҡаршы, тигәндәр. Ашхабадҡа сит ил ҡунаҡтары килгән, быныһын комендатурала аңлаттылар. Патрулдәр ҡулына эләктем, партбилетымды күрһәткәс, ебәрҙеләр. Госпиталгә һалманылар, сөнки тейешле ҡағыҙым юҡ ине. Тәүге төндө беренсе осраған паркта ҡундым. Бындағы парктар ожмахҡа тиң. Икенсе көнө лә госпиталь ҡабул итмәне, тағы патруль эләктерҙе, был юлы үҙәктә, ресторан аҫтындағы кафенан сыҡҡанда. Бында 20 – 30 тингә тамаҡ туйҙырырға була, бер стакан кефир менән булочка еткән миңә. Өсөнсө көнгә үҙәк гауптвахтаға яптылар. Ярты сәғәттән сығарҙылар. Был турала һөйләргә оят, госпиталдәге врач, ябай тел менән әйткәндә, йүнһеҙ алкаш. Бына ул эсе китеп интеккән һалдат тураһында медсестраға хәбәр һала:

– Иди, проверь его, может он мыло ел.

Миндә температура юҡ, тимәк, мин сирһеҙ. Аңлатырға тура килде белекһеҙ белгәндәргә! Һалыуын-һалды, тик диагнозды һауанан алып ҡуйҙы. Ятам палатала, йәйге мәл, күптәр ял итә, ә мине дауалаусы врач күптән түгел генә диплом алған. Врач, ҡуйған диагнозға ҡарап, дарыуҙар яҙҙы. Был дауалау йығылғанды типкеләү булып сыҡты. Әлегә мин һыр бирмәйем, аяғымда йөрөйөм. Госпиталь үҙ тәртибе менән йәшәй. Һәр көн дауаланыусы һалдаттарҙы госпиталь урамын таҙартырға сығаралар. Ун кешегә өс һепертке бирәләр, күптәр, эшләйһе урынға, юҡты сәйнәй. Ә мин быңдай буталышты яратмайым. Диуарҙарҙы аҡбур менән ағартырға ике кеше кәрәк икән. Бында ла ҡоймалар балсыҡ. Бер сыуаш менән ризалыҡ бирҙек. Башланды беҙҙең эш. Ҡара әле, беҙ ағартҡан ҡоймалар күптәргә оҡшаны, ә госпиталь Ашхабадтың көньяғында, Копетдаг тауы аҫтында. Матур урын, байтаҡ майҙанды биләй, тимәк, диуарҙар, һай, оҙон. Беҙҙең эш бара, маҡтап та китәләр. Биналар ҙа күп, штабты ла ағартырға ҡушасаҡтар. Ҡуша алманылар. Бер бинаны ағартып ҡайтҡас, үҙемде ҡыйын хәлдә тойҙом. Төндә бөтөнләй иҫтән яҙа башланым. Дежур врачҡа, сестраларға еңел булмаған. Анализдар күпте асыҡланы, миңә ҡуйылған тәүге диагноз – хата. Бирелгән дарыу иһә сирҙе аҙҙырған ғына. Бөтөнләй аяҡтан яҙҙым. Ошо көндән минең госпиталь тураһындағы фекерҙәрем ҡырҡа үҙгәрҙе. Хеҙмәттән ҡасып, сирлегә һабышып, хәйләләп ятыусылар ҙа күп. Һуңлабыраҡ булһа ла, минең дә диагноз асыҡланды. Терапия башланды.

Тәүге консилиум. Майорҙар, подполковниктар һәм госпиталь начальнигы. Егерме биш тирәһе медик, ә мин – өҫтәлдәге экспонат. Берәмләп килеп, тәнемде һәрмәйҙәр, тотҡолайҙар. Бәхәс оҙаҡҡа һуҙылды. Отпускынан килгән бүлек мөдире, подполковник Чарый Халыич һуңғы һүҙҙе әйтте. Аяҡҡа баҫтырыуҙы күҙ уңында тотҡан ул. Миңә айырым өҫтәл тәғәйенләнә. Ә мин бөтөнләй тиерлек ашамайым. Иртәнге сәғәт алтыла диетсестра килә:

– Бөгөн нимә ашарға теләйһең? – Баш сайҡайым. Минең менән бергә хеҙмәт иткән мәскәүле Мельников билмән, колбаса, башҡа әйберҙәр яҙҙырта. Ул бөтөнләй сирләмәй, өс кешелек йыпыра. Мин бер-ике йотом йөҙөм һуты эсәм, бер ҡашыҡ ҡаймаҡ ҡабам, бүтәнсә бармай. Тауыҡ итен дә йота алмайым, ә Мельниковтың тирмәне тарта ғына. Яҡшы шарап таптырырға ла хаҡың бар, тинеләр. Быныһына баҙнат итмәнем.

Тәүлегенә – ун һигеҙ укол, төндә уятып та тормай сәпәйҙәр. Урамда утыҙ градустан артыҡ эҫелек, ә мин өшөйөм, хатта күҙгә ҡарабаш турғайҙар күренгәндәй була. Һағыштан… Римма Яковлевна, йәп-йәш врач, башҡаларға кеүек табуретҡа килтереп ултырмай, койкаға терәлеп, күкрәгемде һыйпай. (Күп йылдар үткәс, уға хат яҙмағаныма үкенәсәкмен. Ул беҙҙең яҡҡа килер ине.) Икенсе консилиум арыуланыуҙы күрмәне, өсөнсөһөндә мин аяғыма баҫҡайным.

Мине хеҙмәттән ҡайтарырға булдылар, өс йыл хеҙмәт иткәс. Ә диагноз? Боткин сиренән һуң килгән “с осложнением”. Ысынлап та, ҡыҙыҡлы заттар бар, бына минән алда индивидуаль өҫтәл бирелгән мәскәүиш. Үҙе лә йәшермәй: сирләмәй икән, мәгәр тән температураһын ҡырҡҡа тиклем күтәрә ала, серен үҙе генә белә. Был зат бер генә көн дә илгә хеҙмәт күрһәтмәгән, хөкүмәт быңдайҙар өсөн сығымды һанамай, буғай.

## Оҙатыусы кәрәкмәй

Армиянан ҡайтыуҙың башланышы булдымы? Әллә. Бына госпиталдең ҡарары: фәҡәт диета, ит-майҙан тыйылырға, эсе ярамай… Эсеүҙән һаҡлан, йылына бер рюмка шампан еткән. Эшләрлек мөмкинселегең булмаҫ. Әгәр умартасы

йәки урман ҡарауылсыһы... Үҙең ҡарарһың. Ауыр эштән бөтөнләй һаҡлан. Уҡыу тураһында ла уйлама, ҡан әйләнешең насар... Өйләнеүҙән?..

Баба-Дурмас мине үҙенсә оҙатты. Командир йораты, мине оҙатыу өсөн тигән булып, барыһын да теҙелешкә баҫтырҙы. Аңлайым, оҙатыу өсөн түгел, миңә характеристика уҡыр өсөн.

Вәт, дурак, беренсенән, минең холҡом, ғәҙәтем, булдыҡлылығым – үҙем менән. Икенсенән, миңә ул ҡағыҙҙың бөтөнләй кәрәге юҡ. Мин ул ҡағыҙҙы...

Тағы бер хата яһаным: Каахҡаға туҡтап, бер төн ҡундым. Бында палаткаларҙа йәшәйҙәр, биналарҙы зенит ракеталары батальоны алған. Ҡайтыуҙы оҙонға һуҙыу кәрәкмәгән икән. Мин Мары гарнизонында футболға ғына барҙым. Беҙҙең полк командаһы нисауа уйнай. Шунда миңә бер офицер бәйләнде, имеш, кем рөхсәте менән һин бында? Өндәшмәнем. Ҡоторондо. Ҡулын һелтәп ары китте.

Ашхананан сыҡҡас, ҡаршымда подполковник Паньков пәйҙә булды. Мин күрмәмеш. Туҙынды. Өндәшмәйем. Үпкәм ҙур, мине институтҡа ебәрмәнеләр. Бына кем мине полк байрағы менән оҙатырға һүҙ биргәйне. Шулай ҙа бер кеше миңә бына тигән исем эшләне. Партучет хеҙмәткәре Барышникова. Сибәр ҡатын.

– Һинең учет документтарыңды Стәрлетамаҡ ҡалаһына оҙатам. Райондан һине ебәрмәйәсәктәр, һиңә уҡырға кәрәк, һинең башыңда өмөт ҙур.

Хәйер, мине оҙатыусы ла табылды, уныһы полктың комсомол эшмәкәре өлкән лейтенант Петрушин ине. Ул мине яҡшы белә. Вокзалда вагонға ултыртып, оҙатып ҡалды.

Ташкенттағы ҡыйынлыҡты һөйләгем килмәй. Мин алдан уйлай белмәйем шул. Илгә ҡайтыуым байрам алды көндәренә тура килде. Халыҡтың күплегенә аптырарлыҡ. Ә “Ташкент – Мәскәү” поезына нисек инеп ултырырға? Ярай әле, хәрбиҙәр өсөн касса айырым. Ни булһа ла булыр. Бына иғлан ителде, ултырыш – туннель аша. Ҡот осҡос хәл. Ҙур сумаҙан – ҙур бәлә, ни бысағыма! Туннелдә үткәндә аяҡтарым ергә тейҙеләрме- юҡмы, белмәйем. Сумаҙанды ғына ҡулдан ысҡындырмаҫҡа! Перронға, гүйә, дүрт яғымдан ҡыҫып алып инделәр. Уф, бына ни өсөн әҙ-мәҙ сирләштергәндәр ҡаты сиргә һабыша. Госпиталдә миңә лә һорау бирҙеләр: “Үҙ алдыңа, оҙатыусыһыҙ ҡайта алаһыңмы?”

– Миңә оҙатыусы кәрәкмәй, – тинем. Бирелгән документҡа ла яҙылған: “В сопровождающем не нуждается”.

Кинель станцияһында ла шул уҡ хәл. Вокзалда комендатуранан хәрбиҙәр өсөн дежурный бар, ярҙам һораным. Уныһы – офицер погоны таҡҡан бер шпана. Көтөүселәр теле менән һөйләшә. Тешемде ҡыҫып әйттем: “Дармоед, әле һин минең өс йылда эшләгәндең йөҙҙән бер өлөшөн дә эшләмәгәнһең, эшләй ҙә алмаясаҡһың”. Ары киттем.

Бына тағы ҡыҙыҡ: армияға киткәндә Өфөлә булыу мотлаҡ ине. Ә ҡайтҡанда Димдән уҙыу ярамай икән.

Ишембайға кисен килеп еттем. Ауылға йәйәүләп ҡайтып булмай. Ярар әле, таныш осраны. Байғужаға барып ҡундым. Иртәнсәк – Ишембайҙан ауылға. Госпиталь тураһында ләм-мим. Шулай кәрәк.

## Юлдар

Уф, Төркөстан юлдары. Ышанығыҙ, Төркөстан юлдарынан да абруйлыраҡ юл ер йөҙөндә юҡ.

Мин хеҙмәт иткән Каахҡа ҡасабаһы атаҡлы Бөйөк Ебәк юлы өҫтөндә тора. Беҙҙең локаторҙар торған урындан алыҫ түгел дүрт мөйөшлө уба күренә. Ул тау

түгел, ә боронғо нығытма, йәғни ҡала. Дүртмөйөштөң бер яҡ стенаһының оҙонлоғо ярты саҡрым самаһы. Уртала – бейек цитадель. Был нығытмалар системаһы Дарий дәүерендә үк булған. Дарийҙан да элгәре әлеге юл булған. Эйе, ошо юлдар аша үтеп-һүтеп йөрөгән этностар тарихнамә яҙғандар ҙа инде.

Халыҡтарҙың бөйөк күсенеше лә ошо юлдар аша үткән. Яуҙар һуң? Кемдәрҙе генә күрмәгән был юлдар! Юл яҙмышы кешелек яҙмышына оҡшаш. Эйе, хәҙер дөйәләр каруаны үтмәй Каахҡа аша. Асфальт юлдың да әһәмиәте кәмегән. Ҡасаба – тимер юл станцияһы. Бында ике пассажир поезы туҡтай: уларҙы ҡаршыларға барса ҡасаба халҡы сыға. Поезд ҡаршылау – танышыу, осрашыу урыны, һатыу-һатып алыу ҙа ошонда. Ҡасаба – погранзонала, тимәк, вагондан сыҡҡан пассажир ҡасабала рөхсәтһеҙ ҡала алмай, рөхсәтһеҙ ҡасаба кешеһе вагонға инә алмай. Вокзал – ҡасабаның иң күңелле, теремек урыны. Бына вагонда әлеге ҡасабанан Ташкентҡа китеп барабыҙ, сүллектәр аша. Һәр саҡ бер төрлөлөк күреп ялҡаһың. Әгәр ябай поезда барһаң?

Джу-джу-клу исемле станцияға яҡынлашабыҙ. Ул шәп-шәрә урында, үҫентеләр бөтөнләй күренмәй тип әйтерлек. Тиҙ йөрөшлө поезд был станцияла туҡтамай. Ни булған? Пассажирҙар тәҙрәгә һырыша. Станцияның ысын исеме – Жажыҡлы, ә начальнигы – ҡаҙаҡ. Начальник һәр поезды ҡаршылай, үҙе генә түгел, ғаиләһе менән. Ысын кәмит. Ҡаҙаҡтың ун алты балаһы бар. Мәҙәк, үҙе нәп-нәҙек ир, ҡатыны тағы нәҙегерәк, бәләкәй, икеһенең дә ҡулында сабыйҙар, башҡа балалар әсәһенә йәки атаһына һыйынған. Вагон тәҙрәһенән күпте күреп булмай. Ләкин һәр төбәк аша үткәндә урындағы халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, психологияһын төҫмөрләп була. Мин дә аңлай башланым: ҡаҙаҡ үзбәккә, үзбәк төркмәнгә оҡшамаған. Үҙем өсөн генә ҡыҙыҡлы дәрестәр алдым. Үзбәктәрҙән бер нисә тапҡыр туҡмалыу сигенә еттем. Ни өсөн? Һин – үзбәк, ә үзбәксә һөйләшергә теләмәйһең, тиҙәр. “Күҙ ҡарашың төркмәндеке – һин төркмән”. Быныһын төркмән ҡарты әйтте, “Һиндә ысын тажиҡ күҙе”, – әллә күпме тажиҡ ләпелдәне. Ҡаҙаҡтар ҙа бәйләнде, үҙҙәренеке һананы.

Ярар, был йәһәттән әйтәһе килмәгәнде әйтергә лә мәжбүрмен. Перронда аяҡ кейемһеҙ атлағандарҙы әҙ күрмәнем. Ҡыҫҡаһы, урындағы халыҡ “кеше нәмәһен һәрмәштерергә” әүәҫ. Бигерәк тә кейем-һалымды, һалдат кейеменән дә баш тартмайҙар, шуға итектәремде һәр саҡ баш аҫтына һалып йоҡланым. Вагонда мәҙәк ваҡиғалар ҙа етерлек. Күпселек һәр юлды ауыр бурыс итеп һанай, хатта “юл ғазабы – гүр ғазабы” тигәнде ишеткәнем бар. Риза түгелмен. Минең өсөн һәр юл китап уҡыуға тиң. Эйе, һөйләшмәҫ, өндәшмәҫ заттар ҙа юлда арыу белешмә сығанағына әүерелә. Юл кешенең телен аса. Юлда кешеләрҙең булмышы баҙығыраҡ сағыла.

## Их, Леха!

Советтар Союзы киң. Ә халыҡтары... Ғәскәри хеҙмәттә һәр кем милли үҙенсәлеген күрһәтә, һәр милләт үҙ баһаһын ала. Армия кемде ярата? Ә хеҙмәтте кем ярата? Был ике һорауҙа көләмәстәр ҙә, үкенеүҙәр ҙә, борсолоуҙар ҙа әҙ түгел. Бына хохолдар, йәғни украиндар, айырым урындалар. “Хохол без лычки – что справка без печати” – был һүҙҙәрҙе улар үҙҙәре ярата. Кәүҙәле, беренсе разрядлы спортсы Попловский, мәҫәлән, Киев ҡалаһынан, ул үҙенә килгән хатты беҙгә ҡысҡырып уҡый. Ә хат былай бөтә: “Мы тебя ждем старшиной”. Эйе, иҫән-һау ҡайтыуыңды теләйбеҙ, тип яҙмағандар.

Йәнә бер хохол, ауылдан, фамилияһы Резник. Гүйә, өндәшмәҫ өсөн донъяға тыуған, әҙ һөйләшә, уның ҡарауы, ул төнөн әүҙем. Йоҡоға киткәс, Резник – командир, йоҡо аралаш командалар бирергә тотона: “Слушай мою команду!

Становись! Смирно! Шагом марш...” Бик йыш, командалар бирә торғас, хатта карауатынан ҡолап төшә. Казармала ике яруслы койкалар, Резник та, минең кеүек, өҫкө ярусҭа йоҡлай. Ҡолап төшөүе йышайғас, уға аҫҡы ярустан урын бирҙеләр.

Бер мәл Резникка ефрейтор дәрәжәһен бирергә булдылар. Ә ул, быны ишеткәс, приказ да көтмәй, погондарына лычка тегеп ҡуйған. Вәт хәйләкәр, лычкаһы яҫыраҡ, Резникты белмәгән кеше, был өлкән сержант икән, тип уйлай, моғайын.

Командир ни ҡулынан килгәнен эшләне, Резникка кесе сержант дәрәжәһе бирелде. Попловскийға офицер погондары ла килешер ине. Ә Резник гимнастеркаһын да йыуып кейә белмәне.

Хименко – Украина ауылынан, ул, ниңәлер, командир булырға ынтылып ятмай. Мин бикләгән бал ҡорттары күсен харап итеүсе, мөртәт, имеш, ул барыһын да белә, булдыра. Нишләйһең, көлкөлө хәлдәр ҙә булғылай. Мәҫәлән, байрам алдынан ҙур ата сусҡаны һуйырға булдыҡ. Хименко әүҙем: “Бысаҡты минән дә оҫта ҡаҙаусы юҡ, ҡабандың йөрәген... бер һелтәүҙә”. Дуңғыҙҙы йығып, аяҡтарын бәйләйбеҙ. Хименко ашыҡтыра: “Тиҙерәк, мин ҡаҙағас, ҡабан нисек торһон?” Бына ул ярты метрлы бысаҡты мәхлүктең күкрәгенә батыра. Сусҡа иһә бар ғәйрәте менән Хименконы, аяғын тотоусыларҙы һелкетеп йыға ла тороп саба, тимәк, йөрәгенә теймәгән.

– Нурғәлиев! Карабин! – Быныһы – миңә. Старшина әйткәс, мин – уҡ, һә тигәнсе каптеркалағы әҙер карабинды тотоп йүгерәм. Ю-юҡ, ҡоралды старшина бер кемгә лә бирмәй. Ат – теймәй. Икенсеһе лә. Өсөнсөһөндә генә башына сәпәй. Инде һуғымды ат менән һөйрәтеп килтереү – минең эш. Хименко һаман бирешмәй. “Мин элгәре, бынан ҙурыраҡтарҙы – бер һелтәүҙә...” Шулайҙыр, кем белә. Мәгәр Хименко – һәйбәт һалдат. Ҡайһы саҡта ул кухняла “Галушки” тип аталған украин ашын бешерә ине. Тәмле, беҙҙең сумарға оҡшаған, һурпала ҡайната.

Ә Леха Омельянович – Стәрлетамаҡтан, дүртебеҙҙең береһе. Буйға минән дә бәләкәй – 1,58 метр. Леха Одесса биҫтәһендә тыуған, беҙҙең ҡалаға балалар колонияһына тәрбиәләнергә ебәрелгән. Ниндәй тәрбиә? Беҙ ни бары өс ай хеҙмәт иткәнбеҙ, ә Леханы олораҡ грузин менән ҡапҡа буярға ебәргәндәр. Теге грузин Лехаға буярға бойора, ә Леха буяп күрһәтеүҙе үтенә.

– Битеңде буйайым, салага, – ти грузин, Леханың тәбәнәклегенән көлөп. Әҙмәҙ көрәшкәндән һуң Леха, грузиндың өҫтөнә менеп, битен алюмин онтағы менән буяй. Ҡапҡа буялмай ҡала, икеһе лә казармаға киләләр. Ә беҙ тәгәрәшеп көләбеҙ, эйе, бите алюмин менән буялған кешене күргән юҡ ине әле. Грузин аҡырып илай. Иларһың да.

Шуныһы: беҙҙең заманда “дедовщина” тигән ғибрәт булманы. Бары яҡташлыҡ һиҙелә ине. Кем ышаныр, мин, комсомол ағзаһы, офицерға ла шелтә әйткеләй инем.

*Ҡарабаш турғай... Нисек кенә әле һуң һинең моңоң? Бер һайраһаң ине баш осомда. Юҡ шул, юҡ...*

## Әптек

Әптектә диета тотоу мөмкин түгел. Ауылда ит ашамаған, бал эсмәгән кеше менән кем һөйләшһен? Мыҫҡыллаясаҡтар. Миндә ҡан әҙ, баҫым түбән, был турала, әлбиттә, ләм-мим. Хеҙмәттән ҡайтыусыға көн дә һый-хөрмәт. Әптектә күберәге әсе бал. Ағыу икәнлеген беләм, ләкин эсәм, күҙемде лә йоммайым. Кәләш димләйҙәр. Лесничий килде, урмансы кәрәк икән, буш урын бар. Был эште ярайһы беләм, малай саҡта атай урмансы ине, мине лә үҙе менән байтаҡ

йөрөттө. Ә минең бер генә маҡсатым бар: уҡырға, уҡырға кәрәк. Уҡыр өсөн эске-мескенән ҡасыу фарыз. Паспортым юҡ, уны военкоматҡа тапшырып киттем, яңыны алыу мотлаҡ. Декабрь иртәһе, юлға сыҡтым. Район үҙәге Петровскийға табан. Әлеге лә баяғы – хәйерсегә ел ҡаршы, Тимашҡа киткән юлда Ҡарыу тип аталған үҙәк бар. Был йылға түгел, яҙғы ҡар һыуҙары менән генә йылғаға тиң булып шашынып аға. Үткән төндә йылы ямғыр яуҙы, шуға Ҡарыу үҙәне ҡар бутҡаһына әйләнгән.

Әптек яғынан килгән йөксө, атын бороп, ҡайтыуға йүнәлде. Тимаштан килеүсе атлы ла шәрегә инергә баҙнат итмәне, боролдо. Миңә нишләргә? Ни булһа ла... Итегемде һалдым, сисендем, киттем ялан аяҡ, күпсеү билемә етә башланы. Ҡурҡа бирҙем, ҡурҡыуым бушҡа булған, өшөмәнем. Киреһенсә, тәнем янды. Тиҙ барып еттем, паспорт алдым. Бына мин Стәрлетамаҡта, бәләкәйҙән яратҡан ҡаламда. Эйе шул, күргәнем, күрмәгәнем шунда булғас.

Пропискаһыҙҙарҙы эшкә алмайҙар. Бер ҡайҙа ла... Сүллектәге шакал кеүек йөрөнөм. Партияның ҡала комитетына барып индем. Коридорҙа бер әбей ҡарғанып йөрөй:

– Бросили бы эту атомную!

Фекер алышырға теләгем юҡ, ҡабул итеү бүлмәһенә индем, партбилетты өҫтәлгә һалдым. Секретарша, рөхсәт һорағандан һуң, икенсе секретарға инергә ҡушты. Ҡаланың икенсе секретары Кочетов күп һорашып торманы, телефон трубкаһын алды:

– Бер коммунисты эшкә алығыҙ. – Трубкаһын һалғас, ул миңә ҡарап алды. – Хәҙер үк СК заводына бар, кадрҙар бүлегенә ин, алырҙар. Нисек барырға беләһеңме?

– Табырмын.

– Автобус туҡталышын?..

– Мин – йәйәүләп.

Кочетов аптырабыраҡ ҡараны.

– Завод алыҫта, ултырып бар.

– Ярар.

Башҡа ни кәрәк? Ҡанатлы ҡош кеүек остом. Бына кадрҙар бүлеге. Сөләймәнов менән әңгәмә.

– Һин нимә, горкомһыҙ булмаймы, ниңә туп-тура килмәнең?

Һөйләп тормайым, уға ла өндәшмәнем, ҡағыҙын алып, медпунктҡа йүгерҙем. Мин ашыға беләм. Комиссия. Рентген минең сирҙе шәйләй алмай. Анализдар? Йоғошло ауырыу күренмәй. Ҡан баҫымы? Тәҙерлек. Терапевт, кореялы Ким, оҙаҡ ҡараманы, тиҙ үткәрҙе. Ни тиһәң дә, һалдатса ҡыланам, етеҙлек һәр саҡ үҙем менән.

## Завод

Синтетик каучук заводында эшләүҙе нисек һүрәтләргә? Үткәнде ҡабатлау бит. Шулай килеп сыҡты: хәрби хеҙмәттәге кеүек үрләп алдым, йығылып төштөм.

Үҙемдең заводҡа алыныуымды аңлап, анһатлыҡ һиҙгәндәй булдым, буғай. Анһатлыҡ – минең өсөн ят, электән. Эш башлай алмай ыҙаланым, ҡалала пропискам юҡ, шуға ятаҡтан мөйөш тә бирелмәне. Директор урынбаҫары Минйәровҡа барып индем. Алла миңә ғүмер бирһә, ошо тинтәк менән алдараҡ үлһә, ҡәбере өҫтөнә баҫып, көсәнеп алырға иҫәбем һаман һүрелмәй. Һалдат кейемендәмен, ә ул, миңә мыҫҡыллы ҡараш ташлап:

– Бар, сығып кит, беләһеңме, бында һинең кеүектәр...

Тубыҡланыу минең ғәҙәт түгел, әйтеп бөткәнен көтмәнем:

– Ярар, башҡа килмәм, мин һинһеҙ ҙә...

Тәкәббер был бәндә тураһында белешмәләр таптым.

Шул көндө үк мин ЖКО тигәндәренә барып индем. Бында әлеге Минйәровҡа буйһонған начальник Топчин түрә икән. Ике сәғәт самаһы үҙенә килгәндәрҙең һүҙен иғтибар менән тыңлап торҙом. Бына минең сират, һүҙемде тәнҡиттән башланым, үҙем тураһында ла туп-тураһын әйттем. Начальник, минең күҙемә лә ҡарамай, ғаризамды алып, ҡултамғаһын ҡуйҙы.

Ятаҡтан урын бирҙеләр, теркәнеләр. Рәхмәт.

Хәҙер кем ышаныр: көнөнә 50 тингә йәшәйем. Атай ярҙамынан баш тарттым, ғөмүмән, ярҙам һорарға яратмайым.

Ятаҡ менән завод араһын йәйәүләп кенә үтәм, минең өсөн 6+6=12 тин дә аҡса. Быныһы файҙаға булды, ара ике саҡрымдан артыҡ, ярты йыл тапағас, сәләмәтлегем нығынды.

Эште “Д-2” цехында башланым. Әлеге ҡан әйләнешем ҡот осорлоҡ, ә мин ауыр лом менән боҙ ватам. Ҡар көрәйем, 60 метр бейеклегендәге установкаға ла менергә ҡушалар. Менәм, сирле икәнлегемде бер кем белергә тейеш түгел.

Йәнә мин аппаратсыға өйрәнсек, ә үҙем иң ҡатмарлы радиотехниканы ла “биш”кә беләм. Контроль-үлсәү приборҙары цехы начальнигы Мишкинға барҙым. Аңланы, ләкин алманы, был цехта эшләргә теләүселәр күп икән.

Урын юҡ. Ә бына армияла оператор вазифаһына теләүселәр һирәк. Нисек аңларға? Эш урыны бирҙеләр, “Д-2” насостар машинисымын. Сменалы эш, миңә күңелле. Ятаҡта ла күңелле, бында ваҡыт үткәреүе еңел, ҡыҙҙар, егеттәр. Госпиталдәге иҫкәртеүҙәр онотола башланы, эш ауыр, диета онотолдо, бер кемдән дә айырмалы йә өҫтөн булырға теләмәйем. Бына 1962 йылдың яҙы килде. Иншалла, һелкетеп атлайым, ҡыҙҙар ҙа миңә күҙ һала, буғай. Ятаҡта мин – алғы һыҙыҡта. Бында ла тормош ҡайнай, бында ла иерархия. Мин урталыҡты яратмайым, тимәк, өҫкәрәк үреләм. Йәшәү дәрте ҡайнай. Ә иң ҙур маҡсатым? Уҡыу тураһында онотҡан көнөм булманы. Свердловск юридик институтына ғаризамды ебәрҙем, тиҙҙән саҡырыу ҡағыҙы килде. Заводтан бик һәйбәт характеристика бирҙеләр. КПСС-тың ҡала комитетынан рекомендация кәрәк икән. Барҙым, һораным. Бына һиңә ҡоҙағый! Мин – партия ағзаһы, ләкин ышаныу ҡағыҙы бирелмәй! “Бер йыл үткәс кил”. Тимәк, ышанмайҙар? Мин аптыраманым, тик көтәһем дә килмәй. Ҙурыраҡ етәксегә лә инеп, тауыш күтәреп, ышаныс ҡағыҙын даулап ала ала инем. Алманым. Ахырҙа Өфө нефть институтына ситтән тороп уҡырға инергә булдым. Бында ла конкурс: бер урынға дүрт кеше. Инергә теләүселәр эштәренән отпуск алып, имтиханға киләләр. Ә минең аҡса иҫәпле, отпуск алманым. Сменалы эш араһында ғына һынауҙар бирҙем. Дүрт предметтан торған имтиханда 16 балл йыйҙым. Рус теленән төнгө сменанан һуң яҙҙым. “Дүртле”гә яҙғанмын, һирәк күренеш – иншала, ғәҙәттә, мин хата ебәрәм. Дәртле көндәр килде, йүгерә-атлай йәшәйем. Ҡыҙҙар ҙа онотолмай, тансылар, кисәләр... Егет саҡ бит, нишләйһең.

## Мин түҙәм...

Заводта эшләү уңайлы, бигерәк уңайлы. Бында барыһы ла эшсе өсөн, туҡланыу һәйбәт ойошторолған. Ял итеү өсөн дә форсат бар. Йәйге көндәрҙә турбазала ял итеү бушлай. Бар урынға ла өлгөрәм кеүек: театрға барғылайым, кисәләрҙә ҡатнашам, уҡыуҙы ла онотмайым, үҙемә “ярамаған” мәжлестәрҙә лә булғылайым. Диагнозым билдәле: гепатит. Хроник... Мин ауыртыуҙарға түҙә беләм. Ә ҡанда билирубин концентрацияһы һуңғы нөктәһенә етһә? Был – ҡот

оҫҡос хәл, упҡынға ташланыу теләге уяна. Бына шундай көндәрҙең береһендә дауаханаға барҙым.

Врач-терапевт оло йәштәге ир ине. Ғәҙәттә, табиптар талапсан, ҡәтғи тауышлы. Ә был зат үтә ихтирамлы, артыҡ ихтирамлы һөйләшә. Аптырабыраҡ ҡалдым, юҡҡа түгел был. Кушеткаға ятырға ҡушты. Күрһәтелгән урынға һуҙылып салҡан ята башлағанда уҡ башыма борсоулы уй килде: “Юха бәндәнең йомшаҡ теленә ышанып, госпиталдә ниндәй диагноз менән ятҡанлығымды әйтеп ысҡындырҙым шикелле”. Бына ул ҡабырға аҫтын һәрмәкләй. Әйтәгүр, йөҙө яҡтырып китте, алтын киҫәге тапҡан кешегә оҡшап: – Цирроз, цирроз, у тебя, милый, цирроз! – тип һөрәнләмәһенме! Кемгә әйтә һуң был нишана, аптырайым. Етмәһә, коридорға йүгереп сыҡты.

– Цирроз, девчонки, цирроз, о-ой, цирроз. Давай на анализы, полный анализ крови.

Мин дә өнһөҙ ҡалманым:

– Не надо всех анализов, делайте только на билирубин.

– Ладно, ладно, вам нельзя...

Табип ҡатындарға ла минең ҡабырға аҫтын һәрмәргә ҡуша.

– Смотрите, нащупайте, увеличена, как камень тверда.

Тороп ултырҙым. Ни эшләргә? Хәлдәр харап. Медицина карточкаһы асылды, тултырылды.”Цирроз печени” тигән диагноз теркәлде. Туҡта һин, суҫҡа! Был тинтәктең йәһүд икәнлеген һуңғараҡ белдем. Ә бер нисә йыл үткәс, ошо уҡ заводта инженер булып эшләгәндә, йәш табибә менән ғишыҡ тоттом. Баҡтиһәң, әлеге Жидяев үҙе шизофрения сире менән ыҙалана икән.

Был көндән һуң Жидяев, мине ике тапҡыр урамда осратып, әлеге цирроз тураһында һүҙ башланы. Беренсеһендә кешесә һөйләштем, ә икенсеһендә мыҫҡыллап киттем. Бүтәнсә күрешеү булманы. 1963 йылдың ғинуар башында дауаханаға һалдылар. Дауалаусы врач – Мария Ивановна. Быныһы ла ысын врач түгел, дипломы ғына бар. Минең менән бер палатала ятҡан баш бухгалтер менән бик матур һөйләшә, яҡшы кәңәштәр бирә. Ә минең менән, теге ишетһен өсөн, бигерәк алама һөйләшә:

– Твоей печенкой осталось жить лет пять...

Башҡаһын сурытыу кәрәкмәй, дарыуҙарын да мине йәлләштереп кенә яҙа. Иртәгәһенә үк баш врачҡа индем, дауаланыуҙан баш тарттым. Врач Машаның ни әйткәнен дә әйттем. Ышанмай.

– Тимәк, һеҙ үҙ врачығыҙҙы белмәйһегеҙ. Ә ул, Маша, врач түгел, – тинем. Эйе, врач дарыуҙар менән генә эш итәме ни?

1964 йылдың көҙөндә яңынан дауаханаға яттым. Быныһында Первомайскийҙа түгел. Садала. Низаметдинова дауалау менән генә сикләнмәне, ул зиһенемде лә нығытты. Цирроз, ахырҙа, минең медкартанан бөтөнләй һыҙып ташланды. Низаметдиновала өс аҙна дауаланғандан һуң, мин дүрт йылға яҡын табипҡа йөрөмәнем. Был ғына ла түгел, табип миңә дәрт өҫтәне. Эйе, хәрби комиссариатҡа барҙым, комиссия үттем. Минән аҡ билетты алдылар, ҡыҙылды бирҙеләр. Военкомат биргән ҡыҙыл билетты ошо көнгә тиклем һаҡлайым.

Былтыр минең етмеш йәшемдә туйланыҡ. Бына һиңә “осталось жить лет пять” .

***

Куратор булыу ҡыйын түгел, хәлбуки, һәр эштең үҙ яйы. Күпте белмәгән куратор һай йөҙә. Мин – монтажсыларҙан эш ҡабул итеүсе. Монтажсы һәр саҡ үҙен

күпте белеүсе итеп күрһәтергә тырыша. Куратор күберәк белә, имеш, ул бының эшен ҡабул итә. Бында философия юҡ. Бында – шахмат уйыны. Ә ниңә шашка уйыны түгел? Шашка уйынын ҙурыраҡ түрәләр уйнай, уныһы “поддавки” тип атала. Шахматсы куратор мин. Һәр ай аҙағында прораб менән куратор монтаж барған установкаға сығалар. Уҙған айҙа башҡарылған эштәр һанала, баһалана. Монтажсының маҡсаты – эш күләмен күберәк, сифатлыраҡ күрһәтеү. Эйе, был турала ҡалын китап яҙып була. Бына прораб Каюров үткән айҙа ҡуйылған торбаны... ошо айҙа ҡуйҙыҡ, тип иҫбатламаҡсы.

Оҙонлоҡтар ғына түгел, диаметр кеүек параметрҙар арттырылып яҙыла. Эйе, куратор әллә ҡайҙағы торба йыуанлығын дөп-дөрөҫ әйтергә өйрәнә. Шулай кәрәк. Бына 18-се кимәлдәге яңы алты аппарат ваҡытлыса ҡуйылған. Ә Каюров уларҙы тейешенсә монтажланған иҫәбенә алған. Бына шулай, прораб аҙым һайын ҡайҙандыр яңы “тәгәрмәстәр” тәгәрәтеп сығара. Минең бурыс – тейешле күләмде яҙыу, актҡа имза ҡуйыу. Ҡыйын. Ә ниңә?

Ҡултамға ҡуйылған акт прораб ҡулынан ҙурыраҡ түрә ҡулына күсә, ә был түрә минең түрәгә бара. Һөйләшәләр, килешәләр, акттағы күләмде ике-өс тапҡырға арттырып, яңы акт төҙөйҙәр, ҡултамғалар ҡуйып раҫлайҙар. Бына шундай “уйын”... Ә иң сетерекле акт декабрь аҙағында ҡарала. Прораб мөмкин булмаҫлыҡ күләм талап итә, ризалыҡ булмағас, йөҙәтеү юлына баҫа. Көн һыуыҡ, мин – көҙгө пальтола, аяғымда күн туфли. Ә ул үҙенең быймаһына һуҡҡылап ала ла минең аяҡ кейемемә ҡарай. Һәр метр торба өсөн оло бәхәс, ярты эш көнө установкаларҙа, һыуыҡта үтте. Икенсе көн үҙемә һыуыҡ тейгәнде һиҙҙем, етмәһә – киҙеү тулаған мәл. Ул килгәндә хроник гепатит та уяна. Поликлиниканы урап үтеп булмай. Бына шулай, медкарточкаға яңы яҙыуҙар өҫтәлде. Әлегә хафаланмайым, имеш, мин сирҙәрҙе еңеүсе. Сирҙе еңеп булһа, табиптарҙы еңеп булмай икән. Улар кинәт һөжүмгә ташландылар.

Әле мин “И-3” цехында өлкән инженер булып уңышлы эшләйем, директорҙың да күҙенә күрендем. Ғөмүмән, ҙур өмөт менән йәшәйем, тырышып эшләйем.

Миңә завод оҡшай.

Шахмат уйынында поликлиника ҡатнашырға булды, миңә мат иғлан итте. Мин заводтан китергә тейеш.

Бына мин баш врач Пупшева менән икәүҙән-икәү. Аңлатам. Мин ике йылға бер генә тапҡыр 15 – 20 көнгә больничный алам. Ә беҙҙә йылдың яртыһын дауаланып ятыусылар байтаҡ. Мин эшләргә тейеш. Ҡара һин уны:

– Ты не только с завода и с города должен уходить. Тебе осталось жить лет-пять. Твоей печенкой...

– А я хочу здесь работать!

– У нас не ФРГ!

– Нам до ФРГ, как вам до Москвы раком.

– За такие слова я знаю куда позвонить.

Пупшева ашығып телефонға йәбеште, мин, һикереп, барс позаһына баҫтым. Шалтыратманы. Ә мин заводтан киттем. Был хәл 1969 йылда булды. Ә мин әле лә тере.

# ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ПРОЗАҺЫНДА ЖАНР, ФОРМА ҺӘМ СТИЛЬ ЭҘЛӘНЕҮҘӘРЕ

Традицияларҙың новаторлыҡ күренештәренән тыш йәшәй, ә новаторлыҡ күренештәренең традицияларға таянмай, буш урында тыуа алмауын һәр кем белә. Йөкмәткегә ярашлы, яңынан-яңы алымдар, жанр-стиль, сюжет-композиция өлкәһендә эҙләнеүҙәр барғанда ғына әҙәбиәт кешелек йәмғиәтендә тотҡан мөһим позицияһын юғалтмауы, көн талабы юғарылығынан тормошто художестволы сағылдыра алыуы асыҡ. Был хаҡта “Ағиҙел”дә 2010 йылдың сентябренән 2011 йылдың апреленә тиклем ойошторолған әңгәмәләрҙә нигеҙле әйтелде. Замандың киң мәғлүмәткә эйә, юғары эстетик зауыҡлы уҡыусыһының ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн ижадсының үҙенә, Хоҙай бүләк иткән һәләт-таланттан, оҙайлы дәүерҙәрҙә тупланған тәжрибәгә таяныуҙан тыш, бик күп эҙләнеү, юғары белем кимәле, киң эрудиция һ.б. талап ителә. Тормоштоң ташҡын даръя һымаҡ етеҙ ағышын сағылдырыуҙа талғын хикәйәләү алымы бөгөн бик үк ҡулай түгел. Уның урынына йыйнаҡ композициялы формалар килә. Тышҡы хәрәкәттән, ваҡиғалар сылбырынан торған сюжетты эске күңел конфликты, рух диалектикаһы, ҡатмарлы аң ағышы, тәрән психологизм менән һуғарылған сюжет алмаштыра.

Һуңғы ике тиҫтәләп йылдар эсендәге башҡорт прозаһында барған яңы юҫыктағы эҙләнеүҙәр, эксперименталь проза үрнәктәре, тәү сиратта, “Ағиҙел” журналы биттәрендә баҫылған әҙәби материал йөҙөндә күренә. Шуға күрә мәҡәләлә, башлыса, ошо матбуғат баҫмаһында урын алған әҫәрҙәр анализға йәлеп ителәсәк.

Ил үҫешендәге һынылышлы, фажиғәләр тулы тарихи осорҙарҙы сағылдырған хәҙерге роман, повесть, хикәйәләрҙең байтағында сеймәлсек сәйәси-ижтимағи күренештәрҙең кешеләр яҙмышына булған һәләкәтле тәьҫирен серле-мажаралы сюжетта, детектив элементтарға сорнап һүрәтләү активлашты. Детективлыҡ, мажаралылыҡтың ярайһы уҡ көслө ағым булараҡ урын алыуын Д. Бүләков (“Туҙҙырылған тамуҡ”), Х. Дауытов (“Нәфсе”) романдары раҫлай. Шулай уҡ XX быуаттың 20-се йылдарынан алып хәҙерге осорғаса ил үҫешендәге ҡаршылыҡлы процестарҙы һүрәтләгән, ҡатмарлы тарихи ваҡиғаларҙың кешеләр яҙмышындағы драматик, трагик сағылышын бөгөнгө күҙлектән яҡтыртҡан Ғ. Хисамовтың “Ун туғыҙынсы”, Р. Камалдың “Оҙонтал”, Б. Рафиҡовтың “Ғәрәп”, Ф. Аҡбулатованың “Әлморонда бал тәме” әҫәрҙәрендә детективлыҡтың, серлелек-мажаралылыҡтың киң урын алыуы күҙәтелә. Был роман, повестарҙа психологик йәнәшәлектәр, метафористик стиль, ассоциативлыҡ менән ҡушылыусы детектив-мажаралы сюжет ҡоролошо булғанышлы заманға хас күренештәрҙе, актуаль сәйәси-ижтимағи йөкмәткене мауыҡтырғыс, көсөргәнешле конфликт үҫтерелешендә үткер итеп асып һалыу өсөн хеҙмәт итә.

Ғ. Хисамовтың торғонлоҡ йылдарында юғары власть органдарында хөкөм һөргән коррупцияны, дәүләт етәкселәренең йыртҡыс асылын фашлаған “Ун туғыҙынсы” романы – мажаралы сюжетҡа ҡоролған сәйәси-детектив әҫәр. Серле ваҡиғалар үҫтерелеше, драматик хис-тойғоларға бай психологик сюжет һыҙығы һәм боронғо тарихты өр-яңынан яҡтыртыусы тарихи фараз бирелеше стиль йәһәтенән үҙенсәлекле бер синтезды барлыҡҡа килтергән. Бында реаллек менән фантастика, һәр кемгә мәғлүм рәсми факттар менән хыял, күҙаллау, тоҫмаллауҙарҙың берләшмәһен күрергә була.

Роман уҙған быуаттың 20–90-сы йылдарында барған ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала, төп сюжеттың байтаҡ өлөшө сәйәси мажараларҙы тасуирлауға ҡоролған. Детектив жанр ҡанундарына ярашлы, унда ваҡиғалар ҡапыл башлана һәм шундай уҡ динамика менән артабан үҫтерелә. Сюжет киҫкен, көтөлмәгән боролоштар ала. Әҫәрҙә коммунистар партияһының серек идеологияһы асыла, Ләлә Иҫәнова, Хаят Әхмәтова һымаҡтарҙың был идеологияға йәне-тәне менән бирелгәнлектәре, фиҙакәр рәүештә шуға хеҙмәт итеүҙәре һәм һуңынан күңелдәре ҡайтыуы, алданғанлыҡтарын төшөнөүҙәре һүрәтләнә, Карцев һымаҡтарҙың партия исеменә ышыҡланып оҫта башҡарған бысраҡ эштәре, үҙ файҙаларын ҡайырыуҙары, әшәке асылдары фашлана. Әҫәрҙә коммунистар партияһы хакимлыҡ иткән осорҙа етәкселеккә үрләгән, иң юғары вазифалар биләгән һәм халыҡ өҫтөнән идара иткән, юғары трибуналарҙан дөрөҫ, аҡыллы һүҙҙәр һөйләгәндәрҙең – был ялған, “ағас коммунист”арҙың ояттһыҙлыҡтары арҡаһында халыҡ араһында партияның абруйы төшөүе күрһәтелә.

Яҙыусы байтаҡ мажаралы ваҡиғалар теҙмәһендә өлкә комитет секретары Карцевтың һауалы, тупаҫ, йыртҡыс асылын фашлай. Нәҡ ошо Карцевтың яуызлыҡтарын үҙ башынан үткәргәнгә күрә Ләлә Иҫәнова ғүмере буйы инанған идеологиянан баш тарта, фиҙакәр хеҙмәт иткән партиянан күңеле ҡайта, ваз кисә. Тәне физик ғазаптарҙан бөгөлһә лә, рухы көслө героиня ҡулына килеп эләккән архив документтары ярҙамында (унда Карцевтың атаһы фашист ялсыһы булыуы хаҡында факттар тупланған була) дөрөҫлөк өсөн яуға күтәрелә. Әммә көстәр тигеҙ булмай сыға.

Роман беҙҙең ил үткән ҡатмарлы драматик юлды конкрет кеше яҙмыштары, ҡаршылыҡлы характерҙар аша сәйәси-детектив планда, мажаралар, интригалар тулы сюжет һыҙығында мауыҡтырғыс асып һалыуы, мөһим ижтимағи-социаль, рухи-әхлаҡи күренештәрҙе тәнҡит күҙенән үткәреп һүрәтләүе менән әһәмиәтле.

Р. Камалдың “Оҙонтал” романы фажиғәле хәлде һүрәтләүсе төйөнләнештән башланып китә. Иртәнге гүзәл Әй йылғаһы буйындағы тәбиғәт хозурлығын тасуирлаған сағыу төҫ-буяуҙарға тиҙҙән буласаҡ һәләкәт хаҡында ым-ишара һалынған: йылғанан күтәрелгән томан аҡ кәфенгә оҡшатылған. Көтмәгәндә Оҙонталды яңғыратып сыбыртҡы шартлай, был шартлау шулай уҡ шомло ваҡиға яҡынлашыуын иҫкәртә. Әй буйҙарын һиҫкәндереп, йән асырғанып ҡысҡырған тауыш ишетелә. Принципиаль коммунисты, колхоздағы хужаһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек, урлашыу, ғәҙелһеҙлектәр менән аяуһыҙ көрәшеүсене, шунлыҡтан дошмандары тарафынан етәкселектән ҡыҫырыҡлап сығарылған, көтөүсе булып ҡына йөрөһә лә, бер ҡасан да көрәш рухын йәрәгендә һүрелтмәгән Фазылетдинде Әхмәтхан менән Һиҙиәт үлтереп, кәүҙәһен йылға ярына ырғытып китәләр.

Енәйәт эҙен юллаусы детектив сюжет һыҙығы үҫтерелешендә торғонлоҡ осоронда хөкөм һөргән законһыҙлыҡ күренештәре фашлана, юғары вазифа биләүсе түрәләрҙең, хоҡуҡ һаҡлау органдарының, партия етәкселәренең һәр төрлө

ғәзелһеҙлектәргә күҙ йомоуы, үҙҙәренең закон боҙоуы, халыҡ ышанысын аҡламауы, бур Дәүләтхан нәҫеленән булған колхоз председателе Вафин, баш ветврач Әхмәтхандарҙың мутлыҡтары, етәксе урындарға фәҡәт туған-тыумасаларын, дуҫ-иштәрен генә үрләтеп, колхоз милкен урлап ятыуҙары һымаҡ мөһим ижтимағи-сәйәси, социаль проблемалар Р. Камалдың  “Оҙонтал” романында ҡалҡыу асыла.

Б. Рафиҡовтың “Ғәрәп” повесының ваҡиғалар төйөнләнешендә Ҡанбаба ауылы халҡының Ғәрәбстандан килгән нефть магнаты, миллиардер, донъялағы күренекле кешеләрҙең береһенең үтә сәйер, барыһын да сикһеҙ ғәжәпләндергән визитына әҙерләнеүе, уны ҡаршы алыу мәле хикәйәләнә. Вертолетты ҡаршылар өсөн район түрәләре, хатта Өфөнән ике министр, тынлы оркестр ҙа килә. Ни өсөн был миллиардер баш ҡала Өфөгә түгел, ә ошо бәләкәй генә, министрҙар, президент картанан ярты көн буйы эҙләп, саҡ тапҡан ауылға килә һуң, тигән һорауға берәү ҙә яуап бирә алмай. “РККА айғыры” тип аталған дүртенсе бүлектә генә был серлелек асыла башлай.

Бөтәһе лә ғәрәп тип танаған Сәлихйән ибн Фәтҡулланың Ҡанбабала тыуып үҫкән башҡорт кешеһе икәнлеге асыҡлана. Утыҙ етенсе йылғы репрессиялар осоронда коммунистик идеологияла тәрбиәләнеп үҫкән ялҡынлы рухлы комсомолец Сәлихйән яҙмышы  һәләкәтле боролош ала. Ҡыҙыл Армия өсөн махсус үҫтерелгән айғырҙы колхоз председателе тирләтеп, яндырып үлтерә. Хөкөмдән ҡотолоу өсөн бөтә бәләне ат ҡараусы йәш егеткә ябалар.

РККА айғыры – был символик образ повеста, бер нисә урында ҡабатланып, әйтеләһе фекерҙәрҙе тулыландыра барып, әҫәрҙең идеяһын ҡалҡыуыраҡ асырға мөмкинлек бирә. РККА айғыры Сәлихйән тормошона аяҡ салыусы, ғәҙеллек тантана итеүенә, юғары идеалдарға, бәхетле Совет илендә йәшәүенә эскерһеҙ инаныуын емереүсе, яҙмышын тапап үтеүсе, йәмғиәт менән шәхес араһындағы тиңһеҙ көрәште сағылдырыусы тәрән символик мәғәнәле образ булараҡ ҡайта-ҡайта күҙ алдына баҫтырыла тора, рухты һындырыусы, кешене  ҡолға әйләндереүсе шәхес культы атмосфераһы фашлана.

Кеше ашаусылар янында ла кешелеклелек сифаттарын һаҡлап ҡала алған егеттең юлында изгелекле кешеләр, Мостафа, Фатималар осрай. Үҙ илендә ҡоллоҡ быҒауы кейҙерелгән, намыҫлы исеме бысратылған, күрәләтә үлемгә дусар ителгән кеше сит илдә үҙенә йәшәр өсөн урын да, һәләтен тормошҡа ашырырлыҡ эшлекле шарттар ҙа таба, байлыҡ, исем, дан-шөһрәт тә ҡаҙана. Сит илдә солтан Сәлихйән үҙе олтан булып йәшәгән тыуған илен ғүмере буйы һағына, зарыға һәм, илдә демократик үҙгәрештәр башланып, бикле ҡапҡалар асылғас та,  Ҡанбабаға йүнәлә. Юғары даирәләрҙә бизнес мәшәҡәттәрен дә яйлап, ауылдаштарына матди ярҙам күрһәтеү эштәрен дә һөйләшеп-килешеп, рәсми яҡтан яйға һалып, ҙур, яҡты ниәттәр менән ҡайтып төшә ул Ҡанбабаға. Әммә 90-сы йылдар башҡорт ауылында бик күп ҡырҡыу проблемалар, замана касафаттары ҡаршылай уны.

Сәлихйән, ауылды, милләтте һаҡлап ҡалыуҙа, иман, ҡот ҡундырыуҙа, кешене әҙәп-әхлаҡ нормалары эсендә йәшәргә өйрәткән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тергеҙеүҙә мәктәп һәм мәсеттең мөһим икәнлеген иҫкә алып, үҙ аҡсаһына төҙөлөш эштәрен башлап ебәрә. Кешеләрҙең күңелдәре сафланһа, ғәрип рухтары сәләмәтләнһә, әйләнә-тирә тәбиғәткә лә аяулы булырҙар ине, тигән өмөт йөрөтә уны. Элекке гүзәл, еләкле яланды “шайтан таяҡтары менән әрем баҫҡан”, шишмә малдан тапатылған, бөтөрөлгән. Был һәләкәттәр барыһы ла кешеләрҙең битарафлығынан, матурлыҡты күрә, һаҡлай белеү һәләтен юйыуҙан тыуған алама күренештәр, тип шуларҙы төҙәтергә теләй.

Әммә эскелек тамам аңдарын ағыулаған, имандан айырылған, рухи тамырҙары өҙөлөп бөтөп барған кешеләр күңелен ҡырағайлыҡ баҫып алып бара. Әүлиә тауында ҡоролған аҡ сатырҙарға бер нисә тапҡыр уңышһыҙ һөжүмдән һуң, ауыл эскеселәре теләктәренә ирешә – янғында Сәлихйәндең тәне ныҡ ҡына янып, ул йәрәхәтләнә, больницаға эләгә. Төҙөлөш эштәре лә әлегә туҡтала. Йәғни, ҡырыҫ реализмға тоғро яҙыусы Сәлихйән килеү менән генә тормоштоң ал да гөлгә, яҡшы яҡҡа үҙгәреп китмәүен, власть органдары тарафынан тыуҙырылған кәртәләрҙе, кешеләрҙең изгелеккә яуыҙлыҡ менән яуап ҡайтарыуы кеүек түбән күренештәрҙе, башҡа күп кенә рәсми һәм әхлаҡи ҡаршылыҡтарҙы оҙайлы көрәш барышында ғына еңергә мөмкинлеген иҫкәртә.

Шулай итеп, мажаралы, детектив элементтарға бик бай булған, шартлылыҡ, ғәжәйеп серлелек менән сорналған мауыҡтырғыс “Ғәрәп” повесында Б. Рафиҡов ил тарихындағы һәләкәтле сәйәси, ижтимағи күренештәрҙең кеше яҙмышын фажиғәле юҫыҡҡа бороуын асып һала, бөгөнгө көндөң киҫкен социаль проблемаларын күтәрә, геройҙарының эшмәкәрлеген, тәү сиратта, халыҡтың рухи донъяһына, күңел байлығының тәрән тамырҙарына, әхлаҡи үҫеш перспективаларына ҡағылышлы мөһим мәсьәләләр менән бәйләп кәүҙәләндерә.

Ф. Аҡбулатованың “Әлморонда бал тәме” тигән серлелек, кинәйәлек менән сорналған мажаралы, детектив ваҡиғаларға бай повесында йәшерен тарих тағатыласағы, шартлылыҡ экспозиция өлөшөндә үк билдәләнә. Капиталистик илдә ниндәйҙер ханымдың Рәсихте белеүе, төпкөлдә ятҡан башҡорт ауылын, ниндәйҙер мөғәллимәне телгә алыуы, Латиповтың был һүҙҙәрҙән тертләүе, ҡырҡа баш тартыуы, ҡатып ҡалыуы – былар барыһы ла әлегә аңлашылмаған сер төйөнө ятыуына ишаралай.

Граждандар һуғышы ҡырҙарында большевистик идеялар ҡаҙанында ҡайнаған, Совет власын урындарҙа нығытыу өсөн Ырыҫбайға килеп төшкән Шайморат менән большевичка, пулеметчица Таня Рәсүл старшинаның йортона урынлаша. Улар өйгә ингәндә күҙҙәренә салынған йөҙө күренмәгән бөкрө ҡарсыҡтың үҙ-үҙен тотошо, шәл аҫтында ҡыҫып бысаҡ тотоуы сәйер, серле тойола. Ә уның тапҡыр, әсе, мыҫҡыллы яуаптарынан кем булыуы, ҡыҙылдарға мөнәсәбәте асыҡ күренә. Шайморат, Совет власының дошмандарын аяуһыҙ ҡырырға әҙер ҡаты бәғерле һәм ҡаты ҡуллы кеше, 18-се йылдарҙа Ырыҫбай ауылының “милләтселәр ояһы” булыуын, Рәсүл старшина, уның туғандары, яҡындарының милли хәрәкәттә актив ҡатнашыуҙарын белеп, халыҡта улар тоҡандырып ҡалдырған зарарлы рухты һүндерергә, контраларҙы юҡ итергә әҙерләнә.

Тәүҙә Шайморат менән Таняның “тотҡан ерҙән һындырыуҙары”, ҡаты ҡыланыуҙары халыҡты өркөтһә, һуңынан Фәйрүзәнең йоғонтоһонда хәлдәрҙең айышына төшөнә барыусы, сәйәси ҡарашында ҡырҡа үҙгәрештәр кисергән, милли үҙаңы уянған Шайморattың кешеләрҙең ауыр тормошон мөмкин тиклем еңеләйтергә тырышыуы уларҙың мөнәсәбәтен үҙгәртә. Фәйрүзә менән Шайморattың никахлашыуын ауылдаштар шатланып, хуплап ҡаршы ала.

Яҙыусы был мөхәббәттең синфи көрәш барған ҡыҙыу атмосферала тоҡаныуын, уның фажиғә менән осланырын иҫкәртә. Сюжет һыҙығында хәрәкәт итмәһә лә, Фәйрүзәнең тәүге ире Ҡасим, уның никах төнөндә саҡырып сығарылыуы һәм зым-зыя юғалыуы – мажаралы ваҡиға ҡат-ҡат телгә алына тора. Шулай уҡ ялҡынлы большевиктың буржуаз элемент, синфи дошманға булған мөхәббәтенә ҡарата кантревком ағзаларының ҡарашы, дөрөҫөрәге, Илнур Алпарскийҙың мәкерлелеге трагик сиселешкә алып килере көтөлә.

Ф. Аҡбулатова революция юлында йөрөүселәрҙең төрлө асылын күрһәтә.

Әҙибә айырыуса Илнур Алпарскийҙың яуыз, мәкерле, ике йөҙлө булмышын фашлауға иғтибарын йүнәлтә.

Сиселеш, ваҡиғалар үҫеше һымаҡ уҡ, драматик. Намыҫы үлмәгән, күңел гөлө ҡоромаған Рәсих Латиповҡа Алпарскийҙар төҙөгән йәмғиәттә урын юҡ. Ғәҙелһеҙлек хөкөм һөргән, ҡорбандар өҫтөндә төҙөлгән был йәмғиәттә барыһы ла, шул иҫәптән сәнғәт тә, улар идеологияһына буйһона.

Шулай итеп, урыны менән ҡырыҫ реалистик, урыны менән юғары рухлы романтик стилдә һүрәтләнгән мажаралы, детектив-сюжет һыҙығында Башҡортостанда барған ҡатмарлы ижтимағи күренештәр, тарихи ваҡиғалар, киҫкен боролоштар, ғибрәтле яҙмыштар сағылыш таба.

Бөгөнгө башҡорт прозаһында мажаралы сюжет үҫтерелешенә нигеҙләнеп ысынбарлыҡты сағылдырыу алымы киңерәк ҡулланылыш таба килә. Мәҫәлән, Г. Яҡупованың “Йыртҡыс ҡаны”, Ф. Латипованың “Үлем аҫылташы”, Б. Ноғомановтың “Ҡар кешеһе”, Х. Һөйөндөковтың “Тау тотҡоно” һ.б. повестары шундайҙарҙан.

Г. Яҡупованың “Йыртҡыс ҡаны” повесында ысынбарлыҡты реалистик сағылдырыу мажаралылыҡ менән тығыҙ үрелә. XIX быуат аҙағынан алып егермense йөҙ йыллыҡтың аҙаҡтарынаса – үҙе бер быуатҡа тулған осор сиктәрендәге ваҡиғалар, биш быуындың тормошо, ҡатмарлы яҙмышы яҡтыртылған повеста ваҡиғалар төйөнләнеше сәйер һорауҙы сисергә ынтылыуҙан башлана. Сюжет үҫтерелеше “Йөҙ йәшкә етеп килгән Һәҙиә өләсәйҙән тыуған, таралған нәҫел тамырҙарында айыу ҡаны бармы, юҡмы?” тигән серлелек менән сорналған, интрига тыуҙырыусы, бөтәһен дә ҡыҙыҡһындырыусы һорауға яуап эҙләүгә нигеҙләнгән.

Б.Ноғомановтың “Ҡар кешеһе” повесы ла мажаралы, детектив сюжетҡа ҡоролған, сәйер хәл-ваҡиғалар ағышы сюжеттың көсөргәнешле үҫтерелешен тәьмин иткән, сер йомғағының аҙаҡҡаса сиселмәүе, ҡар кешеһенең финалда ғына кем булыуы асыҡланыуы мауыҡтырғыслыҡты бермә-бер көсәйткән.

Х.Һөйөндөковтың “Тау тотҡоно” повесы күтәрелгән идеяһы, һайланған геройы, сюжет ҡоролошо йәһәтенән И. Насыриҙың «Тереләй ҡәберҙә» (1926) повесына яҡын. И. Насыри әҫәренең үҙәгенә 1914 йылда башланған империалистик һуғыш ҡорбаны, бомбаға тотоу мәлендә ер аҫтында күмелеп ҡалып, катакомбала бер нисә тиҫтә йыл йәшәгән һалдат образы ҡуйылһа, Х. Һөйөндөков повесында иһә XX быуаттың 80-се йылдарындағы Афған һуғышында самолеттар бомба яуҙырған мәлдә тау тишегенә инеп йәшеренгән Совет Армияһы һалдатының, сығыр юлын ҡом-таш баҫып, егерме йыл тау аҫтында йәшәргә мәжбүр булыуы хикәйәләнә. Һуғышҡа нәфрәт, кешеләргә фажиғәләр генә килтереүсе афәтте кире ҡағыу идеяһы менән һуғарылған әҫәрҙә башҡорт егете Мараттың ҡаҡшамаҫ, һынмаҫ рухын, түҙемлеген, ныҡлығын, иҫ киткес ихтыяр көсөнә эйә булыуын тасуирлай автор.

Мажаралы алымда ысынбарлыҡты яҡтыртыусы Ф. Латипованың “Үлем аҫылташы” повесында байтаҡ һөйкәлмә образдар, һөйкәлмә ваҡиғалар, төрлө урындарҙа – Башҡортостанда, Һиндостанда, джунглиҙа, друидтар ҡәбиләһендә барған хәл-күренештәр сюжет һыҙығын байытыуға, мауыҡтырғыслыҡты арттырыуға булышлыҡ итә. Әҫәрҙә хәҙерге замандың ҡырҡыу проблемалары: наркобизнес, мафия башлыҡтарының ҡурҡыныс эштәре, уларҙың ҡорбандары яҙмышы, ярлылыҡтан ҡотолорға тырышыуҙың фәхишәлеккә килтереп юлыҡтырыуы, байлыҡтың кешеләге бөтә ыңғай сифаттарҙы ла үлтереүе һымаҡ мөһим социаль мәсьәләләр әхлаҡи-этик позициянан, тәнҡит күҙлеге аша яҡтыртыла.

Рәшит Сабиттың “Төнгө афәт” повесында иһә илдәге ижтимағи, иҡтисади көрсөктөң кешеләрҙе рухи-әхлаҡи түбәнлектәргә лә төшөрөүе ғибрәтле хәл-ваҡиғалар ағышында аҫтыртын енәйәт тарихын тағатыу аша асып һалына.

Киҫкен социаль ҡаршылыҡтарҙың өлөшләтә фантастик, мистик, мифик алымдарҙа сағылышы Т. Ғиниәтуллиндың байтаҡ хикәйә, повестарында күҙәтелә.

Бөгөнгө көндә юғала барған әхлаҡи сафлыҡ, выжданлылыҡ, кешелеклелек, ғәҙеллек, мөхәббәткә тоғролоҡ, ата-олатайҙарҙан мираҫ булып ҡалған рухи ҡиммәттәргә һаҡ мөнәсәбәт кеүек мөһим мәсьәләләрҙе Р. Камал, Ф. Исхаҡова, Ф. Аҡбулатова, Ә. Үтәбай, З. Даянова, Ш.Хажиәхмәтов, Ф. Латипова иһә башынан аҙағынаса тотош фантастик, мифик-мистик йүнәлештә, ғәжәйеп серлелеккә сорнап һүрәтләй.

“Кешеләр” повесының экспозицияһында Р. Солтангәрәев ҡуйы романтик буяуҙарҙа Башәймәҫ ауылы халҡын, уның хөр күңелен ҡәҙимгенән юғарыраҡ күтәреп, ҡабартып күрһәтә.

Башәймәҫтәр үҙҙәренең тоҡомон да, ауылдары тарихын да хан заманынан тип иҫәпләй. Мәҫәлән, Юламан бей ҡулы аҫтында монголдарға ҡаршы биш йыл буйы һуғышыуҙарын улар үҙҙәре лә ҡатнашҡандай итеп тасуирлай. Ырыуын ҡырылыуҙан һаҡлап ҡалыр өсөн монголдарға әсир бирелгән Юламан бейҙең дошманға баш эймәүе, тарихҡа “Башәймәҫ” исеме менән инеп ҡалыуы бөгөнгө көндә был тоҡомдоң ғорур шәжәрәһенә лә, бик күптәренең фамилияһына ла әйләнгән. Был фамилияны йөрөтөү хоҡуғын башәймәҫтәргә көрәшеп, ныҡышмалылыҡ менән һаҡлап ҡалырға ла тура килә Совет власы заманында.

Брежнев заманында етәкселеккә килгән, “пионерлагерь” исеме аҫтында түрәләр өсөн ял йорто төҙөтөп, “дөрөҫ эшләгән” рәйес Кашулинскийға башәймәҫтәр баш эйергә, йөҙ һыуын түгергә мәжбүр була. Заман үҙгәреп, илдә демократик үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, башәймәҫтәр ҙә, ниһайәт, үҙ яҙмыштарын үҙ ҡулдарына алалар.

Бәләкәй генә ауылдың тарихы аша бөтә Башҡортостандың, хатта Советтар Союзы тип аталған ҙур илдең тарихы сағылып үтә. Октябрь революцияһы, Граждандар һуғышы, колхозлашыу, Бөйөк Ватан һуғышы, һуғыштан һуңғы ауырлыҡтар, колхоздарҙы эреләтеү, торғонлоҡ йылдары, Горбачев-Миңлебай етәкселегендәге үҙгәртеп ҡороуҙар, Ельцин-Ерофей заманындағы демократик ҡоролош-ҡыйралыш – автор бөтә ваҡиғаларҙы һанап сығыуҙан алыҫ тора. Был мөһим ижтимағи-социаль ваҡиғалар Башәймәҫ халҡы тормошона мөнәсәбәттә, уларҙың рухы, зиһене ҡабул итеүендә, йәшәйештәренә тәьҫирендә сюжет һыҙығына индерелә. Әҙип тормоштоң асылын иң элек кеше күңеле, зиһене аша күрергә теләй, кеше рухының күпкә киңерәк, байыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ икәнен аңлатырға ынтыла. Шулай итеп, әҫәрҙең конфликтын халыҡ аҡылы, ынтылышы, заман талаптары менән илдә йәшәп килгән закон-тәртиптәр араһындағы ҡаршылыҡтар тәшкил итә. Был ҡаршылыҡтарҙың шулай ҙа кешеләрҙең рухын һындыра алмауы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Сюжеттың тәүге өлөшө үтә шәп, бәхетле бөгөнгө тормош-көнкүреште тантаналы рухиәттә һүрәтләй, һәм артабан, ысынлап та, көтөлмәгән ҡырҡа боролош яһала, шаңҡытҡыс “шартлау” яңғырай.

Ҡыуаныслы табындың, иң ҡыҙыу һәм күңелле ваҡытында район етәксеһе, колхоздарҙы тарҡатыу тураһында Рәсәй президенты указын хәбәр итеп, мәхшәр тыуҙыра. Юҡ, тәүҙә халыҡ ҡаршы тороп маташа. Әммә бер ҡомһоҙ әҙәм аҡтығы барыһының да күңеленә ҡотҡо һала. Бөйөк Ватан һуғышында еңеү шатлығынан һуң икенсе тапҡыр шундай оло шатлыҡ кисергән ғорур башәймәҫтәр еңелә, баш эйә.

Кеше ҡасан, ниндәй генә йәмғиәт ҡоролошонда йәшәмәһен, ул – тыумышы, асылы, булмышы менән шәхси милексе. Кешене кеше итеп үҙе үк уйлап сығарған закондар һәм яҙылмаған ҡанундар, дөйөм әҙәп-әхлаҡ нормалары тотоп тора икән. Улар бөтөү менән, кеше лә кешелеген юғалта, Башэймәҫ кешеләре лә бер-береһен ашар, үлтерер хәлгә етеп, үҙҙәре төҙөгән колхозды таратып бөтә. Ата улын, әсә ҡыҙын танымаҫ булалар, элекке дуҫтар ҡан дошманға әйләнә. Ижтимағи аң, рухи тәрбиә, мәҙәнилек, юғары саф ынтылыштар матди байлыҡ туплау алдында юҡҡа сыға. Башта мөлкәт бүлешеүгә битараф ҡалған Байтимер менән Муллағәле лә бер нигә ярамаған тимер-томор өсөн дошманлашып ҡуялар. Ауырыу йәмғиәттә һау кеше, рухи сәләмәт булып йәшәп булмай шул...

Әҫәрҙең тәүге өлөшөндә романтик юғарылыҡ, тантаналы пафос кульминацияла әсе сарказм менән алмашына. Р. Солтангәрәев был сюжет өлөшөндә сатира, гротеск, шаштырыу-ҡабартыу, фельетон алымдары аша тотош илдә үткән приватизация – талау кампанияһына, “егерме ете кирбес менән ултырып ҡалған” Муллағәле, Байтимерҙәр һымаҡ, бөйөк дәүләт мөлкәтен бүлешеүҙән ситтә торған хеҙмәтсән хоҡуҡһыҙ халыҡтың “ваучер-чубайсер” һымаҡ ҡағыҙ шәрәмәте тотоп ҡалыуына ла ишаралайҙыр, моғайын.

Кешеләрҙең тәбиғәткә, тыуған тупрағына, ата-бабалары аманатына хыянаты, үткәндәр хәтеренә тап төшөрөүе, рухи ғәриплектәре, кешелек сифаттарын юйыуҙары, йыртҡыслыҡтары өсөн үтә ҡаты хөкөм сығарыла: урлап, талап йыйған мөлкәтте, тотош ауылды мастерскойҙан башланған ут көлгә әйләндереп, елгә осора.

Әмир Әминев – реалистик планда хикәйәләүҙе үҙ иткән әҙип. Әммә уның да һуңғы әҫәрҙәрендә (“Ҡар кешеһе”, “Ҡытайгород”, “Танкист”, “Усман ташы”) яңы юҫыҡта эҙләнеүҙәр, стилдәр синтезы күҙәтелә.

“Ҡар кешеһе” хикәйәһендә тотош кешелек цивилизацияһына янаған глобаль проблемаға әйләнгән тәбиғәт һәм рух экологияһы мәсьәләһе традицион булмаған алымда яҡтыртыла. Кешеләрҙең ғәмһеҙ йоҡоһонан уятыр, һиҫкәндерер өсөн ябай, ҡаҙимге әҙәби алымдар ғына көсһөҙ булыуын, тәьҫир итмәүен яҡшы белгән әҙип шул уҡ фантасмагорияға мөрәжәғәт итә. Ауылға зыян килтереүсене тәүҙә айыу тип һунарға сыҡҡан Йомағолдоң мажараларын реалистик алымдарҙа һүрәтләп килеп, артабан был ғифриттең ҡар кешеһе булыуын, уларҙың үрсеүен, тәүҙә малға, унан кешеләргә һөжүм итеүен хикәйәләй барыу юлы менән автор кешеләрҙе әйләнә-тирә мөхиткә, тәбиғәткә мәрхәмәтле мөнәсәбәттә булмауҙың ниндәй ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтереүе мөмкинлеген, тотош кешелек донъяһына янаған афәт икәнлеген үтемле алымдарҙа иҫкәртә.

XXI быуатҡа аяҡ баҫҡанда кешеләрҙең тыуған еренә мөнәсәбәте замандың тағы ла бер ҡырҡыу ижтимағи-социаль проблемаһына – ер һатыу мәсьәләһенә барып тоташты. Ер һатыуҙың халыҡҡа килтергән һәләкәте, милләттең киләсәгенә янаусы күренеш булыуы Ә. Әминев (“Ҡытайгород”), Н. Мусин (“Һуңғы солоҡ”), Р. Ураҙғолов (“Килмешәк”), С. Шәрипов (“Зәңгәр катер”) әҫәрҙәрендә асып һалынды. Фантасмагория, сатира, гротеск алымдарында ер һатыу ваҡиғаларының ниндәй афәтле эҙемтәләргә килтереү мөмкинлеге яҡтыртылды.

Ә.Әминевтың “Ҡытайгород” повесында ваҡиғалар районда артта һөйрәлеүсе “Алға” колхозында бара. Ҡытайҙан килгән ер һатып алыусы бизнесменды ҡурай уйнап, сигеүле оҙон таҫтамалға ҡабарып бешкән икмәк һалып ҡаршылайҙар. Алты айҙан һуң ерҙәрен ҡайтарып алырға тип килгән ауыл халҡын

ҡытай хужалар ОМОН, милиция, ғәскәр менән ҡаршы ала: “...камуфляж форма, баштарына ялтыр каска кейгән, ҡулдарына резина күҫәк тотҡан ҙур төркөм һалдаттар былар яғына ҡарап тора ине”.

Әҫәрҙәге кинәйә сюжет үҙәгендәге төп ваҡиғаны тасуирлауға ғына ҡағылмай, төрлө деталдәр, исемдәр, атамалар, ваҡ-ваҡ эпизодтар ҙа тәрән символик мәғәнәгә эйә. Район хужаһының исеме юҡ, ул Хаким тип алынған. Уның бар маҡсаты – карьераға үрләү, юғарынан төшкән күрһәтмәләрҙе тейешенсә һәм ваҡытында үтәү, үҙ районында сикләнмәгән власҡа эйә булыу, хакимлыҡ итеү. Хаким үҙенән ер, тел, милләт тураһында һорамаҫтарын яҡшы белә, шуға ла ул Фәйзулла ҡарттың, сөгөлдөрсө Нәғимәнең, уҡытыусы Рәсүлдең ҡаршылашыуҙарын еңел һындыра. “Со временем ауылдар бөтәсәк, эш шуға бара” тип алдарға, берәүҙәрҙе ҡурҡытып, икенселәргә араҡы таратып биреп, өсөнсөләрен мыҫҡыл итеп көлөп, дүртенселәрҙе “мәсьәләне дөрөҫ самалай” тип үҫендереп алдына алған маҡсатына ирешә. Милләте менән башҡорт булһа ла, рухы менән маңҡорт Хаким түрәлек баҫҡысынан өҫкә үрләү өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Уның ҡыланыштарына ҡарап, ҡайһы берәүҙәрҙең “ришүәт төрлө сүрәткә индерә шул” тигән фаразы хаҡтыр, тигән фекер уяна.

Ә. Әминев художестволы һүҙ ярҙамында башҡортто башҡорт булараҡ йәшәткән, һаҡлап килгән ерҙең кеше тормошондағы урынын бөгөнгө көн материалында үткер картиналарҙа, бар тулылығында һүрәтләп бирә. Кәмит ситуациялар ироник тонда хикәйәләнһә лә, уның асылында фажиғә ята. Был йәһәттән ”Ҡытайгород” повесы трагикомедия жанрына яҡынлаша. Әҫәрҙә аяуһыҙ реалистик стиль, фашлау тоны, публицистик пафос ироник, сатирик һүрәтләү алымдары менән ҡушыла.

Ә.Әминевтың киҫкен ижтимағи-социаль, рухи-әхлаҡи мәсьәләләрҙе ҡыйыу сағылдырған, бөгөнгө йәмғиәттең выжданһыҙ мораль-этик йөҙөн күрһәткән “Танкист” повесында ла тәнҡит рухы көслө. Публицистик пафос менән һуғарылған реалистик әҫәрҙең сиселеше сюрреализмға хас һыҙаттар ала.

Повеста ҡалаға ҡыш сығырға тип балаһына ваҡытлыса йәшәргә килгән Тимерғәле ҡарт менән ҡыҙы Гөлсөм араһында ауылдағы өйҙө һатыу-һатмау хаҡында ҡыҙыу бәхәс ҡуба. Тиҙерәк машина һатып алғыһы килгән Илшат кейәү был бәхәскә “кәрәсин” өҫтәй.

Йортто һатыу – матди байлыҡ булараҡ Тимерғәлене борсомай, йортон юғалтыу менән ул килешергә лә мәжбүр. Әммә атай кеше балаларының әхлаҡһыҙ ҡылығын аңлай алмай, эҙләнә, күңеле аша үткәрә, көсөргәнешле рухи-психологик процеста уның йәшәү принциптары башҡаларҙың – йәшерәк быуындың йәшәү алымдары, уларҙың “дөрөҫлөктәре”, үҙҙәрен хаҡлы тип һанауҙары менән бәрелешә.

“Тылымды ҡәбәхәттәрсә баҫып алдылар, сигенергә урын ҡалманы, плацдарм ҡулдан ысҡынды” тип йөрөгән танкист парктағы танкының тарихын белешер өсөн төрлө ерҙәргә, төрлө инстанцияларға мөрәжәғәт итә. Тик бөтә ерҙә лә битарафлыҡҡа тап була, үҙҙәрен аҡыллы иҫәпләгән төрлө вазифалы был бәндәләр элекке яугирҙы иҫәргә һанай. Ҡыҙының өйөндәге мәрхәмәтһеҙ мөнәсәбәт бында ла ҡабатлана.

Повеста ғаиләләге яҡындар араһындағы ғәрип мөнәсәбәттәр, йәмғиәт менән шәхес араһындағы ғәрип мөнәсәбәттәргә барып тоташып, дөйөмләштерелә. Үҙ граждандарына, айырыуса Ватан азатлығы өсөн ҡан ҡойған оло быуынға ихтирамлы, иғтибарлы хәстәрләүҙе тормошҡа ашыра алмаған йәмғиәт ғаиләләге, яҡын туғандар араһындағы мөнәсәбәттәргә лә үҙ йоғонтоһон яһай. Өйҙә ата-

әсәһенең Тимерғәлене ҡыйырһытыуҙарын күреп йөрөгән өлкән ейәне Азаттың олатаһына ҡул күтәреүе йыйылып килгән үпкә-рәнйеүҙәрҙе сигенән сығара.

Драматик ваҡиғалар үҫеше, башлыса, Тимерғәленең күңелендә барған көсөргәнешле уй-тойғолар сылбыры, психологик процесс кульминация нөктәһенә етә. Бөтә сабырлығын йыйып, түҙеп килгән Тимерғәле өйҙән сығып китә, берәҙәк урам тормошонда йәшәргә мәжбүр була.

Фашистарҙың ҡотон алған батыр яугирҙан, ғорур танкистан, йорт-ҡураһы булған крәҫтиәндән, тимерҙәй ныҡлы рухлы Тимерғәле Ҡылысбаевтан асарбаҡ-ҡа әйләнгән геройға үҙ йәшәү принциптарын урам закондары, башҡа тормош фәлсәфәһе менән сағыштырып, һынап ҡарарға, үҙ ҡараштарын йәмғиәт ҡанундары менән бәрелештә анализларға, тормошҡа булған баһаһын заман ысынбарлығы менән үлсәргә тура килә.

Тимерғәленең өйҙән урамға күсеүенә бәйле һүрәтләү объекты ла киңәйә, панорамлылыҡ көсәйә, йәмғиәттең типик социаль йөҙөн асыуҙа сюжет һыҙыҡтары ла, төрлө йүнәлештәге мәсьәләләрҙе күтәреп, байыға төшә, конфликт та киңерәк, тәрәнерәк төҫ ала, характер ҙа тулыраҡ асыла. Ғаилә мөнәсәбәттәрендәге ҡаршылыҡтар йәмғиәт менән шәхес араһындағы трагик мөнәсәбәттәргәсә үҫтерелә, киҫкенләштерелә.

Геройҙың танкист булыуы, һуғыш картиналарын йыш иҫкә алыуы, яуҙаш дуҫтары менән кәңәшләшеүе – береһе лә осраҡлы түгел. Әйтерһең, бөгөн дә ҡаты, үтә аяуһыҙ һуғыш бара, тик тотош халыҡтың бер төптән Ватан бойондороҡһоҙлоғо өсөн илбаҫҡынсы дошмандарға ҡаршы һуғышыуы түгел, ә бер ил граждандарының, бер ғаилә эсендәге яҡын туған кешеләрҙең мал-мөлкәт бүлешеү өсөн һуғышыуы. Һуғыш менән тыныс тормош араһында йәнәшәлек үткәреү бөгөнгө ысынбарлыҡтың ғәрип, аяныслы яҡтарын ҡалҡыуыраҡ сағылдырырға мөмкинлек бирә. Береһенән-береһе рәхимһеҙерәк, фажиғәлерәк был яу-алыштарҙа Тимерғәле Ҡылысбаев һынмай, бөгөлмәй, иҫ киткес рух ныҡлығы күрһәтә, еңеүсе булып көрәшә, йәшәй һәм еңеүсе булып мәңгелеккә атлай.

Сиселештә автор компромисһыҙ, аяуһыҙ реалистик хикәйәләүҙән ситләшеп, ярым реалистик, ярым фантастик һүрәтләү алымына күсә. Тимерғәленең төшөндә быуаттар буйына ҡәҙерләп һаҡланған, теүәл үтәлә килгән изге төшөнсәләрҙең, кешеләр араһындағы яҡты мөнәсәбәттәрҙең, дәүләттең үҙ граждандарына, көн-төн тир түккән хеҙмәт кешеһенә, дәһшәтле һуғыш ҡырҙарында ил азатлығы өсөн айбарлы һуғышҡан батыр яугирҙарына ихтирамлы мөнәсәбәтенең бөгөн ҡатып ҡалыуын символлаштырған постаменттағы танк хәрәкәткә килә һәм, ҡатырылған бетон-арматураны иҙеп, тапап, алға ынтыла. Тимер, ҡоростан ҡойолған, ут-ялҡында янмаған, бирешмәгән, Тимерғәленең яуҙаш дуҫы булған, терәгенә, йәшәүенең мәғәнәһенә әйләнгән танк бөгөн дә яу яланында!

Ә. Әминев “Усман ташы” повесында тыуған ергә, кешелек булмышына хыянат итеүҙән, ата-бабаларҙан ҡалған тәбиғәт байлыҡтарын ҡоротоуҙан, милли менталитетты юғалтыуҙан ғибәрәт булған, бөгөнгө көндә үтә ныҡ ҡырҡыулашҡан социаль проблеманы үткерерәк, үтемлерәк итеп сағылдырыу маҡсатында аяуһыҙ реализмда эш итеп килә лә гротеск алымына, шартлылыҡҡа күсә.

Әҫәрҙә ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған Усман ташы, икенсе исеме менән әйткәндә, Ташйылға тип аталған мөғжизәүи урынға киңәйтелгән характеристика бирелә. Артабан әҙип ғәжәйеп дауалау көсөнә эйә ташлыҡҡа йыраҡ түгел урынлашҡан Усман ауылының ауырыу, эс бошорғос тормош-көнкүрешен контраст хикәйәләүгә күсә. Дүрт ауылды берләштергән колхоз тарҡалғас, мөлкәтен

таратып-алып бөткәс, хужалыҡ юҡҡа сыға. Кем нисек булдыра ала, шулай донъя көтә, күптәр эшһеҙлектән эскелеккә бирелә. Яңы тыуған балалар һаны аҙая, унан да ҙурыраҡ һәм ҡурҡынысыраҡ бәлә ҡалҡып сыға – сабыйҙар эскелек арҡаһында зәғиф, аҡыл йәһәтенән “бер төрлөрәк” булып тыуа.

Артабан яҙыусы ошондай күңелһеҙ, эс бошорғос, хәүефле фонда ыңғай айырылып торған бер ғаиләне һүрәтләй башлай. Шул рәүешле повестың төп геройы Рамазан Усманов образы хикәйәләүгә килеп инә. Ул утыҙ йылға яҡын көтөү көтә. Ғүмере буйы эсмәй, тартмай, намыҫлы хеҙмәт итә, ете балаға өлгөлө атай була. Мәктәптәге тарих уҡытыусыһының Рамазандың ата-бабаһы булған Усман ҡарт тураһында, уның 1812 йылда яуҙа ҡатнашҡанлығы, ҡаһарманлығы өсөн ике миҙал менән бүләкләнгәнлеге, әлеге ауыл тирәһендәге ерҙәрҙең уға, сотникка, бүләк ителгәнлеге хаҡында гәзиткә баҫтырған мәҡәләһен автор юҡтан ғына телгә алмай. Был, бер яҡтан, Рамазан Усмановтың затлы нәҫелдең бер ярсығы булыуын иҫтә ҡалырлыҡ итеп зиһенгә һеңдерергә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, уның характерын асыуға, дөрөҫөрәге, алдағы бүлектәрҙә, ата-бабаһы һымаҡ, уның да ил, халыҡ ихтыяжы өсөн тырышып, фиҙакәр хеҙмәт итеүен баҙығыраҡ күрһәтеү өсөн кәрәк.

Тән һәм йән ғәриплеге фонында был ғаилә дегәнәк араһында үҫкән гөл-сәскәгә тиң. Рамазан ҡарттың ете балаһы ла үҙ көстәре менән төрлө вузға инеп уҡып, диплом алып, төрлө урындарҙа яуаплы вазифа башҡаралар, абруйлы белгестәргә әйләнәләр.

Ваҡиғалар төйөнләнешендә алтмыш йәшлек Рамазан ҡартҡа күрше йәшәүсе йәш ҡатын Гөльямал сәйер үтенес менән мөрәжәғәт итә. Уның үҙ иренән тыуған ике улы ла сирләшкә. Рамазан ҡарттарға күрше генә йәшәгәс, бәхетле тормоштарының серен белә: араҡы, тәмәке төтөнө менән ағыуланмаған орлоҡтан яралып, ата-әсәнән матур тәрбиә алып, бәләкәйҙән эшкә ҡатнашып үҫкән балалар – бәхет сығанағы әсә өсөн. Уның сәйер тәҡдимен шунда уҡ кире ҡаҡһа ла, аҙаҡ уйлана Рамаҙан. Аҡрынлап ул Гөльямалдың үтенесенең асылына төшөнгәндәй була. Герой ауылдаштарының тормошон күҙ алдынан үткәреп, бер генә һаусәләмәт ғаиләне лә тапмай. Ауылдың киләсәге аянысла икәнлеген, бөгөнгө иҫерек ауылдаштарҙың, уларҙың ғәрип тоҡомдарының ун-ун биш йылдан йәмғиәт өсөн оло фажиғәгә әйләнәсәген күҙаллай.

Ваҡиғалар үҫешендә икеһе лә Мәрйәм исемле уҡытыусыларҙың Рамазан ҡартҡа делегация вәкилдәре булып килеүе хикәйәләнә. Яҙыусы был күренеште махсус рәүештә рәсмиләштереп һүрәтләй. Рамазандың көтөүсе булыуынан файҙаланып, ҡатындарҙың ҡартҡа яһаған визитын автор нескәрәк, һөйөшөү өсөн тәбиғиерәк күренгән ситуацияла ла күрһәтә алыр ине. Әммә әҙип быға аңлы рәүештә бармай. Уның маҡсаты бөтөнләй икенсе: уҡытыусыларҙың да, ҡарттың да күңелендә ғишыҡ-ғишрәт уйыны түгеллеген, ә дөйөм ил, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу икәнлеген асып һалыу, дәүләттең киләсәгенә янаған бөгөнгө хафаны, оло фажиғәгә әйләнәсәк күренеште булдырмау өсөн эш-хәрәкәт итеүҙәрен үтемле саралар аша, рәсми төҫ биреп күрһәтеү тора.

Яуаплы эштең башында йөрөүселәр итеп уҡытыусыларҙың һайланыуы осраҡлы түгел. Улар – балаларҙың һаны кәмеүен дә, физик һәм аҡылға зәғиф булыуҙарын да көн дә күреп, белеп, һәләкәткә илтеүсе был проблемалар менән туранан-тура осрашып тороусы кешеләр. Шуға ла тап уҡытыусыларҙың повесть геройына сәйер үтенес менән килеүҙәре тәбиғи. “Атай-олатайҙарың нигеҙ һалған ошо ауылдың киләсәге өсөн иң яуаплы кеше һин, ағай. Шулай булғас, дәүләт

әһәмиәтендәге эш тип ҡара”, – тигән һүҙҙәре Рамазандың “Аҙғынлыҡ түгелме һуң был?” тип, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре тип борсолоуҙарын еңә.

Бер нисә йылдар дауамында ауыл тоҡомон яҡшыртыу өсөн тир түгә ул. Колхоз эшен һәр ваҡыт намыҫ менән башҡарған кеүек, халыҡты ҡотҡарыу эшенә лә Рамазан, ҡарт етди ҡарай: артабан сирле балалар тыуырға, ауыл ҡартайырға тейеш түгел тигән аҡылын алға ҡуйып фиҙакәр хеҙмәт итә герой. Хәләл ҡатынына ҡарата булған яҡын, йылы хистәрҙе кисермәһә лә, Усман ауылы яҙмышын ҡайғыртыу тойғоһо менән күңелен йылыта.

Ваҡиғалар ҡуйырғандан-ҡуйыра, көсөргәнеш арта бара. Сауаплы эштең дошмандары күбәйә. Ауыл ирҙәренең үс аласаҡтары көтөлә, эскесе Йәүҙәт был хаҡта ҡартты кисәтеп тә ҡуя. Әммә герой ҡурҡмай, сөнки ул “дәүләт ҡушҡанды” үтәй. Ауыл Советы рәйесе, ирҙәрҙе күрә алмаусы яңғыҙаҡ яһил ҡатын да Рамазанды саҡыртып алып ҡаты иҫкәртә. Сәләмәт балалар тыуыуын яйға һалыу менән етәкселек иткән завуч Мәрйәмде педсоветта тикшерәләр. РОНО мөдиренә ялыу яҙыла, комиссия килә. Хилаф эш ҡылып ятыусы Мәрйәмдәрҙең амораль тәртибен хөкөм итеү йыйылышында күптәр уҡытыусыларҙы яҡлап сыға. Шаулы ваҡиғалар менән район хакимиәте лә ҡыҙыҡһына. Шулай итеп, беҙҙең илдә һәр яҡшы башланғыс кәртәләргә, көслө ҡаршылыҡҡа осраған һымаҡ, һәйбәт уйниәттән сығып башҡарылған был эш тә ҡаты ҡаршылыҡҡа осрай.

Кульминацияла Рамазан ҡартты ауылдың үсле ирҙәре туҡмай. Унан алда ғына герой ғибрәтле төш күрә. Был төш, бер яҡтан, көсөргәнешлектең, ауылдаштар араһындағы мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығының һуңғы нөктәһенә етеүен күрһәтһә, икенсе яҡтан, тоҡом яҡшыртыу мәсьәләһен хәл итеү буйынса һайланған алымдың ҡатмарлылығын, көтөлмәгән драматик һөҙөмтәләргә, психологик ҡаршылыҡтарға, рухи-әхлаҡи конфликттарға килтереү мөмкинлеген дә төҫмөрләтә.

Мәктәп һигеҙ йыллыҡҡа, унан урта мәктәпкә әйләнә. Рамазандан тыуған балалар, ҡарттың хәләл балаларына оҡшап, “уҡлау кеүек төҙ кәүҙәле, асыҡ сырайлы, һау-сәләмәт” булып үҫә, яҡшы уҡыйҙар. “Ауылдың дөйөм аңралығы, битарафлығы, сир-сырхау, зәғифлек” фонында – был ҡабарынҡы тасуирлауҙарҙа авторҙың күрәләтә битарафлығы, ситтән тороп (отстраненный), мәрхәмәтһеҙ объектив һүрәтләүе, компромисһыҙ ҡырыҫ баһаһы ярылып ята – әлеге балалар күпкә һәләтле булыуҙары менән айырыла, төрлөһө төрлө ҡалаларҙағы төрлө вуздарға инеп уҡый, диплом ала, үҙен яҡшы белгес итеп таныта.

Эпилогта яңынан ауылдың элекке хәленә ҡайтыуы тасуирлана: эскелек дауам итә, йәштәр туған-тыумасаһына өйләнә, ҡан яңырмай. Зәғиф, сирләшкә, теге йә был ағзаһы етешмәгән балалар тыуа. Үлем тыуымдан күберәк.

Элек мөғжизәүи һауыҡтырыу көсөнә эйә шифалы Усман ташы кешеләрҙең ғүмерен оҙайтһа, хәҙер иһә бер эшҡыуар таштарҙан ерләү-күмеү бюроһы асып ебәрә. Һуңғы Усман ташы ауылға нигеҙ ҡорған боронғо нәҫелдең бер вәкиленә, “иңдәренә заман үҙе килтереп һалған намыҫ эшен атҡарып һәләк булған уҙаманға” һәйкәл булып күтәрелә. Был киңәйтелгән образлы кинәйәлә ҡасандыр ергә мәңгелеккә тип килгән мәғрур халыҡтың фажиғәле киләсәгенә тәрән мәғәнәле ым-ишара йәшеренгән.

Күренеүенсә, Әмир Әминевтың “Усман ташы” повесында замандың ҡырҡыу проблемаларын әсе ирония, сарказм аша һүрәтләү өҫтөнлөк итә.

Талха Ғиниәтуллин – ҡырыҫ реалистик стилдә эшләүсе әҙип. Уның бөтә әҫәрҙәре тиерлек автобиографик характерҙа, ижадының төп геройы – ул үҙе, үҙәккә, нигеҙҙә, үҙе менән булған, үҙе кисергән, ишеткән ваҡиғалар ҡуйыла. Ләкин

хәҙерге прозалағы интенсив үҙгәрештәр, эҙләнеүҙәр, бер жанр сиктәрендә башҡа жанр-стиль мөмкинлектәрен, алымдарын ҡулланыу, стилдәр синтезы күренеше Т. Ғиниәтуллин ижадына ла йоғонто яһамай ҡалмай. Унаң дөйөм алғанда реалистик әҫәрҙәрендә ирреалистик, мистик, мифологик, фантастик, символик стиль төҫмөрҙәре урын алыуы күҙәтелә. Ысынбарлыҡ менән уйҙырма, шартлылыҡ, реализм менән фантастика ҡатнашмаһы “Томан эсендәге яңғыҙ йорт”, “Яңы йөрәк”, “Зыярат ҡылыу”, “Бүре”, “Каска”, “Һөжүм”, “Ҡайтыу”, “Туннель”, “Ҡапҡа”, “Шәмсура менән Шәмсетдин”, “Ҡара баҫыу”, “Хоҙайбирҙиндың ҡайтыуы” хикәйә, повестарында күҙәтелә.

“Томан эсендәге яңғыҙ йорт” повесында төйөнләнеү киҫкен башланып китә. Мәскәүҙәге түңкәрелеш шаңдауы Урал аръяғындағы төпкөл ауылға ла килеп етә. Төн уртаһында шалтыраған телефон хикәйәнең геройы Рәйес Мифтаховтың тормошон арҡыс-торҡос килтерә. “Олигарх” Сәмиғ-шайтандың көмөшкәһен эсә-эсә, күңел яныуҙарын баҫҡан бер мәлдә, Рәйестең башында шәп фекер тыуа: фермер булып китергә, байырға.

Илдә барған үҙгәрештәргә, яңы тәртиптәргә ҡолағы сос элекке партократ, бөгөн демократтар креслоһына йәһәт кенә күсеп ултыра һалған ауыл хужалығы идаралығы начальнигы Илһамов фермерлыҡ идеяһының утопия икәнлеген күргәҙмәле итеп күрһәтеү өсөн геройға ер бүлеп алырға ярҙам итешә. Тәүге йылда эштәре уңа Рәйестең, мул ғына уңыш ала, байтаҡ аҡса туплай. Йорт һалыу хыялы менән янып йәшәүсе ир икенсе йылына бураһын мүкләп күтәреп тә ҡуя.

Кульминация өлөшөндә йорт һалынып бөтмәй, баҫыуҙа иген уңмай. Ысынбарлыҡ менән геройҙың алһыу хыялдары, ҡорған пландары араһында контраст ҡапма-ҡаршылыҡ ятҡанлығы асыҡлана.

Сиселештә хәл-ваҡиғалар логик тамамланыш ала – шомло, тирә-яғын сүп баҫҡан, төҙөлөп бөтмәгән йорттоң томан аҫтында ҡалыуын һүрәтләү менән әҫәргә нөктә ҡуйыла.

Повеста хәҙерге тормош күренештәрен фашлауҙа ҡырыҫ реализм, сарказм, ирония, сатирик хикәйәләү алымдарын, авторҙың публицистик баһаһын, эмоциональ яңғырашлы сығыштарын, финалда иһә серлелек тыуҙырыусы әкиәткә тартым мистик һүрәтләү сараларын, символиканың ҡатнашмаһын күрергә мөмкин. Ғөмүмән, тотош әҫәр бөгөнгө йәшәйешебеҙҙе фашлаусы символикаға, образлы йәнәшәлеккә, кинәйәгә ҡоролған.

Рәйестең тиреҫкә, эскелек һаҙлығына батҡан ауылдан ситтә йорт һалырға тигән зәңгәр хыялы – демократик ил төҙөйбөҙ тип маташыуға ишара ул. Яңы йорт урынында аслыҡтан үлгән кешеләрҙең һөлдәләре, баш һөйәктәре табыла. Рәйес уларҙы зыяратҡа алып барып ерләргә, әруахтарҙың йәндәренә тыныслыҡ бирергә теләһә лә, ығы-зығы, көндәлек мәшәҡәт арҡаһында ваҡыт тапмай. Һөйәктәр кәртә буйында сәселеп ята, һуңынан юҡҡа сыға. Был да ым-ишара: ил тарихында бындай ҡәбере лә булмаған, “атты күтәрә, ломдарҙы бөгөп бәйләй торған” һабантуй батыры Мишка ҡушаматлы Ғәббәс һымаҡ инвалид фронтовиктарҙың, башҡа бик күп ҡорбандарҙың һаны бихисап, уларҙың һөйәктәре тотош ил буйлап һибелгән. Мәхмүт ҡарттың иҫкәртеүе дөрөҫкә сыға: ташландыҡ сүплектә кеше мәйеттәре урынында яңы йорт төҙөшкән ауыл эшселәре – “батрактар” аҙмышы һәләкәт менән ослана.

Кульминация тағы ла фажиғәлерәк: иген уңмай, Рәйестең фермерлығы катастрофа кисерә, йорт һалынып бөтмәй, ул – кеше ҡотон алырлыҡ хәүефле урынға әйләнә.

Әҫәрҙең исеме  символик тәрән мәғәнәле: яңғыҙ йорт һәм, өҫтәүенә, ул томан эсендә. Бөгөнгө йәшәйешебеҙгә, демократик ил төҙөргә ынтылып, ярты юлда туҡталыуға, Рәйестең зәңгәр хыялдары томанға әйләнгәндәй, яҡты, яҡшы маҡсаттарҙың һүнеүенә ым-ишара ята бында. Яңғыҙ яңы йорт кешеләр күңеленә хәүеф-шом һалған һымаҡ, ярты-йорто төҙөлгән, законһыҙлыҡ хөкөм һөргән, Сәмиғ тибындағы, тик унан күпкә дәрәжәлерәк олигархтар хакимлыҡ иткән ил, дәүләт ҡоролошонан халыҡтың ҡурҡыуы сағылмай микән был символда? Сиселештә бүреләр ҡамауында ҡалған томан эсендәге яңғыҙ йорт, Рәйес менән Мәликә яҙмышы асыҡ ҡала, сер төйөнө яҙылмай.

“Яңы йөрәк” хикәйәһенең композицияһы контраст ике Хәйҙәр образын тыуҙырыуға ҡоролған. Хәйҙәрҙең урам, ауыл буйлап кешеләр менән әңгәмәләшеүе авторҙың “Баҙ” хикәйәһендәге Барыйҙың ҡылыҡтарына оҡшаш. Тик “Баҙ”ҙа Барый үҙ гонаһтарын һөйләп, кешеләрҙән яза, хөкөм көтһә, Хәйҙәр иһә ауылдаштарының гонаһтарын фашлап йөрөй.

Элекке Хәйҙәр – кешегә бик һирәк һүҙ ҡушҡан, ҡыйыуһыҙ, ауылдаштары күҙенә салынмаған, тауыш-тынһыҙ ғына көн иткән кеше. Уның барлығы тураһында кешеләр трактор кәрәк булғанда ғына иҫтәренә төшөрәләр. Йөрәк сиренең килеп сығыуын Хәйҙәр оҙаҡ йылдар тракторҙа һелкенеп йөрөп, туҙан йотоп, ал-ял белмәйенсә эшләүенән күрә.

Операциянан һуң иһә герой үҙгәрә, тын алышы иркенәйә. Ҡапыл уның аңында күҙ ҡамаштырырлыҡ аңлау, төшөнөү ғилләһе барлыҡҡа килә. Ул, тирәяғына әйләнеп ҡарап, “тормоштоң буйраҡ, хатта бысраҡ эске яғын, ҡара һәм шомло мөйөш-ярыҡтарын, кешеләрҙең үрмәксе ауы һымаҡ күренер-күренмәҫ йәшерен ҡыланыштарын” шәйләй. Әйтерһең дә, ул – кешелек донъяһына Хоҙай тарафынан ебәрелгән хөкөмдар, тәүбәгә килтереүсе. Элек тауыш-тыны сыҡмаған бер йән эйәһе, Хоҙай бәндәһе хәҙер килеп “кешеләргә үҙҙәренең гөнаһтары тураһында һөйләргә кәрәк, хәтерләһендәр ҙә уйланһындар, тәүбәгә килһендәр, үкенһендәр” тигән маҡсат ҡуя. Шул бурысты атҡарыу өсөн ул ауылдың бер осонан икенсе осонаса кешеләргә йәшерен гонаһтарын иҫтәренә төшөрөп йөрөй башлай.

Хикәйәнең кульминация мәле – кулак Ғәбделхайҙың Хәйҙәрҙе өйөнөң алдына килеп тороп туҡмап китеүе, үсле кешеләрҙең уны психбольницаға оҙаттырыуҙары. Шунан һуң да Хәйҙәр яңы йөрәк бүләк иткән яңы ҡараштарынан тайпылмай. Ҡыҙыу ҡыр эштәре менән мәшғүл тракторист көҙөн йөрәге шартлап үлеп тә ҡуя.

Тирә-яҡта йәшәүселәр, халыҡ, ил яҙмышына битараф булмаған, кешеләрҙе тәүбәгә килтереп тормошто яҡшыртырға ынтылған, яңғыҙы ғына фиҙакәр көрәшкән Хәйҙәрҙең йөрәге түҙмәй, көрәш ауырлығын күтәрә алмай. Уны ерләргә ауылдаштары күмәк килә, улар үҙ күҙҙәре менән күреп Хәйҙәрҙең үлгәненә, унан ҡотолғандарына ышанырға теләйҙәр. Осраҡлы юлсының: “Был кеше бик яҡшы булғандыр, әгәр уны шул тиклем күмәкләп оҙатҡас”,– тигән һүҙҙәренә парадоксаль тәрән кинәйәле, ғибрәтле яуап яңғырай: “Юҡ, киреһенсә, бөтә дөрөҫлөктө һөйләп тик йөрөнө”.

“Яңы йөрәк”тә  объектив хикәйәләүгә публицистик стиль ҡушыла, авторҙың һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың айышын киңерәк, тулыраҡ итеп аңлатыу-асыу маҡсатынан сығып ҡулланған эмоциональ-экспрессив баһалары килеп инә. Хәйҙәрҙең ауылдаштарының етешһеҙлектәрен юллап йөрөүенә бәйләнешле халыҡтың бындай гонаһҡа, хәшәрәтлеккә батыуының төптәрәк ятҡан иҗтимағи-социаль, сәйәси сәбәптәре хаҡында авторҙың уйланыуҙары ялғана.

Дөйөмләштереп әйткәндә, яҙыусы “Яңы йөрәк” хикәйәһендә йәмғиәтте солғап алған бысраҡлыҡтарҙы, уның сәбәптәрен фантастик алымда үҙенсәлекле фаш итә. Хәйҙәр һымаҡ яңы йөрәкле, яңы ҡарашлы көрәшселәрҙең, яңғыҙ булһалар, һәләкәткә тарыясаҡтарын иҫкәртә, кешелек өсөн рухи-әхлаҡи атмосфераның сафлығы актуаль булып ҡалыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

“Зыярат ҡылыу” хикәйәһе тотошлай тиерлек мистикаға – үлеләрҙең тереле-үенә ҡоролған. Закира апайҙың: “Элекке кешеләр бөгөнгө тормошто күрһә, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмаҫ ине”, – тигән һүҙҙәре мәрхүмдәрҙе эйәртеп авторҙың ауыл буйлап сәйәхәткә сығыу теләген уята. Зыяратта ятҡан кешеләрҙе терелтеп сығарып, бөгөнгө тормош менән таныштырыу саф фантастика булып күренһә, терелгән кешеләрҙең ҡасандыр реаль тормошта йәшәүҙәре, әлеге тормошҡа, үҙҙәре йәшәгән осор менән сағыштырып, баһалама биреүҙәре, тереләрҙең ҡыланыштары – былары барыһы ла ҡәтғи ысынбарлыҡтағыса, тормошсан.

Хикәйә мистиканан, фантастиканан ғына торһа, ул тиклем ҡыҙыҡһыныу ҙа уятмаҫ ине. Ә реализм һәм ирреализм синтезы авторҙы публицистик яланғаслыҡтан, үҙ фекерҙәрен туп-тура әйтеп биреүҙән ҡотҡарған.

Ф. Аҡбулатованың “Һомайғош юлы”, “Остаз менән Нәркәс йәки фанилыҡтағы хыял”, “Таш ҡәлғә” фантастик хикәйәләре символикаға, шартлылыҡҡа, ҙур ижтимағи яңғырашҡа эйә фәлсәфәүи кинәйәгә ҡоролғандар.

“Һомайғош юлы” хикәйәһендә төш менән өн, ысынбарлыҡ менән хыял, ҡәҙимге ер тормошо менән мөғжизәләр тулы әкиәт донъяһы аралаштырып һүрәтләнә, хикәйә, хикәйәт, әкиәт жанрҙары ҡатнашмаһы, ҡырыҫ реализм, юғары романтизм синтезы урын ала. Хикәйәнең геройҙары ла – ғәҙәти ер кешеләре һәм әкиәт геройҙары.

Төйөнләнештә Арыҫланғәли исемле малай янына аҡҡош йөҙөп килә лә донъяға тағы ла Урал батыр кеүек батыр тыуасағын хәбәр итә. Йыр, ҡобайыр, риүәйәттәрҙе яттан белгән, күп китаптар аҡтарған малай был ҡоштоң Һомайғош икәнен таный. Ерҙә үҙ балаларын етем иткәндәр, эскелек һаҙлығына батҡандар, үҙ файҙаһына изге ҡоштар йәнен ҡыйырға әҙер торған яуыздар бар саҡта кешелек, тереклек өсөн үҙен ҡорбан итеүсе Урал батыр кеүектәргә әлегә урын юҡ, уларҙың фиҙакәр көрәше уңышһыҙлыҡ менән осланасаҡ, батырҙың эшен күтәреп алыусылар, дауам итеүселәр булмаясаҡ, тигән фекер тел төбө менән еткерелә.

“Остаз менән Нәркәс йәки фанилыҡтағы хыял” хикәйәһендә лә әҙибә халыҡтың ауыҙ-тел ижадындағы образдарҙы, һүрәтләү сараларын киң ҡуллана, әммә уларға, үҙ маҡсатына ярашлы, яңы йөкмәтке, яңы функция һала. Реализм һәм фантастика, проза һәм поэзия, бөгөнгө ысынбарлыҡ һәм фольклор ысынбарлығы аралашып килә.

Нәркәс – һыу ҡыҙымы, ер кешеһеме – был мөһим түгел. Мөһиме – Остаздың үҙ идеалына хыянаты, рухи түбәнлеккә төшөүе. Уның ғәйепһеҙ ауылдаштарына нахаҡ бәлә ябыуҙа, хөкөмгә оҙатыуҙа ҡатнашыуы Нәркәсте тетрәндерә. Иманын һатҡан, ғәҙеллеккә хыянат иткән Остаздың ғазаптарын, эске яңғыҙлығын һүрәтләүҙе автор төп маҡсат итеп ҡуя.

Әҙибәнең “Таш ҡәлғә” әҫәрендә тасуирланған мөхит, дәүер ысынбарлыҡ менән хыял, уйҙырма ҡатнашмаһынан тыуған, кинәйәгә, киңәйтелгән символикаға ҡоролған. Боронғо ҡәлғә тормошо, ундағы ҡан ҡәрҙәштәребеҙҙең көнитмеше бөгөнгөбөҙ менән сағыштырыла, бөгөнгө булмышыбыҙҙы, йәшәйешебеҙҙе, кешелек донъяһында тотҡан урыныбыҙҙы ныҒыраҡ танырға, аңларға булыша.

Хикәйәнең төп геройы дәүерҙән дәүергә күсеп йөрөй, бөгөнгөнән үткәнгә үтә, киләсәккә баға. Шул рәүешле дәүерҙәр алмашыныуы, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа

күсеү, хыял менән ысынбарлыҡтың аралашыуы был әҫәр сиктәрендә бер ҡаршылыҡһыҙ, еңел башҡарыла. Тыуған халҡының фажиғәһен асып һалған хикәйәлә авторҙың үҙ баһаһы, позицияһы, әсе сарказм да сағыла. Автор милләте позицияһынан сығып фекер йөрөтә, донъяға үҙ халҡы күҙлегенән тәнҡит менән баға.

Таш ҡәлғә – тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә дәғүә итеүсе символик образ. Ул – ҙур юғалтыуҙар кисергәндән һуң, донъянан айырылып, үҙ эсенә бикләнгән, хәҙер килеп эстән тарҡалған ил. Дошмандарҙан ҡотолоу, үҙ милләтен, бөйөндороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡалыу урыны булған таш ҡәлғәнең күптән инде ҡәбергә әйләнгәнлеге бер көн килеп асыла. Хәҡиҡәт бик әсе, ә ни ҡылырға, үҙ ҡулдары, үҙ ихтыярҙары менән ҡылған үкендергес, һәләкәтле хаталарҙы нисек төҙәтергә? Кульминация нөктәһе бына шул трагизм менән һуғарылған һорауҙарҙа.

Финалда “Рух үлемһеҙ, рухты ҡотҡарығыҙ!” тигән һөрән яңғырай. Хикәйәлә, рух йәшәгәндә халыҡты юҡҡа сығарыу мөмкин түгел, ундай көс тотош ер йөҙөндә юҡ, рух булғанда, милләт алдағы цивилизацияларҙа ла йәшәйәсәк, тигән идея раҫлана. Рухы үлмәһә, башҡорт халҡы ла, үҙ-үҙен яндырып, көлөнән ҡабат яралған әкиәт ҡошо Феникстай, яңынан терелер, тип өмөтләнә автор.

Ә.Үтәбайҙың “Һаҙағай” повесында, Г. Ғиззәтуллинаның “Йәнем китә, өмөтөмдө ҡалдыр” хикәйәһендә ярым реаль, ярым мистикаға ҡоролған, йәндең кеше үлгәндән һуң осоп йөрөүенә ҡағылышлы төрлө ғилми бәхәстәр ҡуҙғатҡан мажаралы сюжет һыҙыҡтары үҫтерелә.

Хикәйәһендә кешеләрҙе быуыусы күк бүре, Ғиндуллаға ташланһа ла, уны иҫән ҡалдыра. Күк бүренең Ғиндулланың ҡатыны Мәстүрә булыуы, уның тотош нәҫеле менән ҡәһәрләнеүе, үлгән атаһын выждан ғазабынан ҡотҡарыр өсөн ҡатындың, сихыр менән булашып, көндөҙ кеше, тулған айлы төндә бүре сүрәтенә инергә мәжбүр булыуы, ҡарғышлы яҙмышы мауыҡтырғыс, серле, көсөргәнешдраматизм тулы сюжет һыҙығында асыла. Ошоға яҡын сюжет З. Даянованың “Айғырбатҡан утары һеләүһене” новеллаһында юғары романтика менән дә һуғарылған.

Дөйөмләштереп әйткәндә, XX быуаттың 80-се йылдары уртаһынан алып Рәсәй һәм шул иҫәптән башҡорт әҙәбиәтендә соцреализм методынан, уның ысынбарлыҡты сағылдырыуҙағы төп принциптарынан, закон төҫөнә ингән ҡәтғи ҡалыптарҙан баш тартыу күҙәтелә килә. Тарихилыҡ һәм халыҡсанлыҡ булған реализм принциптары яңы йөкмәтке менән тулылана бара. Тарихи-революцион роман яңы тарихи, документаль, фәлсәфәүи романдар менән алмашынған кеүек үк, хәҙерге заманға арналған әҫәрҙәр ҙә яңы жанр-стиль һыҙаттары менән байый.

Һуңғы осорҙа әҙиптәр, реалистик алымдар менән йәнәш, шартлылыҡты, уйҙырманы, кинәйәне, символиканы киң ҡуллана, мистик, мифологик, фантастик һүрәтләү мөмкинлектәренә нигеҙләнә. Күбеһенсә, уйҙырма конфликтҡа нигеҙләнгән, ғәҙеллектең һәр саҡ тантана итеүен раҫлаған, бәхетле сиселештән торған “дөрөҫ” әҫәрҙәргә – “мифтар”ға ҡарағанда төрлө стилдәр синтезынан ойошҡан был әҫәрҙәр ышандырғысыраҡ, реалерәк төҫтә ҡабул ителә.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,**
**Башҡорт дәүләт**
**университеты доценты.**

# *9 май — Бөйөк Еңеү көнө*

## “Ейәндәрем уҡыр...”

**Һандыҡ төптәрендә, архивтарҙа ғына һаҡланған өс мөйөшлө һалдат хаттары... Улар Бөйөк Ватан һуғышы окоптарында тыуған яҡтарынан йылы һүҙ, йән йылытыр хәбәргә өмөтләнеп, үҙҙәрен дүрт күҙ менән көткән яҡындарына иҫәнлектәрен, дошман менән йән аямай алышыуҙарын белдергән юлдар.**

**Учалы районы Наурыҙ ауылында һуғыш алдынан ни бары 70-ләп йорт була. Тыуған илде һаҡлау өсөн 86 кеше фронтҡа китә. Ҡайһы бер ғаиләләрҙән һуғышҡа өсәр-дүртәр кеше алына. Мәҫәлән, Фәхретдиновтарҙан дүрт ир китеп, береһе генә тыуған ауылына әйләнеп ҡайта. 68 фронтовик Ватан азатлығы өсөн һәләк була йәки хәбәрһеҙ юғала. Ни бары 18 кеше ҡайта Наурыҙға. Уларҙың да күбеһе ғәрип була.**

**Был яҙманың геройы – ауылға нигеҙ һалған Науырҙа ҡарттың бүләһе, Саҙриафзалдың ейәне, Тайфур улы, 20 йәшендә ил һаҡлаусылар сафына баҫҡан Сафиулла АФЗАЛОВ.**

***Беренсе хат***

*"Һаумы әле, Гөлнәзифә йәнем! Һиңә, ҡәйнәмә, әсәйемә, ҡустыларыма, күрше-тирәләргә, ауылдаштарға минән күптин-күп, сүктин-сүк сәләм! Әлегә хәлем һәйбәт кенә. Өйҙән сығып киткәс, Учалы ауылына — хәрби комиссариатҡа килдек. Беҙҙе исемлек буйынса барланылар ҙа, машиналарға тейәп, тимер юл вокзалына килтереп ауҙарҙылар. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙ, әйтерһең дә, көтөүҙәге мал инде. "Унда барма!", "Бында баҫма!", "Тик кенә тороғоҙ!" һәм башҡа шундай бойороҡтар ҡолаҡты тондороп бөттө. Унан — Өфө. Бында ла, военкоматтағы кеүек, энәһенән ебенә тиклем тикшерҙеләр. Был һау-сәләмәт тип мөһөр баҫҡас, бер команда туплап, Өфөнән йыраҡ түгел Алкино (беҙҙеңсә Әлкә була инде) тигән станциянан яҡын ғына урында хәрби эшкә өйрәтә башланылар. Һинең Сафиуллаң хәрби санитар буласаҡ. Һуғыш яланынан яралыларҙы ташыясаҡ. Бына шулай икән ул донъялар! Кисәге көтөүсе, шағир булам, тип хыялланып йөрөүсе әҙәм бөгөн хәрби санитарға уҡып булаша. Уҡыу тип һыуһаған кешегә — миңә насар түгел, әлбиттә. Уҡыуҙың ниндәйе лә насарҙан булмай.*

*Иртә таңдан алып ҡара кискә тиклем бер минут та буш ваҡыт юҡ. Санитарлыҡҡа уҡыу менән бергә, хәрби әҙерлек эштәре лә алып барыла. Төп эшебеҙ буласаҡ медицина тигән фәнде лә өйрәтәләр. Көтөүҙә берәй мал ауырып китһә, ветфельдшер ҡушыуы буйынса үҙем тота ла дауалай башлай торғайным бит. Бында ла яраларҙы нисек таҙартырға, бәйләргә өйрәтәләр. Беҙ уларҙы шул рәүештә госпиталгә оҙатырға тейеш булабыҙ. Миңә ҡалһа, уҡыу ауырҙан түгел кеүек. Бер аҙ иғтибар менән*

*тыңларға, мейегә һеңдерә барырға кәрәк. Ыҙалап булһа ла ете класс тамамлау миңә ярайһы уҡ ярҙам итә. Шиғыр яҙа алмайым. Ҡулға китап та тотҡаным юҡ. Кисен әлһерәп килеп карауатҡа йығылам да иртә менән тағы һикереп торам. Бына шулай һалдат Сафиулланың хәлдәре.*

*Үҙегеҙ нисек йәшәп ятаһығыҙ? Ҡәйнәм, әсәйемдең һаулығы нисек? Ҡустыларым ни эш бөтөрә? Ярай әле, Ғарифулла ете класты тамамлай алды. Грамоталы кешегә, моғайын, тормошта ауыр булмаҫ. Бына Ғәлиулла ни эшләр инде. Уҡый алырмы, юҡмы?*

*Йәнем, үҙеңде һаҡларға тырыш! Һаулыҡ — ҙур байлыҡ. Һәр кем өсөн дә шунан да ҙурыраҡ байлыҡ юҡ. Һин тыуасаҡ балабыҙ өсөн дә йәшәргә, тырышырға тейешһең!*

*Әле, үтә арыған булһам да, был хатты яҙам. Күптәр хырылдап йоҡлап та китте. Күҙ бәйләнә башланы, ҡағыҙға теҙгән хәрефтәрем бейей. Ә мин һаман сыймаҡлап яҙыуымды беләм. Туҡтарға ла ваҡыттыр инде. Ярай, хуш-һау бул! Хат көтөп ҡалыусы Сапыйың!*

*Учалынан конверттар алғайным. Хатымды шуға һалып, бер таныш аша почта йәшнигенә төшөртәм. Теләһә нәмә яҙғанды цензура үткәрмәй. Ә һин хатты хәрби часть адресына яҙырһың.*

*21 июль, 1941 йыл*".

## *Икенсе хат*

*"Һаумы әле, йәнемдәй күргән Гөлнәзифәм! Һиңә, ҡәйнәмә, әсәйемә, ҡустыларыма күп сәләм!*

*Мин әле лә Алкинола уҡыуымды дауам итәм. Ауылдан сығып киткәнгә бөгөн теүәл бер ай. Минең менән бергә ауылдан Хәйретдин, Риза ағайҙар ҙа алынғайны бит. Улар менән бигүк яҡынлап һөйләшеп булманы. Ни тиһәң дә, икеһе лә ауылдың абруйлы ғына кешеләре. Минең кеүек көтөүсе менән улар нисек итеп сиселеп китеп һөйләшеп торһон ти. Үҙем дә яҡынлап торманым инде.*

*Райондан ул көндө барлығы 360 кеше армия хеҙмәтенә оҙатылды. Өфөлә ауылдаштар ҡайҙа алынғандыр — аңғармай ҡалдым. Уларҙан айырылғанды һиҙмәнем дә. Юлда ла, Өфөлә лә үҙемә юлдаштар таптым. Улар менән оҙаҡ ҡына һөйләшеп, серләшеп тә ултырғыланыҡ.*

*Тормош — тормош инде. Ни тиклем ауырлыҡтар осраһа ла, әҙәм балаһы барыбер әкренләп күнегә. Мин дә һалдат тормошона яйлап өйрәнеп киләм. Шулай ҙа ҡулға китап алып булмай. Йә осрамай ҙа ҡуя, рәхәтләнеп уҡырға ваҡыт теймәй, шулай ҙа ҡулға башҡорт йәки урыҫ телдәрендә гәзит килеп эләкһә, минең өсөн оло байрам була: һәр һүҙен, һөйләмен кинәнеп уҡыйым.*

*Беренсе хатта яҙғайным бит: һалдат хеҙмәте минең өсөн еңелерәк бирелә. Ҡайһы берәүҙәргә ул бик ауырға тура килә. Һаман да өйрәнеп бөтә алмайҙар. Һыйырҙар артынан йүгереп өйрәнгәс, етмәһә, һау-сәләмәт булғас, мин хеҙмәтте еңел кисерәм. Һинең Сапыйың йүгереү, һикереүҙә, иң алдан булмаһа ла, артта ла ҡалмай, өсөнсө, дүртенсе булып йөрөйөм. Бәлки, беренсе лә булып булыр ине, тик хәҙергә көсөмдө алдағы көндәр өсөн һаҡлайым. Һин беләһең бит: ауылда ла мин кеше күҙенә бигүк салынып барырға ынтылманым. Гәзиттә шиғырҙарым, мәҡәләләрем баҫыла башлағас, уңайһыҙланыуҙан үҙемде ҡайҙа ҡуйырға ла белмәй йөҙәй инем.*

*Медицина мәсьәләһенә килгәндә, ул — алдағы хатта яҙғанса. Кеше лә хайуандар һымаҡ ул. Яраны йыуып таҙартыу, бәйләү мәсьәләһендә һәр саҡ беренсе булып тотонам. Иптәштәр, мәрәкәләп, һиңә табип булырға кәрәк булған, тиҙәр. Кем белә, һаулыҡ булһа, унынһын киләсәккә ҡалдырам. Ә хәҙергә мин — ябай һалдат. Унан мин ете класс ҡына*

*белемлемен бит әле. Юғары уҡыу йортона инеү өсөн мотлаҡ урта белем алырға кәрәк. Ә шиғырҙы ҡайҙа ҡуйырға? Аллаһы бойорһа, иҫән-һау ҡайта алһам, ситтән тороп булһа ла урта белем алырмын, тип хыялланам. Был — минең иң изге ниәтем. Унан юғары белем алырға ла күп ҡалмай. Һөнәр һайлау мәсьәләһе алға килеп баҫасаҡ. Сапыйың бына шундай хыялдар менән йөрөп ята.*

*Ярай, хуш-һау булығыҙ! Хат яҙ! Һинең Сапыйың.*

*Был хатты ла таныштар аша хәрби частан сығарып оҙатам.*

*15 август, 1941 йыл".*

### *Өсөнсө хат*

*"Һаумы әле, Гөлнәзифәм! Барығыҙға ла күп сәләм! Иҫәнлек-һаулыҡ теләйем! Хатыңды алып ҡыуандым. Хәлдәрегеҙҙе белдем.*

*Үҙемдең хәл-әхүәлгә күсәм. Ниһайәт, курстар тамамланды. Яңы урынға күсәсәкбеҙ. Хат яҙмай торорғоҙ. Кисә генә ҡулға санитар-инструктор һөнәрен үҙләштереүем тураһында документ тотторҙолар. Нисәмә аҙна, айҙар буйына һалған тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ бер ус аяһындай ғына ҡағыҙға һыйған да ҡуйған. Әммә һөнәр эйәһе булыу тураһында документ алыу — ҡыуаныслы күренеш. Киләсәктә әллә нисәй ҙур уҡыуҙар тамамлап, бына шулай шатланып-ҡыуанып документтар алырға яҙһын, тип уйлайым.*

*Хатымды дауам итәм. Тышта 1942 йылдың феврале. Беҙҙә бындай заманда ҡар-буран уйнай, көслө һалҡындар тора. Ә бында әллә ни һалҡын түгел.*

*Беҙҙе, егерме ике санитар-инструкторҙы, Боғорослан ҡалаһында урынлашҡан 206-сы дивизия ҡарамағына ебәрҙеләр. Мин һәм Ахун ауылынан Мәргән Дауышев 748-се полкка эләктек. Бында ҡаҙаҡ, үзбәктәрҙән һалдаттар күп булып сыҡты. Юлдашым санвзводта ҡалды, ә мине өсөнсө ротаға санинструктор итеп тәғәйенләнеләр. Бында дивизия күләмендә өр-яңынан күнекмәләр үтә башланыҡ. Һәр кем үҙ эше буйынса яуаплы булһа ла, дөйөм дивизия өсөн, уның уңышы өсөн янып-көйәбеҙ.*

*Ҡаҙаҡ, үзбәктәр күп булғас, минең фарт ҡалҡты. Тегеләр урыҫ телен аңлап етмәй. Мин тылмас ролен дә үтәргә тотондом. Әллә шуға инде ҡаҙаҡтар менән үзбәктәр мине шул тиклем яҡын күрәләр. "Әкә" тип кенә йөрөтәләр. Араларында минән ололары ла, тиңдәштәрем дә күп. Әммә улар өсөн барыбер аҡай (ағай) булып сығам. Бөтә рота тиерлек "Сапый әкә" тип йөрөтә башланы. Командирҙар алдында ла абруйым үҫте. Тик ябай урыҫ һалдаттарына ғына был оҡшап етмәй. Мине "командир рогатой роты" тип кәмһетергә маташалар. Йәнәһе, мин мөгөҙлө рота командирымын. Үзбәктәр, ҡаҙаҡтар ҙа әҙәм балаһы бит. Ҡыйырһытыуҙарға бигүк бирешеп бармайым. Белер-белмәҫ телем менән сатнатып ҡаршы яуап бирәм тегеләргә.*

*Алкинола ундай милли мәсьәлә күҙгә салынмай ине. Бөтәбеҙ ҙә бер республиканан булғанғалыр, күрәһең. Ә бында СССР тип аталған ҙур дәүләттең төрлө мөйөштәренәнбеҙ. Әлеге үзбәк, ҡаҙаҡтарҙы ҡыйырһытырға маташыусылар ҙа осрап тора. Улар миңә йүгереп киләләр ҙә булған хәлдәрҙе ошаҡларға керешәләр. Шунан мин йә командирға әйтәм, йә үҙем теге ҡыйырһытыусылар менән һөйләшәм. Һөйләшеү эҙһеҙ үтмәй. Иң һуңғы сиктә тегеләрҙе, үзбәк, ҡаҙаҡтарҙан туҡматам, тип ҡурҡытам. Үҙҙәре был һүҙҙәрҙән һуң шөрләй төшәләр. Әкренләп бындай кәмһетеүҙәр аҙая башланы. Абруй артыуҙанмылыр инде, мине ротала комсорг итеп һайлап ҡуйҙылар. Был эшкә, ғәҙәттә, кесе командирҙар дәрәжәһендәге кеше һайлана. Тик уларҙың береһе лә*

*тел белмәй. Шулай итеп, сараһыҙҙан мин комсорг булып киттем. Рота командиры: "Киләсәктә һине кесе командирҙар әҙерләүсе курстарға ебәрербеҙ", — тип ышандыра. Мин шатланып риза булыр инем. Ни тиһәң дә, уҡыуҙан, белем алыуҙан кем туйған.*

*Әлегә мин ротала санинструктор ғына. Элекке көтөүсе Сапыйға унынһы ла тап-таман. Хатым оҙонға китеп бара. Янында ултырып, өс көн буйы туҡтамай һөйләшһәм дә, һис ялҡмаҫ инем. Ярай, хуш-һау булып тор! Хат көтөп ҡалыусы Сапыйың!*

*15 февраль,1942 йыл".*

### ***Дүртенсе хат***

*"Һаумы, йән киҫәгем, Гөлнәзифәм! Барығыҙға ла Боғорослан ҡалаһынан хат ебәргәйнем инде. Ваҡыт булғас, тағы яҙырға булдым. Бында ла шул уҡ әҙерлек эштәре бара. Илебеҙҙең бер генә ғәскәри берекмәне лә тейешле әҙерлекһеҙ һуғышҡа индерәһе килмәй. Һәр һөнәр һалдаты үҙ һөнәрен арттырыу менән бергә, дивизия, полк, рота буйынса ла һәр һалдаттың берҙәм эш итә белеүе лә кәрәк икән. Үҙемдең Алкинола алған белемемә шикләнмәйем. Әммә һуғыш ваҡытында төрлө хәлдәр булыуы мөмкин. Быны яңыраҡ үткәрелгән учениела асыҡ күрҙек.*

*Бишенсе айға тиклем күнегеүҙәр үткәргәс, беҙҙең дивизияны Балашово ҡалаһына күсерҙеләр. Бында ла шул әҙерлек эштәре дауам итте. 18 июндә беҙҙең часҡа маршал К. Ворошилов килде. Ул учение үткәрҙе. Дивизиялағы полктар буйлап та йөрөп сыҡты, телмәр һөйләне. Мин Ворошиловты, Граждандар һуғышы геройын, бик яҡындан күрҙем. Буйға уртаса, кәүҙәгә ҡалын ғына кеше икән. Сәсе таҡыр итеп алынған. Үҙе үтә йонсоу күренде. Әммә атлап йөрөшө, хәрәкәттәре, һәр һөйләгән һүҙе ышаныслы ине. Уның менән осрашыуҙан һуң"Беҙ мотлаҡ еңәсәкбеҙ!" тигән ышаныс тағы ла нығына төштө. Ундай ҙур кеше һүҙҙәрен юҡҡа һөйләмәҫ.*

*Бына әле хат яҙам. Күңелем менән үҙемде һинең янында кеүек хис итәм. Һинең йырың ҡолаҡ төбөмдә сыңлай:*

> *Гөлнәзифә, һылыуым,*
> *Йөрөгән юлың*
> *Сәскә-гөлгә генә күмелһен...*

*Йөрәк төрөнән сыҡҡан йыр шулай онотолмайҙыр ул. Һуңғы кистә был йырҙы ауыл йәштәренә лә өйрәткәйнек. Хәтерең дәме? Әйҙә, ул, беҙҙең мөхәббәт моңо булып, ауылда яңғыраһын! Донъяла һәр кем һөйөргә, һөйөлөргә хаҡлы. Беҙҙең һөйөү күптәргә яҡты шәм кеүек булып торһон!*

> *Мөхәббәт — ул үҙе иҫке нәмә, ләкин*
> *Һәр бер йөрәк уны яңырта,*

*— тип татар шағиры Һаҙый Таҡташ юҡҡа яҙмағандыр әле. Мөхәббәтебеҙ йыры ауыл йәштәрен артабан да һөйөргә, һөйөлөргә өйрәтһен! Беҙҙең мөхәббәтебеҙ емеше булып ҡыҙыбыҙ тыуыуы тураһында яҙғайның. Ул матур булып үҫһен! Иҫән-һау булып йәшәһен! Ата-әсәһенең уны ни тиклем яратыуын тойоп йәшәһен!*

*Гөлнәзифә йәнем! Хаттарыңда ауыл яңылыҡтарын да күберәк яҙырға тырыш. Әсәйемдәр нисек йәшәп ята? Ғарифулла ла эшләгәс, үтә интекмәйҙәрҙер, моғайын. Үҙегеҙ нисек көн итәһегеҙ? Фермала ниндәй үҙгәрештәр, яңылыҡтар бар? Ғүмер буйы шунда эшләгәс, ундағы һәр үҙгәреш, яңылыҡ миңә яҡын һәм ҡәҙерле.*

*Ярай, барығыҙ ҙа хуш-һау булығыҙ! Хат көтөп ҡалыусы Сапыйың!*

*20 июнь, 1942 йыл".*

### *Бишенсе хат*

*"Һаумы әле, Гөлнәзифә бәғрем! Ауылдан, яҡындарымдан, һинән айырылғанға йылдан ашыу ваҡыт үтеп тә китте. Шул осорҙа күпме ваҡиғалар булған. Уйға сумһаң, уйылып китерһең. Иң мөһиме — беҙҙең мөхәббәтебеҙ сәскәһе булған ҡыҙыбыҙ тыуған. Оҙон ғүмерле була күрһен инде үҙе! Шундай саҡтар була: ҡанатым булһын да, осоп ҡына бар ҙа ҡыҙымды күр ине! Шундай теләк тыуа.*

*Илдә ҡанлы алыш бара. Бындай саҡтарҙа ла донъяға сабыйҙар тыуа. Тимәк, тормош дауам итә. Көнделдәрҙә өмөт ярала. Балабыҙ беҙҙән һуң да йәшәйәсәк. Ул тормошобоҙҙо дауам итәсәк. Хатта шуның өсөн генә лә йәшәү — үҙе бер бәхет бит ул!*

*Хәтереңдәме, әле бала сағыбыҙҙа уҡ бер-беребеҙҙе ярата торғайныҡ. Һин нисектер, әммә миңә шулай тойола ине. Тормош үҙ ҡырыҫлығын күпме күрһәтһә лә, беҙҙең мөхәббәтебеҙҙе ҡырау һуҡманы. Шул үлемһеҙ мөхәббәт өсөн йәшәйек әле, йәнем!*

*19 июндә беҙҙе фронтҡа ебәрҙеләр. Әлегә хат яҙмай тор. Юлда, Бобров ҡалаһына етмәҫ борон, немец самолеттары эшелонды бомбаға тотто. Беҙ вагондарҙан һикереп төшөп, ағастар араһына таралдыҡ. Эшелондың ике вагонынан һалдаттар төшөп өлгөрмәне. Бомба тура төшөп, улар һәләк булды.*

*Самолеттар киткәс, беҙҙе бер ергә йыйҙылар. Артабан юлды йәйәү дауам иттек. Воронеждан ун ике саҡрым алыҫлыҡтағы бер станцияға килеп туҡтаныҡ. Был ваҡытта Воронежда ҡаты һуғыштар бара ине. Шартлау тауыштары ишетелеп, кистәрен ул яҡтарҙа уттар балҡыуы күренеп торҙо.*

*5 июлдә 6-сы армия составында тәү тапҡыр һуғышҡа индек. 18 июлгә тиклем ҡаты һуғыштар барҙы. Дивизиябыҙ бик нык һирәгәйҙе. Һәләк булыусылар, яраланыусылар күп булды. Мин еңелсә генә яраланып алдым. Балашово ҡалаһында бер аҙна госпиталдә ятып сыҡтым.*

*Воронеж өсөн һуғыш бик ҡаты булды. Һәр метр ергә тигәндәй бомбалар төшөп ярылды. Һуғыш барғанда ла, бер аҙ туҡтап торғанда ла минең эш билдәле: яу яланынан яралыларҙы алып сығам. Тәүге ярҙамды күрһәтәм дә, обоздарға тейәп, ялан госпиталенә ебәрәм. Ҡалғаны — уларҙың эше. Үлектәрҙе йыйып-күмеүсе махсус кешеләр бар. Бына шулай ул һалдат Сапый эшмәкәрлеге.*

*Бер саҡ мине взвод командиры саҡырҙы. Яраланған икән. Уның окобына һикереп төшөүем булды, мин ятҡан окопҡа бомба төшөп ярылды. Тоғомда һаҡланған бөтә яҙмаларым күккә осто. Шул хаҡта взвод командирына әйткәйнем, ул эттән алып эткә һалып әрләне лә ташланы: "Дурак, тере ҡалғаныңа ҡыуан! Иҫән булһаң, күп яҙырһың әле", — ти.*

*Бына шулай минең хәлдәр. Ана, мине тағы саҡыралар. Был хаттың адресын яҙып, почтальонға бирәм дә үҙем тағы бурысымды үтәргә китәм.*

*20 июль, 1942 йыл».*

**Ошоноң менән Сафиулла Афзаловтың фани донъялағы ғүмере өҙөлә. 1942 йылдың 21 июлендә хәрби часынан ҡатынына ебәрелгән хатта «Ваш муж героически погиб во время боя» тигән юлдар ғына була.**

**Ишмөхәмәт ШАРАПОВ.**

# ҺУҒЫШ ОСОРОНДА БАШҠОРТОСТАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ

Гитлер Германияһының мәкерле һөжүме совет халҡын ҡуҙғытып ебәрҙе. Бер көн эсендә барыһы ла үҙгәрҙе: ирҙәр ҡырыҫланды, үҫмерҙәр өлкәнәйеп киткәндәй булды, ә балалар тынып ҡалды. Оло йәштәгеләр Германия менән 1914 йылда башланған һуғышты иҫенә төшөрҙө.

22 июндә үк ирҙәрҙе хәрби комиссариаттарға саҡыра башланылар. Йәштәр фронтҡа ашыҡты, сөнки улар Ҡыҙыл Армияның дошманды бик тиҙ ҡыйратасағына, тыуған яҡтарына еңеү менән ҡайтасаҡтарына шикләнмәне. Был һуғыш алды йылдарындағы пропаганда йоғонтоһо ине. Беренсе Донъя һуғышын үҙ күҙҙәре менән күргән ҡарттар ғына шик белдерҙе: немецты анһат ҡына еңеү мөмкин түгел.

Һуғыш ауылдағы хәлдәрҙе ныҡ ҡатмарлаштырҙы. Унда йәшәгән халыҡ ҡапыл кәмене: ирҙәрҙе фронтҡа оҙатһалар, йәш ҡыҙҙар сәнәғәт предприятиеларына, төҙөлөштәргә алынды. Тракторҙар, автомашиналар һәм яҡшы аттарҙың күпселеге һуғыш ихтыяждарына йүнәлтелде. 1941 йылда ғына республиканан Ҡыҙыл Армияға 50 меңдән ашыу менге ат, 10 меңдән күберәк трактор һәм автомобиль, 10 меңләп ылау ебәрелде. Ауыл йөк ташыу көсөнән дә мәхрүм ителде.

Һуғыш бик тиҙ, быға саҡлы күрелмәгән ҡаты сараларҙы ғәмәлгә ашырыуҙы талап итте. Партия һәм совет органдары ауыл хужалығы өҫтөнән контролде көсәйтте: 1941 йылдың ноябрендә МТС һәм совхоздарҙың сәйәси бүлектәре яңынан тергеҙелде. Именлек органдары менән бер рәттән, улар урындағы халыҡтың сәйәси кәйефе, хеҙмәт тәртибенең үтәлеше һ.б. өсөн яуап бирергә тейеш булды. Һуғыш шарттарында ауыл хужалығын үҙгәртеп ҡороуҙың төп маҡсаты булып халыҡтың мөмкин тиклем күберәк өлөшөн хеҙмәткә йәлеп итеү, хеҙмәт көсөргәнешлеген арттырыу торҙо. Колхоздарҙа эш көндәре бер ярым тапҡырға арттырылып, 120-гә етте. 12 — 16 йәштәрҙәге үҫмерҙәр өсөн дә ошондай мотлаҡ норма индерелде. Бер ниндәй сәбәпһеҙ хеҙмәт көнө минимумын тултырмағандар мәхкәмәгә тарттырылырға тейеш ине. Ошо йәштәге кешеләрҙе лә хеҙмәткә йәлеп иттеләр.

Төп ауырлыҡ ҡатын-ҡыҙ иңенә төштө. Быға тиклем ирҙәрҙеке һаналған барлыҡ эштәрҙе хәҙер улар атҡарырға мәжбүр булды. Мәсетле районының «Комсомолец» колхозынан хеҙмәт ветераны Х. Хәбибов былай тип иҫкә ала: «1942 йылдан башлап ер эшкәртеү, иген сәсеү, баҫыуҙарҙы ҡый үләндәренән таҙартыу, уңышты йыйып алыу, мал аҙығы әҙерләү, фермаларҙа мал ҡарау, урман ҡырҡыу, ат егеп 96 саҡрымдағы Сулея станцияһынан яғыулыҡ ташыу ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәр иңенә төштө». Һуғыштың тәүге айҙарында уҡ илдә «Ҡатын-ҡыҙ — тракторҙарға!» тигән саҡырыу таратылып, МТС-тарҙа

ҡатын-ҡыҙҙарҙан тракторсылар әҙерләүсе ҡыҫҡа ваҡытлы курстар асыла. Унда уҡыу ваҡыты һуғышҡа тиклемге менән сағыштырғанда дүрт-биш тапҡырға ҡыҫҡара. Тракторсыларҙы, мәҫәлән, дүрт-биш ай урынына — 25, ә комбайнсыларҙы биш-алты ай урынына 35 көндә әҙерләп сығаралар. Әлбиттә, бирелгән белем өҫтән-мөҫтән генә булып, артабан трактор йәки комбайнды эшләткәндә үҙенең эҙемтәләрен күрһәтмәй ҡалмай. Өҫтәүенә, ул замандарҙағы техника ла бик күп физик көс талап итә.

1941 йыл урағына тиклем курстарҙа 13 меңдән ашыу тракторсы, комбайнсы һәм уларҙың ярҙамсылары әҙерләп сығарыла. 1943 йылдың апрелендә Башҡортостан МТС-тарында ғына 4,5 мең тракторсы ҡатын-ҡыҙ, 1,2 мең комбайнсы һәм 1,7 меңдән ашыу комбайнсы ярҙамсылары эшләй; 9,3 меңдән ашыуы курстарҙа уҡыуҙы тамамлай. 9 июлдә Күгәрсен районының Мораҡ МТС-ында ойошторолған курстарҙа 137 ҡатын-ҡыҙ белем алып сыға. Г. Амангилдина, Г. Ҡайсарова, С. Сәйетҡолова һ.б. һуғыш тамамланғансы тракторҙа, комбайнда эшләй. 1945 йылда ла тракторсыларҙың — 60, комбайнсы һәм уларҙың ярҙамсыларының 48 проценты ҡатын-ҡыҙҙарҙан була.

Һуғыш барышында ауыл хужалығына административ баҫым көсәйә, бойороҡ-күрһәтмә төшөрөү системаһы нығый. ВКП(б) район комитеттарына колхоз рәйестәрен үҙ белдеге менән тәғәйенләү һәм алып ташлау хоҡуғы бирелә. Ҡасан, нимә һәм күпме сәсергә, ҡасан йыйып алырға — барыһы ла бойороҡ буйынса башҡарыла. Әлбиттә, райкомдарҙың төп бурысы булып колхоздарҙан мөмкин тиклем күберәк продукция алыу һанала. Шуға күрә колхоздарҙың матди-техник ресурстар, эшсе көс менән тәьмин ителеше, райондарҙың тәбиғәт-климат үҙенсәлектәре иҫәпкә алынмай. Колхоз һәм совхоздарға үтәлеүе мөмкин булмаған заданиелар төшөрөлә. Райондарҙа ВКП(б) район комитеттары, район Советы башҡарма комитеттары һәм ВЛКСМ район комитеттары вәкилдәре ҡатнашлығында икмәк йыйыусы «тройка»лар барлыҡҡа килә. Был кешеләргә ураҡ һәм дәүләткә иген тапшырыу барышын күҙәтеү, мәжбүр итеү буйынса теләһә ниндәй саралар күреү хоҡуғы бирелә.

1941 йылдың көҙөндә республика баҫыуҙарында яҡшы уңыш өлгөрөп, уны юғалтыуһыҙ йыйып алыу бурысы ҡуйыла. Еңеү яҙмышы, әйтергә кәрәк, яу ҡырҙарында ғына түгел, иген баҫыуында ла хәл ителә. Уңышты йыйыуға эшләрлек хәле булған барлыҡ ҡатын-ҡыҙ, бала-саға һәм ҡарт-ҡоро йәлеп ителә. Ҡала халҡы ла ҙур ярҙам күрһәтә. Мәҫәлән, көҙөн предприятиеларҙың 45 меңләп эшсеһе һәм хеҙмәткәре колхоз-совхоздарғаураҡта булышырға ебәрелә. Шулай уҡ барлыҡ студенттар, юғары һәм юғары урта уҡыу йорттары уҡытыусылары ла уңыш йыйыуҙа ҡатнашып, уҡыуҙар 15 октябрҙә генә башланыр була. (Һуғыш кеүек ғәҙәттән тыш шарттарҙа барлыҡҡа килгән был традиция уҙған быуаттың 90-сы йылдарына тиклем һуҙылды.) Ҡайһы бер колхоздарҙа, көнө-төнө эшләп, ураҡты октябрь баштарына уҡ тамамлайҙар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, райондарҙың байтағында игендәрҙе урып-һуғыу декабрь аҙаҡтарынаса бара. Шуға ҡарамаҫтан, 1941 йыл уңышының 52,6 миллион бот — был һуғышҡа тиклемгенән байтаҡҡа күберәк — дәүләткә тапшырыла.

Техника һәм эшсе ҡулдар етешмәүгә ҡарамаҫтан, сәсеү майҙандарын киңәйтергә ҡарар ителә. Был, әлбиттә, дөрөҫ ҡараш булмай, ғәйәт күп көс түгеү иҫәбенә 1942 йылда колхоздар сәсеүлектәрҙе 336,4 мең гектарға киңәйтә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сәсеүлектәрҙең бер өлөшө ҡоролоҡтан юҡҡа

сыға, байтағында ашлыҡ йыйылмай ҡала. Һөҙөмтәлә иген уңышы 1941 йылға ҡарағанда 2,6 тапҡырға кәмерәк булып сыға. Шуға күрә башҡа йылдарҙа сәсеүлектәр майҙаны киңәйтелмәй, киреһенсә, кәмеүгә бара. Йыйып өлгөрмәү арҡаһында уңыштың бер өлөшө ҡар аҫтында ятып ҡала. Мәҫәлән, 1943 йылда был майҙандар — 230 мең, 1944 йылда 177 мең гектар тәшкил итә. Иген һәм ҡуҙаҡлы культураларҙың уңышы ла ҡырҡа кәмей. Мәҫәлән, 1937 — 1940 йылдарҙа ул гектарынан уртаса 8,3 центнер йыйып алынһа, 1941 — 1944 йылдарҙа 4,5 центнерҙан артмай. Һөҙөмтәлә игендең тулайым йыйымы, уны дәүләткә тапшырыу кәмей, йыш ҡына иген тапшырыу планы сәсеү орлоғо иҫәбенә тултырыла. Шул арҡала яҙын колхоздар сәсергә орлоҡ һорап дәүләткә мөрәжәғәт итергә мәжбүр була. Хөкүмәт, билдәле, баш тартмай, ләкин сәсеү орлоғон яҡын-тирәләге тимер юл станцияһынан бәләкәй саналарға һалып йәки арҡаға йөкмәп ташыуҙың барлыҡ ауырлығы ҡатын-ҡыҙ елкәһенә төшә. Йыш ҡына иген ташыу пландары колхозсыларҙың эш көнөнә бирелергә тейешле ашлыҡ иҫәбенә лә үтәлә торған булған.

Хеҙмәт көндәренә бирелә торған иген дә һуғышҡа тиклемгенән кәметелә. Мәҫәлән, 1940 йылда бер эш көнөнә 1,9 килограмм ашлыҡ һәм 40 тин түләнһә, 1942 йылда — 307 грамм ашлыҡ һәм 41 тин, 1943 йылда — 387 грамм ашлыҡ һәм 47 тин, 1944 йылда — 385 грамм ашлыҡ һәм 34 тин, 1945 йылда 723 грамм ашлыҡ һәм 26 тин түләнгән. Ләкин был уртаса күрһәткестәр артында йәшеренгән ҙур айырманы ла күрергә мөмкин. 1945 йылда бер эш көнөнә 100 грамға тиклем ашлыҡ биргән колхоздар 128 булһа, 101 — 300 грамм биреүселәре — 387, 500 грамға тиклем биреүселәре 717 һ.б. иҫәпләнгән. Эш көнөнә бер грамм ашлыҡ бирмәгән колхоздар ҙа булған. Фронтҡа яҙған хаттарҙа бындай хәлдең йылдар буйы дауам итеүе хаҡында ла әйтелә. Колхозда эшләгән ирҙәргә күпме түләнгән һуң? 1943 йылда, мәҫәлән, ирҙәрҙең күпселеге 400 көн эшләгән. Был уларға 154 килограмм иген һәм 188 һум эш хаҡы түләнергә тейешлекте аңлата. Йыл дауамында күптәр аванс алырға мәжбүр булып, йыл аҙағында уларға бер тин дә ҡалмай, ҡайһы берәүҙәренең хатта бурыстары барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, 1945 йылда 214 мең колхозсының үҙ хужалыҡтарына 278 мең центнер ашлыҡ бирәсәге булған.

1943 йылдың ноябренән ҡалаларҙа эшселәрҙең карточкаһы буйынса 500 — 700 грамм, хеҙмәткәрҙәргә 400 — 450 грамм, балаларға, ҡараусыһыҙ ҡалғандарға 300 грамм икмәк тейеш булған. 1945 йылда сәнәғәттә уртаса айлыҡ эш хаҡы 470 һумға еткән. Карточка буйынса икмәкте 75 тиндән алып 1,15 һумға тиклем һатып алыу мөмкинлеге барлыҡҡа килгән. Күренеүенсә, колхозсыларҙы икенсе сортлы кешеләргә әүерелдергәндәр. Ҡыйғы районына китеп барған Зыя Нуриев (КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының элекке беренсе секретары, артабан СССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары — **Р. Д.**) күргәндәре тураһында түбәндәгеләрҙе яҙа: «Юлда бер нисә мәйет ятҡанын күреп, беҙ хайран ҡалдыҡ. Күрәһең, был кешеләр хәлдән тайып йығылған да туңып үлгән». Был хәл 1943 йылдың декабрендә була.

1944 йылдың ҡышы ауыл халҡы өсөн иң ауыры булып сыға. 1944 йылдың мартында ВКП(б) Үҙәк Комитеты секретары Г. М. Маленков өсөн әҙерләнгән «Белешмә»лә былай тип хәбәр ителә: «Урал аръяғында йәшәүсе башҡорт ауылдары халҡы ҡоролоҡтан айырыуса яфа сигә, сөнки уларҙа картуф һәм йәшелсә үҫтереү насар таралған. Күптәр хәлһеҙлектән саҡ ҡуҙғалып йөрөй,

аслыҡтан үлеүселәр ҙә байтаҡ. Матрай районында 1454 кешене эсенә алған 360 хужалыҡ аҙыҡһыҙ ҡалған. Даими рәүештә ас йөрөү арҡаһында кешеләр шешенә һәм ундайҙарҙың иҫәбе арта. Районда 18 кеше астан үлгән. Хәйбулла районында ла колхозсыларҙың аслыҡтан шешенеү осраҡтары күҙәтелә. 32 колхозда кешеләр аслыҡтан шешенһә, һигеҙендә астан үлеүселәр бар. Колхозсылар һуңғы малын һуя, үлгән мал итен ашаусылар ҙа бар. Матрай районында 62 колхозсы һуңғы һыйырын һуйып, ғаиләләрен һөт аҙыҡтарынан мәхрүм иткән».

БАССР Эске Эштәр халыҡ комиссариатының ВКП(б) өлкә комитеты секретары С. Д. Игнатьевҡа 1944 йылдың апрелендәге хәбәренән: «Балаҡатай районының Яңы Масҡары ауыл Советында йүкә ҡабығы һәм имән сәтләүегенән тартылған ондо ашайҙар. Үтәш, Айҙаҡай, Яныбай һәм Урғалы ауыл Советтарында ла шундай уҡ хәл. Районда 418 ғаилә (1689 кеше) бик ауыр хәлдә. Ғинуар — мартта 35 кеше вафат булды». Эске эштәр халыҡ комиссарының Өлкә комитетҡа шул уҡ йылдың 3 апрелендәге хәбәрендә әйтелеүенсә, Күгәрсен районының Калинин исемендәге, «Шишмә», «Ҡыҙыл йондоҙ», «Көнгәк», Ворошилов исемендәге, Хоҙайбирҙин исемендәге артелдәрендәге колхозсыларҙың ауыр хәлдә ҡалыуы, яугирҙарҙың балалары аслыҡтан һәләк булыуы хаҡында әйтелә. Уларға хөкүмәт тарафынан ярҙам күрһәтелә. Мәҫәлән, Хәйбулла районына — 15,2 тонна иген һәм 4 тонна ашлыҡ ҡалдығы, Балаҡатай районына — 10, Мәсетлегә 19,6 тонна иген бүлеп бирелә. Ярҙам иң элек фронтовик ғаиләләренә, һуңғы сиратта башҡаларға күрһәтелә. Аслыҡ тураһында фронтҡа яҙылған хаттарҙан да уҡырға мөмкин булған. Учалы районы Ҡоҙаш ауылынан ебәрелгән бер хатта түбәндәге юлдар бар: «Тормошобоҙ бик ауыр, эш көнөнә бер грамм да иген бирмәнеләр. Колхоз ярҙам итергә уйламай ҙа. Уның урынына, колхозсыларҙың малдарын тартып алалар. Колхоз рәйесе беҙҙе талап байый, үҙенә өй һалдыра, мөлкәт һатып ала. Улар байлыҡ туплай, ә беҙгә астан үлергә генә ҡала». Ғафури районынан бер уҡытыусы: «Кешеләр бер-берећен ашай. Беҙ ҙә яфа сигәбеҙ, паекты 6 килограмм ғына бирәләр. Балаларға ни ашатырға белеп булмай. Асыҡтыра, түҙер хәл ҡалманы», — тип яҙа. Был хат Илеш районынан: «Беҙҙә бик насар, ашарға бер ни ҙә ҡалманы... Биш йыл инде эш көнөнә бер грамм да ашлыҡ алған юҡ. Беҙ генә ас түгел, барыһы ла аслыҡтан яфа сигә. Кешеләр аслыҡтан шешенә, бер нәмә лә ҡалманы, һатып бөтөрөлдө».

Күптәр өсөн төп аҙыҡ булып картуф иҫәпләнә. Ул элеккегә ҡарағанда 2,6 тапҡырға күберәк ашала. 1944 йылда, бер кешегә иҫәпләгәндә, көнөнә 170 грамм иген аҙыҡтары, 100 грамм картуф, 431 грамм һөт, 39 грамм йәшелсә тотонолған. Ҡуҙғалаҡ, алабута, кесерткән, балтырған үләндәрен дә кешеләр күпләп ашаған. Ҡышлаған картуф һәм иген башағы менән туҡланыу арҡаһында, күптәр ангина менән ауырып үлгән. Бер хатта хәбәр ителеүенсә, ауылда хатта бесәй менән эттәрҙе лә ашап бөтөргәндәр. Күптәрҙе шәхси хужалығында етештерелгән аҙыҡ-түлек кенә ҡотҡарып ҡала. Крәҫтиән һалымын да ошонда эшләп табылған сығанаҡтан түләргә мәжбүр була. Һуғыш ихтыяждары ярҙамсы хужалыҡты төп йәшәү сығанағына әйләндерә. Колхоздар был тармаҡҡа ярҙамды бөтөнләй күрһәтмәй. Ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн үҙ хужалығына күберәк көс һалыусыларҙы элеккесә хурлап, ярҙамсы хужалыҡҡа һалымдарҙы арттырғандар.

1942 йылдың февралендә колхозға ит тапшырыу заданиеһы ла күтәрелә. 1943 йылдың июнендә ауыл хужалығы һалымы 1,5 тапҡырға арта. 1942

йылда, бер йортҡа иҫәпләгәндә, һалым 137 һумдан булһа, 1943 йылда 694 һумға еткерелә. Картуф үҫтергәндәр дәүләткә — картуф, һыйыр аҫрағандар — һөт, һарыҡ-кәзәһе булғандар йөн, тире тапшырырға бурыслы була. Ит, йомортҡа, тирене кешеләр мал йәки ҡош-ҡорт аҫрамаған сүрәттә лә тапшырырға тейеш тип ҡарала. Һуғышта булғандарҙың ғаиләләренә, эшкә яраҡһыҙҙарға ниндәйҙер ташламалар бирелә.

1942 йылда крәҫтиәндәр өсөн иң ауыры — хәрби һалым алына башлай. Уны 18 йәше тулған барлыҡ граждандар ҙа түләргә мәжбүр ителә. Иген культураларының уңышына, ярҙамсы хужалыҡтарҙың ҙурлығына, мал иҫәбенә ҡарап, районсдар, ауыл Советтары һәм ауылдар буйлап был һалым күләме төрләсә: 175 — 600 һум булған. Йыл һайын үткәрелгән хәрби заемдарға яҙылыу хаҡы ла артҡан. Көслө административ баҫым аҫтында үткәрелгән был кампания ғәмәлдә һалымдан бер яғы менән дә айырылмаған. Һуғышҡа тиклемге биш йылда Балаҡатай районы халҡы облигацияларҙы 2,4 миллион һумлыҡ һатып алһа, 1941 — 1945 йылдарҙа иһә был һан 9,2 миллион һумға еткән.

Сағыштырыу өсөн 1942 йылғы һалымдар һәм түләүҙәрҙең ауыл ерендә нисек алыныуын ҡарап үтәйек. Хәрби һалым — 142 миллион, ауыл хужалығы һалымы — 33 миллион 807 мең, үҙ-үҙеңә һалым (самообложение) — 8 миллион 67 мең, мәҙәниәт өсөн йыйымдар — 6 миллион 797 мең, буйҙаҡтар өсөн һалым 2,5 миллион һум тәшкил иткән. Заемдарҙан 134 миллион 280 мең һум йыйылған. Күптәр һалымдарҙы ваҡытында түләй алмаған. Тикшеренеүсе Б. С. Дәүләтбаев шундай миҫал килтерә: Мәсетле районының Оло Аҡа ауылы кешеһе Б. Мостафина заемдар буйынса — 100, ауыл хужалығы һалымы буйынса — 297, хәрби һалым буйынса 400 һум бурысҡа батҡан. Бынан тыш, ҡатын дәүләткә 40 килограмм ит, 80 литр һөт, 70 килограмм картуф, 100 дана йомортҡа тапшырырға тейеш булған. Ундай граждандар «недоимкасылар» исемлегенә индерелгән. Мөмкинселеге булмау сәбәпле, Мостафина дәүләткә бурысын ҡаплатыуҙан баш тартҡас, ауыл Советы рәйесе һәм һалым агенты уның берҙән-бер һарығын тартып алыу тураһында ҡарар сығара. Ауыл ерендә ошоға оҡшаш миҫалдарҙы ул йылдарҙа бик күп осратырға мөмкин булған.

Беренсе Донъя һуғышы осоронда иһә ил ундай хәлгә барып етмәгән. 1943-1944 йылдарҙағы хәлде 1921-1922 йылдарҙың ҡот осҡос аслығы менән генә сағыштырырға мөмкин. Һалым ауырлығын тик Сталиндың үлеменән һуң — 1953 йылда ғына кәметә алғандар. Ләкин хәйерселәрсә ғүмер һөрөү колхозсыларҙы дөйөм хужалыҡта бушлай эшләүҙән азат итә алмаған. Урып-йыйыу осоронда эш көнө 14 —16 сәғәткә һуҙылған. Ас ҡатын-ҡыҙ ашлыҡты ураҡ менән урып, көлтәләргә бәйләгәндән һуң ат менән ырҙын табағына ташығас, ул ашлыҡты һуғыу ҡыш буйына туҡталмаған. Ауырлыҡтар көсәйеүгә ҡарамаҫтан, эш көндәре артҡан. 1944 йылда хеҙмәт йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың өстән бер өлөшөнөң йыллыҡ эш көнө 201-ҙән алып 400-гә еткән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 7 проценты иһә 400 көндән дә күберәк эшләгән. Предприятиеларҙа норманы арттырып үтәгән эшселәргә өҫтәмә паек биреү ҡаралһа, колхозсылар был турала хыял ғына итә алған.

1943 йылда хеҙмәт көнө минимумын (ул 120 көн ҡаралған) тултырмаған ҡатын-ҡыҙҙар ике тапҡырға аҙайһа, 201 — 300 көн эшләүселәр — бер ярым, 301 — 400 көн эшләгәндәр — ике, 400 көндән дә күберәк эшләүселәр — ике ярым тапҡырға күбәйгән. Был мәғлүмәттәр ярым ас ҡатындарҙың

ҡаһарманлығы тураһында һөйләй. Ҡатын-ҡыҙҙарға баҫыуҙар һәм фермаларҙа ғына түгел, сәнәғәт төҙөлөштәрендә лә бил бөгөргә тура килгән. Һуғыш йылдарында йәш ҡыҙҙарҙың хеҙмәт армияһына алыныуы тураһында йәмәғәтселек бик аҙ белә. Һәр ауылдан бер нисә ҡыҙҙы, ихтыярына ҡарамай, төҙөлөштәргә ебәргәндәр. Балаҡатай районының Айҙаҡай ауылынан, мәҫәлән, хеҙмәт армияһына ете ҡыҙ алынған. Улар Молотов (хәҙерге Пермь крайы), Силәбе өлкәләрендә соҡорҙар ҡаҙый, карьерҙан таш сығара. Уларҙың көнлөк аҙығы 900 грамм икмәк һәм кәбеҫтә һурпаһы булған. Яҙын һәм йәйен балтырған менән кесерткәндән аш бешергәндәр.

Мәрфуға Фазлыева — ошондай төҙөлөштәрҙә бил бөккән ҡыҙҙарҙың береһе. 1942 йылда Силәбе яҡтарына эшкә ебәрелгәндә уға 15 йәш тә тулмаған була. Ҡыҙ төҙөлөштә эшләй. Хеҙмәт һәм туҡланыу шарттары шул тиклем ауыр — Мәрфуға унан ҡасырға ҡарар итә. Тотоп алһалар, төрмәгә ултыртасаҡтарын белһә лә, ҡыҙ тәүәккәлләй. 1944 йылдың июнендә ул йөк поезында Урғалы станцияһына килеп етә. Бирҙәүеш станцияһында уҡ юлбаҫарҙар ҡыҙҙы талап, хатта туҙып бөткән аяҡ кейемдәрен дә һалдырып ала. Шпалдар буйлап атлап Мәрфуға Өнкөрҙө станцияһына килә. Тыуған йортҡа тиклем тағы ла 100 саҡрым үтергә кәрәк була әле. Өйҙә ҡыҙҙы милиционер көтөп тора. Мәрфуғаны һаҡ аҫтына алалар, ләкин 18 көндән һуң ҡайтарып ебәрәләр. Колхозда ул һәр төрлө ирҙәр эшен башҡара. 1946 йылда Мәрфуға Фазлыеваны «Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фиҙакәр хеҙмәте өсөн» миҙалы менән наградлайҙар.

Һуғыш алдынан һәм һуғыш йылдарында ла ауыл үҫмерҙәрен ФЗО (фабрика-завод уҡыуы) мәктәптәренә ебәреү ғәмәле индерелә. Был «СССР-ҙың дәүләт хеҙмәте резервтары» тигән указға ярашлы башҡарыла. Нимәһе менәндер был ғәмәл батша Рәсәйендәге рекрутҡа алыуҙы хәтерләтә. Указ буйынса, колхоз рәйестәре йыл һайын 14-15 йәштәге ике кешене — һөнәрселек һәм тимер юл училищеларына, һәр йөҙ колхозсы иҫәбенә 16-17 йәшлек бер кешене ФЗО-ға ебәрергә тейеш була. Ундай мәктәптәрҙә уҡыу бик ауыр бара. Үҫмерҙәр көнөнә 12 сәғәт уҡырға, ярым ас хәлдә йөрөргә, ҡаты тәртипкә күнергә теләмәй, ҡасалар, ундайҙар шунда уҡ һуғышҡа оҙатылған.

Шулай итеп, дошманды еңеү халыҡ елкәһенә ҡот осҡос йөк, мәңге онотолмаҫ ғазап булып ята. Ләкин дәүләт тыл хеҙмәтсәндәренең фиҙакәрлеген барыбер тейешенсә баһаламай. Һуғыштан һуң да ауылда тормош оҙаҡ йылдар яҡшырмай. Еңеү ауылдың да, ҡаланың да сәскә атыуына килтермәй. Һуғыштан ҡайтҡан һалдат һәм офицерҙар тыныс шарттарҙа тормоштоң нисек буласағын күҙ алдына ла килтерә алмай. Күптәр, һуғышта һәм тылда ҡаһарманлыҡ күрһәтеү бәрәбәренә колхоздар бөтөрөлөр, тигән өмөт менән йәшәй. ВКП(б) Үҙәк Комитетына ошондай үтенес менән хаттар яҙыла. Әммә бер ни ҙә үҙгәрмәй: ауылда фәҡирлек ҡот осҡос дәрәжәлә һаҡлана. Ҡайһы бер тыл хеҙмәткәрҙәренә генә ас балалары уйынсыҡ урынына уйнатырға яраған «Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы фиҙакәр хеҙмәте өсөн» миҙалы эләгә.

**Рафаэль ДӘҮЛӘТШИН,**
**тарих фәндәре докторы.**

# ТЫНЫС БУЛҺЫН ДОНЪЯЛАР

Ил өҫтөнә дошман ябырылғанда, беҙ 13-14 йәшлек балалар ғына инек. Афәттең ҡара шәүләһе беҙҙең сибек кенә иңдәргә лә төштө. Ни тиклем ҡыйынлыҡтар килһә лә, уҡырға ынтылдыҡ. Был үҙе үк дошмандың еңеләсәгенә ышаныу ине.

...1942 йыл. Беҙ Силәбе өлкәһе Арғаяш педагогия училищеһының беренсе курсында уҡып йөрөйбөҙ. Курста күберәк малайҙар, ике төркөм — «А» һәм «Б» кластарында һикһәндән артыҡ уҡыусы иҫәпләнә. Комсомолға ла ҡабул иттеләр. Һәр кемгә йәмәғәт эштәрендә файҙа килтерерлек йөкләмәләр бирелде. Мин, мәҫәлән, урта мәктәпкә пионер вожатый булып билдәләндем. Фронтовик ҡатыны Нина Козловаға шефлыҡ итеү ҙә миңә йөкмәтелде. Ҡатын инвалид, өйҙә стенаға таянып, саҡ-саҡ атлап йөрөй. Өс йәшлек ҡыҙы бар. Дәрестән һуң мин улар янына килеп, һыу ташыйым, утын ҡырҡып, өйҙө яғып йылытам, башҡа эштәр ҙә башҡарам. Хәл тиҙ бөтә, сөнки ҡарынға тәүлегенә 400 грамм арыш икмәге, ҡайнаған һыуҙан башҡа бер ни ҙә эләкмәй.

Арғаяш — ҙур станция, бер-бер артлы поездар үтеп тора. Һәр көн яралы һалдаттарҙы, шул иҫәптән ауыр яралыларын да, ошондағы госпиталгә урынлаштыралар. Беҙҙең училище госпиталгә шефлыҡ итә. Ғөмүмән, беҙҙе хәрби комиссариатҡа беркетеп үк ҡуйғандар. Вагондарҙан яралыларҙы бушатырға кәрәк булһа, дәрестәр туҡталып тора. Беҙҙе станцияға алып киләләр. 10 — 15 минут эсендә яралыларҙы вагондарҙан сығарып өлгөрөргә тейешбеҙ. Унда күргәндәрҙе һөйләп аңлатыуы ла ҡыйын. Яралыларҙың башы, күҙе, тәне бинт менән уралған, уҡмашып ҡатҡан ҡан... Кемдеңдер аяғы, ҡулы өҙөлгән, уларҙың ғазаплы ыңғырашыуҙары йөрәкте өҙгөләй. Бер нисә кеше ауыр яралыны носилкаға һалып, тиҙерәк госпиталгә йүгерәбеҙ. Уларға гәзит-журналдар ташыйбыҙ, туғандарына хаттар яҙабыҙ. Бынан тыш, госпиталдә концерт менән сығыш яһарға ла өлгөрәбеҙ. «Йылы һүҙ — йән аҙығы» тигәндәй, концерттарҙы көтөп алалар.

Бер саҡ мин госпиталдә күрше Дәрбиш ауылынан Шәрәфетдин ағайҙы осраттым. Тәүҙә ауылдашым мине танымайыраҡ торҙо.

— Бәй, һеңлем, ҙур үҫеп киткәнһең дә, танырлыҡ та түгел шул, — тине бер ҡулын муйынына аҫып ҡуйған Шәрәфетдин ағай. Ауыл хәлдәрен, ғаиләһен һорашты ла:

— Еңгәң минең бында икәнемде белмәй, мин кисә генә килдем, — тине.

— Кисә яралыларҙы беҙ ҡаршы алдыҡ, — тинем. — Һеҙҙе күрмәнем, күп инеләр шул.

— Ә минең ярам ҡулда ғына бит. — Ауылдашым ҡулына ымланы. — Үҙ аяғым менән килдем.

Бер айҙан ауылдашым яңынан һуғышҡа китте, ләкин әйләнеп ҡайта алманы, дүрт балаһы етем ҡалды.

Педучилищела ла беҙҙең иптәштәр көндән-көн кәмей. Көн һайын егеттәребеҙҙе хәрби комиссариат саҡырта, беҙ оҙатып торабыҙ. Бойороҡ: «Иртәнге сәғәт 9-ға килергә, киске поезға әҙер торорға! Үҙең менән кружка, ҡалаҡ, энә менән еп, өс көнлөк аҙыҡ-түлек алырға!» Ул көндө беҙ бер көнлөк карточканы йыйып, икмәк алып, кластан нисә кеше китһә, шуларға бүлеп һалып ебәрәбеҙ. Ул көн беҙҙең тамаҡҡа ризыҡ эләкмәй. Бер кем дә тауыш сығармай. Ни эшләйһең? Башҡа сара юҡ бит. Уҡыу йылы башында уҡ ике кластан бер генә класлыҡ кеше ҡалдыҡ. Арала ике генә малай, улар ҙа ауырыу.

Беҙҙе ағас йортта уҡыталар. 1937 йылда педагогия училищеһы ике ҡатлы кирбес йортта урынлашҡайны. Һуғыш башланғас, уны йыраҡ тылдағы госпиталь иттеләр. Ауыр яралылар өсөн ойошторолған госпиталь ине ул.

Ғөмүмән, йәшәү бик ауыр мәл. Балалар йортонда тәрбиәләнгән Сабира менән мин госпиталдән эш белешеп, унда санитаркалар булып урынлаштыҡ. Дәрестәрҙән һуң билдәле сәғәттәрҙә килеп эшләп китәбеҙ, ауырлыҡты еңергә кәрәк ине...

1945 йылда һуғыш тамамланды. Беҙ ҙә, имтихандар тапшырып, дипломлы уҡытыусылар булдыҡ. Һуғышта ҡалған педагогтарға алмашҡа килдек. Һуғыш ваҡытында күп мәктәптәр ябылғайны, улар яңынан асылды.

...1945 йылдың 1 сентябре. Парта артына ярым яланғас, аслы-туҡлы, яланаяҡ балалар килеп ултырҙы. Мәктәптә бер ни ҙә: аҡбур ҙа, китап та, дәфтәр ҙә, ҡәләм дә, ҡара ла юҡ. 1946 йылдың февралендә СССР Юғары Советына һайлауҙар үтте. Унда мин һайлау участкаһы комиссияһының секретары булып ҡатнаштым. Ауылда йәштәрҙе ойоштороу буйынса күп эшләргә тура килде. Һалдаттар әле һуғыштан ҡайтып бөтмәгән, шуға күрә ауылдағы, райондағы бөтә эштәрҙе лә беҙгә башҡарырға кәрәк ине. Һайлау уңышлы үтте.

Ул ваҡытта ауылдарҙа кино ла, радио ла юҡ. Байрам икән, йәмәғәт эштәрен башҡарыу беҙгә, йәштәргә, йөкмәтелә. Район үҙәгендә лә осрашыуҙар ойошторабыҙ. Бер көн шулай район үҙәгенең ҙур залында фронтовиктар менән осрашыуға килдем. Бер таныш йөҙ күреп, янына барҙым. Курсташым Ғәлимйән ине ул. Күрешергә ҡулымды һуҙҙым. Тик уның бер ҡулы юҡ, ә икенсеһе бармаҡһыҙ икән.

— Бына шулай, класташ,— тине ул әкрен генә. — Һуғышҡа киткәндә, ошондай хәлдә ҡайтырбыҙ, тип уйламағайныҡ... Ни эшләйһең, һуғыш ҡорбанһыҙ булмай... Иң мөһиме — яуыз дошманды дөмөктөрҙөк. Тыуған яҡтарыма ҡайтыуыма шатмын, — тине ул. — Күп егеттәребеҙ яу ҡырында ятып ҡалды. Уҡытыусыларҙан Зәки ағай Бәширов, Зөфәр Насиров, Әлибаев, Зөфәр Ҡормашев, Ғәфүр ағай Сәфәров, Һиҙиәт ағай Һибәтуллин, класташтарҙан Сәлмән, Заһиҙулла, Мөхибулла һәм башҡалар күҙ алдымда юҡ булдылар...

1957 йылда мин ситтән тороп Өфө педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамланым. 30 йыл уҡытыусы булып эшләнем. 1975 — 1989 йылдарҙа ауыл Советы рәйесе булып эшләргә лә тура килде. Артабан Өфөгә күсеп, һигеҙ йыл инспектор вазифаһын атҡарҙым. Күптән хаҡлы ялдамын. Күп наградаларға лайыҡмын.

Ауыр һуғыш йылдары артта ҡалды. Инде донъялар тыныс булһын!

**Тайфа ЗИННУРОВА,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**
**Өфө ҡалаһы.**

**Гөлсирә**
**ШАФИҠОВА**

# БЕР ҠАБЫМ ҒЫНА...

*(Булған хәл)*

1943 йылдың авгусында ун һигеҙ йәше саҡ тулып өлгөргән Әхиәргә лә повестка килтереп тоттορҙолар. Егет быны ғәҙәти хәл тип ҡабул итте: "Китергә икән, китергә!"

Ир-егеттәрһеҙ йорттар күптән етемһерәп, бушап ҡалған: бала-саға, ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡарт-ҡоро. Ауыл үҙе лә тештәре ҡойолоп, йөҙө йыйырсыҡланған, өҫтөнә әләм-һәләм ҡаплаған хәлһеҙ ҡарсыҡты хәтерләтә. Ир-ат юҡлығы ныҡ һиҙелә: унан-бынан яғырға тип ситәндәр һүтелеп алынған, бағаналар ауған, буяуҙары ҡубып төшкән тәҙрә ҡапҡастары ала-сола... Өй эргәләрендә кесерткән, алабутаның әҫәре лә юҡ — яраҡлы үләнде халыҡ күптән ашап бөткән.

Хәллерәктәр ҡырҙа, ырҙын табағында булғас, Әхиәрҙе оҙатырға туғантыумасалары, күршеләре генә йыйылды. Улары ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ: еңгәләре Фәтхиә, ҡартатаһы, күршеләре Фәриҙә, Айһылыу апайҙар, бала-саға... Туҡтауһыҙ яуған өгөт-нәсихәттәрҙән һуң Айһылыу йыр башланы:

*Ташкеләт буйы тик ағас,*
*Аҡ ҡайын ҙа ҡарағас.*
*Ауылыбыҙ етем инде,*
*Ир-егеттәр ҡалмаған.*

Күлдәк осоноң еңе менән күҙҙәрен һөртөп, бошоноп ҡалған Әхиәргә ҡарап Фәриҙә таҡмаҡларға тотондо:

*Әй буйҙары — әрәмә,*
*Ат ниместе, йәлләмә!*
*Пуляларҙың береһе лә*
*Осмаһындар әрәмгә.*

*Гөлсирә Шафикова — Мәсетле районы Яңы Мишәр ауылында тыуып үҫкән. Йонос ауыл китапханаһы мөдире. Нигеҙҙә балалар өсөн шиғырҙар, әкиәттәр ижад итә. 1997 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Эй, сиртәбеҙ симечкә,*
*Эй, сиртәбеҙ симечкә.*
*Ҡар өҫтөндә туңған, тиҙәр,*
*Шулай кәрәк нимескә!*

Был таҡмаҡтарҙан һуң, Әхиәргә ни хәтле генә ҡыйын булмаһын, өйгә йән инде. Күршеләрҙең дә һәр береһе егет менән хушлашты:

— Иҫән-һау йөрөп ҡайтырға яҙһын!

— Сәмиғулла абзыйыңды күрһәң, беҙҙән сәләм әйт, һине көтәләр, тиң.

— Хат яҙып тор инде!

— Ниместәрҙе беҙҙең өсөн дә туҡма!

— Эй, ҡәйнешкәйем, һин дә китәһең, — еңгәһе Фәтхиә һыңҡылдап иларға тотондо, — бигерәк абзыйыңа оҡшап тораһың, атлауҙарың... Миңлеғәлием тип торамсы...

— Ҡуй, Фәтхиә килен, илама, кешене оҙон юлға күҙ йәше менән оҙатмайҙар, — Хәҙисә еңелсә генә унһың ҡулбашына ҡағылды, — ризығы бөтмәһә, ҡайтыр, һәр кемде ерҙә ризыҡ йөрөтә.

Оҙатыусылар таралышҡас, өйҙө ауыр тынлыҡ баҫты.

— Инәй, мин Ташкеләт менән хушлашып киләм, йәме.

— Бар, улым, бар, түлке оҙаҡлама, тауҙың иң түбәһенә менеп теләк телә, беҙҙең өсөн изге тау бит ул, — Хәҙисә улын эргәһенән һис кенә ебәргеһе килмәһә лә, уның теләгенә ҡаршы тора алманы, тышына сығармаһа ла, эстән ут янып, бәлки, Әхиәремде һуңғы тапҡыр күреүемдер, әйҙә, тауы менән дә хушлашып китһен, тип уйланы. Ағайҙары ла китеп хәбәрһеҙ юғалды, әллә тереләр, әллә үлеләр, тигәндәй. Хәҙисә Әхиәрҙең әйберҙәрен әҙерләне, үҙе туҡтауһыҙ: "Эй, Аллаҡайым, иҫән-һау йөрөп ҡайтып, тере килеш күрергә яҙһын", — тип теләнде.

Ташкеләттең иң бейек түбәһенән бөтә тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренә: әнә, Яуыш, Ясин, Иҫәнбай ауылдары, арыраҡ — Үгеҙҙәр, Йыланыш... Зәңгәр дуға булып ялтырап ятҡан Әй, уға ҡушылған матур Көршәле шишмәһе...

Ташкеләтте ысын келәт тиһәң дә ярай, исмаһам: аҡландары тулы шартлама, әбзәй еләктәре, урман тулы балан, эт мороно, энәте уның. Ҡыштарын саңғыла, санала шыуған шат бала-саға итәгендә.

Ҡосағында аунатып, туптай тәгәрәтеп, илатып-көлдөрөп, береһен дә имгәтмәй генә үҫтергән был тау Әхиәргә ҙур инәһе кеүек ҡәҙерле, яҡын ине.

***

Йыйылыу пунктына барып етер өсөн байтаҡ араны үтергә кәрәк. Кисеүгә барып еткәс, Әхиәр арбанан еңел генә һикереп төштө, итеген, ойоҡбашын сисеп, арбаға, төйөнсөгө эргәһенә, һалды. Баштараҡ һалҡын һыу сирҡандырып, семетеп алғандай булһа ла, аяҡтары һыуға тиҙ өйрәнде, ауылдан оҙатып килгән хәүефле уйҙары ла юҡҡа сыҡҡандай булды. Һыуҙың шаптырҙауы, аттың бышҡырып ҡуйыуы бала-сағаның иң сағыу, матур мәлдәрен иҫенә төшөрҙө.

Ҡояш рәхимһеҙ ҡыҙҙыра. Әхиәр һике ситенә ултырған да тәҙрәнең бер яҡ ҡырынан баҡсаны күҙәтә.

— Әйҙә һыу инергә! — Дуҫы Сабирйәндең сәрелдәк тауышы ишетелә.

Инәһе һуҡрана: "Баҡа шикеле көнө буйы быҡырҙап һыуҙа ятаһығыҙ, һыу инәһе алып китмәҫ тимә үҙегеҙҙе!"

Урамда бәхәс башлана:

— Кем күберәк һыу ингән?

— Мин — егерме, — ти Кәрим.

Фәнүр, бармаҡтарын бөгөп, иҫәпләргә тотона:

— Элгәре көн — унау, кисә — өсәү, бөгөн — дүртәү.

Баштараҡ өшөгәндәй булһалар ҙа, һыуҙың йылыһы үҙенә тарта, сыҡҡы ла килмәй, һыу терегөмөш кеүек: тирә-яҡҡа сәсрәй ҙә, ҡояш нурҙарында йылтырап, меңләгән төҫкә инә, һәр тамсы малайҙар менән шаярып-көлөп, яңынан тулҡын ҡосағында юғала. Йылға йәйғорҙай ҡыҙғылт-һары төҫтәр менән балҡый, йәшкелт-зәңгәр тулҡын туптары берсә малайҙарҙың тәндәренә килеп ҡағыла, берсә кире сигенә.

Ирендәре күгәреп, тештәре "бейешә" башлағас ҡына, "йылытҡыс"ҡа йүгерәләр. "Йылытҡыс" тигәндәре — Әй ярында ултырған буш кәрәсин мискәһе. Ул эсе көндәрҙә, ҡояш аҫтында, мейестәй ҡыҙа. Тауыҡтар шикелле шунда ҡунаҡлайҙар ҙа еүеш кейемдәрен киптерәләр...

— Абзый, ҡайт, инәйем көтә. Ҡайт! — Ҡустыһы Тимерхан эҙләп килгән.

— Хәҙер.

Тауыш Әй аръяғындағы ағастарға, таштарға һуғылып, тулҡын шикелле кире әйләнеп ҡайта ла байтаҡ ҡына һыу өҫтөндә бәүелеп тора:

— Хәҙер-е-ер...

Арба тәгәрмәстәренең һыуҙан сығып, ваҡ таштар өҫтөндә келтерләүе Әхиәрҙе һиҫкәндерҙе, ул, йүгереп килеп, арбаға ултырҙы.

— Йылғаны ла аша сыҡтыҡ, улым, на-а-а, малҡай. — Ҡартатаһы атты юрттыра төштө. Әхиәр, урынынан күсмәй генә, артҡа табан боролоп ултырҙы, тәүҙә тыуған йорто, унан ауылы, бала сағынан яҡын, таныш булған тирәктәре, ҡыуаҡлыҡтары күҙҙән юғалғансы ҡарап барҙы.

***

Тау артында ҡыҙарып ҡояш байыны. Эңер төштө. Өй эсе шомло ҡараңғылыҡ менән тулды. Танауы ослайып, ҙур һоро күҙҙәре эскә батҡан, аяҡ-ҡулдары ҡороған ағас кеүек булып ҡалған Тимерхан аслыҡтан түҙә алмай үрһәләнде. Башаҡ сүпләргә тип киткән инәһе менән апаһы һаман күренмәне.

Малай оҙон нәҙек бармаҡтары менән эсен баҫҡылап та ҡарай, юҡ, ауыртыу һис кәмемәй, арта ғына, ниндәйҙер көс үҙен һурып, хәлен ала бара. Ул, һикелә ултырған килеш, түшәме ҡоромланып, ҡап-ҡара булып ҡалған өй эсен күҙҙән үткәрҙе, инәһе әйтмешләй, усҡа һалып өрөп ебәрерлек тә ашарға яраҡлы нәмә таба алмағас, мөйөшкә ҡаҙаҡланған кәштәгә үрелде. Бояуы ҡубып, йәмһеҙ хәлгә килгән кәштәнең иң өҫкө таҡтаһында ятҡан төйөнсөктө һәрмәп алды, ҡалтыранған ҡулдары менән көскә-көскә иҫке яулыҡтың төйөнөн систе. Ҡул тирмәнендә тары ярмаһын төйөп, тосораҡ булһын өсөн уға алабута, кесерткән япраҡтары ҡушып бешерелгән күмәс ине был.

Тимерхан күмәсте һаҡлыҡ менән генә алып еҫкәргә тотондо:

— Их, тәмләп ҡарарға, бер семтем генә ҡабырға ине... Юҡ, ярамай, ярамай, был — изге күмәс! Абзыйҙары Миңлеғәли, Ғәлиәскәр, Йомаҙил, Әхиәрҙең тыуған йортта көтөп торор ризыҡтары.

— Ауыҙ ит, балаҡайым, ҡалған ризығың еребеҙгә тартып торһон, — тип

инәһенең, өҙгөләнеп илай-илай, Әхиәр абзыһынан күмәсте тешләткәнен ул бөгөнгөләй хәтерләй. Ул һуғышҡа киткәс, инәһе күмәсте йәшереп ҡуйҙы: "Зинһар, тейә күрмәгеҙ, туғандарығыҙ әйләнеп ҡайтҡансы ятһын", — тине.

Тимерхан күҙҙәрен йомдо, ауыҙына йыйылған төкөрөктө көс-хәл менән йотоп ебәрҙе, күмәсте иң ҡәҙерле нәмәләй күреп күкрәгенә ҡыҫты, ҡабаттан алып ирендәренә терәне. Бер аҙ ваҡыт шулай торғас, нимәлер иҫенә төшөргәндәй, тертләп ҡуйҙы, күмәсте ҡәҙерләп кенә сепрәккә төрөргә тотондо. Үҙе: "Абзыйҙарым, ҡайтығыҙ, анау нимес хәшәрәттәрен тиҙерәк еңеп ҡайтығыҙ, мин һеҙҙе һағындым, күргем килә, һеҙ булмағас, беҙгә бик ауыр", — тип шыбырҙаны.

***

Һауа дары, төтөн еҫе менән тулды. Әхиәр үлем менән беренсе тапҡыр күҙмә-күҙ осрашты. Хәйер, ул дуҫының һуңғы һулыш алыуын күрмәне лә. Гриша уның өҫтөнә, олонона балта сабылған ағас кеүек, ҡапыл ғына ҡолап килде лә төштө. Уның аҫтынан көс-хәл менән сыҡҡан Әхиәр дуҫын салҡан әйләндергәндә, Гришаның ауыҙынан ҡанлы күбек ағып сыҡҡайны. Әхиәр, әллә ҡурҡыуҙан, әллә үлем сәскән пуляларҙан һаҡланырға теләп, күкрәге менән ергә һыйынды. Һуғыш яланында ереңдән дә яҡыныраҡ нәмә юҡ, абынһаң да, һөрөнһәң дә, ереңә таянаһың, уға ятаһың, уға һыйынаһың...

Алыҫта туҡтауһыҙ ҡабатланып торған шартлауҙар, гөрһөлдәүҙәр уға күк күкрәүен хәтерләтте. Бала саҡта йәшен йылтырауынан, дөбөрҙәүҙән ҡурҡып юрған аҫтына сума ине улар.

— Ҡуй, ҡурҡаҡ булмағыҙ, хәҙер үтеп китер, — тип инәйҙәр тынысландырғас ҡына, бүлмә буйлап йүгерергә, шаярырға тотоналар ине.

— Бында инәйем юҡ шул, балауыҙ һығып торорға мин бәләкәй малай ҙа түгел инде. — Әхиәр көрһөнөп ҡуйҙы. Ҡабаттан тороп баҫты, автоматын ҡыҫып, саҡ ҡына эйелә биреп, алға табан йүгерҙе. Эргәһендә кемдер ҡоланы, кемдер ыңғырашып сүгәләне...

Әхиәр туҡтай алмай ине, ана, алда күпме немец танкылары — иҫәпһеҙ. Әллә ер илай, тыпырсына, тулай, әллә үҙенең башы әйләнә, егеткә хатта ағастар ҙа үҙе менән бергә йүгерәләр төҫлө.

Гөрһөлдәүҙәр көсәйгәндән-көсәйә барып, ер менән күк тоташты, ҡара томан, саң эсендә бер ниҙе, бер кемде күрерлек түгел. Әхиәр нимәгәлер абынып йығылды, тағы тороп баҫты.

Ерме, ҡолаҡтарымы геүләй — тауыштарҙы айырмаҫ булды, тотош геүләү аңын томаланы. Алда танкмы, нимәлер ята. Ут яҡтыһында шәүләләр күреп, егет шул яҡҡа табан боролғайны, янбашын нимәлер өтөп алғандай булды, көслө ауыртыуҙан иҫен юғалтҡан егет йөҙтүбән ергә ҡапланды.

***

— Улыбыҙ әли-әли итә, улыбыҙ тәпәй китергә итә. — Инәһенең тауышы.

— Торналар, улыма аяҡ килтерегеҙ, торналар, аяҡ килтерегеҙ! — Атаһының тауышы.

Әхиәр бара-бара ла ҡолай, тора ла тағы атлай, үҙе эй ҡыуана, көлә, бәләкәс кенә ҡулдарын ҡанат шикелле елпей.

— Эй, һалам аяҡ, сүпкә лә абынып йығылып бараһың. — Инәһе Әхиәрҙе күтәреп алып, күкрәгенә ҡыҫа.

Егет тороп баҫырға итте, йөрәгенә үткән ауыртыу ҡабаттан иҫен алды, күҙ алды ҡараңғыланды, зәп-зәңгәр күк ҡоромланған быяла шикелле ҡап-ҡара булды.

...Госпиталгә килтереп һалғанда, Әхиәр күп ҡан юғалтҡайны, туҡтауһыҙ һаташты. Имеш, ул ялан аяҡ үлән өҫтөнән йүгерә. Ялан аяҡ рәхәт, аяҡ-кейемеңде кейеп, сисеп тораһы юҡ, йүгереп сығаһың да китәһең: ер йылы, үлән мыйыҡтары табан аҫтын ҡытыҡлай, ер табанды иркәләй, һөйә. Эй, рәхәт ерҙең иркәләүе, атаһының мыйыҡлы бите менән ҡағылыуы кеүек. Ҡыҙған ер табандарҙы бешерә, туп шикелле һикерәһең, ирмәк!

Әхиәр бөгөн ялан аяҡ йөрөмәй, аяҡтары ауырта, һыҙлай, хатта ҡан таптары күренә башлаған.

— Әхиәр, аяғың бәпкә сығара бит тиҙҙән, — ти инәһе, — тыңламаһаң, себешең артынДан көсөк шикелле эйәреп, сипылдап йөрөр әле.

Йомортҡа ярылып себеш сыҡҡанын күргәне бар малайҙың, әллә ысынлап та аяҡ бәпкәһе буламы микән? Ана, тиреһе ҡалай ярғыланып бөткән.

— Ҡана, аяҡтарыңды йылымыс ҡына һыу менән йыуайым да, ҡаҙ майы һөртәйек. — Инәһе йомшаҡ ҡына ҡулдары менән Әхиәрҙең аяҡтарына ҡағыла, ауыртыу баҫыла төшкәндәй була.

— Ихтыярлы, көслө егетһең, бирешмә, — тип әллә хирургтың туҡтауһыҙ сәмләндереүе, әллә үҙенең тиҙерәк арыуыраҡ булып ҡайтыу теләге көс өҫтәгәндәй булды — тәки тырышып аяҡтарына баҫты, сатанлап булһа ла атлай башланы.

Госпиталдән сығырға бер нисә көн ҡалғас, уға хат килтереп тотторҙолар.

"Һаумы, ҡәҙерле абзыйым, — тип башланған ине хат, — һиңә ҡартатайымдан, инәйемдән, күршеләрҙән күп сәләм ебәрәм. Хәҙер беҙ бер урында, күмәкләп беҙҙең өйҙә йәшәйбеҙ. Күп утын әрәм иткәнсе, шулай уңайлыраҡ, ти инәйем.

Мин кистән үк йоҡларға ятам, йоҡлаһаң — һәйбәтерәк, ас икәнемде онотам. Күптәр шешенеп астан үлделәр, теге ос Наилды хәтерләйһеңме? Башы ҡортлап үлде, ашлыҡ таҙартҡанда бер ус бойҙай алған өсөн Глаша башына тимер таяҡ менән һуҡҡан. Ҡурҡып өндәшмәгән. Үлгән кешеләрҙе ҡарға күмәләр, зыяратҡа апарырға хәлдәре юҡ. Ғәлиәскәр, Минлеғәли абзыйымдарҙың "похоронка"лары килде. Беҙ ышанмайбыҙ. Көтәбеҙ. Улар үлмәгән".

Хаттың аҙағына эре хәрефтәр менән: "Абзый, ғәфү ит, мин һин тешләгән күмәстән бер ҡабым ғына ашаным, һин ҡайт, дошмандарҙы еңеп ҡайт", — тип өҫтәлгәйне.

Был юлдарҙы уҡығас, Әхиәрҙең күҙҙәренә йәш тығылды, ул, эйелеп, карауаты аҫтынан һалдат тоҡсайын тартып сығарҙы, тамағынан өҙөп, ауылға алып ҡайтырға тип йыя барған икмәк киҫәктәрен барланы. Әхиәрҙе тыуған ере, туғандары, Ташкеләте көтә. Ул, осрашыу минуттарын күҙ алдына килтереп, тоҡсайын күкрәгенә ҡыҫты.

## УРАУ-УРАУ ЮЛДАРҘАН

Роберт Байымов заманында халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхесе, бөйөк ғалим Зәки Вәлиди тормошона, эшмәкәрлегенә арналған «Сыбар шонҡар» романы менән уҡыусыларҙы ныҡ һөйөндөргәйне. Унан «Төштәр ҡабатланмай» хикәйәләр йыйынтығы, фәнни хеҙмәттәрҙән торған «Төрлө йылдарҙа тыуған уйҙар», «Гармония многообразия», «Великие лики и литературные памятники Востока» тигән йыйынтыҡтары донъя күрҙе. Был китаптар милли ерлекте аныҡ билдәләргә ынтылыусы фекерҙәр һөҙөмтәһе булараҡ ҡабул ителде. Тап ошо ерлектә донъя күргән «Каруан килә Бағдадтан» романы («Ағиҙел», 2009 йыл, № 1,2) халҡыбыҙ тарихына яңы ҡараш ташлауы менән ҡәҙерле.

Тарихи документаль роман халҡыбыҙ тарихындағы бик боронғо осор — X быуаттағы ваҡиғаларға нигеҙләнә. Яҙыусы тап ошо тарих төпкөлдәренән халҡыбыҙҙың хәҙерге яҙмышына бөгөнгөнән быуаттар хәтеренә иғтибар итеп, һирәк-һаяҡ ҡалған сығанаҡтарға ла һаҡсыл ҡараш менән объектив ысынбарлыҡты художестволы яҫылыҡҡа күсерә. Был йәһәттән авторҙың тарихи сығанаҡтар менән эш итеү алымы, роман структураһын ҡороуҙағы оҫталығы, образдар системаһының динамик хәрәкәте ярҙамында әҫәрҙең эске һәм тышҡы ритмикаһын ғына түгел, фекер төрлөлөгөн үҫтереү айырым тикшереүҙе талап итә.

Әҫәрҙең төп сюжеты ике географик яҫылыҡта моронлай ҙа, артабан бер йүнәлештәге тармаҡтар ярайһы үҙенсәлекле бер олондо барлыҡҡа килтерә. Тәү ҡарамаҡҡа был алым ваҡиғалар тарҡаулығына алып килгән һымаҡ булһа ла, автор уларҙы ҡаймаланған композицияла бер епкә, шәхес һәм йәмғиәт тирәләй ойошҡан төп конфликтҡа бәйләп, роман фекерен бер нисә яҫылыҡта үҫтерә. Тәүгеһен яҙыусы «Изге юл сәхифәләре» тип атап, тарихи шәхес — ибн Фаҙлан образына бәйләй. Ғәрәп хәлифәтендәге Фаҙлан улы Әхмәттең тормошо, уй-фекерҙәре, башҡалар менән мөнәсәбәттәре бәйән ителә. Ибн Фаҙландың тормошо ифрат ҡатмарлы, ҡаршылыҡтар менән тулы. Тәү ҡарамаҡҡа ул Бағдад ҡалаһының күренекле, хәлифәт һарайында ла үҙ урыны булған кеше. Ләкин Әхмәт ибн Фаҙландың тормошҡа ҡараштарын мәшһүр һүҙ оҫтаһы, данлыҡлы шағир А. Рудаки менән осрашыу ҡырҡа үҙгәртә. Был осрашыуҙа ул үҙен ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға яуап тапһа ла, бихисап яңы һорауҙар тыуа. Бигерәк тә «Хаким һәм иждасы» араһындағы мөнәсәбәттәр тынғылыҡ бирмәй. «Уңыш байрамы»нда А. Рудаки сығышы ҡанатландырһа, Бағдадта Фаҙланды бөтөнләй икенсе күренеш ҡаршы ала. Хәлиф Джафар әл Мөҡтәдир уны үҙенә саҡырып:

— Шундай шиғырын уҡынымы саманый һарайында фетнәсе Рудаки тигәндәре? Әллә һин шағир йораты телгә

алған Заратуштраның кем икәнен белмәйһең? Бәлки, үҙегеҙҙең мәжүси маздасылар пәйғәмбәре икәнен дә онотоп ташлағанһыңдыр? — тип асыулана.

Ябай ғына ҡаршылыҡ романдың төйөнләнеүен тәшкил итә. Тап ошо һынылыш мәл Әхмәт улы Фаҙлан һәм хәлиф араһындағы мөнәсәбәттәрҙе генә түгел, артабанғы хәл-ваҡиғаларға ла этәргес булып тора. Әллә бер аҙ дыуамаллыҡтары өсөн, әллә икенсе сәбәптәр менән, Әхмәтте «етенсе климат» тип йөрөтөлгән илгә сәйәхәткә ебәрергә өндәй Бағдад хәлифе.

Болғар илселегенә сәркәтип итеп тәғәйенләнгәс, Әхмәттең вазифаһы буйынса эштәре ҡырҡа арта: аҡса юллау, илселекте кемдәрҙән ойоштороу, ислам тәғлимәтен Болғарҙа өйрәтер өсөн тәжрибәле мөғәллимдәр йыйыу һ. б. Сәфәр сығасаҡ ил хаҡында мәғлүмәттәр туплау ҙа — уның мөһим бурысы. Ул ғына ла етмәгән, хәлиф һарайындағы ҡайһы берәүҙәр: «Йәджудж менән мәджудж тарафтарына сәфәр ҡылырға йыйынаһығыҙ икән», — тип мыҫҡыллайҙар. Был иһә уның эҙләнеүсән ҡомарын арттыра ғына төшә. Сәфәргә йәнә хәлиф һарайында абруйҙары юғарыраҡ булған Төрк Тәкин, Сусан Әр-Расси кеүек мәртәбәле шәхестәр ҙә булыуы бер аҙ ышаныс тыуҙыра күңелендә.

Автор роман геройын тәүге эпизодтарҙа уҡ үҙ-үҙенә ышаныусан, тәрән хис-тойғоло итеп һүрәтләй. Сәфәр алдынан эҙләнеүҙәрендә төрлө сығанаҡтарҙан байтаҡ мәғлүмәт туплай, күп шағирҙар тормошо һәм ижады менән таныша. Әхмәт аҙаҡ шундай һығымтаға килә: был тәҡдим сетерекле хәлдән сығыу юлы булһа, «етенсе климат»тың бик күп серҙәрен асыу ҙа уға тәғәйенләнгәндер.

Ошо ваҡиғаларҙан башланған романдың сюжет һыҙыҡтары тармаҡлана, эпик киңлекте яулай бара. Яҙыусы Төрк Тәкин образына бәйле сюжетты мауыҡтырғыс та, уйландырырлыҡ та итеп үҫтерә. Әҫәр дауамында әллә ни йыш күренмәһә лә, тәү ҡараштa уҡ үҙенең булмышы менән уҡыусы иғтибарын яулап ала. Артабан да төп герой Әхмәттең сәфәр барышында тормошҡа, төрки донъяһына ҡараштарын киңәйтеүгә булышлыҡ итә.

Автор һөйкәлмә ваҡиғаларҙы бик урынлы ҡуллана. Улар Әхмәттең уҡыған әҫәрҙәренән, хәтирәләрҙән, тарихи сығанаҡтарҙан хасил була. Ярайһы уҡ бай мәғлүмәт туплаған һөйкәлмә ваҡиғалар дәүерҙең тулы картинаһын, һулышын объектив күҙ алдына килтереп кенә ҡалмай, тарихи осорҙо төрлө яҡлап күҙаллауға булышлыҡ итә. Искәндәр диуары хаҡындағы имеш-мимештәргә лә яҙыусы романда аныҡлыҡ индерә, күп төрлө мәғлүмәттәрҙе объектив картиналар аша күҙ алдына баҫтыра. Ысынлап та, Искәндәр-Зөлҡәрнәйен (Александр Македонский) Һинд, Иран, Чин илдәрен яулағас, мәғрипте буйһондора, артабан төньяҡ-көнбайышҡа табан юллана. Ләкин уңышһыҙлыҡҡа осрай. Сөнки «етенсе климат» тип аталған ҡәүемдә көслө, үҙ еренә береккән йәджудж, мәджудждар уға ҡаршы торор көскә эйә. Юнан тарихсыһы Геродот та улар хаҡында яҙып ҡалдырған. Әхмәт быларҙың барыһын да күп төрлө яҙмаларҙан таба. Әммә уларҙы үҙенә асыҡлайһы бар бит. Сәйәхәттең тағы ла бер маҡсаты асыҡлана. Хатта ул шатланып: «Быға берәүҙең дә ҡулы етмәгән, Искәндәр-Зөлҡәрнәйен үҙе хайран ҡалған серле ҡәүемдәр менән осрашыу ихтималы асылырға тора түгелме?» — тип уйлай.

Романдың «Башҡорт хан» тигән бүлегендә Урал, Иҙел төркиҙәренең йәшәйеше, башҡа ҡәүемдәр менән

мөнәсәбәттәре хаҡында үҙенсәлекле сюжет йәйелдерелә. Башҡорт хан ҡарамағындағы баштан-аяҡ ҡоралланған, махсус өйрәтелгән кескәй берәмеккә Бәйғөбәк батыр етәкселек итә. Улар үҙ биләмәләрен барлыҡ яуҙарҙан да һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ. Быға иһә Бәйғөбәктең хәрби тактиканы яҡшы белеүе генә түгел, ә аҡыллы, урыны менән хәйләле һәм яҡшы етәксе булыуы өс тапҡырға күберәк кешеләре булған урыҫ баҫҡынсыларын да еңеп сығыуға булышлыҡ итә. Романда Байғөбәк образы ярайһы уҡ төрлө яҡлап асылған. Уның уйҙары, тормош хаҡындағы фәлсәфәһе бик ҡыҙыҡлы. Ут һәм төҫтәр хаҡындағы мифик ҡараштарҙы ла яҙыусы ошо образға бәйләп бирә. Мифик ҡараштар һауанан алынмаған, ә халыҡсан: «Юғары күтәрелгән ялҡын телдәре йәшкелтерәк булһа, бәрәкәтле ямғыр һәм изгелек булырын көтәләр. Әгәр ялҡын ҡыҙыл төҫтө алһа, тот та һуғышҡа әҙерлән. Һары төҫ тә насар, ул, атабаба уйынса, төрлө сирҙәр, һалҡын ҡыш килтерә». Байғөбәктең халыҡ, тормош, йәшәйеш хаҡындағы уйланыуҙары ла бик ҡыҙыҡлы. «Уйлаһаң, әҙәм балаһы үҙен бер ваҡытта ла ғаләм юғарылығынан айырмаған. Тәңренекенә оҡшатып, уға һыйынып, үҙе йәшәгән ҡоролманы ла кескәй генә көмбәҙле донъяға әүерелдергән». «Байғөбәк үҙе — дала балаһы. Йәшерәк саҡта ат көткәне лә, әҫе йәй төндәрендә тын, аулаҡ далала бер үҙе төпһөҙ йондоҙло күккә ҡарап ятҡаны ла күп булды. Ундай саҡта, әйтерһең, һиңә ҡанаттар үҫә, илаһи көстәр уяна: донъяла һинән башҡа берәү ҙә юҡ, тик һин генә хужа ошо төпһөҙ йыһанға!» Автор Байғөбәктең күңел кисерештәрен ғәйәт динамикала бирә. Тышҡы һәм эске хәрәкәттәр берләшмәһе роман туҡымаһында композицион йыйнаҡлыҡҡа килтерә, әҫәрҙең психологизмын көсәйтә.

Артабан әҫәрҙә Башҡорт хан етәкселегендәге ырыу йыйыны, ғәрәптәрҙе ҡаршы алыу, һуңғы йылдарҙа алып барылған эске һәм тышҡы сәйәсәт мәсьәләләре лә бында төп проблемаларҙың береһе икәнлеге асыла. Ғәрәп сәйәхәтселәре ни өсөн улар төбәгенә килә? Яҙыусы башҡорт йыйынын ентекле һүрәтләп, күп төрлө ҡараштарҙы ла сағылдыра. Башҡорт иленең киңлеген дә, йәшәү рәүешен дә автор хәҡиҡәткә яҡын итеп һүрәтләй. Башҡорт иле — хәҙер ҙур ил, халыҡтары ла төрлө. Уның биләмәләрен көнсығыштан — Тубыл, көньяғынан — Яйыҡ, көнбайыштан — Ҙур Иҙел, төньяғынан Сулман йылғалары һыулай. Бөйөк йылғалар! Улар башҡорттарҙы барса ҡалған донъя менән бәйләй. Хан саҡырыуы буйынса килеүселәрҙең һәр береһе ошо ҙур ил өсөн яуаплы.

Йыйында һәр ырыу бейҙәре үҙҙәренең фекерҙәре менән уртаҡлашып ҡына ҡалмай, ә үҙ ҡараштарының дөрөҫлөгөн иҫбат итә. Башҡорт хандың телмәре бөгөн дә актуаль яңғырай: "Урал буйҙары хәҙер ишектәре шар асыҡ әрпеш ҡатын өйөнә оҡшай башланы. Тәртип юҡ, кем теләй шул килә, хужа булып үтәнән-үтә йөрөй". Башҡорт хан һәм башҡорт иле һәр яҡлап ғәрәптәрҙе ҡаршы алырға йыйына. Әхмәт ибн Фаҙлан башҡорт далаларына сыҡҡас хайран ҡала. Уны ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға Төрки Тәкин йә Артыр бей яуап бирә. Төрки нәҫеленән булған Артыр образын да яҙыусы күңел биреп һүрәтләй. Артыр — бик белемле, тарихҡа үҙ ҡарашы булған шәхес. Романда уның Кир Икенсе менән скифтарҙың батшабикәһе Тамаристың яуы, боронғо балбалдар тураһындағы мәғлүмәттәренең күп булыуы әҫәр йөкмәткеһен байыта.

Шулай уҡ уның борсолоуҙары ла урынлы:«Халыҡтар һаман һуғышыуҙан бушамай, береһе ҡорғанды икенсеһе емерә. Былай барһа, төркиҙәргә бөйөк тарих биргән был таш һындар ҙа, уларҙағы яҙмалар ҙа әлеге уңалып барған бояуҙар яҙмышын ҡабатламаҫ тимә. Ата-баба рухын онотҡан, үҙенең тамырын юғалтҡан халыҡтың киләсәге булырмы?..»

Төркиҙәр йәшәгән ҡәүемдәрҙә ислам дине тәғлимәттәрен таратыу — Әхмәт ибн Фаҙлан етәкселегендәге сәйәхәтселәрҙең төп маҡсаты. Ләкин Урал ҡәүемендә йәшәүсе башҡорттарға был дин кәрәкме? Тап ошондай төйөнләнеүҙән башланып китә романдың икенсе «Изгеләр гонаһы» тигән киҫәге. Ислам дине, башҡа диндәр менән мөнәсәбәттәрен ибн Фаҙлан башҡорттар менән осрашыуҙарҙа аңлата, төрлө миҫалдар ярҙамында фекер йөрөтә. Әлбиттә, уларҙы ябай һүҙ уйнатыу итеп кенә һүрәтләмәй автор, ә роман сюжетынан айырылғыһыҙ бер ваҡиға итеп бирә. Шуға ла һәр тармаҡланған сюжет әҫәрҙәге персонаждарға бәйле үҫтерелә, дөйөм роман композицияһын байытып килә. Мәҫәлән, сәйәхәтселәр араһында фарсы сығышлы Фалис заде тәүҙә башҡорт һүҙҙәренең оҡшашлығын билдәләһә, артабан риүәйәттәрҙе хәтергә төшөрөүе лә бик ҡыҙыҡлы. Улай ғына түгел, был ваҡиғаларҙың уртаҡ яҡтары бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Артыр бей менән Фалистың әңгәмәһендә «Урал батыр» менән Зоххаҡ тураһындағы риүәйәттә, Заратуштра тәғлимәттәрендә лә уртаҡлыҡтар бихисап булғанлығы асыҡлана. Автор байтаҡ ҡарыһүҙҙәрҙе (мифологияны) бик урынлы ҡулланып, герой ҡараштарын, фекерен ныҵытып ҡуя. Әлбиттә, Фалис заде әңгәмәһендә Артыр бейҙе һынап ҡарау йәки мыҫҡыл итеү кеүек ҡараштар ҙа юҡ түгел. Ләкин Артыр бейҙең Заратуштра пәйғәмбәрҙең Апастак (Авеста) китабын яҡшы белеүе, тормошсан мәғлүмәттәрҙе урынлы ҡулланыуы һәр саҡ фекер юғарылығына күтәрә.

Романда шулай уҡ дини мифологик, Тәүкеше хаҡындағы ҡарыһүҙҙәр ҙә бик урынлы, сөнки бәхәстәрҙең нигеҙе — хәҡиҡәт. Ә хәҡиҡәт йәшәүгә көс, тормошҡа дәрт, үҙ-үҙеңә юл да булырға тейеш. Шуға ла роман геройҙары, персонаждары ошо юлға ҡайһы һуҡмаҡтан сығырға кәрәклеге хаҡында уйлана, бәхәсләшә. Икенсе бүлектәге барлыҡ хәрәкәттәрҙе ошо хәҡиҡәткә юлдар биләй ҙә шикелле. Романдың «Башҡорт ҡото йәки мандрагора» бүлегендә был динамика тағы ла ҡырҡыулаштырыла. Кем ул башҡорттар? Тәү күҙаллаған ҡырағайҙармы? Әллә?.. Уларҙың юғары мәҙәниәтле халыҡ икәнлеген Әхмәт ибн Фаҙлан аҙым һайын күреп, хайран ҡала. Мандрагораны ла уларҙың бетеүе рәүешендә күреү геройҙың хистәр дауылын ҡоторта. Сәсән менән осрашыуҙан һуң ул тағы ла уйлана төшә. Уны Урал, Шүлгән, Ҡатия хаҡындағы риүәйәттәре лә тетрәндерә. «Мәгәр Ҡатип батшалары йөҙөндә исламға ғына түгел, хатта маздасылыҡҡа саҡлы дәүерҙәге Молох ҡыланыштары төҫмөрләнә икән, башҡорттар үҙҙәре ҡасанғы халыҡ булып сыға һуң?» — тип аптырап ҡуя. Ләкин быға ышанаһы килмәй Әхмәттең. Шуға ла яҙмаларында, һәр күргәнде объектив яҡтыртаһы урында, хис-тойғоға бирелеп эш итә. Шуға ла ҡайһы ваҡыт көлкөгә ҡала. Мәҫәлән, «ҡар ашап һимергән һарыҡтар» хаҡында яҙманы теркәгәс, Артыр бей рәхәтләнеп көлә. Романда күргәндәрҙе объектив күрһәтергә Артыр бей күп көс һала. Уның бетеү итеп йөрөткән мандрагора хаҡындағы хикәйәттәре бер нисә юҫыҡта үҫтерелә һәм башҡорттарҙың тәбиғилегендә үк

юғары мәҙәниәтлелек һалынғанлығы хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Артыр бей образында ҡапма-ҡаршылыҡлы ике ҡараш йәшәй. Беренсеһе — үҙ халҡының донъяға ҡарашын, мәҙәни кимәлен дөрөҫ баһалау булһа, икенсеһе — ислам диненең әһәмиәтен милләттәштәренә аңлатып биреү. Был образ тотош милләттең тарихи үҫешен, ҡараштарын сағылдырырға ярҙам итә. Автор романдың «Изгеләр гонаһы» бүлеген фәлсәфәүи уйланыуҙар, борсолоуҙар менән: «Юҡтыр, әгәр шулай булһа, халыҡтың изге тип һаналған төшөнсәләрен тупаҫ сағыштырыуҙан, тотанаҡһыҙ һүҙҙәрҙән улар ҙа тыйылған булыр ине. Нишләйһең, тарих юлдары һымаҡ, изгеләр ҙә гонаһһыҙ түгел шул», — тип тамамлай.

«Тәңреләр күктә ҡала» бүлексәһендә Әхмәт ибн Фаҙландың башҡорт туй йолаһында ҡатнашыуы, сәфәренең Болғар иленә дауамы һүрәтләнә. Артыр бей башҡорт туйына саҡырылғас, хәтирәләргә бирелә. Автор ретроспектив алым аша Артырҙың башҡорт ерендәге үткәне, трагик мөхәббәте хаҡында бәйән итә. Бәхетһеҙ мөхәббәт хаҡындағы Мәжнүн ҡиссалары ла Артыр характерын асыуға булышлыҡ итә. Әлбиттә, туй мәжлесен Әхмәт ихлас ҡабул итмәй, Артырға бында ла ярайһы уҡ аңлатыу эштәре алып барырға тура килә. Туй мәжлесендәге көрәш хаҡында ла әҫәрләнеп, еренә еткереп һөйләй. «Мәсхәрә түгел, һынау был, уйынлы-ысынлы ярыш, кеше үҙ-үҙен яҡларлыҡмы, таһыллымы, көс-ҡеүәте бармы... — Артыр бей быларҙы юлдашына түҙем генә аңлата. — Ҡоҙаларҙы ғына түгел, егетте лә, килен буласаҡ ҡыҙҙы ла нимәгә яраҡлылыҡҡа һынайҙар. Күсмә тормош шарттары кешенән үҙ аллы хәл итә торған күп нәмә: зирәклек, ырыуыңа, ғаиләңә тоғролоҡ, уларҙы ҡурсалау һәләте талап итә. Башҡорт Уралы менән көслө, ҡарыһүҙҙәрҙән күренеүенсә, батырҙар тыуған ерҙәренән алыҫлашҡан һайын, уларҙың һағыштары ла бермә-бер арта бара». Мәжлестәге йырмондар, ҡурай ҙа әсир итә: «Быға бигерәк тә бәһлеүәндәй киң күкрәкле олпат башҡорттоң йырлап ебәреүе сәбәп булды шикелле. Ватан, Урал тураһындағы йыр ине ул. Ҡуйы, көслө тауыш менән башҡарылған был йырҙа үҙәктәргә үтер моң да, һағыш та, шул ваҡытта көс-ҡеүәт, оло тантана, мөһабәтлек һәм ғорурлыҡ та бергә аҡты. Тәрән, киң, бейек һәм бөйөк ине был моң». Тап ошо туйҙа башҡорттар хаҡында төшөнсәләре тағы ла тәрәнәйә төшә. «Ул да булмай, йырсы янына үлән-көпшә тотоп (ибн Фаҙлан уның «ҡурай» тип аталыуын хәҙер белә ине) ҡураныс ҡына йәнә берәү килеп баҫты. Көпшәһен ирендәренә терәне, һәм (эй, мөғжизә!) ошо үлән көпшәнән илаһи моң урғыла башланы. Ҡураныс ҡына ҡурайсы уйнай ғына башлағайны, алыштырып ҡуйҙылармы ни: үҙе лә, йөҙө лә танымаҫлыҡ үҙгәрҙе, күҙҙәре яна, ҡулбаштары, күкрәктәре дәртле уйнап ҡына тора, әйтерһең, был донъя кешеһе түгел, үҙенең ҡайҙа икәнен дә онотто. Көй ҙә көпшәнән үҙенән-үҙе урғыла, тирә-яҡҡа һибелә кеүек... Донъяла бер ниндәй ҡаршылыҡ та, ыҙғыш та, көндәшлек тә юҡ, тик бәхет кенә... Моң — ирекле ҡош, ул оса, йөҙә. Башҡалар ҙа онотолған, ниндәйҙер ләззәтле хистәргә сумған, рәхәттә ойоған... Бер ни үҙгәртмәй, сәбәләнмәй, нисек бар шулай моңға иҫереп йәшә лә йәшә инең».

«Башҡорттарҙа, башҡа төркиҙәрҙә булмағанса, батырҙары хаҡында йырҙары, өләңдәре күп, — тигәйне бер мәл Төрк Тәкин. — Уларҙа донъя башынан уҡ килгән ҡаһарманлыҡтар

данлана. Ата-бабаларын ололайҙар. Шуға рухтары ныҡ. «Ышанмаһаң да ышанырһың. Сөнки эс-бауырҙарҙы айҡап-байҡап сығырлыҡ, тәндәрҙе зымбырлатырлыҡ ошондай сихри моң, серле көйҙәрҙе кем ижад иткән, «йәджудж, мәджудж» тип кәмһеткән ошо халыҡ түгелме?! Мәңгелек аһәң был мөһабәт тәбиғәттең үҙ йыры, үҙ бөйөклөгө!» Ә Артыр бейҙең тыуған ер, тыуған ил хаҡында төшөнсәләре тағы ла тәрәнәйә төшә: «Башҡорт иле! Дәүерҙәр һуҙымында донъяға һин бик күп һоҡланғыс бөйөк эштәр күрһәттең, илеңә, халҡыңа төбәп атылған уҡтарҙы үҙ күкрәктәренә һеңдереп, һүндергән батыр улдар үҫтерҙең. Шуға һинең менән дуҫтар ғына түгел, дошмандар ҙа иҫәпләшергә, хөрмәт итергә мәжбүр. Ошо юлыңа артабан да тоғро бул, байрағыңды юғары күтәр, башҡорт иле! Үҙ илеңдә сиктәр белмәй, кейектәй иркен йөрө, даръяларҙағы балыҡтай той үҙеңде, башҡорт балаһы! Ҡурҡма, шикләнмә, был һинең илең, йортоң һәм ғәзиз бишегең! Сиктәр һәм сикләүҙәрҙе дуҫтар түгел, һине тарих сүплегенә бырғытырға тырышыусы дошмандар, май күҙле көнсөлдәр уйлап сығара. Улар һинең бөйөклөгөңдө түгел, ә меҫкенлегеңде көҫәй, хайуан хәленә төшөүеңде көтә. Ғорур бул, башҡорт, башҡаларға өлгө күрһәтеп, үҙеңсә йәшә, тарих төпкөлөнән килгән затлы тамырҙан икәнеңде онотма».

Сәйәхәттең һуңғы һуҡмаҡтары Болғарға юл ала. Илселекте Болғарға башҡорттар ихлас теләк менән оҙатып ҡала. Ләкин юлда ғәжәп хәлдәргә юлығалар. Тарпандар өйөрөн күреп, хайран ҡалалар. Яҙыусы был картинаны художестволы деталь кимәленә күтәреп һүрәтләгән. Тарпан һәм башҡорт. Фаҙлан улы Әхмәттең: «Тәбиғәте лә, кешеләре лә бер ҡамырҙан яһалғанмы әллә быларҙың? Башҡорттар үҙҙәре лә — ошо ҡырағай тарпандар һымаҡ ғорур, үҙ һүҙле, нуҡта яратмаған, баш бирмәҫ халыҡ. Ҡаты ҡуллы хакимдарҙан ситтә тороуҙары, ирекле йәшәү, киң далалар аҙҙырған, моғайын, башҡорттарҙы буйһонмаҫ итеп яратҡан», — тип уйланыуы тикмәгә түгел.

Ибн Фаҙлан яҙмалары Болғарҙағы көндәрҙе һүрәтләү менән туҡтала.

Яҙыусы романдың аҙағын «Тарих юлдары борма-борма...» — тип атап, үҙенсәлекле генә йомғаҡ яһай. Бер яҡтан, дастан традицияларына хас ваҡиғаларҙы яңы яҫылыҡта баһалау, бик күп мәғлүмәттәрҙе объектив һынландырыу өсөн был алым бик ҡулай. Үҙен-үҙе аҡлай.

Яҙыусы тарихыбыҙҙың бер осорон ғына һүрәтләүҙән башлай ҙа, ҙур географик һәм ваҡыт киңлектәрен яулап алып, шәхес һәм йәмғиәт конфликты тирәләй беҙҙең заман өсөн актуаль булған байтаҡ проблемаларҙы күтәреп сыға һәм оҫта итеп уларҙы бер епкә, ә ептәрҙе бер туҡымаға туҡый. Һөҙөмтәлә ҡатмарлы ваҡиғаларҙы, оҙайлы ваҡыт арауығын, төрлө яҙмышлы геройҙарҙы берләштергән бөтөн бер әҫәр барлыҡҡа килгән.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**филология фәндәре**
**кандидаты.**



Рауил
НИҒМӘТУЛЛИН

# БУЛҺЫН ӨСӨН БАШҠОРТОСТАН!

## *Ҡотҡар үҙеңде үҙең*

*Бөлә бара, башҡортом,*
*Һыуың, һауаң, ҡош-ҡортоң,*
*Ерең, телең, быуының,*
*Торор йортоң — баш йортоң.*
*Телемең ярты-йорто,*
*Телең дә ярты-йорто,*
*Белем дә ярты-йорто,*
*Илең дә ярты-йорто,*
*Көнөң дә ярты-йорто,*
*Ҡалманы ерең ҡото.*
*Эй, башҡортом, башҡортом!*
*Һинең заман манҡорто*
*Төйәгеңде туҙҙырған,*
*Тиргән йөрәк сереңде,*
*Алған һөйгән йәреңде,*
*Ил бағырҙай ереңде,*
*Хазинаңды, ереңде —*
*Ҡалдырған тик гүреңде.*
*Ҡалған ыуланған ерҙәр,*
*Һатылған, дүнгән ирҙәр,*
*Илде бөлдөрөр сирҙәр,*
*Ил бәҫен боҙор керҙәр.*
*Нишләнең һуң һин, халҡым?*
*Һүнергә бит юҡ хаҡың:*

---

*Ошо көндәрҙә Рауил Ниғмәтуллинға 70 йәш тулған булыр ине... Әммә шағирҙан һүҙ ҡала. Йөрәктән сыҡҡаны. Халҡым тип яныуҙарҙан осҡон булып осҡаны. Рауил Ниғмәтуллин да ҡалдырҙы ундай осҡондо. Ә һүҙ осҡондары бер ҡасан да һүнмәй!*

*Туҡтат һәләкәт яуын,*
*Йәнеңдә булһа ялҡын!*
*Һаҡла ҡалған ҡотоңдо,*
*Халҡың түлен, ил йәмен —*
*Туҡтат ситкә осоуҙан*
*Үҙ баҫҡан ереңдәген!*
*Ҡайтар ҡабат телеңде,*
*Өләш кәрәк белемде,*
*Ишәйт булған түлеңде,*
*Ил ит — торған илеңде!*
*Эй, башҡортом, башҡортом!*
*Һаҡламаһаң баш йортоң,*
*Туҡтатмаһаң ул йотто*
*Емереүсе манҡортто —*
*Юҡҡа сығыр башҡортлоҡ.*
*Һәләкәттән сығырға*
*Тупла, халҡым, көс-түҙем —*
*Һин ҡотҡара алаһың*
*Бары үҙеңде үҙең!*

## *Һин бит, илем*

*Наҙлап, наҙлар итеүсем,*
*Көттөрөүсем, көтөүсем,*
*Изгелекле һәр эшкә*
*Һәр саҡ әҙер итеүсем;*
*Таңдан иртә уятыр,*
*Ил кәрәген үйлатыр,*
*Йылы хистәр яралтыр,*
*Ҡоштай һайрар, һайратыр*
*Һүҙҙәрҙе һин әйтеүсем!*

*Тыуған, торған ерҙең дә,*
*Хәләл түккән тирҙең дә,*
*Ишектең дә, түрҙең дә,*
*Ҡатындың да, ирҙең дә*
*Белдергән һин ҡәҙерен,*
*Өмөттәрҙе яралтҡан,*
*Болоттарҙы таратҡан,*
*Һоҡландырып ҡаратҡан,*
*Яраттырған, яратҡан*
*Һин бит, илем, — ҡәҙерлем!*

## *Хаҡлыҡ бар...*

*Халыҡ булған ерҙә*
*Хаҡлыҡ бар,*
*Хаҡлыҡ барҙа ысын*
*Шатлыҡ бар.*
*Халҡың барҙа — хаҡлыҡ,*
*Шатлыҡтар*
*Даулар өсөн атлыҡ,*
*Атлыҡ, бар!*
*Хаҡлыҡ юлын быуа*
*Ваҡлыҡтар,*

*Һатлыҡтарҙы йыйған*
*Сатлыҡтар —*
*Булмаһаң һин өҫтөн*
*Шуларҙан —*
*Инмәй илгә ысын*
*Шатлыҡтар!*

## *Булһын өсөн Башҡортостан!*

Пушкин күргән телһеҙ башҡорттоң...
Рәшит Ниғмәти.

*Быуат ярым инде үтә,*
*Бер зәһәр һүҙ йәнде өтә:*
*"Телһеҙ башҡорт..."*
*Башҡортомдо*
*Кемдәр шулай телһеҙ итә?!*
*Баҫҡынсылар, батшалыҡ та,*
*Ерен алып телем-телем,*
*Бесә-бесә башҡорт илен,*
*Ҡырҡҡандар бит башҡорт телен.*
*Ил талаған баҫҡаҡтар ҙа,*
*Төйәк тапҡан ҡасаҡтар ҙа*
*Йүн сыҡҡанда ҡул һонғандар*
*Телде телер бысаҡтарға.*
*Халҡым електәрен һурған,*
*Хаҡлыҡтан, сафлыҡтан ҡурҡҡан*
*Динселәр ҙә, димселәр ҙә*
*Башҡорт телен аҫтан ҡырҡҡан.*
*Ҡырҡҡан аҫтан халҡым телен*
*Өҫтөнлөктө һөйгәндәр ҙә,*
*Ялған тире кейгәндәр ҙә,*
*Танауҙарын сөйгәндәр ҙә,*
*Улар ғына телгеләүҙән*
*Көс китмәҫ тә ине илдән,*
*Халҡым теле тамырҙарын*
*Балалары үҙе телгән.*
*Илен һатҡан, дүнгән, ҡатҡан,*
*Тыуған ерен ташлап киткән.*
*Башҡорт үҙе үҙ балаһын*
*Үҙ теленән мәхрүм иткән.*
*Ярамһаҡтар һәм манҡорттар*
*Халҡым телен төптән телгән,*
*Ә түрәләр түргә телде*
*Ҡороторҙо ҡуя белгән...*
*...Бына шулай телем бөлгән,*
*Шулай башҡорт иле бөлгән.*
*Халҡым рухы шиңгән, үлгән,*
*Башҡортома афәт килгән...*
*...Тел ҡырҡырҙы кире ҡағыр,*
*Ил ҡырҡырҙы кире ҡағыр*
*Ҡылыс сыҡмай ятһа ҡындан —*
*Ни ҡалыр һүң тыуған телдән,*
*Башҡортомдоң баш йортонан?!*

*Йәне барҙар!*
*Уянығыҙ,*
*Уйланығыҙ,*
*Ҡуҙғалығыҙ —*
*Яҙмаҫ элек тамам һуштан —*
*Булһын өсөн телем, илем,*
*Булһын өсөн Башҡортостан!*
*Бер ни ҡалмаҫ телдән, илдән,*
*Ҙур тарихлы башҡортлоҡтан —*
*Оран һалып остан осҡа,*
*Иңдәш булып йәндәш дуҫҡа*
*Ҡалҡынмаһаң, Башҡортостан!*

## Затор өҫтөндәге уйҙар

*Ҡыҫҡа ғүмерҙе күпмебеҙ*
*Үтә ығы-зығыла.*
*Һаман буш бәхәстән, һүҙҙән*
*Алҡымға таш тығыла.*

*Оноттоҡ халыҡ белгәнде:*
*"Алабыҙ, — тиеп, — белем".*
*Оноттоҡ халыҡ аҡылын,*
*Әҙәбен, моңон, телен.*

*Оноттоҡ туғанлыҡ хисен,*
*Дуҫтарҙы, ҡәҙер кисен;*
*Оноттоҡ ерҙең ҡәҙерен —*
*Аҡса, мал, сепрәк өсөн.*

*"Фәнни-техник ҡаҙаныш" тип,*
*Химия тип сурытып,*
*Туғайҙарҙы, йылғаларҙы —*
*Намыҫты ла ҡороттоҡ.*

*Ҡоротоҡ халыҡтың рухын,*
*Ауылдарҙың тамырын,*
*Шул юғалтҡандарыңды һуң*
*Инде нисек табырһың?*

*Бына шулай беҙ үҙебеҙ*
*Тыуҙырҙыҡ күпме биҙа?!*
*Шуға алға барыу түгел —*
*Күрәбеҙ һаман ыҙа!..*

*Хәҙер үҙебеҙ тығылтҡан*
*Заторҙы һүтә-һүтә,*
*Алға барыр ғүмер үтә,*
*Иҫәпле ғүмер үтә.*

## Мөнәжәттәр – көйлө иман һүҙе

Мөнәжәт – халыҡ ижадының бик үҙенсәлекле төрө. Башлыса дини китаптарҙан, хәҙистәрҙән, йәнә ислам ҡанундарын халыҡҡа индереүсе руханиҙар, миссионерҙар белеменән ижади һутланған был һүҙ-көй берлегенең үҫеш юлы, үҙ аллы жанр булып тәрәҡҡиләшеү тарихы шаҡтай ҡатмарлы. Мөнәжәт, ғәҙәттә, көйлө доға, көйлө шиғыр рәүешендә йәшәй.

Дөйөм төрки әҙәбиәтендә киң таралған жанр булараҡ, ислам дине йоғонтоһо ингән һәр халыҡтың нәфис һүҙ, көй сәнғәтенә, ижадына хас жанр ул. Ғәрәп авторҙары көйҙөң, дини моңдоң зиһенгә бик көслө тәьсир итеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала[1]. Мөриттәр көй ярҙамында үҙҙәренең яңы рухи үрҙәр алыуын раҫлай, шулай уҡ бөтөн төрки, шәреҡ мәҙәниәтендә Ҡөрьәнде көйләп уҡыу, мөнәжәт әйтеү, аҙан тауышын еткереү, мәсет манараһынан йырҙар йырлау дини уҡыуҙарҙың айырылғыһыҙ рәсми өлөшө булған[2].

Башҡортта ла мөнәжәт әйтеү, Аллаһы һүҙен, ислам ҡиммәттәрен көйләп изге йола атҡарыу – халыҡ тормошонда киң урын алған күренеш. Әммә дин тәғлимәттәрен, Аллаға һығыныуҙы көйләп һөйләгән мөнәжәттәр башҡорт фольклор фәнендә быға саҡлы системалы рәүештә өйрәнелмәгән.

Совет осоронда, динде ҡаты тыйыуға бәйле төрлө ижтимағи, сәйәси сәбәптәр арҡаһында, халыҡ ижадының башҡа жанрҙарына ҡарағанда мөнәжәтте йыйыу, өйрәнеү, яҙып алыу эше һүлпәнерәк булған.

С.Рыбаковтың үҙ ваҡытында мөнәжәттәрҙең ҡайһы бер үрнәктәрен яҙып алыуы һәм баҫтырыуы бик әһәмиәтле. “Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта”[3] тигән хеҙмәтендә уларҙы дини характерҙағы шиғырҙар тип атай һәм “яһалма китап ижады”на бәйләй, беренселәрҙән булып мөнәжәттәрҙең нота текстарын тәҡдим итә.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан ойошторолған фольклор экспедициялары ваҡытында Кирәй Мәргән, Фәнүзә Нәҙершина, Ниғмәт Шоңҡаров, Салауат Галин, Мөхтәр Сәғитов, Роза Нафиҡоваларҙың төрлө төбәктәрҙә яҙып алған күләмле мөнәжәттәр фонды Ғилми архивта тупланған[4]. Ислам диненә, дин ғилеменә кире ҡараш булған дәүерҙә фольклор экспедицияларында йыйылған был ҡиммәтле материалдарҙы ғилми өйрәнеүгә лә ныҡлы иғтибар бүленмәй.

---

[1] *Джами-заде Т. Художественный канон искусства “макамат" как отражение эстетического опыта народа Ближнего и Среднего Востока // Внеевропейские музыкальные культуры: Вопросы изучения традиций.– М., 1988. – С. 16.*

[2] *Юнусова В.Н. Ислам – музыкальная культура и современное образование в России. – М., 1997.*

[3] *Рыбаков С.Г. Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта. – СПб. – 1897.*

[4] *Рәсәй Фәндәр академияһы ғилми архивы (артабан: FA), фонд (ф.) 3, опись (оп.) 32, дело (д.) 1.*

Архивта һаҡланған мөнәжәттәрҙең иҫәбе-һаны буйынса, 1960–1970 йылдарҙа халыҡтың дини үҙаңында урынын, хәтерендә ислам белеме торошон байҡар мөмкинлек бар. Дингә өндәү, Аллаһы Тәғәләгә һығыныу, уның алдында тәүбә итеү, үлем һәм әхирәт көндәре тураһындағы мөнәжәттәр халыҡ хәтерендә ҙур урын биләгәне күҙгә ташлана.

*Эй, Хоҙайым, ярлыҡа инде*
*Барса мөьмин бәндәңде.*
*Араһында мәхрүм итмә*
*Беҙ – гонаһлы бәндәңде*[5].

Фәҡәт Аллаһы Тәғәләгә һығыныуға, тәүбә итеүгә бәйле мөнәжәттәр менән бер рәттән, күпселекте тәшкил иткән үлем мөнәжәттәре лә жанр тәбиғәтен, тарихын өйрәнеү өсөн ҡиммәтле сығанаҡтар булып тора.

Профессор Ғайса Хөсәйенов, шулай уҡ Әлшәй районына В. Әхмәҙиев етәкселегендәге археографик экспедициялар ваҡытында тупланған материалдар араһында ла мөнәжәттәр ҙур урын алған[6].

Һуңғы йылдарҙа мөнәжәттәрҙең көй-аһәңе үҙенсәлектәренә телселәр, этнографтар ҙа иғтибар итә. Мәҫәлән, Зәрә Минибаеваның “Миәкә районы Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылы” тигән йыйынтығын күрһәтә алабыҙ. Халыҡ хәтерендә киң билдәле булған “Ҡиәмәт көндәре”, “Бәдеуам”, “Рәсүлуллаға мөнәжәттәр” менән бер рәттән, Мәрйәм Ҡусҡарованан (1905 й.) яҙып алынған “Йәнгә шөкөр”, “Әжәл килер, и, иптәштәр”, “Ислам ағасы”, “Гөлиман” тигәндәре һирәк ишетелгәндәрҙән[7]. Музыка белгесе Г.С. Галинаның монографик хеҙмәте иһә фольклористикала мөнәжәт жанрын өйрәнеү мәсьәләләренә ҙур ғына өлөш индерҙе. Риф Сөләймәнов үҙе яҙып алған (1960 – 1990) мөнәжәттәрҙе көйҙәре һәм нота текстары менән “Башҡорт халыҡ музыка сәнғәте”[8] китабының беренсе томында бирҙе.

БДУ студенттары тарафынан Гөлнур Хөсәйенова етәкселегендә йыйылған фольклор материалдары араһында ла мөнәжәттәр осрай[9].

Мөнәжәт әйтеү – махсус дини йөкмәткеле йола, ҡатмарлы күренеш. Мөнәжәт жанры – тәбиғәте, функцияһы, башҡарыу үҙенсәлеге һәм эстетикаһы менән дә күп яҡлы ижад төрө. Шуға ла мөнәжәттәрҙе комплекслы рәүештә көй+һүҙ+башҡарыу берлегендә һәм йола үҙенсәлегендә махсус яҙып алыу зарур. Был эш ошо юлдар авторы тарафынан 1982 йылда Н. Шоңҡаров етәкселегендәге Дыуан-Мәсетле-Балаҡатай яҡтарына ойошторолған экспедиция ваҡытында башланды, һәм шул саҡтан алып ошо көндәргә тиклем маҡсатлы йыйыу һөҙөмтәһендә бик бай мөнәжәт репертуары тупланды. Силәбе, Пермь, Һарытау, Һамар өлкәләрендә, Башҡортостандың Миәкә, Күгәрсен, Мәләүез, Яңауыл, Йылайыр, Борай, Ғафури, Туймазы, Баҡалы, Салауат, Дәүләкән, Әлшәй, Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы һ.б. райондарында яҙып алынған мөнәжәттәр көйҙәре, башҡарыу үҙенсәлектәре берлегендә йыйылып, Ғилми архивта хәҙер күләмле фонд булды һәм “Башҡорт халыҡ ижады”ның ошо томында күпселек өлөшөн тәшкил итте.

---

[5] *Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Ибраһим ауылында Фәйзиәхмәтова Фәзиләнән (1879) Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған. ҒА. Ф.3. Оп.32, д. 1.*

[6] *Ғ.А. ф.3. оп. 2, е/х 854; ф.3. оп. 2, е/х 852 һ.б.*

[7] *Материалдар ТТӘИ-ның фольклор фондында һаҡлана.*

[8] *Башҡорт халыҡ музыка сәнғәте. /Төҙ. Баш. Һүҙ авторы Р. Сөләймәнов. — Өфө, 2001. — 144 — 168-се бб.*

[9] *Материалдар БДУ-ның фольклор фондында һаҡлана.*

Мөнәжәт – күбеһенсә үҙ аллы көй+һүҙ+башҡарыу ваҡыты берлегендә йәшәй торған жанр. Көйҙәре һәм һүҙҙәре менән мөнәжәттәр күп кенә йыйынтыҡтарҙа баҫылып сыҡты. F.Б. Хөсәйенов етәкселегендәге ике археографик экспедиция материалдарынан күп кенә бәйеттәр менән берлектә мөнәжәттәр "Башҡорт халыҡ ижады" күптомлығында (яҙма мөнәжәттәр) үҙ урынын алды[10]. Ф.А. Нәҙершина яҙып алған мөнәжәттәр уның "Рухи хазиналар" тигән китабында донъя күрҙе[11].

Һуңғы йылдарҙа дин ғилеменә иғтибар көсәйеүе, халыҡ аңында ислам ҡайтанан нығыныуы ла мөнәжәттәрҙе яҙып алыуҙы еңелләштерҙе. 2003 – 2009 йылдарҙа ойошторолған фольклор экспедициялары ваҡытында Р.Ә. Солтангәрәева, Г.Р. Хөсәйенова, Г.В. Юлдыбаева, Ф.Ф. Ғайсина яҙып алған мөнәжәттәр "Экспедиция материалдары –2003, 2004, 2009" йыйынтыҡтарында баҫылды. Бер нисә мөнәжәт "Башҡорт халыҡ ижады" күптомлығының рус телендәге баҫмаһында донъя күрҙе.

Был мәҡәләлә, күләменә ярашлы, мөнәжәттәрҙең башҡорт халыҡ ижадындағы урынын, тәғәйен маҡсатын асыҡлау, жанр үҙенсәлектәрен, тарихи ерлеген һәм төрлө төркөмдәрен билдәләү үҙәктә тора.

Мөнәжәтте ғилми тикшереүселәр уның асылын төрлөсә билдәләп, ғөмүмән, жанрҙың дини әҙәбиәттән тамыр алғанына баҫым яһай. Фәндә "дингә бәйле булған жанр" тип аталған үҙенсәлекле шиғриәт өлгөһөнә Әхнәф Харисов иғтибар итеп, былай тип яҙа: "Мөнәжәттең төп функцияһы – хаҡ мосолман тигән кешенең әхирәт (уй-ниәттәрен) әйтеп биреүҙән тора"[12].

Әлшәй, Дәүләкән, Баймаҡ райондарында үҙе яҙып алған төрлө мөнәжәттәрҙең үҙенсәлеген асыҡлап, Фәнүзә Нәҙершина мөнәжәттәрҙе ике төргә: дини йөкмәткелеләргә һәм донъяуи мәсьәләләрҙе күтәргәндәргә бүлеп ҡарай[13]. Беренселәренә – дини байрамдарҙа, мәрхүмде оҙатҡанда әйтелгәндәре, икенселәренә өгөт-нәсихәт, яҡшылыҡҡа, ғилемгә өндәүсе мөнәжәттәр индерелә һәм уларҙың шәкерттәр, мөғәллимдәрҙең ижадына бәйле булыуы күрһәтелә. Китапта бер нисәһе урын алған. Мөнәжәттәргә киңерәк ғилми байҡау, классификациялау, тарихи тамырҙарын һәм функцияларын асыҡлауға бәйле махсус тикшереүҙәр ошо юлдар авторының бер нисә хеҙмәтендә донъя күрҙе[14].

Фарсы-урыҫ һүҙлегендә мөнәжәт: 1) төнгө доға, йәшерен доға; 2) дини гимн, ислам; 3) йәшерен әңгәмә. Ғәрәп-урыҫ һүҙлегендә лә шундай уҡ мәғәнәлә аңлатыла. Ш. Сами уны, Аллаға ялбарып мөрәжәғәт итеү, доға; Аллаға көйлө шиғыр менән мөрәжәғәт итеү, тип аңлата[15].

Татар фольклорсыһы М. Ниғмәтйәнов, мөнәжәттең үҙенсәлектәрен асыҡлап, бер нисә төркөмгә бүлә, төрлө сифаттарын барлай: "1) яҙмышҡа зарланыу; 2) тормошта фажиғәле хәл-ваҡиғанан һуң тыуған тәжрибәнән өгөт-нәсихәт биреү; 3) сикһеҙ буйһоноуын һәм һөйөүен белдереп, Хоҙайға мөрәжәғәт итеү; 4) үҙенең балалары, яҡындарының фажиғәле яҙмышын бәйән итеү; 5) теге донъя, килер үлем хәлдәрен

---

[10]*Башҡорт халыҡ ижады. Бәйеттәр. /Төҙ.М. Сәғитов, Н. Шоңҡаров, аңл. авт. М. Сәғитов. Өфө, 1978. — 109—110, 130 — 166-сы бб.*

[11]*Нәҙершина Ф. Рухи хазиналар. — Өфө, 1992. — 55-се б.*

[12]*Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Өфө: Башгосиздат, 1965. 218-се б.*

[13]*Нәҙершина Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 57—59-сы бб.*

[14] *Солтангәрәева Р.Ә. Мөнәжәттәр //Ағиҙел, 1996, №9, 18—2-се бб.; "Мин — Тәбиғәт балаһы. — Өфө: Китап, 2001. — 48—56 бб; Хәтер көйө. — Өфө, 2003. — 9, 25, 27, 59-сы бб.*

[15]*Сами Ш. С. Персидско-русский словарь. 1407. — см. Галина Г.С. Башкирские баиты и мунажаты. — С.14.*

бәйән итеү; 6) хәҙерге заман хәлдәрен бәйән итеү һәм шиғри тексты көйләү”; ғалим шулай уҡ мөнәжәттең мәжүси ерләү йолалары менән бәйле булыуына ла иғтибар итә[16]. А.Х. Садиҡованың хеҙмәттәрендә лә мөнәжәттәрҙең боронғо илау йолаларына бәйле булыуы, дини идея-йөкмәткеле мөнәжәттәрҙең үҙенсәлектәре асыла, әммә ләкин, һәр төркөм мөнәжәттәрҙең төп идеяһы, эмоциональ үҙенсәлеге фажиғә менән бәйле, тигән фекере менән килешеп булмай[17]. С.Ә. Галин иһә мөнәжәттәрҙе бәйет менән йәнәшә ҡуя: “Башҡорт халыҡ ижадында мөнәжәт тип бәйеттәрҙең өгөт-нәсихәт, кәңәш биреүгә ҡоролған, тәрбиәүи мотивтар менән һуғарылған өлөшөнә әйтәләр”, – тип яҙҙы ул[18].

Беҙҙең ҡарашҡа, һәр төрлө билдәләмәләрҙән сығып, шуны әйтеү фарыздыр: мөнәжәттең генетик, тарихи тамырҙары фәҡәт дин менән генә түгел, ә шиғри тел тылсымына, ярым көйлө ысул менән мөрәжәғәт-ялбарыу, илау-һыҡтау йолалары менән дә бәйле. Шағирҙарҙың исламға тиклемге үк дәүерҙәге ижадын “күрәҙә, әүлиәләрҙең рифмалы прозаһы”[19] тип ҡабул ителгәне билдәле. Дошмандары Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе шағирлыҡта ғәйепләүҙәре[20] ана шул төҙөк, рифмалы һәм хисле телмәрҙең тылсымлы булыуына бәйле булһа кәрәк. Ә инде ундай тәғәйенле һүҙ ҡалыбының – шиғырҙың традициялары исламға тиклем үк халыҡ аңында йәшәүе мәғлүм. Исламға тиклемге үк булған ши’р (шиғыр) формаһы Илаһҡа ялбарыу, көслө тәьҫирле һүҙ хәжәтен үтәгән, күрәһең. Үҫеш дәүерендә төрлө көстәргә йоғонто яһар өсөн төҙөк шиғри һүҙ менән мөрәжәғәт итеү маҡсаты, Аллаһҡа бергә ялбарыу мотивы менән тулыланып, мөнәжәттәрҙең эстетик булмышын көсәйткән.

Мөнәжәт – жанр буларaҡ боронғо ғәрәп, төрки яҙма ҡомартҡыларынан тамырланған ижад. Ислам динен халыҡҡа аңғартыусы, өгөтләүсе зыялылар, суфый шағирҙар тарафынан камиллашып, Аллаһы Тәғәлә алдында пакланыу, күңел сафландырыу доғаһы тәғәйенен үтәгән махсус көйлө шиғыр рәүешен ала.

Мөнәжәттәрҙең йүнәлеше, төп булмышы – Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәте аша кешенең үҙ рухи донъяһын байҡау, ялбарыу, һығыныу менән күңел хисен таҙартыу. “И, раббанәм, ярлыҡа мине!”, “Хоҙаүәндә, мине үҙең ғәфү әйлә!” кеүек юлдар тәүбә әйтеү, үкенеү һәм өгөт-нәсихәт мотивтары менән ҡатнаша. Ниндәй генә йүнәлешле, тема, йөкмәтке һәм маҡсат төрлөлөгө булмаһын, илаһи изге көс – Аллаға мөрәжәғәт төп мотив булып ҡала мөнәжәттә.

Тәндең – фани, йәндең мәңгелек камиллашыу тарафында булыуын махсус тасуирлау һәм поэтик, психологик фәлсәфә йөрөтөү, күңел кисерештәрен байҡау башҡа төр жанрҙарға ҡарағанда фәҡәт мөнәжәттәрҙә махсус йөкмәтке үҙенсәлеген тәшкил итә.

Тереләрҙең үлеләр рухына доға ебәреүе шарт, сөнки доға – рухтарҙың “ризығы”, мәңгелек йәндең берҙән-бер теләге. Мөнәжәттә ул асыҡ әйтелә. “Рухым шатланыр, доғалар барһа, ҡәберем өҫтөндә ҡоштар һайраһа”... Йәндең үлемһеҙлегенә ышаныу, төп идея буларaҡ, мөнәжәттәрҙә төрлөсә сағыла, әммә Аллаһ алдында уны пакларға ынтылыу иң тотороҡло тема булып ҡала. Шуға ла

[16] *Нигметзянов М. Татарские народные песни. — Казань, 1986. — С.56.*

[17] *Садекова А.Х. Татарские мунаджаты в типологическом освещении (к постановке проблемы) //Типология татарского фольклора. — Казань, 1999 — С.49.*

[18] *Галин С. Ә. Тел аҫкысы халыҡта. — Өфө, 1998.*

[19] *Монроу Дж. Т. Устный характер доисламской поэзии //Арабская средневековая культура и литература. — М., 1978.— С.94.*

[20] *Ҡөрьән-Кәрим. XXXVII сүрә, 36-сы аят: Һәм "Әллә беҙ, ошо тиле шағир тип, ысынлап та үҙебеҙҙең илаһтарыбыҙҙы ташларбыҙмы ни?" — тинеләр.*

мөнәжәттәрҙә йән (ҡәлбе) сафлығын хәстәрләүгә өндәү, гонаһтарҙан, яман ҡылыҡтан йыраҡ булырға, тәүбә итергә өгөтләүҙәр – ана шул Йән хаҡында һәр халыҡтың быуаттар буйы үҫешкән уй-аҡылы, фәлсәфәһе ул. Шулай уҡ беренсе заттан үтенеү, ялбарыу мотивтарының ифрат сағыу һәм тороҡло булыуы жанр тамырҙарын боронғо магик йолаларҙа эҙләүҙе талап итә.

Урта Азия халыҡтарының, төркиҙәрҙең боронғо халыҡ ижады төрҙәрен өйрәнгән ғалим М. Муродов мөнәжәтте (муночот) шамандарҙың йәндәрҙе, рухтарҙы саҡырыу ысулы тип атап, артабанғы үҫеш дәүерендә уның тажиҡ классик әҙәбиәтенә үтеп инеүен, суфыйсылыҡ шағирҙарының ижадында ҙур урын биләүен раҫлай[21].

Илаһи көстәргә мөрәжәғәт мотивының сығанағы архаик йола – үле йәндәргә, тәбиғәт көстәренә, изге рухтарға махсус өндәшә алыусы шамандарҙың (башҡортта – баҡсылар) ритуалдарына бәйле, тимәк сакраль йола ысулының Аллаһы Тәғәләгә махсус мөрәжәғәткә үҫешеүен дәлилләүгә бер миҫал.

Мөнәжәт ғәрәпсә "китап" тигәндә аңлата, мөнәж+әт – китап һүҙен әйтеү. Ҡасандыр илаһи, тылсымлы көстәргә мөрәжәғәт итеү йолаһы кешенең рухи тормошонда китап белеме, ислам тәғлимәттәре нығыныу менән артабан махсус дини йөкмәткеле һүҙҙә үҫеш алып киткән, күрәһең. Тарихи тамырҙары менән мәжүси ышаныуҙарға бәйле булып, төрлө көстәргә инанып өндәшеү хәжәтенә ислам белеме ылыҡтырыла. Аллаһы Тәғәләгә көйлө-зарлы ялбарыу, диндә данлау, өгөтнәсихәт биреү һәм дини фәлсәфә үҙенсәлекле һүҙ сәнғәте төрө – мөнәжәтте барлыҡҡа килтерә. Аллаға табыныуҙы, һығыныуҙы, шулай уҡ хис, күңел торошон тасуирлауға бәйле дини йөкмәткеле фольклор жанры хасил була. Ҡыҫҡаһы, жанрҙың хәҙерге торошо тәңгәлендә ҡарағанда, мөнәжәт – ислам тәғлимәттәренә көйлө-поэтик фәлсәфә әҫәре.

Үлем хәлен, әхирәткә күсеүҙе байҡау, тәүбә итеү – мөнәжәттәрҙә ифрат ҙур урын алған мотивтар, һәм уларҙың генетик тамыры әруахтар менән мөғәләмә итеү кеүек боронғо йолаларға бәйле. Мөнәжәттәрҙәге иламһырау (мәңгелеккә хушлашыу сәбәпле), аһ-зар ҡылыу мотивтары теге донъяға оҙатҡанда башҡарылған боронғо һыҡтау йолалары менән уртаҡ функциялы. Мәҫәлән, Шәғәли баба Шаҡманды ерләгәндә башҡарылған һыҡтауҙарҙа тетрәндергес һағыш, халыҡ фажиғәһе, тәрән ҡайғы сағылған. Башҡорт һыҡтау жанрының классик өлгөһөндә халыҡтың Шәғәли бейҙе юҡһынып илауын да, шунда уҡ ҡәҙерләп данлауын да, маҡтауын да күҙаллайбыҙ. Һыҡтауҙа Шәғәли рухына исемләп өндәшеү, һағынып саҡырыу, мәшһүр бейҙең йәненә мөрәжәғәт итеү тетрәндергес эмоциональ көскә эйә.

*Беҙҙе ниңә ташлап киттең,*
*Аҡ шоңҡарҙай атабыҙ?*
..............................
*Ил иламай, кем илар?*
*Ил эсендә бер инең;*
*Һин бит батыр ир инең,*
*Ил ҡашында бер инең.*
*Күктә шоңҡар һин инең,*
*Ерҙә толпар һин инең![22]*

---

[21]*Муродов М.О. Некоторые фольклорные жанры, связанные с древними верованиями таджиков. //Фольклор и этнография. — Л., 1977. — С.82—91.*

[22]*Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры / Төҙ. баш һүҙ, аңлатм. авторҙары: Ә.М. Сөләймәнов, Р.Ә. Солтангәрәева. — Өфө: 1995.— 367— 556-сы бб.*

Башҡорт аңында йән – мәңге тере баҡый зат, тән – ер ҡуйынына ҡайтыр фани зат. Был һыҡтауҙа изге мәрхүмдәрҙең, әүлиәләрҙең, батырҙарҙың рухын саҡырып, кәңәш итә торған боронғо йола асыҡ сағылған:

*Аҡ шоңҡарыбыҙ – Шаҡманыбыҙ!*
*Онотма беҙҙе, ҡайта йөр,*
*Яҡшы һүҙең әйтә йөр!*
*Эй! Эй! Эй!*[23]

Изге рухты өҙөлөп-ялбарып, илап саҡырыу, илен һаҡлаған батырҙы юҡһынып та, маҡтап та данлау, уға тыңлаушырға өндәү – һыҡтауҙа тотороҡло мотив. “Урал батыр” ҡобайырында Урал батырҙың үлеп йығылғанын күреп, кәүҙәһе янында: “Ил бәхете ине, тип бары һыҡтап илаған” тигән юлдарҙа ла үлгән батырҙы юҡһынып, һыҡтап оҙатыу йолаһы сағыла.

*Һыҡтау* йола ҡулланылышында хәҙер күҙәтелмәй, әммә уның шиғри көйлө рәүеше башҡортта мәрхүмде борон нисек “теге донъя“ға оҙатыуҙарына анығ хәтирә булып эпоста һаҡланып ҡалған. Һыҡтауҙарҙағы һағыныу, ялбарыу ҡатыш ҡайғылы илау аһәңе мөнәжәттәге аһ-зар, һағыш-хәсрәткә ауаздаш. Мәрхүмде оҙатҡанда әйтеп-әйтеп ныҡ илауҙы, ҡысҡырыуҙы ислам дине тыйыуы һыҡтау жанрының әкренләп һүнеүенә килтерә. Хоҙайға ялбарып тәүбә ҡылыу, ҡәлбе пакландырып көйлө васыят йә ҡиәмәт хәлдәрен сабыр бәйән итеп мөнәжәт әйтеү йолаһы ныҡына. Мөнәжәттәрҙәге илау, аһ-зар ауазы һыҡтауҙа тасуирланған фажиғә кисерештәренә, хис-тойғоларға йәнәш. Ике төрлө жанрҙағы был уртаҡлыҡ илау тылсымына ышаныуға бәйле. Мөнәжәт – үлеләр һәм тереләр донъяһын дини фәлсәфә менән бәйән итеүсе, Аллаһҡа саҡырыусы, “теге донъя“-ның хәл-ваҡиғаларын сағылдырған ифрат тойғоло, психологик йүнәлешле ижад төрө.

Мөнәжәттәрҙең йөкмәткеһен, үҙәк темаларын байҡап, үсеш тарихына күҙ һалғанда, XIII–XIV быуаттарҙа Башҡортостанға ныҡлап инә башлаған йәсәүиә тәриҡәте, суфыйсылыҡҡа[24] туҡталыу ҙа кәрәк. Аллаға һығыныу, уны ололоҡлау, сабырлыҡҡа өндәп, рух пакландырыу, диндә генә ысын мәғәнәһендә тормош бәхетен күреү – суфыйсылыҡтың төп идеалдары. “Суфый шағир өсөн фани донъя – бер иллюзия йә мираж, уның өсөн бары баҡый донъя, Алла ғына бар”[25]. Был фекерҙәр иһә мөнәжәттә көйләп әйтелә:

*Белегеҙ Алла белеген,*
*Ислам дине хаҡлығын,*
*Әхмәт бәйғәмбәрлеген*
*Алла дигел, бәдеуам!*

“Бәдеүәм” мөнәжәте тип аталған әҫәрҙәр (Алланы данлау, өгөт-нәсихәт биреү, бәхиллектәр һ.б.) төрлө төбәктәрҙә йәшәгән халыҡ хәтеренә хас һәм берҙәй оҡшаш.

Китап сюжеттарынан күсеп, халыҡлашҡан (фольклорлашҡан) мөнәжәттәр дин ғилемен популярлаштырыу һәм өйрәнеү, көйлө шиғырҙар ижад итеү өсөн дә ифрат әһәмиәтле роль уйнай. “Баҡырғанды әйтәм”, “Мөхәмәҙиәне әйтәм” тип мөнәжәт көйләүҙәрҙе халыҡ телендә әле лә йыш ишетергә тура килә.

[23] *Шунда ук, 368-се б.*
[24] *Хөсәйенов F. Б Суфыйсылыҡ әҙәбиәте //Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Т.1. — Өфө, 1990. — 229-сы б.*
[25] *Шунда ук.*

Асылда мөнәжәттәр – ике төр сәнғәт: яҙма һәм һөйләү ижадын берләштергән рухи мираҫ, ике мәҙәни күренештең төрлө стиль сифаттарын заманса үҙләштергән дини йөкмәткеле халыҡ әҫәре. Шиғыр менән көйлө һамаҡ, йыр менән доға арауығында булған медиатив йүнәлешле, психологик дини жанр ул мөнәжәт.

Төп булмышы, сифаты – хис-күңел-йән таҙаландырыу өсөн махсус функцияһы булыуы мөнәжәт әйтеүҙе үҙенсәлекле йола рәүеше итеп раҫлай. Шулай уҡ мөнәжәттең йола категориялылары ла бар: башҡарылыу маҡсаты (йән сафландырыу), урыны (өй, мәсет, тәбиғәт үҙәге), үҙ ваҡыты (дини байрам, мәжлес, тормоштағы билгеле ваҡиға) һәм үҙ аллы башҡарыу рәүештәре (көйләү, һеүләү, әйтеү, ялбарыу, илау). Улар жанрҙың ритуаль йөкмәткеһен сағылдыра. Халыҡта "Ураҙа мөнәжәте", "Мәүлит байрамына мөнәжәт", "Мөхәммәтғәләйһиәссәләм тыуған көнөнә", "Мәжлес мөнәжәте", "Йома көн мөнәжәттәре", "Мәйет һүҙе", "Мәйет сәләме", "Үлем мөнәжәте"– быларҙың һәр бер төрө үҙ аллы йөкмәткеле, булмышлы, үҙ ваҡыты берлегендә әйтелә.

*Бәйет жанры* ниндәйҙер фажиғә, аяныс хәлде ижади бәйән итеп, үлгәнде ҡыҙғаныу йәки яманға үс белдереү менән һуғарылһа,мөнәжәткә иһә Аллаһы Тәғәлә алдында тәүбә итеү, рух пакландырыу, беренсе исемдән үҙ-үҙеңдең хәлен бәйән итеү хас. Башҡорт халыҡ ижадында ҙур урын биләгән бәйет жанры менән мөнәжәт бәйләнештәре бик тығыҙ. "Халыҡ ижадына килеп ингәс, мөнәжәт үҙенең дини-дидактик йөкмәткеһен юғалтып, шиғри ҡалыбын ғына һаҡлап ҡала һәм бәйеттәрҙең яҙма поэзиянан килгән бер жанр формаһын хасил итә", – тип яҙҙы Ғайса Хөсәйенов[26].

Махсус йөкмәткеһе, тәғәйен башҡарыу көйө, үҙенсәлеге буйынса мөнәжәттәр бер нисә төргә бүленә:

1. Аллаһы берҙе, исламды данлау, тәүбә итеү, үкенеү, һығыныу мөнәжәттәре.
2. Мөхәммәт һәм башҡа пәйғәмбәрҙәрҙе, уларҙың ғилемен, уҡыуын данлау мөнәжәттәре.
3. Дини байрамдарға, көндәргә бәйле мөнәжәттәр ("Мәүлит байрамы", "Йома көн", "Ғәйет көнө" һ.б.).
4. Мәжлес мөнәжәттәре.
5. Белем-ғилемде, уҡыуҙы данлау, өгөт-нәсихәт мөнәжәттәре.
6. Үлем мөнәжәттәре.
7. Боронғо ҡулъяҙмалар, хәҙистәрҙән формалашҡан мөнәжәттәр (өгөтнәсихәттәр, назымдар, васыятнамәләр).

Мөнәжәттәр – дин тәғлиматтәрен фольклорлаштырған ижад төрө. Әлеге дәүерҙә ислам тәғлиматтәре, дин тормошо тергеҙелеү менән жанрҙың заманса яңғырашы, рәүеше лә билдәләнә. Хәтерҙә һаҡланған мөнәжәт көйөнә халыҡ ҡәҙимге тормошта яҡлауға мохтаж ҡиммәттәрҙе ҡурсалап, көйлө шиғыр ижад итә һәм уны "заман мөнәжәте" тип атай.

Изге көндәр, айҙарҙы, дини байрамдарҙы данлау, уларҙың әһәмиәтен асыуға бәйле мөнәжәттәр ҙә үҙенсәлекле. Рух яңыртыусы, тән таҙартыусы тип билдәләнгән "Рамаҙан айы", "Мәүлит", "Ураҙа мөнәжәттәре" араһында "Йома көн" мөнәжәттәре – халыҡ хәтерендә иң тотороҡло һаҡланғандары, буғай.

Мөнәжәт, һәр бер изге айҙың, оло байрамдың мәғәнәһен, вазифаһын, маҡсатын асыу менән бер рәттән, ваҡыт (көн), байрам темаһына бәйле көйлө фәлсәфә

[26]*Шунда уҡ,233-сө б.*
[27]*Башҡорт халыҡ ижады. Бәйеттәр. — Өфө: Китап, 1978. — 29-сы б.*

лә үткәрә. Был осраҡта мөнәжәт мәғлүмәт биреүсе мираҫ, дини йөкмәткеле көн, байрамды данлаусы әҫәргә әүерелә.

Үҙ мәлендә “Шәкерттәр ижады” һәм халыҡ араһында киң таралған “Шәкерт мөнәжәттәре” тип аталған әҫәрҙәр ҡыҙыҡлы. Уларҙа белем-ғилемдең көс-ҡеүәтен асыу, уҡырға өндәү – милли үҙаң үҫешен, рухи нығыныуҙы белдергән төп һыҙаттар:

*Мәктәп – милләт баҡсаһы,*
*Булъан дәүләт анаһы,*
*Ғилем – йәннәт анаһы.*
*Уҡыйыҡ, ъәзиз йәшләрем*[27].

Халыҡта таралған был әҫәрҙәр арҙаҡлы шәхес, шағир ижадында тыуып, ул ваҡытта популяр һаналған жанр хаҡына – мөнәжәт тип аталып китеүе лә тәбиғи. Дин, ислам ғилеме, уның тәғлимәттәренең йоғонтоһо көслө мәлдә һәр шиғри куплетты ла мөнәжәт тип атау йәки “мөнәжәт әйтәм” тип көйләү традицион күренеш булған. Бәйет, һағышлы хәтирәнамә стилендә ижад ителгән, аныҡ ваҡиғаларға арналған әҫәрҙәр ҙә (“Япон һуғышы”, “Һалдат һуғышы“) мөнәжәт тип атала башлай[28]. Яу яландарынан йәки фажиғәгә бәйле хәлдә бәйән иткән яҙмалар ижадсы тарафынан мөнәжәт тип нарыҡлана: “Һағышмаҡтин бер мөнәжәт улһын имди”, “Тәҡәт тотмай бер мөнәжәт яҙҙым имди”, “Мираҫ итеп уҡығыҙ был мөнәжәтте”[29]. Әммә уларҙы мөнәжәт тип әйтеп булмай.

1917 йылғы Октябрь революцияһы идеологияһының диндე ҡәтғи инҡар итеп, мәсет манараларын киҫеп, диндарҙарҙы эҙәрлекләүҙәре яңы тематик, идеологик йөкмәткеле мөнәжәттәрҙең булмышын, үҙенсәлеген билдәләне. Уларҙа, Аллаға һығыныу менән бер рәттән, замандың ҡот осҡос фажиғәләренә рәнйеү, ҡаршылыҡ һәм нәфрәт мотивтары сағыла. Улар заман аждаһаһына тиңләнгән инҡилап фажиғәләрен, хаҡ мосолман инанған ҡиммәттәрҙең емерелеүенә ҡарата белдерелгән ҡаршылыҡ хисен сағылдыра. Тематик үҙенсәлеге буйынса улар бер нисә төркөмгә бүленә: 1) манара мөнәжәттәре; 2) аллаһыҙҙарҙы киҫәтеү мөнәжәттәре; 3) васыятнамәләр; 4) араҡы шауҡымына ҡаршы мөнәжәттәр, назымдар. Мөнәжәттәрҙә иһә халыҡ шиғыры, традициялары, әҙәби, яҙма мәҙәниәт йоғонтоһо көслө. Уларҙы беҙ “Ахрызаман мөнәжәттәре” тип билдәләнек.

*Эй, манара, һинең айың,*
*Бик йыраҡтан ялтырай.*
*Эй, манара, һине алъанда,*
*Барса әҙәм ҡалтырай*[30].

Шиғырҙарҙа үҙенсәлекле алым бар: ваҡиғаның тетрәндергес көслө булыуына, өмөт һыныуына, дин, иман ҡасҡанына ышандырыр өсөн манара үҙе “телгә килә”:

*Манара әйтә: “Мин ауамын,*
*Хәҙер мине киҫәләр”.*

[28]*Шунда уҡ, 16-17-се б.б. 1992 йылда Күгәрсен районы Түкәт ауылында Сәлихҡолова Фәтиәнән (1912) яҙып алынды.*

[29]*БХИ: Бәйеттәр /Төҙ. М. Сәғитов, Н. Шоңҡаров, баш һүҙ авт. Ғ. Хөсәйенов, М. Сәғитов. – Өфө, 1978. – 153 –159-сы бб.*

[30]*Шунда уҡ, 159, 163-сө бб.*

*Оло юлда “Бәхил бул” тип*
*Ҡибланан елдәр иҫәләр*[31].

Үҙ аллы йөкмәткеһе, сюжеты булған әҫәрҙә бөтә ҡылынған яман эштең яман һөҙөмтәһе лә әйтелә, киләсәк быуындың динһеҙлеккә барыуын күҙаллап, әсенеү, әмәлһеҙлек тойғоһо белдерелә:

*Эй, манара, һин булмаъас,*
*Ислам дине тарҡалды.*
*Манараны киҫәләр, тип*
*Бала-саъа шатланды*[32].

Мөнәжәттәрҙең китап һүҙенә эйәреп ижад ителгәндәре лә үҙенсәлекле. Аллаға ышанмау, динһеҙлек касафаттары “Ахрызаман мөнәжәттәре”ндә киң урын ала, “Бәдеуам”, “Мөхәмәҙиә”, “Тәҡиғәжәп” ише китаптарҙың йөкмәткеһенә яраҡлаштырып, үҙенсәлекле көйлө дини шиғыр, бәйет рәүешендә ижад ителә, динһеҙ киләсәктең яманлығына күрәҙәлек ҡылына һәм, дөйөмләштерелеп, ахрызаман картинаһы һүрәтләнә:

*Уҡыусы ла ул саҡ бөтөр,*
*Мәсеттәрҙе харап итер.*
*Ғалимдарҙан сәллә китер,*
*Бына шундай заман етер*[33].

Ислам тәғлимәттәрен аңлатҡан, иман шартын үтәмәүҙең ҡаты һөҙөмтәләрен сағылдырған “Васыятнамә мөнәжәте”, “Ахрызаман”, “Бына шундай көннәр бер мәл тыуары бар” кеүек шиғри әҫәрҙәр, дүрт юллыҡтар традиция буйынса мөнәжәт тип атала.

*Бер кеше лә яһай алмай*
*Бер бойҙай, бер йомортҡа.*
*Алла юҡ, тип, был донъяла,*
*Һеҙҙе шайтан ҡоторта*[34].

“Аллаһы бар тураһында” тип яҙылған ҙур ғына был шиғырҙы ла мөнәжәт тип атайҙар. Мөнәжәттең илаһи көсөнә, изге китаптарҙан килгән һүҙҙәрҙең доға кимәлендәге тылсымына ышаныу, яҙма һәм һөйләү ижадын уңайлы берләштергән мөнәжәт алымы халыҡ ижадында яңы стиль, поэтикаһы һәм темаһы буйынса үҙенсәлекле шиғри жанр хасил итә.

Мәжлес, байрам тамашаһы йәки дини осрашыуҙы асыу мөнәжәттәре илаһи көстөң фатихаһын алыуға, Аллаға һығынып, рухланыуға тиң махсус йола рәүешендә башҡарыла.

*Мәжлесебеҙ башланды,*
*Күңелдәребеҙ нурланды,*
*Фатихалар башланды.*
*Алла дигел, ҡәрҙәшләр!*[35]

Халыҡ ижадының бөгөнгө үҫеш осоронда мөнәжәт ижад итеү айырыуса

---

*[31] 1994 йылда Салауат районы Аркауыл ауылында Шафиҡова Әминәнән (1928) яҙып алынды.*
*[32] Шул уҡ информаторҙан.*
*[33] БДУ-ның фольклор фонды. 1996 йылда Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районы Баязит ауылында Карамова Нурикамалдан З. Байсурина яҙып алған.*
*[34] 1982 йылда Салауат районы Лағыр ауылында Мөхәмәтова Ғәрифә Мөхибулла ҡыҙынан (1917) яҙып алынды.*
*[35] 1992 йылда Күгәрсен районы Юлдыбай ауылында Төхвәтуллина Рабиғанан (1930) яҙып алынды.*

әүҙемлек менән билдәләнә. Төрлө тарихи-социаль ваҡиғаларға (Афған, Чечня һуғышы, тормоштағы фажиғәләр һ.б.), яҙмыш хәлдәренә ҡарата дүрт юллыҡтарҙы ижадсылар традиция буйынса мөнәжәт тип атай. Фольклор күренеше булараҡ был процесс XXI быуатта халыҡ ижады торошон, үҫеш үҙенсәлеген, импровизация илһамы туҡтамауын да күрһәтә. Әммә ул куплеттар мөнәжәт тип иҫәпләнә алмай.

Ислам дине халыҡ ижады жанрҙарына, шул иҫәптән мөнәжәттәргә, тема, идея, шулай уҡ поэтик алымдар, тел үҙенсәлеге йәһәтенән билгеле һыҙаттар индерҙе. Мөнәжәттәргә халыҡ йырҙары ла үҙенсәлекле йоғонто яһай. Фольклор һәм дини мәҙәниәт бәйләнеше – үҙе махсус тикшереү талап иткән бер ҙур проблема. Бында шуны әйтеү мөһим: мөнәжәттәрҙә халыҡ көйөнә яҡынлыҡ күҙәтелһә, халыҡ йырҙарында ла мөнәжәт интонациялары урын ала. Ижадта бындай жанр-ара бәйләнештәрҙең булыуы тәбиғи, сөнки йыр, бәйет, мөнәжәт төрҙәрендә уртаҡ  йүнәлеш бар, ул – лирик башланғыс. Лиро-эпик “ойотҡо” һалынғандары ла юҡ түгел. Тема уртаҡлыҡтары ла, ҡайһы бер көй яҡынлыҡтары ла ошонан килә. Әйтәйек, башҡорт халыҡ мелосында ғәҙәти күренеш булған һалмаҡ көй һәм мөнәжәт бәйләнеше, мәҫәлән, шуға дәлил. Башҡорт халыҡ йырҙарынан “Сибай”, “Буранбай” кеүек киң билдәле йырҙар Учалы, Әбйәлил, Күгәрсен яҡтарында мөнәжәт, бәйет рәүешендә лә йәшәй.

Беҙ ҡараған мөнәжәттәр халыҡ ижадында һаҡланған һәм әле лә яттан башҡарылғандар рәтенә инә. Аллаға ялбарыу, үтенеү, тәүбә өҫтөнлөк иткән әҫәрҙәр мөнәжәт була ала. Жанрҙы әҙәби юҫыҡта тикшереү мөнәжәттәрҙең тарихи, яҙма, авторлыҡ сығанаҡтарын асыуҙы ғына талап итмәй, ә әҙәбиәт методикаһына яраҡлы тикшереү ысулы ла талап итер ине. Шуға ла беҙ фольклорлашҡан мөнәжәттәрҙе тәбиғи булмышында, идея-йөкмәтке үҙенсәлектәрендә, халыҡ ижады әҫәрҙәрен тикшереү ысулдарына ярашлы өйрәнергә тырыштыҡ. Мөнәжәттең генетик, тарихи үҙенсәлектәре, тематикаһы, тәғәйене, үҫеш юлдарына ҡағылышлы һорауҙар асыҡланды.

Мөнәжәттәрҙең поэтикаһын, жанр тәбиғәтен, тасуирлау алымдарын барлау, ҡулъяҙма стиле менән һөйләү-тел ижады ҡатнашлығын асыу, көй, мелос тәбиғәтен һәм башҡарыу үҙенсәлектәрен махсус тикшереү әле фән донъяһында асыҡ мәсьәләләр булып ҡала.

**Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА,**
**филология фәндәре докторы.**

# Зәйтүнә

Талант теге йәки был дәүергә ни өсөн ебәрелә? Ни өсөн уның яҙмышына башҡаларҙы көнләштерерлек уңыш йәки тетрәндерерлек фажиғә тамырландырыла? Фажиғәһе уны бөйөк итәме, әллә уңыштар алдан уҡ тәҡбирләнгән буламы? СССР-ҙың халыҡ артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйтүнә Бикбулатова тураһында һүҙ йөрөткәндә күңелдә ошоға оҡшаш һорауҙар тыумай ҡалмай.

Сәнғәт әһеленең тәржемәүи хәлендә шундай юлдар яҙылған: “1921 йыл. Ашлыҡтар ғына түгел, хатта үләндәр ҙә көйрәп-янып бөттө, тынды ҡурғыс эҫе, бөркөү елдәр тупраҡты ҡорғаҡһытып-киптереп бөтөрҙө ул йылды. Кешеләргә, малдарға, ҡош-ҡорттарға әҙ генә ризыҡланырға ла әмәл ҡалманы. Ишек-тәҙрәләренә арҡыры-торҡоро таҡталар ҡаҙаҡлап, йорт-ерҙәрен ташлап, бик күптәр ауылдарынан илдең төрлө яҡтарына икмәк, эш эҙләп китте. Ислам ағай Бикбулатов та, ғаиләһен алып, тыуып-үҫкән Сәфәр ауылынан Өфөгә юл тота. Зәйтүнәне бына шундай яҙмыш ҡалаға килтерә”.

Зәйтүнә Ислам ҡыҙы Өфөнөң 16-сы һанлы беренсе баҫҡыс мәктәбендә уҡый башлай. Ләкин ҡала тормошо ауыр, һыҙ, ул берәүҙе лә ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алып тормай, был мөхиттә нығынып йәшәп китер өсөн ныҡышмалылыҡ менән бер рәттән сабырлыҡ-түҙемлек тә кәрәк. Бына ошо һынауҙы үтергә тейеш була Сәфәр ауылы ҡыҙы. Аслыҡ-юҡсыллыҡ уны уҡыуын ташлап, типографияға эшкә инергә мәжбүр итә. Комсомолға инеп, үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә ҡатнаша башлай. Йыр-моңға, ғөмүмән, сәнғәткә һөйөү бала сағынан килә, йәғни үҙе хәтерләй башлаған мәлдәрҙән. “Миңә ул ваҡытта биш кенә йәш, шул ваҡытта уҡ бәләкәс кенә сәхнәләрҙә Ғабдулла Туҡайҙың “Әйт әле, күбәләк”, “Анам ҡәбере өҫтөндә”



***“Әсәйемдең сал сәстәре”.***
*Зәйнәп — З. Бикбулатова,*
*Йәмилә — З. Атнабаева.*

шиғырҙарын яттан һөйләй инем. Мәктәптә уҡытыусыларыбыҙ үҙҙәре лә сығыш яһай торғайны. Беҙ алыҫ тора инек, ҡай саҡ ҡунып та ҡалабыҙ. Апайымдар алып бара торғайны, бына шунан башланды сәхнәгә мөхәббәт...”

Өфөнөң сәнғәт техникумына уҡырға ингәнгә тиклем Зәйтүнә Ислам ҡыҙы “КИМ”-да, йәғни Комунистик йәштәр интернационалы клубында сығыштар яһай. Театр сәнғәтенә табан тәүге аҙымдар ана шул клубта яһала. “Драма түңәрәгендә роль бирҙеләр, Ғәйни тигән юлдан яҙған ҡатын ине ул. Күрәһең, һәйбәт башҡарғанмындыр, бергә уйнаған иптәштәрем: “Һиңә артист булырға кәрәк”,– тип маҡтай башланы. Түңәрәк етәксеһе Ғәли Исхаҡов: “Зәйтүнә, һине театрға бирәм”, – тине. Минең бәхеттән, шул йылды театр техникумы асылды. Ғәли ағай һүҙендә торҙо, үҙе алып барҙы, имтихан ҡабул итеп, оло артистар ултыра, үҙҙәре әйткән нәмәне уйнап күрһәткәйнем, мине “отлично”ға ҡабул итте лә ҡуйҙылар. Ә исемлектә 80-ләп кеше бар ине. Мине В. Мортазинға күрһәттеләр. Ғәли ағай: “Һеҙгә мин шундай шәп артистка килтерҙем, тик һеҙ типографияға уға алмашҡа бер малай бирәһегеҙ”,– тине. Шулай килештеләр. Мортазин-Иманский уға уҡырға инә алмай ҡалған малайҙы ебәрҙе.

Ә үҙемдең техникумға ҡабул ителгәнлегемде атайға нисек әйтергә? “Мин артистка буласаҡмын” тип әйтеү шул тиклем ауыр мәсьәлә булды. Әсәйем килеште, ә бына атайым риза түгел бит инде, шулай ҙа әкренләп йөрөй башланым...”

Зәйтүнә Бикбулатова профессиональ сәхнәлә 28-се йылдан башлап эшләй. Үҙенең хәтирәләрендә уҡытыусылары Мортазин-Иманский һәм Мәһәҙиевтарҙы хөрмәт менән телгә ала. Буласаҡ актриса Башҡорт сәнғәт техникумының театр бүлексәһен 1930 йылда тамамлай һәм шунан алып ғүмеренең ахырына тиклем сәхнә тормошонан айырылмай. Тап шул йылдарҙа башҡорт яҙыусыларының драма әҫәрҙәре театр сәхнәһендә йыш ҡуйыла башлай. Мәҫәлән, Сәғит Мифтаховтың “Һаҡмар”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” дилогияһын Зәйтүнә Бикбулатова уйнауынан тыш күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Иң тәүге эше лә шаҡтай ҡатмарлы ролдәрҙең береһе: Мөхәмәтша Буранғоловтың режиссер Мортазин-Иманский менән берлектә ҡуйған “Башҡорт туйы” тигән мелодрамаһында Гөлғәйшә ролен башҡара. Был роль уға ҙур уңыш килтерә һәм артабанғы эшмәкәрлегенә, һис шикһеҙ, хәл иткес йоғонто яһай.

Халыҡ артисткаһына оҙон һәм ҡатмарлы ғүмер юлында бик күпте күрергә, кисерергә тура килә. Сәйәси алмашыныуҙар дәүерен йөрәк аша үткәрә: Октябрь революцияһын туғыҙ йәшлек бала булып ҡаршылай (тимәк, тетрәнеүҙәр, фажиғә-һәләкәттәрҙе күрер-аңлар йәштә), кулактарҙы һөрөү, артабанғы репрессиялар ауырлығын бөтә әселегендә кисереү.

Рәжәп Хәйруллин шулай тип яҙа: “Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһенең йондоҙо булып әүерелгән бер осорҙа, талантының тамам сәскә атҡан бер мәлендә уның башына ҙур бәлә килде. 1937 йылда ялған донос нигеҙендә Зәйтүнәнең ире, дуҫы, остазы Мәкәрим Мәһәҙиев ҡулға алынды. “Халыҡ дошманы” бисәһе булғаны өсөн Зәйтүнә үҙе лә бер нисә ай төрмәлә ултырып сыҡты. Унан һуң да, “ышанысты юғалтҡан, шикле кеше” тип, сәнғәттән ситләтелде. Үҙенең ныҡышмалылығы арҡаһында театрға кире ҡайтарылғас та уға роль бирмәй яфаланылар...”

Бер интервьюһында Зәйтүнә ханым иң яратҡан роле А. Каренина икәнен әйтә. “Яҙмыш мине күпмелер ваҡытҡа улым Лирҙан айырып торҙо. Һағыныуым шул тиклемгә еткән, әйтеп аңлатыу мөмкин түгел. Ҡайтып индем дә улымдың карауатына ташландым. Бала йоҡлай, әммә миндә уның уянғанын көтөрлөк сабырлыҡ юҡ. “Улым, улым, уян!.. Мин ҡайттым бит, әсәйең!” Сабый күҙен асып ебәрҙе лә үҙ күҙенә үҙе ышанмай. Шунан кинәт миндәренә кире ҡапланды.

Өләсәһе лә  янибыҙҙа тора. Ул да: “Уян, Лир, әсәйең бит!”– ти. Улым йәнә күҙен асып ебәрҙе лә шундай итеп минең муйыныма ташланды! Ул күренеште былай ғына һөйләп аңлатырлыҡ түгел... А. Каренина ла ошоға оҡшаш тойғолар кисергән бит. Аннаға улы Сережаны күрһәтмәйҙәр, әммә әсә йөрәге түҙмәй, улы тип үрһәләнә, бала ла әсәһен һағынған. Йөрәкте тетрәткес ошо урындар мин кисергәндәргә ауаздаш! Ғөмүмән, театр сәнғәте дөрөҫлөктө ярата. Тормош дөрөҫлөгөн. Йәшәү ҡатмарлы булған кеүек, сәхнә донъяһы ла ҡатмарлы...”

Реаль тормош, ысынбарлыҡ күпкә аяуһыҙыраҡ булып сыға. Был һынауҙы лайыҡлы үтер өсөн теш ҡыҫып, иренде ҡанатҡансы тешләп, хаяһыҙлыҡ алдында сабыр итеү һәм йоҡоһоҙ, алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт талап ителә. Зәйтүнә бер ҡасан да зарланмай, сөнки үҙ маҡсатын асыҡ күреп йәшәгән сәхнә оҫтаһы була ул.

Бөйөк Ватан һуғышы башланыуы, ил алдындағы ҡаты һынау ҡайһы бер “халыҡ дошманы” тип шик аҫтына алынғандарға үҙ эштәренә кире ҡайтыу мөмкинлеге лә бирә. Ватан өсөн үтә лә ауыр ошо мәлдә Зәйтүнә Бикбулатова кеүек талантлы шәхестең кәрәклеген инҡар итеүселәр ҡырҡа кәмей. Дәһшәтле осорҙа артистар фронт бригадаһына яҙылып, яугирҙар алдында сығыш яһай, һуғышсыларҙы еңеүгә рухландыра. Ҡорос ихтыярлы, һәр кемде ышандырырлыҡ көслө тауышлы Зәйтүнә Бикбулатованың ялҡынлы һүҙҙәре яугир күңеленә инаныс өҫтәй, рухландыра. 1944 йылда Зәйтүнә Ислам ҡыҙына “Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы” тигән исем бирелеүе лә уның эшмәкәрлеген тәрәнерәк аңларға ярҙам итә. Ул уйнаған ролдәр героик характерҙа. Һөнәрҙәштәре әйтмешләй, уның роле – “батшабикәләр, ханбикәләр роле”.

Зәйтүнә Бикбулатова реалистик мәктәптең классик актрисаһы иҫәпләнә. Оло талант эйәһенә иң төп ролдәр ышанып тапшырыла. Уйнаған спектаклдәре – донъя һәм Рәсәй кимәлендәге классик әҫәрҙәр. Башҡорт дәүләт академия драма театрының классик репертуарында Шекспир, Лопе де Вега, Пушкин, Гоголь, Островский кеүек мәшһүр ижадсыларҙың әҫәрҙәре ҡуйыла. Һәр береһендә ул – төп ролде башҡарыусы. Башҡорт театр сәнғәтенең тарихына ингән әҫәрҙәр: Лев Толстойҙың “Анна Каренина”һы, “Тере мәйет”е, Александр Островскийҙың “Бирнәһеҙ ҡыҙ”ы, “Төшөмлө урын”ы, Әсғәт Мирзаһитовтың “Әсәйемдең сал сәстәре”, Сыңғыҙ Айытматовтың “Әсә – ер-әсә”һе, К. Треневтың “Любовь Яровая”һы, Александр Пушкиндың “Борис Годунов”ы, Антон Чеховтың “Аҡсарлаҡ”ы, “Ваня ағай”ы, Э. Филиппоның “Филумена Мартурано”һы, Нәҡи Иҫәнбәттең “Райхан”ы һәм башҡа бик күптәр. Уның уйнағанын хәтерләүселәр әле лә актрисаны телгә алғанда шул мәлдең эсенә ингәндәй булалар.

Был быуын яҙмышы бер яҡтан фажиғәле лә, сөнки улар – “яңы тормош” тип аталған сәйәсәттең иманһыҙлыҡ юлында тәүге тәжрибәгә дусар ителгән балалар, уларҙан Аллаһы Тәғәләгә булған ышаныстары тартып алына. Күптәр өсөн фәҡәт партия йәки уның етәкселәре генә инаныу сығанағы булды. Шуға ла идеология алмашынып, әлеге исемдәргә һәм төшөнсәләргә мөнәсәбәт үҙгәреүе улар өсөн ҙур тетрәнеү ине. Дөрөҫ, Зәйтүнә Бикбулатова был фажиғәле заманға тиклем донъя ҡуйғайны. Ләкин совет идеологияһына ни ҡәҙәр хөрмәт менән ҡарағанда ла, беҙ маһир заттың бер генә инаныс менән йәшәгәнен күрербеҙ. Театр сәнғәтенә инаныу менән. Үҙ һөнәре алдында оло яуаплылыҡ, йыйнаҡлыҡ. Ғүмер буйы театрға спектакль башланыр алдынан 2-3 сәғәт алдан килеп, башҡалар килеүгә инде һәр яҡтан әҙерлек менән көтөп торған.

“Үҙенең гүзәл уйыны һәм һоҡландырғыс матур ҡиәфәте менән актриса Отеллоны ғына түгел, тамашасыларҙы ла сихырланы. Отелло менән Дездемона үҙҙәре йәшәгән донъяның закондары үтә аяуһыҙ, кешелекһеҙ, тупаҫ икәнен тәрән



*“Ай тотолған төндә”.*
*Ш. Рәхмәтуллин, З. Бикбулатова.*

асты”,– тип яҙып сығалар ул саҡта матбуғат баҫмаларында. Үҙе йәшәгән замандың ҡай саҡ кеше яҙмыштары менән бесәй-сысҡан рәүешендә уйнауын аңлау ғына түгел, ә уны үҙ башынан кисереп, һәләкәттән саҡ тороп ҡалған Зәйтүнә Бикбулатованың был фажиғәле ролде ике тиҫтә йылдан ашыу айырыла алмай уйнауы һәм сихырсы дәрәжәһендәге оло талант менән сағылдырыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй. Ул – үҙ заманының Дездемонаһы, һәм шул сәйәсәттең ҡыпһыуыр ҡулдары уның муйынына һыҙылып-ҡағылып аласаҡ. Байтаҡ ваҡыт ҡарауыллап-һағалап торасаҡ. Ҡылмаған гонаһтар өсөн, башҡа ла инеп сыҡмаған уйҙар өсөн. Һәм ул оҙаҡ йылдар үҙенең бер ниндәй ҙә ғәйебе булмағанын раҫлаясаҡ. Йәшәүе менән дә, сәхнәләге уйыны менән дә. Шуны ла әйтеү мөһим: был трагедия сәхнәнән 20 йыл төшмәй уйнала.

Эшһөйәр актриса бер нәмәгә инана: театр булғанда, ул йәшәйәсәк. Шуға ла бөтә булмышын, өмөтөн, тимәк, яҙмышын, тик театр менән генә бәйләй. Шул уҡ ваҡытта “яныу-балҡыу” тигән эпитеттың “йәшәү” тигән һүҙ менән йәнәш килеүен һис кенә лә кире ҡаҡмай. Тимәк, ул иң сағыу йондоҙ булырға тейеш. Юғиһә, күптәрҙе көткән яҙмыш уны ла урап үтмәйәсәк.

1955 йылда ул инде – Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисткаһы. Тағы ла ун һигеҙ йылдан СССР-ҙың халыҡ артисткаһы исемен аласаҡ.

Мостай Кәримдең, шулай уҡ башҡа башҡорт драматургтарының әҫәрҙәрендә ул һәр саҡ төп ролде башҡара. “Салауат” трагедияһында Екатерина II-нең ҡабатланмаҫ образын тыуҙыра. Бында актриса үҙенең буйһонмаҫ рухын сағылдырғандай. Иң мөһиме шунда: роль бүлгән саҡта иң тәүҙә оло талант эйәһе Зәйтүнә Ислам ҡыҙын күҙ уңында тоталар. “Айгөл иле”ндә Зөлхәбирә роле актрисаның яҙмышына ауаздаш түгелме ни?! Ирен, балаһын юғалтыу, мең үлем һынауы аша үтеү – был тойғолар уға һис кенә лә ят түгел. Һыҙланыуҙар аша героиняның эске донъяһына тәрәнерәк үтеп инәбеҙ. Ләкин хөкөмдө тамашасы түгел, Зөлхәбирәнең намыҫы сығарасаҡ. Бына шуға инандыра беҙҙе актриса. Ысын талант саф алтын бәрәбәрендә, ваҡыт уны төҫһеҙләндерә лә, тоноҡландыра ла алмай. Бөйөк артистканың ролдәре лә хәтерҙән юйылмай һәм, нисәмә тиҫтә йылдар үтһә лә, күңелдең иң нескә ҡылдарын сиртер тәьҫораттар уята. Әнғәм Атнабаев, Ибраһим Абдуллин кеүек драматургтарҙың әҫәрҙәре танылыу алыуында Зәйтүнә Ислам ҡыҙының хеҙмәте тос, тип әйтһәк, арттырыу булмаҫ. Күп ролдәр уның өсөн махсус яҙыла. Хатта махсус яҙылмағандары ла осраҡлы яҙмыш ауаздашлығы менән һиҫкәндерә. “Ай тотолған төндә” трагедияһында халыҡ артисткаһы – Тәңкәбикә. Әсәнең әрнеү-һыҙланыуы, ғазабы шулай уҡ уға ят түгел, уйнай тип кенә әйтеү аҙ. Актриса сәхнә аша тере образды ҡайтара.

Героиняның күңелендәге һәр нескәлекте еткерә, уны терелтә, тамашасы алдында уйын түгел, ғүмер үтә.

Зәйтүнә ханым театрҙа ла кешеләр менән бик аралашып бармаған. Яҡын кешеләре хәтерләүенсә, ул бер ҡасан да ире өҫтөнән яҙылған доносҡа ҡул ҡуйғандарҙы ғәфү итмәгән, бер театрҙа эшләһәләр ҙә, улар менән һөйләшкәне булмаған. Осрашҡан сағында фәҡәт иҫәнләшеп, ғорур ҡиәфәттә үтеп китер булған. Ә бит уларҙың ҡайһы берҙәре – актрисаның оҙайлы йылдар бергә эшләнгән партнерҙары. Эйе, яҙмыш үкенесе-ҡәһәре менән хеҙмәт тантанаһының бергә үрелеше артист тормошонда асыҡ сағыла.

Ҡайғы-хәсрәтен берәүгә лә белгертмәһә лә, Нурия Ирсаева менән ҡайһы бер нәмәләрҙе уртаҡлашҡан. “Йәш артистар араһынан мине яҡын күрә торғайны. Гастролгә сыҡҡанда һәр саҡ үҙенә айырым бүлмә ала, тик урын юҡ саҡта ғына ҡай саҡ миңә үҙе менән урынлашырға рөхсәт итә торғайны. Шундай саҡтарҙа яҙылып китеп, ҡайһы бер эс серҙәрен асып ҡуя ине. Улы Лир өсөн борсолоуын йәшермәне (улы һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт итә, һөҙөмтәлә нурланыу ала). Лир өйләнмәй үлеп киткәс: “Булманымы икән Мәскәүҙә һөйгән йәре, ҡалманымы икән берәй ҡатында балаһы?” тип өмөтләнгәндәй әйтеп ҡуя ине...” – тип хәтерләй Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Нурия Ирсаева.

Зәйтүнә Бикбулатова, күп ҡырлы шәхес булараҡ, театрҙың киләсәге тураһында ла бик янып хәстәрләй. Йәш актерҙарҙы әҙерләү өсөн ваҡытын да, көсөн дә йәлләмәй. Уның шәкерттәре күптән инде сәхнә йондоҙҙары булып танылды. Бөтә Рәсәй театр йәмғиәтенең башҡорт бүлексәһе менән етәкселек итә. Актерҙар йортон төҙөүҙә тырышлыҡ күрһәтә.

Бөйөк актрисаның театрға булған иҫ киткес тоғролоғон башҡа берәү менән дә сағыштырып булмай. Һикһән йәштә сәхнәлә баҫып тороу ғәжәп итерлек күренеш түгелме ни?

Театр йылъяҙмаһына күҙ һалғанда, беҙ мәшһүр исемдәр менән осрашасаҡбыҙ. Вәлиулла Мортазин-Иманский, Мәкәрим Мәһәҙиев, Бәҙәр Йосопова, Ғималетдин Минһажев, Рим Сыртланов, Ғәзим Туҡаев, Арыҫлан Мөбәрәков, Булат Имашев һәм башҡа бик күптәр. Ошо сағыу исемлектә ҡабатланмаҫ талант эйәһе Зәйтүнә Бикбулатова лайыҡлы урын биләй. Биләй, тип кенә әйтеү ҙә аҙ, тап ошо актрисаның тормош юлы – ысын талант алдында ҡайһы берәүҙәр ҡорған мәкертоҙаҡтарҙың, хатта сәйәсәттең дә көсһөҙ булып ҡалыуын раҫлаусы күренеш тә. Театр тарихындағы башҡа сәнғәт әһелдәренән ул бит ошо яғы менән дә айырыла. Был яҙмыш аяуымы, әллә үҙ хеҙмәтеңә булған тиңһеҙ мөхәббәтме?

Бер-бер артлы маҡтаулы исемдәр алған, наградаларға лайыҡ булған, Республикабыҙҙың Юғары Советы депутаты итеп һайланған Зәйтүнә Бикбулатова бөхетле ижадсы булараҡ күҙ алдына килеп баҫа. Ысынлап та шулаймы һуң? Ни өсөн яҙыусыларға мәшһүр актрисаның тормош юлы тынғылыҡ бирмәгән? Ни өсөн уның яҙмышы уларҙы тетрәндергес әҫәрҙәр яҙырға этәргән? Ниндәй һорауға яуап эҙләй улар? Булат Рафиҡовтың “Көсләү” хикәйәһе был һорауҙарға бер ни ҡәҙәр яуап бирә кеүек. Яуыз тип аталған персонаж – хикәйә героиняһының икенсе ире. Яуыз – уны һөйгәненән мәңгегә айырған һәм театр менән мәңгегә бәйләгән яҙмыш иронияһы. Героиняның тормош юлы фажиғә менән бөйөклөктөң бер бөтөн булып уҡмашыуы аша һүрәтләнә.

Эйе, үҙенең изге ҡомартҡыларын ул тыуған театрына ҡалдыра. Театр музейына биргән креслоһына барып ултырғанда, мин актрисаның эске кисерештәрен дә аңларға теләнем. Арыған саҡтарында аулаҡта үҙе менән генә ҡалырға мөмкинлек биргән, уны үҙенә һыйындырған кресло бер ниндәй серҙе лә

асманы, әлбиттә. Шулай ҙа күҙ алдына Зәйтүнә тигән талант эйәһенең бер кем дә күрмәгән текәлеге юҡҡа сыҡҡан, көсөргәнештән азат ғорур һынының бөршәйеп ҡалған саҡтарын күҙ алдына килтерергә ярҙам итте. Ер йөҙөндә көн итеүсе ябай ғына ҡатынды, ғәзиз балаһына тейешле иғтибар бүлә алмауҙан өҙгөләнгән әсәне. Актрисаның йәшлек йәрен һағынып әсе күҙ йәштәрен түккән мәлдәренә лә ул ғына шаһиттыр. Кресло һөйләмәне, ләкин күңел нимәнелер тойҙо – тере йәндең бәргеләнеүен, әҙләнеүен, иртәгәһе көнө тураһында уйланыуын һәм яңынан ғорур тороп баҫыуын... Башҡорт дәүләт академия театрының 60 йыллыҡ тарихы ошо бөйөк исем менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Быны иҫәпкә алмау йәки онотоу сәнғәтебеҙ донъяһына зәғифлек индереү менән бәрәбәр.

Таланттың фажиғәһе, уны үлемһеҙлек юлына алып килеүсе сәбәптәр тураһында һүҙ сәнғәте оҫталары күп дәүерҙәр инде баш вата. Хатта бер үк гәүһәрҙе тасуирлағанда ла һәр оҫта уны тулы тамамланышта күрһәтә алмай, ләкин теге йәки был сифатын ғына асҡанда ла беҙ хәҡиҡәткә яҡынараҡ киләбеҙ. Бөйөк актриса ана шундай гәүһәрҙең береһе ине. Һәм ул ижадсы күңеле өсөн асылып бөтмәҫ бер сер булып ҡаласаҡ. Мәрйәм Бураҡаеваның “Атайымдың улы булмаған” тип аталған тетрәндергес хикәйәһендә лә сәнғәт әһеленең яҙмыш шаңдауын күрәбеҙ.

СССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйтүнә Ислам ҡыҙы Бикбулатованың исеме башҡорт театр сәнғәтендә алтын хәрефтәр менән яҙылған. Мәшһүр актрисаны иҫләүселәр иң элек уның үҙ хеҙмәтенә булған сикһеҙ һөйөүен атай. Театрға фиҙакәрлек Зәйтүнә Бикбулатоваға бөтөн ауырлыҡтарҙы һәм ауырыуҙарҙы еңеп сығырға ярҙам итә.

Ижад бейеклегенә бәйле үҙенең бер яуабында актриса шулай тип әйтә. “Һәр хәлдә ижад бейеклеге ҙур-ҙур исемдәр менән генә билдәләнмәй. Театр сәнғәтендә, актер оҫталығында ниндәйҙер критерийҙар бар, тип әйтергә мөмкиндер, әммә икенсе яғын да иҫтән сығармаҫҡа кәрәк: бүтән һөнәрҙән айырмалы рәүештә, бында үҙ-үҙеңде ҡабатлау мөмкин түгел. Үҙләштерелгән ысулдар ҙа гел генә ярҙамға килмәй, сөнки беҙҙең хеҙмәттә һәр бер яңы роль, һәр яңы әҫәр яңылыҡ талап итә. Бөгөн, әйтәйек, теге йәки был образдың асылына төшөнөп, үҙ эшеңдән саҡ ҡына ҡәнәғәтлек тә таптың, ти. Ә иртәгәһен өр-яңы донъяның тупһаһында баҫып тораһың – яңы эҙләнеүҙәр, яңы һыҙланыуҙар. Һин йәнә ярҙамға мохтаж дебютант хәлендә. Тамашасының күңеле бит һиҙгер. Ул иң бейек тип һаналған оҫтаға ла яуапһыҙлыҡты, илке-һалҡылыҡты ғәфү итмәй. Ана шул тамашасы хәтерен һаҡлайым, уның ышанысын аҡлайым, тиһәң, үҙ-үҙеңде аяма. Был – закон...”

Сәхнә маһирының бар йәшәү йәмен сәхнә тормошонда табыуында ла бер мәғәнә ята кеүек. Төрлө образдар эсендә йәшәй. Уларҙы сағылдырыуҙа ялғанламай, һәр береһен балҡытып тамашасыға еткерергә тырыша. Бына шуға ла драма героинялары ла уға үҙ серҙәрен асҡандыр. Был – уларҙың эске диалогы, күптәр аңлай алмаҫ серле донъя. Улар бер-береһенә ярҙам иткән. Халыҡ артисткаһының шәхси тормошо юҡ. Театр, алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт – Зәйтүнә Бикбулатованың тормош юлын бына шулай тип кенә әйтергә булыр ине. Исеме – мәҙәниәтебеҙ кимәлен билдәләүсе төшөнсә, шуға ла рухы сәнғәтебеҙҙә йәшәйәсәк.

Ижадының илле йыллығын билдәләгәндә лә Зәйтүнә үҙе хаҡында түгел, ҡәҙерле театры, коллективы һәм тамашасыһы тураһында һөйләй. “Ҡәҙерле дуҫтар, 50 йыллыҡ сәхнә ғүмеремдә мин һеҙҙең тарафтан оло мөхәббәт, йөрәк

йылыһы, күңел наҙы тойоп йәшәнем. Сәхнәгә сыҡҡан һайын, һеҙҙең мине йылы ҡаршы алыуығыҙ көс бирҙе, өҫкәрәк күтәрелергә, юғарыраҡ үрләргә мөмкинлек бирҙе. Ижадыңдың, эшеңдең халыҡҡа кәрәк булыуын аңлау – ҙур бәхет. Был бәхеткә өлгәшергә һеҙ ярҙам итегеҙ, хөрмәтле тамашасылар. Бының өсөн оло рәхмәт.

Артист хеҙмәте беҙҙең Советтар илендә, Коммунистар партияһы хәстәрлегендә юғары дәрәжәгә ҡуйылған. Бөгөн мине был тиклем ҙурлау, хөрмәтләү – үҙе генә шуның миҫалы түгелме ни? Мин, Башҡортостандың ябай бер ҡыҙы, “СССР-ҙың халыҡ артисткаһы” тигән оло исем йөрөтәм. Был исемгә лайыҡ булыуым менән сикһеҙ бәхетлемен, ғорурмын һәм сикһеҙ тәрән рәхмәтемде белдерәм.

Артист ул яңғыҙ түгел. Уның бергә эшләгән, бергә ижад иткән, шатлығын да, ҡайғыһын да, уңышын да, уңышһыҙлыҡтарын да бергә кисергән коллективы бар. Был Башҡортостандың данлыҡлы театры – Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены йөрөткән Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы. Коллектив эсендә тормоштоң иң ҡатмарлы, иң тәрән әҫәрҙәрен сәхнәгә ҡуйыусы режиссерҙарыбыҙ бар. Театрҙың төп репертуарын үҙҙәренең елкәләрендә алып барған урта быуын артистарыбыҙ, шулай уҡ халыҡтың мөхәббәтен яулап өлгөргән йәш артистарыбыҙ ҙа үҫеп килә. Бындай коллективта эшләү, йәшәү, ижад итеү – үҙе ҙур бәхет, иптәштәр. Мин шул коллектив менән 50 йыл ғүмеремде үткәрҙем. Бөгөнгө тантаналы байрам – минең коллективымдың, театрымдың байрамы, минең коллективымдың тантанаһы...”

Был һүҙҙәр – хәҡиҡәт. Театр тураһында һөйләү үҙе тураһында һөйләүгә бәрәбәр, сөнки был төшөнсәләр айырылғыһыҙ бер-береһенә үрелгән. Зәйтүнә Бикбулатованың сәхнәнән китеүенә нисәмә тиҫтә йылдар үтһә лә, уны тамашасыһы бөгөнгөләй хәтерләй. Ысын талантын ғүмере шулай дауам итергә тейештер ҙә.

Театр уның тормошо һәм йәшәү мәғәнәһенә әйләнә. Зәйтүнә Бикбулатова – сәхнә геройҙарын ғына түгел, тамашасыны ғына түгел, ә заманын үҙенә буйһондора алған ҡаһарман рухлы актриса. Ҡасандыр нахаҡҡа ғәйепләнеп, һәләкәттән саҡ-саҡ ҡотолоп ҡала һәм үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән яҙмышындағы ошо ҡара тапты онотоорға мәжбүр итә, хатта ки ул үҙе хөкөмдар дәрәжәһенә күтәрелә, тип раҫлай алабыҙ. Депутат эшмәкәрлеге, Бөтә Рәсәй театр йәмғәтселегенең башҡорт бүлексәһен етәкләүе – быға асыҡ дәлил. Талант, тәрән аҡыл һәм ҡорос рух – Зәйтүнә Бикбулатованың шәхесен асыусы төп сифаттар. Ләкин шулай тип әйткән саҡта беҙ ҡорос рухтың һыҙланыуын, иңрәүен ишеткәндәй булабыҙ. Иң ғәзиз кешеләренә – йәшлек мөхәббәте, берҙәнберенә, Мәкәрим Мәһәҙиевҡа һәм улына әйтеп тә һәм биреп тә бөтә алмаған һөйөүе.

Йән һөйгәне, ире сәйәсәт ҡорбанына әйләндерелә, берҙән-бер улын ҡотолғоһоҙ ауырыу тартып ала. Уның ҡарауы, мәшһүр актриса тамашасы һөйөүен татып йәшәне, үҙе лә күңелендә урғылған оло һөйөүҙе тулыһынса сәнғәткә бирҙе. Бәлки, ошо һөйөү үкенесте бер аҙ кәметкәндер, иңрәүҙе баҫҡандыр? Был һорауға тулы һәм ҡәтғи яуап юҡ. Актриса үҙе лә аныҡ ҡына яуап бирмәҫ ине, моғайын. Тышҡы ғорурлыҡ аҫтында йәшеренгән эске кисерештәрен тамашасыға ғына түгел, эргә-тирәһендәгеләргә лә белдермәй ул. Бына шуға ла Зәйтүнә Бикбулатованың тормош юлы һоҡланғыс та, уйға ла һалырлыҡ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

# *Халыҡ артисы — юғары исем*

Арҙаҡлы актер Арыҫлан Мөбәрәков исемен йөрөткән Сибай башҡорт драма театры 1931 йылда ойошторола. Ана шул дәүерҙәрҙән алып республикалағы иң тәжрибәле һәм абруйлы коллективтарҙың береһе булып, теп-теүәл 80 йыл буйына Урал аръяғы башҡорттарының саф телен, ғөрөф-ғәҙәтен һаҡлаған мәҙәниәт усағы ул. Уның иң ҙур төп байлығы – сәнғәт күгендә сағыу йондоҙҙай балҡыған төрлө быуын артистары, сәнғәт эшмәкәрҙәре.

Шундайҙарҙың береһе – Сибай театрына үҙенең 40 йыл ғүмерен биргән, БР-ҙың халыҡ артисткаһы Зифа Ғаяз ҡыҙы Баязитова. Уға ошо көндәрҙә 60 йәш тула. Әйтер һүҙем юбиляр тураһында.



*Зифа Баязитова – ролдә.*

Тыҡта, актриса булараҡ, тәү тапҡыр ҡасан күрҙем әле мин Зифа Баязитованы?

Сәхнәлә. Эйе, эйе! Афған яҙыусыһы Сәхип Ямалдың "Ҡара сәскәләр" әҫәре буйынса режиссер Ф. Ғәләүетдинов ҡуйған спектаклдә Амаль ролендә ине ул. Шундай йәш, сибәр, һомғол... Кешеләрҙең яҙмыштарын хәл итерҙәй иң юғары мөхәббәт тойғоһон төрлө тулҡындарҙа еткерҙе йәш актриса. Ул саҡта хис-тойғолары ташҡан Зифаның эске донъяһынан бәхет нурҙары сәселде, ялҡын бәрелде, ышаныс бөркөлдө. Тормош ауырлыҡтарын күрмәгән-кисермәгән Зифа, егет менән ҡыҙ араһындағы мөнәсәбәттәрҙе "ярата" йәки "яратмай" тигән бизмәнгә һалып үлсәгән осорҙа, күңел торошоноң һәм һиҙгерлегенең нисегерәк булырға тейешлеген төрлө алымда күрһәтә алды. Әле генә юғары уҡыу йортон тамамлаған йәш ижадсы халыҡҡа бына ошо сифаттары менән яҡынайҙы.

Йылдар үткәс, хәҙерге йәшем юғарылығынан кешелек сифаттары тураһында уйланғанда һәр саҡ "Ҡара сәскәләр"ҙәге Амаль образы минең иҫемә төшә.

– Мөхәббәт тигән тойғоноң бейеклегенә һәм бөйөклөгөнә ышанғас, ғаилә ҡорғанһыңдыр,– тип һораным Зифа Ғаяз ҡыҙынан осрашыуҙарҙың береһендә.

– Һай, йәшлек тигәнең, мине һөйөү алданы. Бигерәк тә хыянаты аяҡтан йыҡты. Ғашиҡ булғанда, бөтә донъяны алһыу ҡараште күрәһең икән ул... Ҡыҫҡаһы, яңы тыуған баламды күкрәгемә ҡыҫып, диплом да алып өлгөрмәй, фатирһыҙ тороп ҡалдым Өфөнөң таш урамдарындағы ете юл сатында.

Шуныһына яҡшы төшөндөм: мине эҙәрлекләп килгән тәүге мөхәббәтемдең мажаралы ваҡиғалары ғүмер буйы осраған ҡаршылыҡтарҙың сәбәпсеһе булды. Уйлаһам – уйҙарымдан уйылам. Насармы, яҡшымы ҡатын-ҡыҙҙы бар нәмәгә илһамландырған көс – барыбер ғаилә. Мөхәббәт һинең бөтә йәшәйешеңдә, аралашыуыңда, ҡылыҡ-фиғелдәреңдә сағылырға тейеш, тигән күҙлектән сығып, яңынан ғаилә ҡорҙом. Бик матур һәм татыу йәшәп ятҡанда, тормош юлдашым бәхетһеҙлеккә осрап, ҡапыл вафат булды. Игеҙәк ҡыҙҙарым – Аида менән Алияны ҡосаҡлап, күҙ йәштәремә мансыла-мансыла донъя тигән даръяның әсе һурпаһын татыным. Ярай әле, ата-әсәйем, туғандарым һәр саҡ янымда: тәүгеһендә туғыҙ айлыҡ малайымды ҡарашһалар, быныһында ҡыҙҙарымды үҫтерештеләр. Рәхмәтлемен уларға.

Уйлап ҡараһаң, театр эшенә егелгән өс бала әсәһе – ҡатын-ҡыҙҙың ижад даирәһендәге төрлө ҡоршауҙарға ҡаршы тороп, үҙ талантын камиллаштырыуға йүнәлтеүенә, ныҡышмаллығына иҫең китер. Күтәрҙе эйелгән башын Зифа. Сәмләнеп, ҙур яуаплылыҡ менән тотондо һәр режиссерҙың ҡуйған талабына. Даими рәүештә үҙен иҫбатланы сәхнәлә. Ҡайҙа ғына уйнамаһын – Баймаҡтамы, Әбйәлилдәме, Хәйбуллаламы, Йылайырҙамы, Ейәнсуралам – "Зифа Баязитова ҡатнаша микән?" тип һорайҙар буласаҡ тамашалар. Сөнки актрисаның ҡатын-ҡыҙ психологияһын тәрән белеүе төрлө характерлы сәхнә героиняларын оҫта һынландырыуға булышлыҡ итә. Беҙҙең төбәктең тамашасылары шулай ғәҙәтләнгән: күршеләр, дуҫтар менән бергәләп өйгә ҡайтҡанда йәки бергәләп сәй эскәндә, үҙҙәре яратып ҡараған тамашасылар тураһында кемуҙарҙан, ҡыҙыу итеп фекер алышалар. Был хәл Ф. Бүләковтың "Бәлеш" исемле пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклен ҡарағандан һуң булды, ахырыһы. Береһе: “Ниса булып, Зифа Баязитова тайпан-тойпан тарпаңлап атлап, ҡайһы саҡ ауыҙын асҡанда ябырға оноҡҡан кеше булып, итәген төрлө яҡҡа һелтәп, ҡайһылай ҙа килештерә. Вәт, әй..." Икенсеһе: "Ирәндек тирәләй теҙелеп киткән ауылдарҙағы, сая дәртле, зирәк аҡыллы апай-еңгәйҙәрҙең киң күңеллелеге бөркөлөп торған йөҙө сағыла актрисала" тип фекер алышалар. Сибай театрына эшкә 40 йыл буйына байрамға йөрөгән кеүек бара Зифа ханым. Йәне теләгән роль эләкһә, үҙен, бөтә донъяһын онотоп сума эшкә. Икенсе төрлөрәк әйткәндә, дауа таба күңеленә. Әйтәйек, Н. Ғәйетбайҙың "Төн" пьесаһы (режиссеры Д. Ғәлимов). Бында башҡорт донъяһының балҡышлы шәхестәре: аяныс яҙмышлы әҙибә Һәҙиә Дәүләтшина менән шағир Рәми Ғарипов тормошон сағылдырыусы, быуындар аша философик уйланыуҙарына ҡоролған, үтә ҡатмарлы сәхнә әҫәрҙәрендә бәләкәй генә бер эпизодик образ – Гөлйөҙөм аша тормош дөрөҫлөгөн күрһәтә алды. М. Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһында Тәңкәбикә роле иһә – актерлыҡ яҙмышының онтолмаҫ миҙгелдәренең бер бүләге. Өфө тамашасылары был ролдә Зәйтүнә Бикбулатованың, Гөлли Мөбәрәкованың уйнауын күрһә, Сибай тамашасылары Зифа Баязитова һынландырыуында ихлас ҡабул итте. Шуныһы ла мәғлүм булһын: тәрән психологик трагизм менән һуғарылған әсә образында юбилярҙың ҙур трагик потенциаль мөмкинлектәре асылды. Шулай уҡ Н. Ғәйетбайҙың "Үкенесме әллә һағышмы?" әҫәрендә Фәнүзә роле – яҙмыштары яралы булған бик күптәрҙең йыйылма образы. Хатта Зифа Ғаяз ҡыҙыныҡының үҙенеке лә ауаздаш. Бындай әсе яҙмышлы, үкенесле лә, һағышлы ла Фәнүзәне тик үҙ йөрәге аша үткәргәндәр генә тыуҙыра ала торғандыр.

80 йыл дауамында тамашасыларҙы үҙенә ылыҡтырған Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры башҡаларға һис тә оҡшамаған. Һәр саҡ үҙ юлын таба, үҙ йөҙөн эҙләй – үҙенсәлеге лә шунда. Ҡырҡ йыл әүәл театр ҙур күтәрелеш осоро кисерҙе. 1973 йылдарҙа Өфө сәнғәт институтын



Зифа Баязитова, Риф Сәйфуллин.
Спектаклдән бер күренеш.

тамамлап дүрт йәш драма артисы килгәйне: Зифа Баязитова, Вәкил Йосопов, Риф Сәйфуллин, Хисмәт Дәүләтов. Тәгәрмәс өҫтөндәге актер тормошона ҡулайлашыу ауыр булһа ла, Сибай тамашасыһын йәшлек дәрте, сибәрлектәре, етеҙ булыуҙары һәм бай хис-тойғолары менән әсир итте улар. Йылдар үтеү менән, тәжрибә туплағас, аңлы рәүештә донъя менән берсә яғалашып, берсә алышып, берсә килешеп ихлас ынтылдылар ижади камиллыҡҡа. Бөгөн улар – милләтебеҙҙең иҫ киткес фәлсәфәүи ҡарашын һеңдергән, халыҡҡа яҡынайған һәм уны аңлаған, Көньяҡ-Көнсығыш Башҡортостан тамашасыһының һөйөүен яулаған актерҙар – бөгөн дә театрҙың ижад ҡаҙанын бергә тулыландыра. Бер театрҙа, ҡырҡ йыл дауамында күпме образ ижад иткәндер Зифа, унһын әйтеүе ҡыйын. Хәйер, тотош һанап сығыуҙың кәрәге лә юҡ. Ҡайһы берҙәрен телгә алыу ҙа етә. Мәҫәлән, Н. Ғәйетбайҙың "Илама, һылыу"ында – Зәлиә, Лек Валеевтың "Париж егете Әлфәнис"ендә – Фәриҙә, М. Садиҡованың "Бер генәм Гөлгөнәм"ендә (режисеры Лек Валеев) – Гөлсәсәк, Ф. Бүләковтың "Буйҙаҡтар"ында – Гөльямал һ.б. Һәр бер образы ҡабатланғыһыҙ, тормош-көнкүреш, йәшәйештән алынған, ысынбарлыҡ менән биҙәлгән, йән өргән.

Остаздарына, бергә эшләгән коллегаларына рәхмәтле ул. Бигерәк тә оло быуын артистары Закир Ханов, Шәмсинур Сиражетдинова, Хәмзә Ҡурсаев, Рәзинә Ҡаһарманова, Мөнирә Әхмәтғәлиева, Мулланур Ниғмәтуллин, Марат Йәмилевтарҙан тәжрибә уртаҡлашып ҡалыуы менән, Рәмилә Хоҙайғолова, Фариза Хәсәновалар менән бергә эшләүенән бәхетле.

Балаларынан да уңды: Аида – Стәрлетамаҡ рус дәүләт драма театрының актрисаһы, Алия – Башҡортостан дәүләт телевидение һәм радиотапшырыуҙар компанияһында ижади хеҙмәттә. Ейәнсәрҙәре Ләйлә менән Әҙиләнең дә быуындар сылбырын ижад юлы менән дауам итәсәктәренә өмөт ҙур.

Ижадтан туҡылған 60 йыл ғүмер... Ауырлыҡтар аша табылған бәхет. Алдағы йылдар ҙа ырыҫлы булһын. Ижад үрҙәре иһә һаман алға әйҙәй.

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**



**Камил**
**ФАЗЛЫЙ**

## Наркобарон

***Юмореска***

Ғиндулланы Хөршиҙәнең ҡеүәтле сәмәйе Ҡара Йәләй тыҡрығындағы кесерткән араһына йығып һалғайны. Йәй уртаһы булһа ла, кистән йылы ямғыр ҡойоп үткән ерҙә таң әтәстәре уятҡансы йоҡо һимертеп, бөйөрҙәренә һыуыҡ тейҙерҙе. Ҡала дауаханаһына һалып, аҙна-ун көн укол ҡаҙап «бештеләр» үҙен: беләктәрендә тишер урын ҡалмағас, арт шәрифтәрен иләккә әйләндерҙеләр. Тырышлыҡтары бушҡа китмәне – Ғиндулла, яңы тыуған бәрәс шикелле, кәкрәйә-турая аяҡҡа баҫты. «Башҡаса бер ваҡытта ла шайтан һыуын ауыҙыма аласағым юҡ!» – тип Хоҙайға бағып та, ауырыуҙарға ҡарап та ант итте.

Ниһайәт, шәбәйеп, бөгөн дауахана ҡапҡаһынан сыҡты. Донъя иҫ киткес матур. Ағастарға ҡунып ҡоштар һайрай. Йәйге йоҡа кейемгә төрөнгән кешеләр тыз да быз ары-бире үтә. Йомшаҡ йылы ел, йәш ҡыҙҙарҙың үтә күренмәле күлдәк итәктәрен әҙ генә өҫкәрәк сөйөп, шәрә боттарын асып ебәрә...

Күҙҙәр шәрә боттарҙан ҡаршылағы араҡы-вино магазинына күсте. Ир-ат халҡы әленән-әле шалтыр ҙа шолтор «күңел күтәргес» йөкмәп сыға. Ғиндулланың да ҡулдары, үҙенең ихтыярынан тыш, кеҫә төптәрен ҡырыштырырға тотондо һәм, дарыуҙан ҡалған аҡсаларҙы иҫәпләр өсөн, күҙҙәр ҡаршыһына уҫҡа йәйеп һалды.

«Терелеү һөйөнөсөн йыуырға кәрәк!» – тине баш, антты боҙоп. «Ярай, риза-быҙ», – тине аяҡтар, һәм хужа магазин эсенә атланы. Ул арала ауыҙ бер тын алыуҙа «сәкүшкә»не ҡорһаҡ тигән көршәккә ҡойоп та ҡуйҙы. Күңелдәр күтәрелеп китте. Закускаға осһоҙ «Прима» төтөнөн һурып туйғас, егет ауылға илтеүсе туҡталышҡа табан юлланды. Сәйер генә ғәҙәте бар Ғиндулланың: эсендә әҙ-мәҙ «шайтан ҡаны» йүгерә башланымы, күкрәк киреп йырлағыһы килә. Әле лә ул, тәүҙә ауыҙ эсенән генә моңланып, тора-бара тауышын көсәйтә бирep:

– Эх, гармун да булһа икән эргәмдә, һыуҙа ҡағыныусы ҡаҙ ҡанаттарылай бармаҡтарым көмөш телдәрҙе бейетер ине, – тип хистәргә бирелде.

---

*Камил Фазлый (Камил Нәзми улы Фазлетдинов –1949) Бәләбәй районы Тоҙлоҡуш ауылында йәшәй. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ҡала һәм район хакимиәтенең Фәтих Кәрим исемендәге премияһы лауреаты.*

Эйе, моң тигән күңел ҡылдарын тибрәтеүсе һәләтте ҡыҙғанмаған Хоҙай Тәғәлә Ғиндулланан, киреһенсә, өйөп биргән. Ауылда ғына түгел, ҡала һәм район күләмендә уҙғарылған үҙешмәкәр таланттар бәйгеләрендә ҡатнашып, һәр саҡ призлы урындарға лайыҡ була. Тартмаһы менән сервиз да биреп ҡайтаралар, Маҡтау ҡағыҙҙарының да иң кәттәһен тотторалар.

Шул ваҡыт үҙен, ямғырҙан һуң ҡалҡып сыҡҡан бәшмәктәр шикелле, әллә ҡайҙан килеп йыйылған ҡала шпанаһы уратып алды. Тәүҙә шырпы һоранылар. Уның артынса биш-алты тәмәкенән елдәр иҫте. Инде араҡы таптыралар, етмәһә, баштары егеттең ҡултыҡ аҫтына етер-етмәҫ көйөнсә, мөйөшкә ҡыҫып, төрткөләп алалар.

– Ә пинжәге нисауа бының, бер ҡап махраға һатырға була! – Ике жиган еңенән тартҡайны, Ғиндулла пинжәк эсенән кейелгән бер ҡат еңһеҙ күлдәктән торҙо ла ҡалды. Пинжәк һыйыр күргән үгеҙ күҙеләй һыңар төймәһен ялтыратып ҡулдан-ҡулға күсеп йөрөгән арала, бер жиган тел шартлатып, һыҙғырып уҡ ебәрҙе:

– Ә ул – ҡойоп ҡуйған наркоман. Әле лә, күрәһегеҙ, под кайфом. Ана, беләктәренә күҙ һалығыҙ әле!

– Мин наркоман ғына түгел, наркобарон! – тип төҙәтте Ғиндулла, шпаналарҙан ҡотолоу форсаты тыуғанға һөйөнөп. – Йәле, килтер пинжәкте!

Тегеләр пинжәкте йомарлап, егеттең битенә аттылар ҙа урам буйлап саптылар. Урам буйында һерәйеп торған милиционер эргәһенә туҡтап:

– Эй, мент, ана унда наркобарон баҫып тора, кайф ловит, йылы килеш тиҙерәк тота күр үҙен! – тигән һүҙҙәр менән Ғиндуллаға төртөп күрһәттеләр. Милиционер, наркобарондың үҙен тотоп бирһә, кәм тигәндә миҙал эләктерәсәген күҙаллап, «енәйәтсе» улай-былай ҡасып китмәһен өсөн, йәһәт кенә кобураһынан пистолетын сығарып, ҡысҡыра-ҡысҡыра Ғиндуллаға табан йүгерҙе:

– Туҡта, бандит! Ҡуҙғалаһы булма, юҡһа атам!

Йылан шикелле ҡара көбәк күргәс, Ғиндулла ҡойолоп төштө, ауыҙ асып ҡаршы һүҙ әйтергә теле тотлоҡто. Хәйер, тәртип һаҡсыһының тыңлап торорға теләге лә юҡ ине – ҡулдарына бығау кейҙереп, тейешле ергә алып та китте. Ә ундағылар нисек эш итергә белә: пинжәген һалдыртып, ике беләгенә күҙ төшөргәс, алдарында кем баҫып торғанлығын тиҙ аңланылар.

– Тимәк, үҙең наркоман, етмәһә, наркобарон, – тип һүҙ башланы наркоконтроль вәкиле. – Мәк һатаһыңмы, әллә киндер үҫтерәһеңме?

– Дауаханала яттым... – «Наркобарон»дың ҡурҡыуҙан ҡалтырап сыҡҡан тауышы, тәмәке төтөнө шикелле, һауала эленеп ҡалды.

– Ялған күрһәтмә биргән өсөн иректән мәхрүм итеү статьяһы ҡаралған. Дөрөҫөн генә һөйлә! – Һорау алыусы хәнйәрҙәй үткер ҡарашын егеткә батырҙы. – Өйөңә барып мәк, киндер кеүек хикмәттәрҙе тапһаҡ, ялғаның фаш ителер, йә?!

Сәскәләр үҫтерергә ярата бит әсәһе, суҡынмыш. Түтәл-түтәл итеп ниндәйҙәрен генә сәсмәй! Йәшереп булмай.

– Мәкте матурлыҡ өсөн өй ҡаршыһында түтәлдә үҫтерәбеҙ, ә бына киндер орлоғон сәскәнебеҙ юҡ, сөнки бөтә ауылыбыҙ менән киндер эсендә ултырабыҙ. Баҡса башынан алып сүплеккә тиклем тирә-йүнде ғәләмәт ныҡ баҫты, ҡәһәрең, – тип зарланды апаруҡ шөрләгән егет.

– Йыш ҡулланаһыңмы?

– Нимәне?

– Әйтәйек, киндерҙе.

– Хоҙай биргән емеш тә инде, көн һайын тиерлек.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, наркоконтроль вәкиленең ҡолаҡтары үрә торҙо:

– Йәле һөйләп бир, нисек?

– Нисек тип ни... әсәй менән кистәрен эс бошҡанда киндер орлоғон эҫе табала ҡыҙҙырып ашайбыҙ.

– Кешеләргә лә һатып бирәһегеҙме?

– Ни эшләп һата, ти! Бушлай! Кистәрен ҡапҡа төбөндә көтөү ҡаршылағанда күрше әбей-һәбейҙәргә услап өләшеп сығабыҙ. Улар менән бергәләшеп эскәмйәгә ултырып йә көнбағыш ярабыҙ, йә киндер сәйнәйбеҙ...

Шул саҡ Ғиндулланың уң ҡулы пинжәгенең аҫҡы кеҫәһендә бер-ике ус самаһы киндер орлоғо ятҡанлығын хәбәр итте. «Ҡыҙғанма, бир мәк менән киндер батшаһына. Ике ус орлоҡ биргәндән ярлыланмаҫһың, ашаһын! – тип бойорҙо башы, – юҡһа, ебәрә белмәҫ!»

– Бына, ауыҙ итегеҙ, һәйбәт итеп ҡыҙҙырылған, етмәһә, өйҙә тағы ла бар.– «Наркобарон» һорау алыусыларға «күстәнәс» һуҙҙы.

– Рәхмәт, – наркоконтроль вәкиле, усына киндер орлоғон алып, иптәштәренә күҙ ҡыҫты. – Тик бушҡа алмайым, аҡса түләп. Юҡһа, минең үҙемде лә ришүәт алыуҙа ғәйепләйәсәктәр. – Ошо һүҙҙәр менән ул Ғиндуллаға тамғалы аҡсалар һуҙҙы.

– Ярай, улай булғас, юҡты бушҡа бушатҡансы, бирегеҙ, – Ғиндулла шығырҙап торған иллелекте кеҫәһенә һалып та ҡуйҙы. – Бер шешә сәмәй килә быға!

Шуны ғына көтөп торған наркоконтроль вәкилдәре наркотик һатышҡанда тамғалы аҡса менән «тотолған» егеттең ҡулдарына тимер бығау кейҙерҙеләр.

...Суд ултырышы ҡыҫҡа булды. «Үҙендә наркотик матдәләр етештергәне һәм халыҡҡа таратҡаны өсөн гражданин Мөшкөлбаев Ғиндулла Хикмәтулла улын дүрт йылға иркенән мәхрүм итергә!» тигән уҫал ҡарар сығарылды. Шулай итеп, ай күрҙе – ҡояш алды: дауахана түшәгенән Ғиндулла тура ҡаты режимлы холоҡ төҙәтеү колонияһына килеп ҡапты.

Ҡоймалары сәнскеле, барак тәҙрәләре рәшәткәле булһа ла, бындағы тотҡондар егетте тәүге көндәрҙә нисектер йылы ҡабул итте. Ауыҙынан сыҡмаһа ла, ҡайҙан белеп ҡалғандар тиген, «наркобарон» тип ҙурлап, дәрәжәләп өндәшәләр, хатта үҙҙәре ҡуйыһын һемереп туйғас, эсенән Мәскәү күренмәле ҡалдыҡ-боҫтоҡ сәйҙәрен дә уртаҡлашалар, күҙҙәре менән унан ниҙер өмөт итәләр. Өмөттәре аҡланмағас, тора-бара дәрәжәле исем мыҫҡыллы ҡушаматҡа әүерелде.

– Эй, наркобарон, итектәремде таҙартып, майлап ҡуй! – тип бойора “Бригадир” атлы әзмәүер.

– Мин йоҡлаған арала күлдәгемә төймәләр тағылған булһын! – Быныһын “Кувалда” ҡолаҡҡа киртә.

Дә-ә... Ете йортҡа бер энә, тигәндәй, ашау яғы ла кәзә йыуатырлыҡ: кәбеҫтә һыуы менән әлеге лә баяғы нужа бабай таяғы – шәкәрһеҙ сәй. Ә иң яфалатҡаны – тәмәке булмауы, «Прима» һағындыра. Йәнә лә тоҙло балығы, салоһы менән бергә «йәннәт һыуы» ла көнөнә туҡһан туғыҙ мәртәбә иҫкә төшөп кенә тора.

Аҡсаң булһа, төрмә магазинында кәрәк-яраҡ етерлек тә ул, тик бына пенсионер әсәй ҡарсыҡтан нимә һорайһың... Ошо эскелек арҡаһында ҡатыны ла, һыңар баланы етем яһап, айырылып, үҙе менән алып киткәйне. Өфөлә ике туған бай ағай бар-барлыҡҡа, әллә хат яҙып ҡарайһы инде үҙенә... Ярҙам ҡулы һуҙһын ауыр минутта. Шартына килтереп ярты бит самаһы сәләм өлөшөн яҙып, Ғиндулла төп темаға күсте: майы иреп һөйәге ҡалған бисара яҙмышы хаҡында зарланды, толоп еңе саҡлы боғаҙын туйҙырыу мәсьәләһен күтәрҙе, һуңғыһы иң мөһиме икән – хаттың теүәл өс бит өлөшөнә һыйҙы: «Ағай! – тип яҙҙы ул. – Эсемдә

сүл бүреләре олой. Ҡорһаҡ сәсрәп тороп аҙыҡ таптыра. Һин кисекмәҫтән бер егерме кило ауырлығында посылка, ике кило самаһы бандероль һалып ебәр инде. Шунан артығына рөхсәт бирмәйҙәр. Юлың был яҡтарға төшкәндә минең колонияға һуғылып кит. Һиңә һәм еңгәгә таҙалыҡ-һаулыҡ теләп, бик ышанып көтөп ҡалыусы, һеҙҙең юлдан яҙған «наркобарон»ығыҙ Ғиндулла».

Яҙыуын яҙҙы ла бит, һин тигәндә – мин иҙәндә, тип әҙер тормайҙар икән ул, ҡосаҡ йәйеп. Юҡты бушҡа ауҙарыу булды. Ағайҙы ла, бер ҡараһаң, дөрөҫ аңларға кәрәк. Башына тай типмәгән. Байлыҡты хатта бармаҡ араһынан да һығып сығармаған өсөн бай ул. Посылка ебәреү түгел, хат та яҙманы, ҡарун.

Көн һайын тотҡондар үтәргә тейешле бурыстарҙы ятлатып, «Алла һантыйы күреп», әле эшкә, әле ашханаға, әле мунсаға илағың килгәндә лә сафҡа теҙеп, йырлатып ҡына алып баралар. Көн артынан айҙар, уларға эйәреп йылдар үтә торғас, ирек һулышын тойор ваҡыттар ҙа яҡынлашып килә, юғиһә. «Әгәр ҙә мәгәр был монахтар ояһынан иҫән-имен ҡотолһаммы, юлымда үҫеп ултырған һәр бер киндерҙең тамырына кәрәсин һибеп ҡоротасаҡмын»,– тип нисәмә тапҡырҙар тәүбәгә килде егет.

Бер көндө колония нәсәлниге, утҡа баҫҡан бесәй шикелле, арлы-бирле йүгерә башланы. Тимәк, ниҙер көтәһе ҡала. Ысынлап та, күп тә үтмәне, тотҡондарҙы сафҡа теҙҙеләр:

– Йырсылар, бейеүселәр, музыка ҡоралдарында уйнай белеүселәр, ғөмүмән, артистар бармы арағыҙҙа? Булһа, ике аҙым алға атлағыҙ! – тип бойорҙо нәсәлник. Күп тә үтмәне, төркөмдән тиҫтәләгән тотҡон ышаныслыҙ аҙымдар менән алға сыҡты. «Ни булһа ла булыр, йөн тибеп йөрөгәнсе, сығайым әле», – тип Ғиндулла ла бәхет ҡошон һынап ҡарарға булды.

– Колониялар араһында үҙешмәкәр артистарҙың йыр-бейеү бәйгеһе үткәрелә. Ҡаланың үҙәк мәҙәниәт һарайында сығыш яһаясаҡбыҙ. Еңергә кәрәк! – Нәсәлник һуңғы һүҙгә айырыуса баҫым яһаны. – Һынатмағыҙ! Еңеп ҡайтһағыҙ, аҙна буйы байҙарҙың төшөнә лә инмәгән тәмле, тел йотмалы аштар ашатасаҡмын. Селедкаһы ла, «наркомовский» ҙа булыр. Хатта, суҡынып әйтәм, еңеүсене икеөс айға алдан иреккә сығарасаҡмын, килештекме?!

Бындай йылы вәғәҙәне ишеткән «артистар» ең һыҙғанып, йәғни көндө төнгә, төндө көнгә ялғап репетиция эшенә керештеләр. Осраҡлы килеп эләккәндәре беренсе иләктән иләнгәндә үк ҡойолоп төшөп ҡалды. Ниһәйәт, сабыр ҡаҙаны шартлар хәлгә еткәндә, тотҡондар алдында оло сәхнә пәрҙәләре асылды. Һынатманылар егеттәр. Ғиндулланың «Һағындыра йылы ҡосағың» йырын аяҡ өҫтө баҫып алҡышланылар, ә ул гармунда бейеү көйҙәрен һыҙҙырып уйнай башлағас, тамашасылар баҫҡан урындарында тыпырҙап бейергә төштө. Шулай итеп, колония йыр-бейеүҙә беренселекте яуланы, Маҡтау ҡағыҙына һәм махсус грантҡа лайыҡ булды. Шатлығынан ҡыйыш тейгән нәсәлник аҙна-ун көн самаһы иҫенә килә алманы, ошо сәбәпле үҙен йорто менән төрмә араһында күтәреп кенә йөрөттөләр.

Хәтере тишек иләк икән түрәнең.

– Ҡайҙа беҙгә тигән байҙар ашы? – тип һораны «артистар» сираттағы барлау ваҡытында.

– Һеҙ бында байҙар ашы ашар өсөн килтерелмәгән, ә аҡылға ултыртыр өсөн ултыртылған! – тип ҡырт киҫте бахмурҙан кәйефһеҙ йөрөгән нәсәлник.

Тормош элеккесә дауам итте. Көн һайын мең тапалған бетон өҫтөнән шап та шоп саф строй менән үтеү, тамаҡ йыртып йыр йырлау. Торғаны бер һарыҡ

көтөүе. Берең бәәлдәүгә башҡаларың хор менән күтәреп ала. Ә эш хаҡы күркә көлөрлөк – ҡырҡ-алтмыш һум тирәһе генә.

Ниһайәт, Ғиндулланың дүрт күҙ менән зарығып көткән ireккә сығыр көнө килеп етте. Бына ул теле менән тирмән тартыусы нәсәлник ҡаршыһында: таштан йүкә һуйыусы хәйләкәр төрмә ҡомағына баш эйеп баҫып тора. Ә тегенең бөгөн ауыҙы йырыҡ:

– Йә, Мөшкөлбаев, срогың тулды. Мин һине бөгөндән ошо матур һарайҙан осорорға тейешмен.

– Рәхмәт, гражданин нәсәлник.

– Рәхмәтеңде кесәңә һалып ҡуй. Әле бер эш килеп сыҡты: һинең атҡаҙанған артист-наркобарон икәнеңде яҡшы беләбеҙ. Тиҙҙән колониялар араһында йырбейеүҙә өлкә-ара смотр-бәйге була. Ҡатнашыуың мәжбүри. Нисек тә бер-ике аҙнаға түҙ инде, унан дүрт яғың ҡибла. – Нәсәлник, күҙҙәрендә шайтан бейетеп, һүҙен дауам итте: – Ҡара әле, наркобарон, бәлкем, ғөмүмән, беҙҙә генә тороп ҡалырһың, ә? Айырым бүлмә... бүлмә тип, камера бирербеҙ үҙеңә, бик теләһәң – карцер, яҡшы ашатыу...

Көтөлмәгән ҡот осҡос яңылыҡтан Ғиндулланың күҙ алдары ҡараңғыланды, асыуҙан йөрәге дарҫлап тибергә тотондо. Бына бит ул ниндәй: бысаҡһыҙ һуйҙы ла ҡуйҙы. Асыуы, Везувий вулканы кеүек, ҡотороп тышҡа ашты:

– Һин, сүплек башындағы дегәнәк! Хәҙер үк сығар һаҫыҡ камераңдан! Юҡһа... – Йыуаш наркобарон беренсе тапҡыр йоҙроҡ төйнәп, уҫал ҡарашын нәсәлниккә төбәне.

– Ҡара һин уны, эт һимерһә, эйәһен тешләй, тигәндәре ошо икән. Ишеттегеҙме, ул мине яман исем менән атаны. Икенсенән, «юҡһа» ни эшләрһең? – Нәсәлник мыҫҡыллы тауыш менән хахылдап көлөп ебәрҙе. – Юғарыға яҙыр инең, шикәйәтең минең ҡул аша үтә. Миңә ҡул күтәрер инең, һин, бетләгән, үҙ шәүләңдән үҙең ҡурҡаһың, мәймүн!

Асыуҙан аҫҡы ирендәре дерелдәүгә күскән тотҡон нәсәлниктең әпәй шүрлегенә нисек үрелгәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Ләкин һуң ине инде. Бәреп кенә үлтермәһә ярай ҙа надзирателдәр батшаһы. Ана бит, беләктәре ниндәй йыуан – автокран шикелле.

Үҙенән баш ярым юғарыла урынлашҡан әпәй шүрлегенә наркобарон йоҙроғо менеп етә алмаһа ла, нәсәлник уны еткәнгә һанап ҡабул итте:

– Күрҙегеҙме, тотҡон Мөшкөлбаев хеҙмәт бурысымды үтәгәндә миңә ҡул күтәрҙе. Бөтәгеҙ ҙә шаһит булырһығыҙ!

Ғиндулланы һаҡ аҫтында бүлмәгә алып ингән надзирателдәр «Есть!» тип честь бирҙе. Ә нәсәлниктең ауыҙы ҡолаҡта:

– Ах, ниндәй һөйөнсө! Ах, ниндәй бәхет! Хоҙай үҙе ебәргәндер беҙгә был былбылды! Уның сәпсек күкәйеләй йоҙроғо кәм тигәндә яңынан дүрт йыл срокка тартасаҡ! Тимәк, алда дүрт йыл буйы барасаҡ смотр-бәйгеләрҙә еңеү тағы беҙҙеке! – Шатлығынан ни ҡылырға белмәгән нәсәлник таштай ҡатып ҡалған наркобаронды ҡосоп, өҫкә сөйҙө. – Ҡаптырҙыҡ бит тутыйғошто тоҙаҡҡа! – Ул алдан ҡорған хәйләһен дә йәшереп торманы. – Видеотаҫма бөтәһен дә күрһәтә, – тип кенә ебәрҙе.

Нәсәлник бүлмәһендә әтәсләнергә ирек ҡуйған һаҡсылар егетте ҡабат камераға илтеп япты...

## Тетрәндем

Ауылдарҙың юҡҡа сығыуына сәбәптәр күп, әлбиттә. Тәү сиратта, хәҙерге ысынбарлыкта ауыл хакимиәттәренән башлап юғары хөкүмәт етәкселәренә тиклем арала халыҡ яҙмышын ҡайғыртыу икенсе планға ҡуйылған.

Халыҡты эш менән тәьмин итеүҙе хәстәрләүсе юҡ. Дөйөм алғанда, беҙҙә генә түгел, тотош Рәсәйҙә был мәсьәлә киҫкен тора. Тәртип, халыҡ мәнфәғәтенә яраҡлаштырылған закондар бөттө. Закон-ҡағиҙәләр конкретһыҙлығынан барыһы айҡала ла сайҡала. Һәр етәксе, түрәләр, самаһын онотоп, тик үҙ кеҫәһен ҡалынайта: бар тырышлығы – отоу, урлашыу, алдашыу. Йәмәғәт икегә: байға һәм ярлы-фәҡиргә бүленде. Йәһәт кенә йәмәғәт милке шәхси милеккә күсте.

Эшһеҙ, берниндәй табышһыҙ ауыл кешеләренә йәшәрлек мөмкинлектәр кәмей. Ата-бабаларының зыяратын, изге төйәген, аҫыл ерҙәрен ҡалдырып китергә мәжбүр хәҙер әҙәм балалары.

2010 йылда тыуған ауылымдың... нигеҙен барып күрҙем. Ундағы күренеш мине тетрәтте. Ә бит үткән быуаттың 60-сы йылдарында ғына ике урамда алтмышҡа яҡын йорт бар ине. Мәктәп, магазин, телефон... Халыҡтың күбеһе ҡарағай һыҙып, сайыр йыя ине. Әле нәҡ өйөбөҙ урынында емерек келәт ишараһы ҡалған. Үткәндәремде иҫләп, ауыр һыҡрандым. Ниндәй тормошто алып килделәр беҙгә егерме беренсе быуатта – кибернетика, автоматизация заманында? Кемдәр ғәйебенән килеп сыҡҡан аһ-зарлы фажиғә был?

Нисек ҡотолмаҡ кәрәк йән өҙгөс хәсрәттәрҙән? Эт ғазабы кисереүселәрҙең киҫкен проблемаһын кем аңлар, кем ҡайғыртыр, кем ярҙам ҡулын һуҙыр? Тағы күпмегә һуҙылыр һармаҡтар етәкселегендә ҡупҡан мәхшәр?

Гөрләп торған ауылдарҙың, утарҙарҙың юҡҡа сығыуының шаһитыбыҙ. Хоҙайбирҙе генә түгел бит әле: Еҙембаш, Өскәзә, Сырышҡы, Көйөк, Әттәм, Ҡарағай, Мәнәйҙе һ.б. бөтөнләй юҡ, ә Өмөтбай, Һуйыр-Айыс, Ботай, Һаралы бөтөү юлында. Аҙмы ни Белорет районында ошондай яҙмыштағы башҡа ауылдар? Иҫең китерлек!

Фекерем дөрөҫләнерме-юҡмы, әммә «ҡороған» ауылдарға ҡабат килерҙәр ул берәй ваҡыт. Тик кемдәр булыр улар? Атай-олатайҙарҙың изге төйәктәре ситяттарға һатылмаҫмы? Һәр хәлдә, үҙ башҡорттарыбыҙ булырына һис бер ышаныс юҡ. Тәбиғәт байлығын, урманын ҡырҡып, ерен аҡтарып, ҡаҙылдыҡ байлыҡтарын талап, үҙ теләген ҡандырып һыпыртыусылар ғына булмаҫмы?

Ай-һай, бөгөнгө демократтарға ышаныуы бик тә хәүефле. Ҡабул иткән закондарында 49 йылға арендаға рөхсәт ителгән бит. Аҙаҡ таптың, имеш, ғәҙеллекте. Дөрөҫө, көндән-көн илебеҙҙә дөйөм хәлдәр ауырлаша, ҡатмарлаша бара. Әленәнәле бар нәмәгә хаҡтар аҡылға һыймаҫлыҡ булып үҫә. Һаптәндәргә, яман көстәргә ҡаршы тороусыларҙы шәм яҡтыртып эҙләһәң дә таба алмаҫлыҡ осорға еттек...

**Исмәғил ҒИМРАНОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**

## «Сибәр ҡатын» трагикомедияһында конфликт

Билдәле драматург Кәбир Аҡбаштың «Сибәр ҡатын» трагикомедияһына нескә психологизм, төрлө холоҡло образдар теҙмәһе хас. Ундағы Нурия ханым йәш, ҡыҙыу ҡанлы, шул уҡ ваҡытта аҫтыртын эшҡыуар булып йөрөүсе ҡатын-ҡыҙ итеп һүрәтләнә. Мәрйәм менән әңгәмә барышында үҙен һауалы ҡатын итеп күрһәтә.

«– Бындай күлдәктәрҙе ҡайҙан табаһың һин, Нурия? Иҫ китмәле бит. Тәнеңә һылашып тора.

– Юҡҡа иҫең китмәһен. Донорҙарыңды тап, һин дә күлдәкһеҙ йөрөмәҫһең...»

Ул тормошта барлыҡ әйберҙе еңел юл менән табыу яғында, кешеләр араһында мөнәсәбәттәр уның өсөн бер ни түгел. Тап ошо юҫыҡта трагикомедия жанрына хас булған трагик һәм комик сюжет һыҙығы асыла. Алдына ҡуйған маҡсаттары, тиҙ арала байыу уйы Нурияны көлкөлө лә, ҡыҙғаныс та хәлгә юлыҡтыра. Эшҡыуар Жан менән бәйләнешкә инеп, яңғыҙ сыйырсыҡ хәлендә ҡала.

Әҫәрҙә алынған сыйырсыҡ образы – экспозицияны тәшкил итеүсе шартлы күренеш. Бер үк ваҡытта хәл-ваҡиғаларҙы тормошсан дөрөҫлөгөндә сағылдырыуға йүнәлтелгән персонаж да. Был ҡош әлеге әҫәрҙә – яңғыҙлыҡ, бәхетһеҙ тормош символы. Бала үҫтереп тә бала тәрбиәләмәгән Нурия һәм яңғыҙ Жан.

Жан образы әҫәрҙә айырым юмористик һыҙаттарға бай. Ул – эгоист, мәрхәмәтһеҙ һәм ваҡсыл кеше. К. Аҡбаш уны символик рәүештә Сеньор Вертолет тип атай. Уның өсөн Нурия – табыш сығанағы, йәшерен эшҡыуарлыҡта аҡса табышыусы.

Трагикомедияларға хас мотивтар был әҫәрҙә, бер-бер артлы үрелеп, трагик һәм комик ситуациялар бәрелешен хасил итә. Һүрәтләү саралары, үҙенсәлекле сағыштырыу элементтары әҫәрҙең аҙағынаса ҡыҙыл еп булып һуҙыла. Шәхси мәнфәғәт, дан өсөн тырышыусылар кешелеклелек сифаттарына эйә булғандарға ҡаршы ҡуйыла. Әҫәр аҙағына киҫкен мәсьәләләр тулыһынса хәл ителә. Геройҙар иһә сетерекле коллизиялар арҡылы осор мөхитенең ҡатмарлы үҙенсәлектәрен асып һала.

**Ләйсән ХӨСӘЙЕНОВА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспиранты.**

## Уҡымлы роман

Иҙрис Ноғомановтың «Ағиҙел» журналының 2011 йылдың 1–3-сө һандарында донъя күргән «Һаҡмарбаш» романын бик яратып, әҫәрләнеп уҡып сыҡтым.

Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар Башҡортостандың Һаҡмар йылғаһы буйындағы Һаҡмарбаш атамалы ауылында бара. Бүгәсәү яуы һәм уны баҫтырыу осоро әҫәрҙә туп-тура сағылмаһа ла, ошо хәтәр йылдарҙың, «болғауыр дәүерҙәр»ҙең шауҡымы Һаҡмарбаш ауылы кешеләренең тормошо аша күҙәтелә.

Хәл-ваҡиғалар ниндәй ваҡыт арауығын алыуын билдәләү өсөн төп геройҙарҙың береһе Әхмәтйәндең тормошона иғтибар итеү ҙә етә: әҫәр башында ул 14 йәшлек егет – Биксәнтәй байҙың өлкән көтөүсеһе булһа, аҙаҡта инде ул Түңгәүер олоҫоноң 75 йәшлек старшинаһы, ил ағаһы итеп һүрәтләнә.

Был тарихи романдың темаһы – тыуған ил, халыҡ яҙмышы. Азатлыҡ, ер, бәхетле тормош өсөн дошман менән көрәштә күп башҡорт ир-егеттәре шәһит китә, шулай ҙа халыҡ бирешмәй, рух ныҡлығын һаҡлап, еңеп сыға.

Автор, тарихи ваҡиғаларҙы ауыл кешеләренең яҙмыштары менән бәйләп, бик уҡымлы әҫәр ижад иткән. Бында бөтә ырыу яҙмышы бәйән ителә, шул уҡ ваҡытта һәр персонаждың йәшәү асылы, тормошҡа ҡарашы, киләсәккә өмөтө тасуирлана.

Романдың төп геройы Биксәнтәй – ырыуы, иле, халҡы өсөн янып йәшәгән кеше. Ул халыҡҡа, аҡһаҡалдарҙың кәңәшенә таянып, төптән уйлап эш итеүсән. Түңгәүер ырыуына ҡан көсәп килгән Тимашевты армайҙары менән Иҙелбашына ебәрмәй тотоп тора, шуның менән Бүгәсәү батшаға яуға әҙерләнергә, көс йыйырға форсат бирә. Аҡыллы, хаҡ уйлы Биксәнтәй старшинаның дөрөҫ эш итә белеүе халыҡты күп бәләләрҙән ҡотҡарып ҡала.

Романды уҡып сыҡҡан кеше тарихи үткәндәрҙе уның геройҙары менән бергә кисерә, халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, теле, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары тураһында бик күп мәғлүмәт ала. Йәшәү менән үлем, тоғролоҡ һәм хыянат, мөхәббәт һәм нәфрәт һ.б. бик күп фәлсәфәүи уйҙарға ҡоролған был әҫәр.

Бик күп матур һүҙҙәрҙе (хәҙер телдән төшөп ҡалған) оҫта ҡулланып, автор үҙенең белемле, киң ҡарашлы кеше икәнлеген таныта. Тыуған яғының топонимикаһын асып биреүе, легендалар, риүәйәттәр бәйән итеүе менән Иҙрис Ноғоманов әҫәрен тағы ла байытып ебәргән. Романдың теле лә бик бай, һутлы. Шик юҡ: әҫәр, уның үҙенсәлектәре тураһында әле күп яҙырҙар.

«Һаҡмарбаш» романының актуаллеген дә билдәләп китергә кәрәк. Быйыл, милләттәрҙең тыныс һыйышып йәшәү йылында, ижад ителгән әҫәр тап шул темаға арналған да инде. Башҡорт халҡы бер ҡасан да бүтән милләттәргә ҡаршы ҡорал күтәрмәгән, ил баҫырға яуға сыҡмаған, әммә илен, халҡын, динен, Урал тауын дошманға бирмәгән, кәмһеттермәгән. Яҡшы күңел менән килгән ҡунаҡты йәнен бирерҙәй булып, хөрмәт иткән, һыйындырған. (Романдағы Терентий-Тереғол персонажын иҫкә төшөрәйек.)

«Һаҡмарбаш» әҫәре уҡыусылар күңелендә ғорурлыҡ тойғоһо уята, тыуған илебеҙгә, халҡыбыҙға һөйөү тәрбиәләй. Яҙыусы бик тә шәп, матур роман ижад иткән! Уға ҙур рәхмәт. Ижади уңыштар теләйем.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА,**
**уҡытыусы.**
**Межгорье ҡалаһы**.

***

Хөрмәтле «Ағиҙел» журналы редакцияһы!

Иң тәү сиратта Һеҙгә үҙемдең рәхмәт һүҙҙәремде еткерергә баҙнат итәм. Журналдың 3-сө һанында баҫылып сыҡҡан шиғырҙарым («Рәми рухы менән һөйләшеү», «Бөгөнгө Ирәндек», «Асылмаҫ сер», «Бәхет тәме») менән Һеҙ мине бәхетле минуттар кисерергә дусар иттегеҙ. Ябай уҡыусығыҙҙың йөрәк һүҙҙәренә иғтибар иткәнегеҙ өсөн меӊ рәхмәттәр яуһын Һеҙгә.

«Ағиҙел» журналының абруйы ла, минеңсә, халыҡ менән тығыҙ аралашып, халыҡ һүҙенә ҡолаҡ һалып йәшәүендә. Үткән хатымда әйткәнемсә, мин журналдың бер юлын да төшөрөп ҡалдырмай уҡып барам. «Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?» тигән һөйләшеүҙе ифрат ҡыҙыҡһынып күҙәттем. Мостай Кәримдең кешелекте ике төркөмгә бүлеп ҡараған бер ҡыҙыҡ фекере бар ине: уларҙың, кем генә булып эшләүенә ҡарамаҫтан, уҡытыусыға һәм уҡыусыға бүленгәнлеген әйткәйне ул. Барыһы ла белемде уҡытыусынан ала. Шулай булғас, кешенең киләсәктә кем булып китеүе ата-әсә һәм уҡытыусы биргән белем һәм тәрбиәнән тора. Белемде бөтә уҡытыусы ла бирә ала. Ә тәрбиә биреү күберәк әҙәбиәт уҡытыусыһына ҡайтып ҡалалыр, тим. Шуның өсөн әҙәбиәт уҡытыусыһы барыһынан да белемлерәк, тәрбиәлерәк, уҡымышлыраҡ булырға тейештер, тип иҫәпләйем.

Һеҙгә хөрмәт һәм ихтирам менән даими уҡыусығыҙ **Флүрә НИЗАМОВА**.

* * *

Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһының «Ҡыҙ бала» исемле беренсе китабын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым. Китап оҡшаны. Әҙибә бөгөнгө проблемаларҙың төбөнә төшә, рухи ҡыйралыштың сәбәптәрен асыҡлай. Быуындар алышыныуы заманға ярашлы, кешеләрҙең кешелек сифаты, үҙ-ара мөнәсәбәте, йәшәү рәүеше аша бирелә. Иманлы дәүер вәкилдәре Зөлхизә, Рәйхана өләсәйҙәрҙең холоҡ-фиғеле, Бүреһуҡҡан бабайҙарҙың тормошҡа ҡарашы, Хәйрулла, баш бирмәс зимагур Баязит кеүек ирҙәрҙең үрсеүе – барыһы ла ҡуйылған проблеманы асыҡларға ярҙам итә. Иманһыҙлыҡ ысын ир-аттарға, ҡатын-ҡыҙҙарға хас булырға тейеш сифаттарҙы ла ҡыҫырыҡлап сығара. Ят исемдәр, ят ғәҙәттәр тамырлана бара. Ғаиләнең төп нигеҙ ташы – атай. Ир-егет тейешле кимәлдә ғаилә башлығы була алмау арҡаһында күпме ҡатын-ҡыҙҙың, балаларҙың яҙмышы яралана. Иман юғалыуға, рухи ҡыйралышҡа килтерә. Йыйып әйткәндә, бик кәрәкле әҫәр.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Кәңәшле эш береккән

Етенсе тиҫтәнең дүртенсе йылын ваҡлайым. Ошо йәшкә еткәс, аҡһаҡал булараҡ, әйтер һүҙем бар. Ғүмер буйына мәҙәниәт, әҙәбиәт, рухиәт, тарих, тел һәм йәмғәтселек тип янып йәшәнем. Абруй, дан, аҡса артынан ҡыуманым. Ата-бабаларым кеүек тура һүҙле булдым – ошолай халҡыма тоғро хеҙмәт иттем, тип әйтә алам.

Тел яғынан ҡала башҡорто менән ауыл башҡорто араһында айырма ҙур. Ҡалала йышыраҡ урыҫса аралашыла. Фатирҙа ғына башҡорт теленең төбәк диалектында һөйләшәбеҙ. Бында ла балалар, ейәндәр һүҙ араһында урыҫсаны күберәк ҡыҫтыра йәки бөтөнләй урыҫса һөйләшә. Беҙ, ата-әсәләр ҙә, автоматик рәүештә был телде ҡыҫтырып ебәрәбеҙ.

Быныһы тел мәсьәләһе булһын, ти. Ирекһеҙҙән һорау тыуа: ҡала башҡорто, һин нисек йәшәйһең? Йәшәргә көрәшәһеңме?

Йәмғәт эшмәкәре һәм яҙыусы, тарихсы булараҡ, көрәшәм тиһәм, яңылышмам кеүек. Кеше ғүмере көрәштә үтә бит. Бына уның бер миҫалы.

Бер нисә йыл элек ҡала башҡорттары менән башҡорт гимназияһы бинаһын һалдырырға урын эҙләп янып-көйөп йөрөгән саҡ. Үҙәк урамдан урын бирелмәне. Парк эсендәге ерҙәр ҙә әрмән һәм грузиндарға һатылып бөткән.

Күңелебеҙҙе төшөрмәнек, «Дом пионеров» йортона йәнәш буш ергә туҡталдыҡ. Вәт бында урын шәп. Етмәһә, шыршы һәм ҡарағай урманы терәлеп тора. Саф һауа. Хакимиәттең ер комитетына кергән инек, быныһынан да ҡолаҡ ҡаҡҡанбыҙ. Урта Азиянан килгән бер бай ерҙе һатып алған, имеш. Кем белһен? Ҡала түрәләренең үҙҙәренә генә билдәле. Етмәһә, “ҡалала башҡорттар юҡ” тип һөрән һалыусылар күбәйҙе, һәм ошо нахаҡ һүҙгә беҙ альтернатива эҙләй башланыҡ.

Бүтән сара ҡалмағас, тарихи кантон дәүерҙәге ғәскәри башҡортлоҡто иҫкә төшөрөп, Марат Моратов менән икәүләп башҡорт казаксылығын төҙөй башланыҡ. Устав яҙылды, йыйылышта ҡаралды, раҫланды, атаман һайланды. Ләкин, теркәүгә килеп еткәс, оҙаҡҡа һуҙылды. Үҙебеҙҙең Өфөләге башҡорт түрәләре ҡаршы сыҡты. Күрәһең, башҡортта казаксылыҡ булмаған, ғәскәри башҡорт ҡына...

Башҡорттарым араһында берәүһе әрләй, икенсеһе маҡтай, өсөнсөһө абруйын күтәрер өсөн иптәшенең хеҙмәтен үҙләштерә. Дүртенсеһе сәхнәлә ҡурайҙа йәки ҡумыҙҙа уйнай ҙа – эш бөттө. Хеҙмәте өсөн эш хаҡы ала. Маҡтау

грамотаһы бирмәһәң: «Мин был ҡалала ҡалырға теләмәйем»,– тип ҡурҡыта. Теләмәһәң, урыҫтар әйтмешләй, «скатертью дорога, святое место пустым не бывает». Бишенсеһе, алтынсыһы ҡалала «мин башҡорт» тип әйтергә ҡурҡа.

Көндәрҙең береһендә ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе миңә шылтырата: «Гимназияһыҙ ҡалабыҙ, Президентҡа хат яҙырға кәрәк»,– тип үтенә. Мин эстән генә: «Эх, Азат Нәзирович, үҙең дә грамотный бит»,– тип уйлап ҡуйҙым.

Йәмәғәт түрәһе булғас, тыңламай булмай инде. Хатты яҙҙым, ебәрҙем, оҙаҡламай яуап та килеп етте: «Нефтекама ҡалаһында башҡорт гимназияһы төҙөү тураһындағы һеҙҙең мөрәжәғәтегеҙ Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан ҡаралды.

Адресланған республика проектының инвестицион программаһына ярашлы, юғарыла әйтелгән гимназия төҙөү өсөн 2006 йылда 15,0 млн. һум күләмендәге аҡса ҡаралған. Министр урынбаҫары, ҡултамға: И. Ә. Итҡолов».

Рәхмәт беренсе Президентыбыҙға, тиҙләттерҙе. Аҡса булғас, урыны ла табылды. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, гимназия ҡала ситендә төҙөлдө.

Аллаға шөкөр, ҡаланың башҡорт йәмәғәтселеге тарафынан «Ҡала тулҡындары» гәзите (нигеҙ һалыусы – Марат Моратов) сығып килә, филармония (нигеҙ һалыусы – Руслан Ғафаров) эшләй. Башҡорт гимназияһы ла аяҡҡа баҫты. Беҙҙең бурыс – бөгөн ошоларҙы һаҡлап ҡалыу.

Быйыл Үҙәк тарафынан милли республикаларҙың ҡала һәм ауыл мәктәптәрендә туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәре ҡыҫҡартылды. Йәнәһе, уҡыусылар әҙ. Башҡортостан тарихы, географияһы һәм мәҙәниәте дәрестәре лә кәмене. Уның ҡарауы, мәктәптәрҙә христиан дине дәрестәрен керетеү өсөн һаман да баҫым яһала. Башҡортҡа ла, татарға ла уяу булырға кәрәк. Милли үҙәк рәйестәренә “түңәрәк өҫтәл”гә йыйылып, үҙҙәренең фекерен ерле органдарға еткереү мотлаҡ. Сөнки беҙ муниципаль берәмектәренә ҡарайбыҙ. Бөтә мәсьәләләрҙе лә урындағы хакимиәт ҡарарға тейеш, тип уйлайым.

Шуныһы ҡыуаныслы: ҡалала – башҡорт гимназияһы. Директоры Әлфиә Кәримова, урынбаҫарҙары Гөлсәсәк Яҡшығолова, Лилиә Шакирйәнова, Айгөл Фәррәхова уҡыу-уҡытыуға күп көс һала. Төньяҡ-көнбайышта тыуып үҫкән башҡорт ҡыҙы, Башҡортостан тарихы, географияһы һәм мәҙәниәте уҡытыусыһы Гөлназ Ғилфанова дәрестәрҙе бик ҡыҙыҡлы һәм эстәлекле алып бара. Китапхана мөдире Тәғзимә Ҡарманова ла маҡтауға лайыҡ. Улар йәмәғәт эшендә лә әүҙем ҡатнаша. Ҡала мәктәптәрендә лә ундайҙар етерлек. Мәҫәлән, 11-се һәм 16-сы һанлы урта мәктәптәрҙең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Йәмилә Ишкилдина, Әнисә Нурғәлиева шундайҙарҙан. Ҡалабыҙҙа Йәмилә Ишкилдина башҡорт фольклорына нигеҙ һалыусы, ул шул уҡ мәктәптең музейын етәкләй.

Гәзит һәр милләттең тел көҙгөһө һанала. Башҡорт гәзитен һуңғы йылдарҙа Гөлфирә Байбулатова сығара. Ул БДУ-ның Нефтекама филиалында өлкән уҡытыусы ла булып эшләй, филология фәндәре кандидаты. Гәзит биттәрендә төрлө темаға ҡағылышлы материалдар көн күрә.

Һүҙемде тамамлап, ошоно әйтке килә: III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын үтәү өсөн был бинала бөтә шарттар ҙа бар. Әгәр ҙә IV Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайына тиклем ҡаланың башҡарма комитетын ҡатын-ҡыҙ етәкләһә, отошло буласаҡ, тигән фекерҙәмен.

**Фәнил ШӘРИПОВ.**
**Нефтекама ҡалаһы.**

# *ИНШАЛАР КОНКУРСЫНА ЙОМҒАҠ*

*Редакцияның Мәғариф министрлығы менән берлектә, Уҡытыусылар йылына, Башҡортостан яҙыусыларының XV съезына бағышлап иғлан иткән IX-XI синыф уҡыусылары араһындағы иншалар конкурсында 140 кеше ҡатнашты.*

*Бәйге йәш быуынды художестволы әҙәбиәткә ылыҡтырыу, уларҙа художестволы әҫәрҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, әҙәби геройҙар өлгөһөндә йәштәрҙе патриотик, интернациональ, юғары әхлаҡи рухта тәрбиәләү, заманға ярашлы зауыҡҡа эйә ижади шәхес формалаштырыу кеүек ниәттәрҙән сығып ойошторолдо.*

*Дәртләндереү сараһы буларак, үҙенсәлекле һүрәтләнгән, иғтибарға алырҙай фекерҙәр осраған өҙөктәрҙе апрель һанында баҫып сығарҙыҡ. Урындар билдәләнде:*

I **КӘРИМОВА Ренита,**
Мәләүез районы,
1-се дөйөм урта белем биреү мәктәбе

II **1. НУРЕТДИНОВА Альмира,**
Борай районы,
Баҙраҡ ауылы мәктәбе

**2. ФӘХРЕТДИНОВА *Ләйсән*,**
Учалы районы,
Сәфәр дөйөм урта белем биреү мәктәбе

III **1. ҒӘЗИЗОВА Сулпан,**
Нефтекама ҡалаһы,
8-се дөйөм урта белем биреү мәктәбе

**2. САФИНА *Ленара*,**
Илеш районы,
Үрге Йәркәй дөйөм урта белем биреү мәктәбе

**3. ШӘРИПОВА Фидалиә,**
Дәүләкән районы,
3-сө башҡорт гимназия-интернаты

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Бәләбәй ҡалаһында сираттағы, хәҙер инде 13-сө тапҡыр "Илһам шишмәләре" шиғриәт фестивале үтте. Сарала баш ҡалабыҙ Өфөнән, республикабыҙҙың башҡа ҡала-райондарынан, Татарстандан, Сыуашстандан күренекле әҙиптәр, йәш шағирҙар ҡатнашты. Улар, өс төркөмгә бүленеп, Приют ҡасабаһында, Бәләбәй педагогия колледжында, Бәләбәй башҡорт гимназияһында уҡытыусылар, уҡыусылар менән осрашты. Йылы шарттарҙа үткән был осрашыуҙарҙа шағирҙар шиғыр уҡыны, уҡыусылар концерт номерҙары күрһәтте, китаптар, сувенирҙар бүләк ителде.

Төп тантана ҡала мәҙәниәт һарайында үтеп, унда республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина тәбрикләү һүҙе менән сығыш яһаны. Бәләбәй районы һәм ҡалаһы хакимиәте башлығы Юрий Мурмилов Ф. Кәрим исемендәге әҙәби премияны әҙибә, драматург Мөкәрәмә Садиҡоваға, әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе Әнғәм Хәбировҡа (Бөрө), Татарстандан билдәле ғалим, яҡташыбыҙ Рәмил Исламовҡа, шағир Аркадий Русаковҡа (Федоровка районы), прозаик, тәржемәсе Светлана Чураеваға тапшырҙы. Ә фестивалдең Гран-при лауреаты – йәш шағир Мөнир Иҡсанов (Учалы). Динис Бүләков исемендәге премияларға шағирҙар Мөнир Вафин менән Кристина Андрианова лайыҡ булды. Бынан тыш фестивалдең башҡа номинацияларында ла еңеүселәр билдәләнде.

* * *

22–23 мартта Краснокама районында Башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙғарылды.

Байрам Советтар Союзы Геройы Шәриф Сөләймәнов исемендәге Яңы Ҡайынлыҡ урта мәктәбендә һәм ауыл мәҙәниәт һарайында башланып, ауыл хакимиәте башлығы Илдус Зарипов етәкселегендә Шәриф Сөләймәновтың һәйкәленә сәскәләр һалыу тантанаһы булды. Артабан яҙыусылар Рәшит Низамов, Риф Әхмәҙиев, Дилә Булгакова, Фәрит Суфияров тамашасылар алдында сығыш яһаны.

Яңы Хажи урта мәктәбендә уҡыусыларҙың сығыштары шағир-яугирҙарға арналды. Бында шағир, талантлы инженер Мусаниф Йәһүҙиндың тыуыуына арнап әҙәби хәтер кисәһе уҙғарылды.

Яңы Бөртөк мәктәбендәге осрашыуҙа Өфөнән килгән әҙиптәр, уҡытыусылар, уҡыусылар сығыш яһаны. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Дамира Хөснөтдинова кабинетын зауыҡ менән биҙәгән, уҡыусыларҙың сығыштарын ентекләп әҙерләгән.

Ҡуян мәктәбендәге кисәлә мәктәп директоры Илфрида Хәйҙәрова үҙ коллективында шағир Мөхәмәтйәров Хәйҙең бер туған ҡустыһы Сабурҙың ҡыҙы Илмира Ильясованың эшләүе хаҡында әйтте. Әҙиптәр Илмира менән ихлас танышты. Ул – Ҡуян мәктәбендә директорҙың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Кисә барышында Илмира Ильясова яуҙа батырҙарса һәләк булған М. Хәйҙең фотоларын күрһәтте, уның тормошо хаҡында һөйләне.

Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Фәнүзә Дмитриева менән мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Лира Мостаева Ҡуян мәктәбенә районның яҙыусыларын, шағирҙарын саҡырғайны. Бында “Әҙәби оҫталыҡ дәресе” уҙғарылды. Урындағы авторҙар үҙҙәренең әҫәрҙәрен уҡыны, Өфө әҙиптәренән кәңәштәр алды. Яҙыусылар делегацияһын район хакимиәте башлығы Рәзиф Ғилмуллин ҡабул итте.

***

22–23 апрелдә Тәтешле районында Башҡорт әҙәбиәте көндәре үтте. Унда Өфөнән Ҡәҙим Аралбай, Рәшит Низамов,

Миңлеғәли Нәҙерғолов, Ринат Камал, Мөнир Ҡунафин, Яңауыл Яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе Фәрит Суфияров, Тәтешленән Фәнил Миңлеғәлиев ҡатнашты.

Быйыл Тәтешле районының Иҫке Соҡор ауылында тыуып үҫкән күренекле башҡорт шағиры Ғәли Соҡоройға 185 йыл, уның улы, шағир, танылған рухани Ғарифулла Кейековҡа 150 йыл тулды. Әҙәбиәт көндәре ошо иҫтәлекле ваҡиғаларға арналды.

17 йәшендә шиғырҙар яҙа башлаған Ғәли Соҡорой иҫән сағында дүрт шиғыр китабы баҫтырып сығара, вафатынан һуң йәнә алты китабы донъя күрә. Уның тағы ике ҡулъяҙма китабын Миңлеғәли Нәҙерғолов Санкт-Петербургта таба. Ул үҙенең яҙмаларында "Беҙ – Ирәкте башҡорттары" тип раҫлай һәм был төбәктәге башҡорттарҙың йәшәү рәүешен ентекләп һүрәтләй. "Ата-бабаларыбыҙ тарихынан" тигән мәҡәләһендә Ғәли Соҡорой үҙенең шәжәрә сыбығын ошолай яҙып раҫлай: "Иҫән хан улы Бураҡ, Бураҡ улы Кейек, Кейек улы Шәриф, Шәриф улы Ғабдулла, Ғабдулла улы Сәлих, Сәлих улы Ғәли, Ғәли Кейеков үҙе була".

Ғәли Соҡоройҙоң улы Ғарифулла Кейеков та атаһының изге юлынан китә. Ул шиғырҙар, тарихи мәҡәләләр яҙа. Ул "Ризалыҡ сығанағы, йәки Күрҙемдәге хәҙрәт шишмәһе", "Балалар өсөн шиғри йыйынтыҡ, йәки балалар өсөн рифмалар" тигән китаптарын баҫтырып сығара.

Әҙәбиәт көндәрендә яҙыусылар районның үҙәк китапханаһында район китапханалары мөдирҙәре менән осрашты. Район үҙәгендә балаларҙың бик матур сәнғәт һарайы эшләй. Балалар яҙыусыларға үҙҙәре эшләгән төрлө уйынсыҡтарҙы, кейемдәрҙе күрһәтте, техник ҡоролмалар менән таныштырҙы. Был матур һарайҙа яҙыусыларҙы районның тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары ҡаршыланы.

Иҫке Соҡор ауылындағы Ғәли Соҡорой музейында осрашыу иҫтәлекле булды. Музей директоры Земфира Арманшина әҙиптәрҙе музейҙағы экспонаттар менән таныштырҙы. Филология фәндәре докторы Миңлеғәли Нәҙерғолов музейға бик мөһим ике документ тапшырҙы. Был документтар Ғәли Соҡоройҙоң, уның нәҫелдәренең башҡортлоғон кире ҡаҡҡыһыҙ итеп йәнә раҫлай.

Аҡъегет, Күрҙем урта мәктәптәрендәге осрашыуҙар ҙа йәнле үтте.

Күрҙем урта мәктәбендәге осрашыуҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев Башҡорт әҙәбиәте көндәрен бай йөкмәткеле итеп ойоштороғандары өсөн, арҙаҡлы заттар Ғәли Соҡорой менән Ғарифулла Кейековтың ижади мираҫын, иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлағандары өсөн район хакимиәте башлығы урынбаҫары Дамир Әхмәтовҡа оло рәхмәт белдерҙе.

***

2006 йылда БР Фәндәр академияһына "Башҡорт халҡының тарихы" тигән ете томлыҡ китап сығарыу бурысы йөкмәтелгәйне. Коллектив монографияның тәүге томы 2009 йылда донъя күрҙе. Апрель айында республика тарихсылары V томды туйланы. Авторҙар коллективын БР Президенты Хакимиәтенең Эске сәйәсәт идаралығы начальнигы Урал Хәсәнов, БР мәғариф министры Әлфис Ғаязов, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге рәйесе вазифаһын башҡарыусы Роберт Ниғмәтуллин һәм башҡалар тәбрикләне.

– Китаптың сираттағы томының йөкмәткеһе бик ҡатмарлы осорға тура килә. Тап ошо йылдарҙа Рус-япон һуғышы, I Бөтә Донъя һуғышы, Граждандар һуғышы була. Ауыр тормош шарттары, бола-күтәрелештәр, 20-се йылдарҙағы аслыҡ михнәте демографик күрһәткестәргә тәрән йоғонто яһай. 1917–1926 йылдарҙа башҡорт халҡының һаны ике тапҡырға кәмей. Әлбиттә, еңеү-ҡаҙаныштар ҙа бар. Айырыуса мәҙәниәт өлкәһендә, фән, мәғариф буйынса алға китеш ныҡ һиҙелә: яңы вуздар асыла, театрҙар эше көйләнә, халыҡ рухи-мәҙәни күтәрелеш кисерә,– тине, китапҡа ҡыҫҡа анализ биреп, монографияның ғилми етәксеһе һәм баш мөхәррире, тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов.

***

Күренекле әҙип, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Барый Ноғомановҡа 75 йәш тулыу айҡанлы Милли әҙәбиәт музейы хеҙмәткәрҙәре юбиляр менән осрашыу ойошторҙо. Сараға Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, уның урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, шағирҙар Хәсән Назар, Риф Мифтахов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Александр Филиппов, "Тамаша" журналының баш

мөхәррире Фәнил Ҡоҙаҡаев килде. Осрашыуҙа Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты уҡыусылары һәм уҡытыусылары ла ҡатнашты.

Саҡырылған ҡунаҡтар юбилярҙың ижады, тормошо тураһында һөйләне, байрамы менән ҡотланы, уға бағышланған шиғырҙарын уҡыны. Әҙип үҙ сығышында ҡәләмдәштәренә рәхмәт белдерҙе, музейға китаптарын бүләк итте.

***

З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең Октябрь проспектында урынлашҡан "Башҡорт китабы" фирма магазинында һәр айҙың һуңғы йомаһында "Автографтар көнө" уҙғарыу һәйбәт традицияға әйләнде.

Бында яңы баҫылып сыҡҡан китаптарҙың авторҙары китап һөйөүселәр менән осраша, автографтар өләшә. Апрель айындағы осрашыуҙа нәшриәттең баш мөхәррире Зөлфиә Ҡарабаева яңы китаптар һәм сараға саҡырылған авторҙар: шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Рәдиф Тимершин, Мөнир Вафин, драматург Наил Ғәйетбай менән таныштырҙы. Әҙиптәр үҙҙәренең китаптарына ингән әҫәрҙәрен уҡыны, автографтар таратты.

***

Бынан ун йыл элек шағирә Гөлнур Яҡупова тыуған Ғафури районында "Өмөтлө ҡәләм" исемле йәш шағирҙар бәйгеһе иғлан итеп, үҙенең премияһын булдырғайны. Заманында был башланғысты район мәғариф бүлеге, "Табын" гәзите редакцияһы күтәреп алғайны, һәм ул йыл да үткәрелеп килә. Быйылғы йомғаҡ яһауҙа район гәзитендә йыл әйләнәһенә баҫылып килгән балалар ижады йәмғеһе 23 номинация буйынса баһаланып, уларҙы ҡотлауҙа, һәр йылдағыса, республика гәзит-журналдары вәкилдәре лә ҡатнашты. Ҡағиҙә булараҡ, йомғаҡ яһау йыл һайын райондың бер мәктәбендә үткәрелә. Быйыл ул Красноусол башҡорт гимназияһында булды. Киләһе йылдан бәйгегә райондың "Звезда" гәзите лә йәлеп ителеп, унда рус телендә яҙыусы авторҙар ҙа ҡатнашасаҡ.

* * *

Яҙыусы Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл тулды. Ул Нуриман районының Бикмырҙа ауылында тыуған. Район үҙәге мәҙәниәт һарайында әҙиптең ижадына, тормош юлына арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе уҙғарылды.

Уны Нуриман районы хакимиәте вәкиле Марат Николаев инеш һүҙ менән асты. Ҡасандыр әҙип менән Бөрйән районында уҡытыусы булып эшләгән Клара Ноғоманова үҙенең иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов "Һәнәк" журналында Ярулла Вәлиев менән бергә эшләгән.

– Ярулла ағай журналыбыҙға күп фельетондар яҙҙы, сатирик һәм көлкөлө хикәйәләрен баҫтырҙы. Һуңынан был хикәйәләре айырым китап булып донъя күрҙе, – тине Марат Кәримов.

Башҡортостан Яҙыусылар союзының өлкән әҙәби консультанты Рәшит Низамов Я. Вәлиевтың ижады йәш быуынды тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне, әҙиптең "Бөркөттәр оя ташламай" романының яҙылыу тарихына туҡталды. Кисәлә яҙыусының улы Марат, бер туған һеңлеһе Мәҙинә апай үҙҙәренең иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, шағирә Хәлисә Мөҙәрисова әҙиптең ижадын нуримандарҙың ихлас хөрмәт итеүен билдәләне.

**Ҡотлайбыҙ!**

Башҡортостан Яҙыусылар союзының XV съезында яңыртылған идараһының тәүге ултырышында иң өлкән ҡәләмдәшебеҙ Кәтибә Кәрим ҡыҙы Кинйәбулатоваға балалар әҙәбиәте буйынса Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы дипломы тапшырылды. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған пьесалар конкурсында еңеп сыҡҡан драматургтар Наил Ғәйетбай ("Һуғыштың ике йөҙө") менән Салауат Әбүзәр ("Әсир") дипломдар менән бүләкләнде. Дипломдарҙы мәҙәниәт министры урынбаҫары Камила Дәүләтова тапшырҙы.

## *Ҡәҙерле дуҫтар – журнал уҡыусылар!*

*«Ағиҙел» журналы төрлө сәйәси-социаль шарттарҙа ла, тарихи боролоштарҙа ла үҙ йөҙөн, үҙ йүнәлешен һаҡланы, һаҡлаясаҡ. Халҡыбыҙ рухиәтен, мәҙәниәтен үҫтереүгә, Башҡортостанда, Рәсәйҙә йәшәүсе башҡа милләттәр менән дуҫлыҡ ептәрен нығытыуға журнал тос өлөш индерҙе һәм әле лә ошо миссияны уңышлы үтәй килә.*

*Олпат баҫмабыҙ – әҙиптәребеҙ өсөн иң мәртәбәле трибуна. Ул – әҙәби мираҫты барлаусы, күренекле яҙыусыларыбыҙҙың ижадын халыҡҡа еткереүсе, әҙәбиәт майҙанына йәш алмаш әҙерләүсе. Шул уҡ ваҡытта журнал – үҙенең уҡыусыларын Бөтә Донъя, Рәсәй әҙәбиәтенең аҫыл үрнәктәре менән таныштыра барыусы ла.*

*Яҙ етеү менән йылдың икенсе яртыһына яҙылыу башлана. Әлбиттә, кампания еңел генә бармай, быны ң үҙ объектив һәм субъектив сәбәптәре бар. Ләкин әҙәбиәтебеҙ менән ҡыҙыҡһынған, уны уҡып барған һәм ошонан оло кинәнес, илһам, рухи аҙыҡ ала белгән, һәр хәлдә, юғары мәҙәниәткә ынтылған кешегә баҫмаға яҙылыу хаҡы ла, башҡа сәбәптәр ҙә ҡамасау түгел. Ғөмүмән, журналдың төп тиражы шундай энтузиастар – илһөйәрҙәр, телһөйәр фанаттар арҙамында йыйыла, һәм беҙ йыл да уларҙың ярҙамына таянабыҙ, теләктәшлегенә нығ ышанабыҙ. Ә яңы дуҫтарыбыҙ – бигерәк тә йәш быуындан подписчиктар табылһа, айырыуса ҡыуанабыҙ.*

*2011 йылдың икенсе яртыһында ниндәй әҫәрҙәр менән таныштыраcаҡбыҙ һуң һеҙҙе? Ҡулъяҙмалар күп, улар төрлө жанрҙа: яңы романдар, повестар, хикәйәләр, аҫыл шиғриәт, фәһемле публицистика уҡырһығыҙ, һәйбәт тәржемәләр, хәтирәләр, очерктар һәм әңгәмәләр, яҙмышнамәләр баҫмаға әҙерләнә. Фольклор, сатира-юмор, сәнғәт материалдары бар. Ҡыҫҡаһы, мауыҡтырғыс материалдар менән осрашыуҙар көтә һеҙҙе, ҡәҙерле дуҫтар! Көрсөктәргә баш эймәй, илдең ҡото, өйҙөң йәме, күңелебеҙ илһамы – «Ағиҙел» менән бергә-бергә йәшәйек, тип өндәшәһебеҙ килә барыбыҙға ла.*

***Журнал редакцияһы.***